# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ӘКИӘТТӘРЕ





# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ӘКИӘТТӘРЕ



БАШҠОРТОСТАН КИТАП НӘШРИӘТЕ
ӨФӨ — 1984

82.3 — Баш
Б 29

Төҙөүсеһе *Маһиҙә Игебаева*
Рәссамы *Алишер Дианов*

Б 29 Башҡорт халыҡ әкиәттәре. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1984 й. — 224 бит.

Был йыйынтыҡҡа хайуандар тураһындағы һәм тылсымлы әкиәттәр тупланды.

Б $\frac{4803010102—23}{М121(03)—84}$ 154—84 82. 3 — Баш

© Башҡортостан китап нәшриәте, 1984 й.

## ТӨЛКӨ МЕНӘН БҮҘӘНӘ

Өлгөргән арыш араһында, ары-бире пырылдап, бер бүҙәнә осоп йөрөй ине, ти. Шунда яҡында ғына күләгәлә әлһерәп бөткән бер ас төлкө ята ине, ти. Бүҙәнә килде лә шул төлкөнөң ҡолағы осона ҡунды, ти. Төлкө, башын һелкеп, бүҙәнәне ҡолағынан төшөрҙө лә:

— Бер ҡабымға етмәҫ башың менән бимазалап йөрөгән булаһың! — тип асыуланды, ти.

— Хикмәт ҙурлыҡтамы ни ул? Бына мин бәләкәй генәмен, ә шулай ҙа һине туйғансы ашата алам. Эште хәйлә менән эшләй белеүҙә ул! — тип әйтте, ти, Бүҙәнә.

— Кит бынан, күҙ көйөгө! Ни эшләп инде бүҙәнә төлкө саҡлы төлкөнө туйҙырғансы ашата алһын? — тип көлдө, ти, Төлкө.

— Ышанмаһаң, бына күр, хәҙер мин һине туйҙырам, — ти Бүҙәнә. — Хәҙер мин юл өҫтөнә сығам, һин юл ситендә, арыш араһында, ҡасып ҡына ят та минән күҙҙәреңде алмай күҙәтеп тор. Мин пырылдап осоп киткәндә генә, һин, юлдағы аҙыҡты алып, бына шул урынға килерһең дә тәмләп тороп ашарһың, — тип әйтте, ти.

Төлкө юл ситенә йәшеренеп ятты, бүҙәнә ары-бире сәбәләнеп йөрөй башланы, ти. Шул ваҡыт иңбаштарына ураҡ һалған бер ир менән бер ҡатын килә ята икән. Ҡатыны ҡулына бер төйөнсөк тә тотоп алған. Ҡатын юлда йөрөп ятҡан бүҙәнәне күреп ҡала ла:

— Эй, атаһы, ҡара әле бынау бүҙәнәне: шундай һимеҙ, хатта оса ла алмай! Тотоп алайыҡсы үҙен, бешереп ашарбыҙ. Бүҙәнә ите бик тәмле була, тиҙәр, — тип ҡысҡыра, ти.

Шунан былар икәүләп бүҙәнәне тотмаҡ булалар. Ҡатын төйөнсөгөн юл ситенә ҡуя ла бүҙәнәне баҫтыра башлай. Бүҙәнә осмай ҙа, ҡасмай ҙа, тоттормай ҙа. Шулай ҡыуып йөрөй торғас, инде тотайым тигәндә генә, бүҙәнә пырылдап осоп китә. Ир менән ҡатын ауыҙҙарын асып тороп ҡалалар. Төлкө лә, бүҙәнәнең осҡанын күреп, юл ситендәге төйөнсөктө ауыҙына ҡабып ала ла баяғы урынға китә. Төйөнсөктө асып ҡараһа, эсендә тауыҡ ите икән. Төлкө рәхәтләнеп ашай. Бүҙәнә ҡарап тора. Ә теге ирлеҡатынлы ураҡсылар буш ҡул менән үҙ эштәренә китәләр.

Төлкө, ашап туйғас:

— Хикмәт ысынлап та ҙурлыҡта түгел икән шул, һинең кеүек хәйләкәр булыуҙа икән, — ти. Шунан ул: — Ярар, Бүҙәнә дуҫ, һин минең тамаҡты туйҙырҙың, быныһы өсөн рәхмәт. Хәҙер һин мине бер рәхәтләндереп көлдөр ҙә инде, — тигән.

Бүҙәнә быны тыңлап:

— Һине көлдөрөп ултырырға хәҙер минең ваҡытым юҡ шул. Кис менән көлдөрөрмөн, хәҙергә һин ошонда ятып йоҡла. Кискә табан мин һинең янына килермен, — тип, үҙ эше менән китте, ти.

Кискә табан төлкө уяныуға бүҙәнә килде лә:

— Әйҙә, Төлкө дуҫ, ауыҙың ҡолағыңа тиклем йырылғансы рәхәтләнеп көлдөрөп алып ҡайтайым үҙеңде, эйәр минең арттан! — тигән.

Бүҙәнә аулаҡ ерҙән генә үтеп, әкрен генә осоп барҙы, төлкө ҡасып-боҫоп ҡына атлап, уның артынан эйәрҙе, ти. Бына улар ырҙын артынан ғына үтеп, бер ауылға, баяғы ураҡсыларҙың йортона, килеп инделәр, ти. Йорт хужаһы ҡаҙыҡ ослай, бисәһе һыйыр һауа ине, ти. Төлкө ҡасып ҡына күҙәтә башланы, бүҙәнә ҡатындың һыйыр һауған ерендә аяҡ аҫтында уралып йөрөнө, ти. Ҡатын, бүҙәнәне танып ҡалып:

— Эй, атаһы, ҡара әле, беҙҙе ашамлыҡһыҙ ҡалдырған баяғы бүҙәнә йортобоҙға килгән, һуғып үлтерәйек үҙен! — тип ҡысҡырҙы, ти.

Ире ҡаҙығы менән киҙәнгәйне, бүҙәнә һыйыр мөгөҙөнә килеп ҡунды, ти; яңынан киҙәнеп, һыйырҙың мөгөҙөн саҡ ҡына һындырмай ҡалды, ти. Һыйыр ҡурҡып, һөтлө күнәкте тибеп ауҙарҙы, ҡатын һөт түгелгән ергә тайып йығылды, ти. Бүҙәнәне тота алмаҕас, теге ир асыуланып ҡатынын туҡмап ташланы, ти.

Төлкө ауыҙы ҡолағына тиклем йырылғансы, быуыны ҡатып көлдө, ти. Үҙе көлдө, үҙе бүҙәнәнең хәйләһен отоп ултырҙы, ти.

Бына шунан һуң, бүҙәнәнән өйрәнеп, төлкө хәйләкәр йәнлек булып киткән дә инде, тиҙәр.

## ЕТЕМ ТӨЛКӨ

Бер заман, яҙ көнө, айыу, бүре, эт, ҡуян бергә осрашҡандар. Ҡыш көнө һалҡында аҙыҡ табыуы ҡыйын булды, тип зарланышҡандар, ти, былар. Шунан Айыу:

— Бергә торайыҡ, еңелерәк булыр, — тигән.

Бөтәһе лә шуға риза булып, урман эсендәге бер аҡланға бәләкәй генә өй һалғандар ҙа бергә тора башлағандар.

Шулай тороп ятҡанда, берҙән-бер көндө Айыу:

— Ҡышҡа әҙерләнергә ваҡыт, дуҫтар, — тигән. — Беҙгә һыйыр һатып алырға кәрәк. Эт уны көтөп ашатыр. Һөтөн һауып, ҡаймағын бешһәк, ҡышҡылыҡҡа берәр батман майыбыҙ булыр.

Бүре, эт, ҡуян айыуҙың был кәңәшен хуп күргәндәр. Шул көндө үк баҙарға барып, үҙҙәре тотоп ашаған йәнлектәрҙең тиреләрен һатҡандар ҙа шунан килгән аҡсаға һыйыр һатып алғандар.

Эт көн һайын һыйырҙы аҡланға сығарып көткән. Бүре кис менән һөтөн һауып ала торған булған. Ҡуян һыйырға яҡшыраҡ үләнле ерҙе күрһәтеп йөрөгән, айыу бөтә хужалыҡ эштәрен башҡарған.

Йәй шулай эш менән үткән. Көҙгә инде былар бер батман һары майлы булғандар.

— Был майҙы өй башына, ҡыйыҡ аҫтына, ҡуйырға кәрәк, — тигән Айыу. — Хәҙергә майға бераү ҙә теймәһен. Ҡыш еткәс, аҙлап-аҙлап ҡына алырбыҙ ҙа майға картуф ҡурырбыҙ.

Шунан былар дүртәүләп һары май тултырылған батманды өй башына күтәреп мендергәндәр ҙә ҡыйыҡ аҫтына йәшереп ҡуйғандар.

Бер көндө кис менән былар сәй эсеп ултыралар икән, кемдер бераү тәҙрә сирткән. Ҡуянға тороп ишек асырға ҡушҡандар.

Өйгә ҡулына ҡомған тотҡан Төлкө килеп ингән дә эйелеп-бөгөлөп:

— Һаумыһығыҙ, ҡәҙерле дуҫтарым! Хәйерле кис! — тигән.

Хужалар төлкөнө сәй янына саҡырғандар. Теге ултырған. Бер-ике туҫтаҡ сәйҙе эсеп алғас, Төлкө ашыҡмай, бик әҙәпле ҡыланып ҡына һүҙгә башлаған.

— Мин яҡты донъяла япа-яңғыҙ ҡалған үкһеҙ етеммен. Мине лә үҙегеҙҙең араға алһағыҙсы! — тигән.

— Ярар, һине үҙебеҙҙең араға алыу-алмау тураһында бөгөн һөйләшербеҙ, — тигән Айыу. — Иртәгә яуабын алырға килерһең.

Айыу, Бүре, Эт, Ҡуян:

— Был Төлкө әҙәпле генә, баҫалҡы ғына күренә. Үҙебеҙҙең янға алайыҡ әйҙә, — тигән уйға килгәндәр.

Шулай итеп, төлкө улар менән бергә йәшәй башлаған. Ул үҙен бик әҙәпле тотҡан, бөтәһененең дә һүҙен тыңлар, ни ҡушһалар, шуны эшләр булған. Айыуға, бүрегә, эткә генә түгел, хатта ҡуянға ла ярарға тырышҡан.

Күп тә үтмәй, төлкө ҡыйыҡ аҫтына бер батман май йәшерелгәнде белеп алған. Төлкө, май тиһәң, үлеп бара

бит инде. Ул майҙы үҙе генә ашар өсөн хәйлә эҙләй башлаған.

Күп баш вата торғас, ул хәйләһен дә тапҡан. (Шуның өсөн дә хәйләкәр төлкө тиҙәр уны!)

Кистәрҙән бер кисте төлкө һылтау итеп, ҡапҡа ныҡ бикләнгәнме икән тип, тикшереп килергә булған. Шул ерҙә ул урамға сығып тәҙрә сирткән дә ят тауыш менән:

— Етем төлкө өйҙәме? — тип һораған.

— Өйҙә, өйҙә, хәҙер тыштан инер, — тип яуап биргәндәр уға.

— Ингәс тә әйтегеҙ уға, хәҙер үк беҙгә яңы тыуған бурһыҡ балаһына исем ҡушырға барһын!

— Ярар, әйтербеҙ, — тип яуап ҡайтарғандар өйҙән.

Төлкө белмәмешкә һалышып өйгә ингән.

— Төлкөкәй, яңы ғына берәү килеп һине Бурһыҡ балаһына исем ҡушырға саҡырҙы, — тигән Айыу.

— Улай булғас, барырға кәрәк, — тигән Төлкө.

Йылдам ғына йыйынған да ул өйҙән сыҡҡан. Өйҙө бер түңәрәтеп әйләнгәндән һуң, һаҡлыҡ менән генә өй башына һикереп менгән дә батман тулы майҙы ашай башлаған. Туйғансы ашаған ул. Төлкө шунда ятып бер аҙ ял иткән дә өйгә кире ингән.

— Йә, нимә менән һыйланылар үҙеңде? — тип һорағандар унан.

— Ҡурылған ҡаҙ, тултырылған тауыҡ, һары май менән, — тип яуап ҡайтарған да Төлкө ирендәрен ялап ҡуйған.

— Ниндәй исем ҡуштың? — тип һораған Эт.

— Башбала, — тип яуап ҡайтарған Төлкө.

Икенсе көндө Төлкө:

— Миңә тағы ла исем ҡушырға барырға кәрәк, — тигән, ә үҙе тышҡа сығып, өй башына менгән дә майҙы батмандың яртыһына төшкәнсе ашаған.

Ул өйгә кире ингәс, Ҡуян унан:

— Яңы тыуған балаға ниндәй исем ҡуштың? — тип һораған.

— Уртансы, — тип яуап биргән Төлкө.

Өсөнсө көндө лә төлкө, хәйләһен табып, өй башына менгән. Был юлы инде майҙы бөтөргәнсе ашаған. Батманды таҙартҡансы ялаған да өйгә ингән.

— Йә, ниндәй исем ҡуштың? — тип һораған унан Ҡуян.

— Кинйә, — тип яуап ҡайтарған Төлкө.

Ҡыш килеп еткән. Көндәрҙән бер көндө Айыу, иптәштәренә ҡарап:

— Йә, дусҡайҙарым! Бер аҙ май алып инеп, картуф ҡурырға кәрәк, — тигән.

Иптәштәре быға шатланып:

— Ҡана, ҡурайыҡ, — тигәндәр.

— Бар, Төлкө, һин бер аҙ май алып ин, — тигән Айыу.

Бөтәһе лә тышҡа сыҡҡандар. Төлкө стена буйлап өй башына менә башлаған да кире ҡолап төшкән. Менә алмауына һылтау табырға тырышып:

— Бик бейек икән шул, мин унда менә алмайым, — тип зарланған. Эт төлкөгә ярҙам итергә булған. Елкәһенә баҫтырған да өй башына мендергән. Шул ерҙә түбәндә ҡалыусылар Төлкөнөң сыйылдап ҡысҡырыуын ишеткәндәр:

— Бында бер төрлө лә май юҡ! Буш батман ғына бар.

Ҡапыл ғына уға берәүһе лә ышанмаған. Шул ваҡыт Төлкө буш батманды түбәнгә тәгәрәтеп төшөргән. Ҡараһалар, батман ысынлап та буп-буш булып сыҡҡан.

— Был майҙы ниндәй оятһыҙы ашаған икән? — тип үкергән Айыу.

— Хәҙер үк табырға кәрәк ҡараҡты!

Ҡараҡты нисек табырға тип, оҙаҡ ҡына уйлашҡандар улар. Күп уйлай торғас, Айыу былай тигән:

— Ҡана, ҙур итеп ут яғайыҡ та үҙебеҙ шуны тирәләп ултырайыҡ. Майҙы кем ашаған булһа, ут ҡыҙыуынан уның эсендәге майы иреп тышҡа сығыр.

Шулай итеп, ут яғып ебәргәндәр былар.

Ут янында ултыра торғас, улар йылыныуҙан ойоп

йоҡоға киткәндәр. Ҡыштың тәүге һалҡын көндәре булғанлыҡтан, айыу бөтәһенән дә ҡатыраҡ йоҡлаған.

Төлкө генә керпек тә ҡаҡмаған. Шул ерҙә ул үҙенең бөтә тәне буйлап май һарҡып сыға башлауын күргән. Һиҙеп ҡалһалар, миңә яҡшылыҡ булмаç, тип ҡурҡҡан. Эсенән сыҡҡан майҙы ҡомғанына йыйып барған, шунан уны айыу өçтөнә илтеп ҡуйған.

Йоҡоларынан уянып ҡараһалар, барыһы ла ҡопҡоро, ә айыуҙың бөтә тәне майға мансылған, ти.

— Майҙы бына кем ашаған икән! — тип ҡысҡырып ебәргән Төлкө. Шунан айыуҙы муйынынан аçып ҡыйырға булғандар.

— Ашыҡмағыҙ! Бында ниндәй ҙә булһа бер хәйлә бар! — тип ҡысҡырған Айыу. — Утты тағы ла ҡыҙыуыраҡ яғырға ла ҡайтанан һынап ҡарарға кәрәк.

Бөтәһе лә быға риза булған, тик Төлкө генә: «Ут яғырға кәрәкмәй, былай ҙа Айыу ағайға бик эçе бит!» — тигән булып ҡаршы төшкән.

Төлкөнөң һүҙен тыңламайынса, тағы ла ут яҡҡандар ҙа, бөтәһе лә түңәрәтеп ултырған. Айыу, үҙенең ҡышҡы ғәҙәте буйынса, тағы ла хырылдап йоҡоға киткән. Ә бүре, эт, ҡуян юрамал йоҡлағанға һалышҡандар. Төлкөнөң тағы ла майы һарҡып сыға башлаған.

Төлкө, башҡа йәнлектәрҙең йоҡлағанын күргәс тә, тағы ла үҙенән сыҡҡан майҙы ҡомғанына тултырып алып, айыу өçтөнә ҡуймаһынмы! Бүре, Ҡуян, Эт быны күреп кенә ҡалғандар ҙа Төлкөгә ташланғандар:

— Бына ҡайҙа икән ул ҡараҡ! Етмәһә, йыуаш ҡына бер етем булып ҡыланды!..

Был шау-шыуға айыу ҙа уянған. Уға булған хәлде түкмәй-сәсмәй һөйләп биргәндәр.

— Мин майҙың тамсыһын да ашағаным юҡ! — тип аҡланырға тотонған Төлкө.

Шул ерҙә бөтәһе лә төлкөнөң яғаһынан алып бәйләгәндәр ҙә, утты тағы ла ҡыҙыуыраҡ яғып, уны ут өçтөндә тотҡандар. Ә май ут өçтөнә аға ғына биргән.

Шунан һуң улар төлкөнө үлтерә яҙғансы туҡмағандар ҙа былай тигәндәр:

— Хәҙер үк үксәңде ялтырат бынан! Эҙең дә булмаһын! Беҙҙең арала һиңә урын юҡ!

Төлкө ҡомғанын алған да башы һуҡҡан яҡҡа олаҡҡан, ти.

## ТӨЛКӨ АЙЫУ ӨҢӨНДӘ

Бер саҡ төлкө айыуҙы алдарға уйлай. Ауылға барып, бер ғәмһеҙ хужаның бер мискә әсегән балын урлай ҙа айыуға бүләк итеп алып бара. Айыу балды яратып эсә, ныҡ ҡына иҫереп тә ала. Төлкөнө маҡтай башлай. Аҙаҡ төлкөнө урманда күтәреп йөрөтә.

— Эй, кемдәр бар был урманда, килегеҙ әле бында! — тип үкерә башлай Айыу.

Урмандағы бөтә кейектәр, йыртҡыстар сабышып килеп етәләр. Айыу уларға:

— Бына ҡарағыҙ, был Төлкө — минең иң яҡын дуҫым. Донъяла бынан да яҡын дуҫым юҡ минең. Хатта уның миңә бер аҙ туғанлығы ла бар. Ҡарағыҙ, минең Төлкө туғаныма берегеҙ ҙә теймәгеҙ! Тейер булһағыҙ, берегеҙҙе лә ҡалдырмай туҡмап үлтерермен! Урманда үҙе теләгәнсә йөрөһөн. Хәтерен ҡалдырмағыҙ, хәлегеҙҙән килгән тиклем уға ярҙам итегеҙ. Ул ни әйтә, тыңлағыҙ, ҡаршылашмағыҙ! — ти.

Бөтә йыртҡыс-кейектәр айыу әйткәнде үтәргә һүҙ бирҙеләр, ти.

Айыу төлкөнө күтәреп үҙ өйөнә алып ҡайта.

— Тартынма, үҙ өйөңдәге кеүек бул, — ти уға. Улар икеһе бергә йоҡларға яталар.

Айыу иртә менән торғас, үҙенең эргәһендә бер төлкөнөң йоҡлап ятҡанын күреп ғәжәпләнә.

— Был ни эш? Был кем? Был ни эшләп минең

өйөмдә йоҡлап ята. Эй, тор! Кем һин? Ниңә минең өйөмә килдең? Ни йөрәгең менән бында килергә батырсылыҡ иттең, оятһыҙ? — тип, асыу менән үкерә башлай.

Төлкө уяна ла:

— Кем уята икән тиһәм, үҙемдең Айыу ағайым икән. Хәйерле иртә, Айыу ағайым! — тип, йомшаҡ ҡына тауыш менән өндәшә.

— Хәйерле иртә, имеш. Бирермен мин һиңә хәйерле иртәне! Ниңә һин минең өйөмә рөхсәтһеҙ индең, ә? — тип, Айыу тағы ла нығыраҡ үкерә.

— Кисә бергә бал эстек бит, Айыу ағай, әллә хәтерләмәйһеңме? — ти Төлкө.

— Юҡ, бер нәмә лә хәтерләмәйем, белмәйем, минең баш ауырта, бар сығып кит! Бынан һуң күҙемә лә күренмә! — тип, төлкөнө ҡыуып сығара.

Төлкө, был хәлгә бик ғәрләнеп, айыуҙан ҡалай итеп булһа ла үс алырға хәйлә эҙләй башлай.

Бына ул яланда һунарсыларҙы күреп ала. Улар урман яғына табан килә яталар икән. Төлкө һунарсыларға күренә лә, аҡһаған булып, ҡаса башлай. Тегеләр уны ҡыуырға тотоналар. Һунарсыларҙы ул айыуҙың өйө эргәһенә килтереп еткерә лә үҙе, ҡуйы ҡыуаҡ араһына инеп, юҡ була. Һунарсылар айыуҙы үлтереп алып ҡайтып китәләр. Шундай ҙур табыш булғас, төлкө иҫтәренә лә инеп сыҡмай тегеләрҙең.

Һунарсылар айыуҙы алып китеү менән, Төлкө уның өйөнә килеп тә инә.

Төлкө айыу өйөндә рәхәтләнеп йәшәй бирә. Айыу күренмәй башлағас, төрлө йыртҡыстар уның хәлен белергә киләләр. Бер саҡ быға Бурһыҡ килә. Өй эргәһенә килеп еткәс тә:

— Инергә яраймы, Айыу ағай? — тип һорай.

Өйҙән Төлкө йәһәт кенә килеп сыға ла:

— Бик тауышланма, туғанҡай, Айыу ағайым ауырып ята, — ти.

— Мөмкин булһа, өйгә инеп, уның хәлен белеп сығайым әле мин, — ти Бурһыҡ.

— Ярамай, ул йоҡлай әле. Ул, ҡош ите ашағым килә, тигәйне, һин уға, туған, ҡош ите килтер, — ти Төлкө.

Хәл белергә килгән һәр бер йыртҡысҡа ул шулай яуап бирә, айыуға тип ҡош ите һорай. Йыртҡыстар төрлө ҡош иттәре килтереп, төлкөгә ҡалдырып китә торалар. Төлкө йылы өйҙә ҡош ите ашап, рәхәтләнеп тик ята.

Бер ваҡыт кис менән Айыу өйөнә Бүре килә.

— Айыу дуҫ, мөмкинме инергә? — тип ҡысҡыра был. Төлкө өйҙән йүгереп килеп сыға ла:

— Бүре ағайым икән, һаумы, Бүре ағай, иҫән генә йөрөйһөңмө? — тип ялағайлана башлай.

— Айыу дуҫты ауырыу тип ишеттем, дөрөҫмө шул?

— Дөрөҫ, дөрөҫ, Бүре ағайым, хәле бик насар.

— Мин инеп сығайым әле уның янына.

— Уны борсомағыҙ инде, Бүре ағай. Хәле бик насар бит. Берәүҙе лә индерергә ҡушманы, — тигән була Төлкө.

— Ярай, лығырлама, бар кит! Үҙем инеп, хәлен белеп сығайым! — ти Бүре, екереп. Төлкө асыуланған булып:

— Туҡта, Бүре ағай, ниңә һин улай минең менән бик ҡысҡырып һөйләшәһең. Мин кем, беләһеңме? Айыу ағайымдың һүҙҙәрен оноттоңмо ни? — ти.

Бүре, Айыуҙың Төлкө тураһында әйткән һүҙҙәрен хәтерләп, Төлкөнән ғәфү үтенә:

— Кисер инде мине, Төлкө туған, уйламайыраҡ әйтеп ташланым шул. Минең холҡомдо беләһең бит инде. Зинһар, был турала Айыу дуҫҡа әйтә күрмә инде. Сирле сағында уны борсома. Һау бул, Төлкө туған. Айыу дуҫҡа минән сәләм әйт. Һауыҡһын инде, бик оҙаҡ ятты бит, — тип, Бүре китә генә башлағайны, Төлкө уны:

— Бүре ағай, Айыу ағайым ҡош ите ашарға теләй бит әле. Шуны берәй ерҙән табып килтерә алмаҫһыңмы? — тип туҡтата.

— Ярай, ярай, Айыу дуҫ өсөн тырышырмын, — ти ҙә Бүре үҙ юлына китә.

Бүре иртә менән үк бик һимеҙ бер ҡош килтерә. Бүрене өй алдында ҡаршы алып, Төлкө:

— Бына рәхмәт! Айыу ағайым шатланыр инде. Быныӊ өсөн ул һине ғүмер буйы онотмаç. Бир бында, үҙем һәйбәтләп кенә ашатырмын, — ти.

— Бүләгемде үҙем тапшырайым инде, Төлкө туған. Бүләк менән ингән өсөн асыуланмаç әле, — тип, Бүре өйгә инергә ҡуҙғалғанда, Төлкө уға ҡаршы килеп баçа.

— Бүре ағайым, зинһар, уны борсомағыҙ. Хәле бик ауыр, яӊы ғына йоҡлап китте. Тыныс ҡына йоҡлаһын инде. Бир, миӊә генә ҡалдыр бүләгеӊде, — тип ялына.

— Мин уны уятмам, йоҡлаған сағында булһа ла күреп сығайым, күптән күргәнем юҡ, һағындым, — тип, бүре айыуҙыӊ өйөнә инеп китә. Төлкө урманға ҡаса.

Аҙаҡ бүре был төлкөнө эҙләп ҡараһа ла, таба алмай. Бүре ана шул хәйләкәр төлкөнө әле булһа эҙләп йөрөй икән.

## АЛДАР ТӨЛКӨ

Бер төлкө юл буйлап китеп барғанда, бер һарыҡ тояғы табып алған. Бер утар һымаҡ ергә барып еткәс, Әтәсғолдан йоҡларға фатир һораған, ти. Әтәсғол уға:

— Өйөм бик бәләкәй, һин һыйырлыҡ урын юҡ, — тигән, ти.

— Мин үҙем дә бәләкәймен. Үҙем һикелә бөгәрләнеп кенә ятырмын, ҡойроғомдо һике аçтына тығырмын, — тигән Төлкө.

Әтәсғол риза булған. Йоҡларға ятыр алдынан Төлкө хужаға:

— Ошо һарыҡ тояғын берәй ергә ҡуйып тор әле! — тигән.

Әтәсгол тояҡты һандыҡ артына һалып ҡуйған, ти. Төлкө уның ҡайҙа ҡуйғанын ҡарап ҡына торған да, хужа йоҡлағас, тороп, тояҡты тышҡа сығарып йәшергән. Иртән торғас, Төлкө Әтәсголдан тояҡты таптыра башлаған. Эй эҙләгән хужа тояҡты, эй эҙләгән, таба алмаған. Төлкө уға:

— Ярар, тояҡ булмаһа, уның урынына бер тауыҡ бирерһең! — тигән.

Әтәсгол: «Йә башыма берәй бәләһе булыр», — тип ҡурҡҡан да Төлкөгә тауыҡ биреп ҡотолған. Төлкө тауыҡты, юл ыңғайында тояҡты ла алып сығып киткән.

Икенсе ауылға барып еткәс, ул Ҡаҙғәленән фатир һораған. Ҡаҙғәле ҡаршы килмәгән. Йоҡларға ятыр алдынан Төлкө уға:

— Зинһар, ошо тауыҡты йыйып ҡуйсәле! — тигән.

Хужа уны ҡаралды артына йыйып ҡуйған. Төлкө был юлы ла хужаның ҡайҙа ҡуйғанын ҡарап ятҡан. Төндә тороп, тауыҡты икенсе урынға йәшергән. Иртә менән Төлкө Ҡаҙғәленән тауыҡты һораған. Хужа ҡараһа, ҡуйған ерендә тауыҡ булмаған. Төлкө:

— Ярар, тауыҡ булмаһа, уның урынына һин бер ҡаҙ бир! — тигән.

Ҡаҙғәле: «Йә берәй бәләһе булыр», — тип, уға ҡаҙ биргән. Төлкө, тояҡты ла, тауыҡты ла, ҡаҙҙы ла алып, үҙ юлына киткән.

Төлкө, йәнә бер ауылға барып етеп, Мөгөҙбайҙан фатир һорап ингән. Мөгөҙбайға ҡаҙҙы иртәнгә тиклем һаҡларға ҡушҡан. Хужа ҡаҙҙы ситәүкә эсенә ултыртып ҡуйған. Төлкө йәнә, төнөн тороп, ҡаҙҙы тышҡа йәшереп ҡуйған. Иртән торғас, Мөгөҙбайҙан ҡаҙҙы таптыра башлаған; теге, күпме генә эҙләп ҡараһа ла, ҡаҙҙы таба алмаған. Шул саҡта Төлкө:

— Ярар, улай булһа, ҡаҙ урынына бер үгеҙ бир, бирмәһәң, үҙеңде судҡа бирәм! — тигән.

Мөгөҙбай: «Суд бәләһе — эт бәләһе», — тип, бер үгеҙен йүгертеп килтереп биргән.

Төлкө, үҙенең һарыҡ тояғын күтәреп, үгеҙен етәкләп, тауығын, ҡаҙын эйәртеп, өйөнә ҡайтып киткән.

һыуыҡ төшкәс, уларҙың бөтәһен дә һуйып, бесән аҫтына йәшергән. Ә үгеҙ тиреһенә бесән тултырған да өй алдына баҫтырып ҡуйған.

Бер аҙ ғүмер үткәс, төлкөнөң өйө эргәһенән айыу менән бүре үтеп бара икән. Төлкө уларға:

— Барығыҙ әле, бер сана менән ҡамыт килтерегеҙ. Үгеҙҙе егеп урманға утынға барайыҡ, — тигән.

Айыу менән бүре, йүгереп барып, сана, ҡамыт килтергәндәр. Төлкө теге үгеҙҙе еккән дә өсәүләп санаға менеп ултырғандар. Айыу менән бүре үгеҙҙе ҡыуа башлағандар, үгеҙ һис ыжламаған, бер урында тора биргән. Шул ваҡытта Төлкө:

— Һеҙ, ебегәндәр, үгеҙҙе лә йөрөтә алмайһығыҙ! — тип, айыу менән бүрегә асыуланған булып, сананан төшөп киткән.

— Беҙгә шул ғына кәрәк ине, сәнселеп кит! Бына хәҙер үгеҙҙең ҡойроғон күрерһең инде! — тип, бүре үгеҙҙең муйынына барып та йәбешкән, айыу янбашына һелтәп ебәргән. Шул саҡта үгеҙҙең тиреһе бүҫелеп, эсендәге бесән әйләнеп килеп сыҡҡан.

Быны ситтән генә ҡарап торған төлкө:

— Бесән булһа ла, иттәй күреп ашағыҙ! — тип хихылдап, ауыҙын йырып көлә икән.

## ТӨЛКӨ МЕНӘН БӨРКӨТ

Төлкө ҡартайҙы, ти, бер заман. Һунарға йөрөү уға ауыр була башлай. Шулай ҙа ул йәшәргә теләй. Ҡартлыҡ көндәрен еңел генә үткәрер өсөн, бер хәйлә уйлап тапты, ти. Ул, ашағыһы килгән саҡтарҙа, яланға сығып, үлгән булып ята башлай. Ҡомһоҙ ҡоҙғондарға, ҡарғаларға

үлгән йәнлек кенә булһын, хәҙер осоп килеп, суҡый башлайҙар. Төлкө, үлгән булып ятып, бик күп ҡоҙғондарҙың, ҡарғаларҙың башына етте, ти, үҙ ғүмерендә.

Бер мәлде яланда хәйләләп ятҡан төлкөнө бейектә осоп йөрөгән бөркөт күреп ҡала. Ул, һауанан төлкө өҫтөнә уҡтай атылып төшөп, үткер тырнаҡтарын тәненә батырып, күтәреп алып китә.

Бөркөт тауҙар өҫтөнә күтәрелә. Шунан иң бейек тауҙың бер ҡая ташына барып ҡуна.

Төлкө бөркөт тырнағы аҫтында ла хәйлә эҙләй: «Ҡайһылай алдарға һуң был уҫал бөркөттө? Быны тырнаҡтарынан нисек ҡотолорға?»

Төлкө, саҡ-саҡ тын алып, һүҙ башлай:

— Һай, рәхмәт һиңә, Бөркөт туған! Һин булмаһаң, бындай бейек тауҙарға ҡасан менер инем мин. Шундай матур бейек тауҙарҙы күрмәйенсә ғүмерем үтер ине. Ҡарт көнөмдә шатландырҙың, рәхмәт һиңә, Ҡоштар Батшаһы. Һинең был хеҙмәтеңде бер ваҡытта ла онотмам! — тип, әкрен генә башын ҡалҡытып, тирәяғына ҡарана. Бына ул эргәлә генә бөркөт ояһын күрә. Унда бөркөттөң балалары сырылдаша. Төлкө муйынын һуҙып уларға ҡарай ҙа һүҙен дауам итә: — Тфү-тфү, күҙ теймәһен, балаларың ниндәй матур икән. Бөтәһе үҙеңә оҡшаған. Бигерәк һөйкөмлөләр, алтынҡайҙарым! Иҫән-һау ғына үҫеп, осоп китһендәр инде. Ҡурҡмайынса, нисек шуларҙың үҙҙәрен генә ҡалдырып китәһең! Бигерәк бәләкәйҙәр бит әле һөйөклөкәйҙәрем! Тау бейек тигәс тә бит, тау өҫтөнән оса торған уҫал ҡоштар бар, тау баштарына менә торған йыртҡыстар бар, үҙҙәрен генә ҡалдырып китеү хәтәр бит! Ярай, бынан һуң үҙем ҡарармын. Оя эргәһенән бер аҙым да китмәм. Гел улар янында булырмын. Үҫегеҙ, ҡәҙерлекәйҙәрем, үҫегеҙ! Әсәйегеҙ кеүек рәхимле булығыҙ! Үҫеп, тауҙар өҫтөндә осоп, шатланығыҙ! Ҡайғы-хәсрәт күрмәгеҙ! Әсәйегеҙ алыҫҡа китһә лә, ҡурҡмағыҙ, тыныс булығыҙ: мин һәр ваҡыт һеҙҙең янығыҙҙа булырмын... Тауыштары ниндәй матур йәнекәйҙәремдең, — тип, һамаҡлай ҙа һамаҡлай, ти, был.

Бөркөт төлкөнө ботарлап балаларына ашатмаҡсы ине лә, был һүҙҙәрҙән һуң күңеле йомшарып китте, ти:

— Ярай, минең балаларымды ҡараусы бул әйҙә. Тик ишетһен ҡолағың, яҡшы ҡара! — тип әйтә лә Бөркөт, балаларына аҙыҡ эҙләп, осоп китә. Бөркөт китеү менән, төлкө уның балаларын берәм-берәм һоғона башлай, бөтәһен дә ашап бөтә лә тауҙан түбәнгә ҡаса.

Бөркөт үҙенең балаларына аҙыҡ алып ҡайтһа, ни күрһен: оя туҙған, балаларының йөндәре генә туҙышып ята. Бөркөт ҡайғырып саңҡылдай, ҡанаттарын ҡая ташҡа һуға. Ярһынып, күккә күтәрелә, ергә ҡарап, яуыз төлкөнө эҙләй. Бер көн эҙләй, ике көн эҙләй, таба алмай.

Бөркөт ябыға, шулай ҙа көсөн юғалтмай әле. Асыуынан көс ала икән ул бөркөт.

Өсөнсө көн тигәндә, бөркөт дошманын эҙләп таба. Төлкө бер күл буйында, ергә һуҙылып ятып, әкрен генә шыуышып бара икән. Күлдең ситендә генә һыу ҡоштары йөҙөп йөрөй. Төлкө шуларҙың береһен эләктерергә самалай.

Бөркөт дошманын күреү менән уның өҫтөнә атыла. Яңынан бөркөт тырнағына эләккән төлкө шунда уҡ тағы бер хәйлә ҡороп ала:

— Туҡта, шаулама, ҡәҙерле Бөркөтөм, бына бит алдыңда дошмандарың йөҙөп йөрөй. Балаларыңды шул ҡәһәр төшкән өйрәктәр һәләк итте бит. Шуларҙы эҙләй-эҙләй арып бөттөм. Өсөнсө көн тигәндә, саҡ килеп таптым. Һай, уҫал бит улар! Туҡта, ебәр әле, һин шунда көтөп тор, мин уларҙы хәҙер берәм-берәм тотоп алайым!

Төлкөнөң был һүҙҙәре Бөркөттөң асыуын ғына көсәйтә. Ул, тырнаҡтарын Төлкөнөң елкәһенә тағы ла нығыраҡ батырып:

— Етте!.. Хәҙер ояға ҡайтабыҙ!.. — ти.

Төлкө, һыҙланып, теш араһынан ғына:

— Ярай, ярай, бик яҡшы, оябыҙға ҡайтайыҡ. Мин ауыр бит, күтәреп яфаланма инде, ҡәҙерле Бөркөтөм. Мин йәйәү генә, әкренләп булһа ла, нисек тә тауға менеп етермен әле, — тигән була.

Бөркөт төлкөнөң ике күҙен соҡоп алып ташлай, үҙен күтәреп һауаға ҡалҡына. Бик бейеккә, болоттар араһына, күтәрелә. Ошонда, болоттар араһында, төлкөнө ул тырнаҡтарынан ыскындыра.

Бөркөт төлкөнө, балаларымдың ҡаны һеңгән тип, ашамай.

Төлкөнөң үләкһәһен ҡомһоҙ ҡоҙғондар ашай.

## ТӨЛКӨ МЕНӘН ҺАЙЫҪҠАН

Төлкө ағас башына ояланған ҡарағоштоң балаларын ашамаҡ була. Төлкө һоҡланып ҡарап тора ла ҡарағоштан берәй балаһын төшөрөп биреүен һорай. Ҡарағош төшөрөп бирмәгәс:

— Балаларыңды ла, үҙеңде лә менеп ашайым! — тип ҡурҡыта. Ҡарағош, ҡурҡып, бер балаһын төлкөгә төшөрөп бирә. Төлкөгә был бик тәмле булып ҡала. Икенсе мәртәбә килеп, ҡарағоштоң тағы бер балаһын ашап китә. Быларҙың бөтәһен дә Һайыҫҡан күреп торған икән. Ул Ҡарағошҡа:

— Мин төшөрөп бирә алмайым, үҙең менеп аша, — тип әйтергә ҡушҡан. Төлкө йәнә, өсөнсө мәртәбә, ҡурҡыта икән. Ҡарағош уға:

— Баламды үҙең менеп аша, — тигән. Шунан төлкө артҡа сигенә биргән дә, йүгереп килеп, ағасҡа менәйем тиһә, башы менән ағасҡа бәрелгән, тештәрен емереп бөткән. Эш сыҡмағас, Төлкө:

— Был тирәлә Һайыҫҡан ғына йөрөй ине, шул ҡәһәрең ҡоторткандыр әле, — тип, Һайыҫҡанға яҙаһын бирмәк була. Батҡаҡҡа буяла ла төлкө һайыҫҡанды эҙләп китә. Һайыҫҡанды ҡая тау башында барып таба.

— Һинме шулай Ҡарағошҡа хәйлә өйрәтеүсе? — тип һораған, ти, Төлкө.

— Эйе, мин, — тип яуап биргән Һайыҫҡан.

— Шулай булғас, мин һине яҙаларға тейешмен, — тигән Төлкө.

— Улай булһа, ата-бабабыҙҙы үлтергән кеүек үлтер инде һин. Бына ошо ҡая тауҙан төпһөҙ быҙрәгә һалып төшөр, — тигән Һайыҫҡан.

Төлкө һайыҫҡанды төпһөҙ бйҙрәгә һалып төшөрөп ебәргән, ти. Һайыҫҡан осоп киткән дә барған, ти.

## ТӨЛКӨ МЕНӘН ТОРНА

Урманда йөрөй торғас, төлкө торна менән дуҫлашып киткән. Төлкө торнаны ҡунаҡҡа саҡырған. Бутҡа бешергән дә таҡтаға һалып, йоҡа ғына итеп һылап ҡуйған, шунан:

— Аша, аша, дуҫ, — ти икән. Ә торна, бахыр, суҡыштары менән таҡтаны туҡылдатып соҡоп ҡараһа ла, бер ҙә эләктерә алмаған. Шул арала төлкө бутҡаны ялап та ҡуйған.

Торна төлкөнө үҙенә ҡунаҡҡа саҡырып ҡайтҡан. Торна бутҡа бешереп, үҙе тәрән, үҙе нәҙек муйынлы сүлмәккә һалып ҡуйған.

Торна Төлкөгә:

— Аша, аша, дуҫым, — ти икән. Төлкө күпме генә тырышмаһын, нәҙек муйынлы сүлмәктән ашай алмаған. Ас көйө ултырған. Ә Торна үҙе башын сүлмәккә тығып ебәрә лә тығына ла тығына икән. Бутҡаны ашап бөткәс, Торна:

— Төлкө, ҡунаҡҡа саҡырып, таҡтаға һыланған

бутҡанды үҙең ашап бөтөрҙөң, ә мин ҡарап ултырҙым. Мин дә һине шулай һыйларға булдым. Хәйләгә ҡаршы хәйлә, ашҡа аш менән, ташҡа таш менән булһын, — тигән.

## ТӨЛКӨ МЕНӘН ӘТӘС

Бер төлкө киптерергә элеп ҡуйған ҡуян тиреһен урлай. Ҡуян тиреһе уға ниңә кәрәктер инде, кем белһен. Тирене ашап булмай. Үҙенә тун тектерергә уйлайҙыр, тиһәң, төлкөнөң өҫтөндә бик һәйбәт туны бар. Берәй хәйлә өсөндөр инде. Төлкө бит гел хәйлә менән генә көн итә.

Бер саҡ ҡуян тиреһен ябына ла был ауылға тауыҡ урларға китә. Төлкө тауыҡтарҙың ҡуяндан ҡурҡмауын яҡшы белә. Тауыҡтар ғына түгел, хатта унан турғайҙар ҙа ҡурҡмай.

Ауыл осондағы өйҙөң баҡсаһы артында бер әтәс менән бер тауыҡ, тибенеп, ем сүпләп йөрөй икән. Ҡуян тиреһе ябынған төлкө туп-тура быларға ҡарап килә. Тауыҡ уны күреп ҡала ла Әтәскә:

— Ҡара әле, беҙгә табан әллә кем килә! — ти.

Әтәс, күкрәген кирә биреп, эре генә ҡарай ҙа:

— Ҡурҡма, Ҡуян бит ул! — ти. Үҙе тағы ла тибенергә тотона. Шул арала төлкө килеп етә лә тауыҡты эләктереп алып та китә. Әтәс, атаҡ-атаҡ, тип аптырап тора ла ҡала. Тауығы өсөн бик ҡайғырып, әтәс ҡураға ҡайтып китә. Ҡурала йөрөгән тауыҡтар, әтәстең кәйефе бик төшөнкө икәнен күреп, уның янына йүгереп килеп етәләр.

— Ни булды ла ни булды? Ниңә улай күңелһеҙһең? — тип һораша башлайҙар. Әтәс, илаған һымаҡ, күҙҙәрен сылт-сылт йомоп:

— Берегеҙҙе Ҡуян алып китте! — ти.

Тауыҡтар, бер-береһенә ҡарашып, көләп ебәрәләр.

— Ҡайһы саҡта бигерәк юҡты һөйләйһең. Шаяра белмәйһең, — тиҙәр.

Әтәс асыулана, кикреге ҡыҙарып китә.

— Ниңә көләһегеҙ, ахмаҡтар? Мин һеҙгә үҙ күҙем менән күргәнде әйтәм дә баһа! — тип екеренә.

Тауыҡтар барыбер ышанмайҙар. Әтәстән ҡурҡып, юрый ғына ышанған булалар. Әтәс һаман әтәсләнә:

— Һиҙмәйерәк ҡалдым, һиҙгән булһам, ул Ҡуянды мин, елкәһенә ҡунып, суҡыр ҙа тырнар инем үҙен. Икенсе килә ҡалһа, эләгер әле үҙенә! Күрмәгәнен күрһәтермен! Туп-тура өҫтөнә барып ҡунырмын. Һеҙҙең алдығыҙҙа ҡысҡыртып талармын үҙен! — тип, көр генә тауыш менән ҡысҡырып ебәрә.

Бер көндө кис менән теге төлкө, тағы ла шул ҡуян тиреһен бөркәнеп, тауыҡтар ҡунаҡсаһына килә. Әтәс быны күреп кенә ҡала ла:

— Бына килеп эләктеңме хәҙер! — тип, Төлкөнөң өҫтөнә һикерә. Ҡапыл ғына булғас, төлкө быны әтәстер, тип уйламай. Ниндәйҙер көслө йыртҡыс ҡоштор, тип шикләнә. Шунығ өсөн ҡасып ҡотолоу яғын ҡарай. Әтәс тырнаҡтарын ҡуян тиреһенә ныҡ ҡына батыра. Тире тырнаҡтарына эләгеп ҡала. Әтәс, тағы ла ҡуҡырая төшөп, тауыҡтар алдында маҡтана башлай.

— Бына ҡарағыҙ, теге уҫал ҡуяндың тиреһен һыҙырып алып ҡалдым! Һап-һары булып, шыр яланғас көйө ҡасты. Үлтерә инем, ҡасып ҡотолдо, — ти.

Тауыҡтар әтәстең шундай батырлығына һоҡланалар.

— Бигерәк батырһың инде! — тиҙәр.

Әтәс, тағы ла ғорурланып, маҡтаныуын дауам итә:

— Мин иҫән саҡта бер кемдән дә ҡурҡмағыҙ! Һеҙҙе йәберләтмәм. Ҡуян түгел, төлкө килһә лә ҡурҡмағыҙ, тыныс булығыҙ! — тип, тауыҡтарҙы тынысландыра.

Икенсе бер көндө кис менән теге Төлкө тағы ла ҡунаҡсаға килә. Әтәс быны күрә лә:

— Əһə, теге шәрә Ҡуян килгән. Хәҙер үлтерәм мин

уны! — тип Төлкөнөң елкәһенә осоп ҡуна. Төлкө ситкә йүгерә лә инәлгән була:

— Әтәс туғанҡайым, харап итмә инде мине, үлтермә, зинһар! — тип ялынған була.

Әтәс, батырланып:

— Тиреңде һыҙырып алдым, хәҙер мин йәнеңде алам һинең, яуыз Ҡуян! Ҡайҙа алып киттең минең Тауыҡты? Иә, әйт әле! — тип ҡысҡыра. Төлкө үҙ хәйләһен дауам итә:

— Тауығың иҫән, Әтәс туғанҡайым, уға бер кем дә теймәгән, юҡҡа ҡыҙма. Урманда ул. Әйҙә барайыҡ, алып ҡайтырһың, — ти.

— Тауығымды ҡайтармайынса тороп, мин һинең елкәңдән төшмәйем, — ти Әтәс.

— Бына шунда китеп барабыҙ бит инде, Әтәс туғанҡайым. Алып ҡайтырһың, бер аҙ сабыр ит, — ти Төлкө.

Урманға барып инеүҙәре була, төлкө аунай ҙа, әтәстең муйынынан эләктереп ала. Бер аҙҙан аңра әтәстең тик йөндәре генә туҙып ятып ҡала.

## ТӨЛКӨ МЕНӘН АЙЫУ

Борон бер заман бер айыу урманда турғай тотоп алды, ти.

— Туҡта әле, өсөнсө көн төлкө өйрәк тотоп алыуы менән маҡтанғайны. Мин дә уға барып маҡтанайым әле, — ти.

Айыу, турғайҙы тешләп, төлкө янына килде, ти. Төлкө уның турғай тешләп маҡтанырға уйлап килеүен әллә ҡайҙан уҡ һиҙеп тора ине, ти.

Төлкө:

— Айыу дуҫ, ҡапҡаның нимә була? — тип һораны, ти.

Айыу тештәрен ҡыҫа биреп кенә:

— Турғай, — тине, ти.

Төлкө:

— Айыу дуҫ, ишетмәйем. Бөгөн таш яҫтап йоҡлағайным, ҡолаҡтарым тонған, шәберәк әйтсе, — тигән булды, ти.

— Турғай, турғай!..

— Бер ҙә генә ишетмәйем шул. Ауыҙыңа һыу уртлаған кеүек һөйләйһең. Асығыраҡ әйтһәң ни була, Айыу дуҫ?

— Тур-ғай! — тигәйне, ауыҙындағы турғай пырр итеп осто ла китте, ти.

Төлкө:

— Ә ишеттем, ишеттем, турғай тиһең икән, — тигән булды, ти.

Айыу:

— Ишетеүен ишеттең дә бит, тик турғайҙы осорттоң шул, — тип һуҡранды, ти.

Шунан Төлкө, аҡыл өйрәтмәксе булып:

— Маҡтана белмәйһең, Айыу дуҫ! — тине, ти. — Дөрөҫөн әйткәндә, һин шыр алйот. Һиңә турғай тип әйтмәҫкә, ә ҡош тиергә кәрәк ине. Шул саҡта тештәрең дә асылмаҫ, турғай ҙа осмаҫ ине.

## ҠАРТ АЙЫУ МЕНӘН ТӨЛКӨ

Ҡартлыҡтан бәлйерәгән бер айыу һыйыр-фәлән ауларға, бал эҙләп ағас башына менергә хәленән килмәй башлағас, тауыҡ үрсетеп көн күрмәксе булған.

Ул тауыҡ аҫрай башлаған. Тауыҡтары бик үрсегән: төнәр урындары булмағанлыҡтан, уларҙы төйләгән тибеп алып киткеләй икән. Был бәләнән ҡотолор өсөн, айыу тауыҡ кетәге яһарға булған. Быны төлкө ишетеп ҡалған да айыу янына килгән.

— Мин бик һәйбәт балта оҫтаһы бит, — тигән ул. — Һиңә быҙа тигән тауыҡ кетәге ҡороп бирә алам.

Айыу, быға бик ҡыуанып, төлкөгә тауыҡ кетәге ҡороу эшен тапшырған. Тиҙ арала ул кетәкте ҡороп та биргән. Айыуға тауыҡ кетәге бик оҡшаған. Үҙе нығ, үҙе бейек, ем һалыр өсөн улаҡ кеүек нәмәһе лә бар, ти, ултырып төнәр өсөн арҡыры урҙа ла бик һәйбәт кенә эленеп тора, хатта йомортҡа һалыр өсөн ояһы ла бар, ти.

Яҡшы эше өсөн айыу төлкөгә ҙур йомартлыҡ күрһәтеп, әллә нисә көн һыйлаған, юлға мул итеп күстәнәс тә биреп ебәргән. Тик, тауыҡтарҙың торор урыны бик нығ булһа ла, эш алға бармаған: тауыҡтар, элеккесә, көн дә юғала ла юғала икән.

Аптырағас-йөҙәгәс, айыу тауыҡтарын һаҡларға бүрене яллаған. Һаҡта торған бүре тәүге көндә үк әлеге тауыҡ кетәге яһап биргән төлкөнөң үҙен тотҡан. Тауыҡтарҙы шул яуыз урлап торған икән. Кетәк яһаған саҡта, йәшерен тишек эшләп ҡалдырған да шунан тауыҡтарҙы һурып ала ғына бирә икән ҡәһәр һуҡҡыры төлкө.

— Хәйләкәр, яуыз йән икәнһең һин! — тигән Айыу. — Быҙың өсөн мин һине язаһыҙ ҡалдырмайым!

Шулай тигән дә ҡарт айыу бүрегә төлкөнө төнгө ҡарауыл хаҡы өсөн биргән. Бүре уны, шунда уҡ ботарлап, өс кенә һоғонған да ҡуйған, ти. Шулай итеп, айыу тынып ҡалған, бүре туйып ҡалған.

# СЫСКАН, АЙЫУ, БҮРЕ, ТӨЛКӨ...

Яңғыҙ ҡайын төбөндә бер сысҡан ултыра ине, ти. Ел сығып китте лә, сысҡан өҫтөнә бер япраҡ өҙөлөп төштө, ти. Сысҡан ҡурҡыуынан ҡайын төбөнән сығып ҡасты, ти. Китеп ултыра, ти, был, китеп ултыра, ти, китеп ултыра торғас, айыуға тап булды, ти. Айыу унан:

— Ҡайҙа йүгерәһең былай? — тип һораны, ти.

Сысҡан айыуға:

Үрге ауылдан яу килде,
Яурыныма туп тейҙе.
Шунан ҡасып барамын,
Әйҙә, һине лә аламын.
Йәбеш минең ҡойроҡҡа,
Буйһон минең бойороҡҡа! —

тип әйтте, ти. Айыу сысҡандың ҡойроғона йәбеште лә, икәүләп китеп барҙылар, ти. Бара торғас, бүрегә тап булдылар, ти, былар. Бүре сысҡандан:

— Ҡайҙа китеп бараһығыҙ былай? — тип һораны, ти.

Сысҡан Бүрегә:

Үрге ауылдан яу килде,
Яурыныбыҙға туп тейҙе.
Шунан ҡасып барабыҙ,
Әйҙә, һине лә алабыҙ.
Йәбеш Айыу ҡойроғона,
Буйһон минең бойороғома! —

тип әйтте, ти. Бүре айыуҙың ҡойроғона йәбеште лә, өсәүләп китеп барҙылар, ти. Бара торғас, төлкөгә тап булдылар, ти, былар. Төлкө Сысҡандан:

— Ҡайҙа китеп барыуығыҙ был? — тип һораны, ти. Сыҫҡан Төлкөгә:

Үрге ауылдан яу килде,
Яурыныбыҙға туп тейҙе.
Шунан ҡасып барабыҙ,
Әйҙә, һине лә алабыҙ.
Йәбеш Бүре ҡойроғона,
Буйһон минең бойороғома! —

тип әйтте, ти. Төлкө бүренең ҡойроғона йәбеште лә, дүртәүләп китеп барҙылар, ти. Бара торғас, быларға ҡарһаҡ, әҙерәк барғас — ҡуян, бер аҙ киткәс — көҙән тап булды, ти. Былар ҙа, бер-береһенең ҡойроҡтарына тағылышып, сыҫҡан артынан киттеләр, ти.

Эй киттеләр, ти, былар теҙелешеп, эй киттеләр, ти, арттарына боролоп ҡараһалар, баҫрау буйы ер киткәндәр, ти.

Бара торғас, Айыу туҡтаны ла:

— Бик асыҡтырҙы, әҙерәк тамаҡ ялғап алайыҡ, — тип әйтте, ти. Арағыҙҙа мин иң олоғоҙ булам, тыңлағыҙ минең һүҙемде! — тип, һамаҡлап тороп һөйләп алып китте, ти:

Айыу — һеҙҙең ағағыҙ,
Бүре — һеҙҙең бүләгеҙ,
Төлкө — һеҙҙең түрәгеҙ,
Ҡарһаҡ — һеҙҙең ҡартығыҙ.
Ҡуян — һеҙҙең ҡустығыҙ,
Көҙән — һеҙҙең кесегеҙ,
Сыҫҡан һеҙҙең кемегеҙ? —

тип әйткәйне, тегеләр сыҫҡанды өҙгөләп ташланылар, ти. Шунан йәнә:

Айыу — беҙҙең ағабыҙ,
Бүре — беҙҙең бүләбеҙ,
Төлкө — беҙҙең түрәбеҙ.
Ҡарһаҡ — беҙҙең ҡартыбыҙ,
Ҡуян — беҙҙең ҡустыбыҙ,
Көҙән беҙҙең кемебеҙ? —

тинеләр ҙә көҙәнде өҙгөләп ашанылар, ти. Йәнә күмәкләшеп:

Айыу — беҙҙең ағабыҙ,
Бүре — беҙҙең бүләбеҙ,
Төлкө — беҙҙең түрәбеҙ,
Ҡарһаҡ — беҙҙең ҡартыбыҙ,
Ҡуян беҙҙең кемебеҙ? —

тип, ҡуянды өҙөп-йолҡоп ташланылар, уның артынан «ҡарһаҡ беҙҙең кемебеҙ?» тип, ҡарһаҡты ботарлап ҡуйҙылар, ти. Айыу, бүре, төлкө генә ҡалды, ти. Шунан Бүре һүҙ башлап:

Айыу — беҙҙең ағабыҙ,
Бүре — һеҙҙең бүләгеҙ,
Төлкө беҙҙең кемебеҙ? —

тип, төлкөнө өҙөп-йолҡоп ташламаҡсы булғайны, төлкө уны бүлдереп:

— Айыу ағайым менән Бүре ағайым! Һеҙ мине өҙгөләргә өлгөрөрһөгөҙ, мин һеҙҙең ҡулығыҙҙа. Рөхсәт итһәгеҙ, үҙем иҫән саҡта һеҙгә бер изгелек күрһәтер инем. Ҡарағыҙ әле бынау тау башына, күрәһегеҙме, унан бер һунарсы төшөп килә? Туп-тура беҙҙең өҫкә килә. Мин хәҙер шул яҡҡа барайым, ә һунарсы минең арттан төшөп алыр. Һеҙ шул арала ҡасып китерһегеҙ. Һунарсыны күҙ яҙҙырғас, мин һеҙҙе эҙләп табырмын. Шунан мине өҙгөләп ашарһығыҙ, — тигән.

Айыу менән бүре быға риза булдылар, ти. Төлкө тотто ла һыҙҙы, ти. Йөрөй торғас, баҫыу кәртәһе буйында сүплектә тибенеп йөрөгән бер әтәс янына килеп сыҡты, ти. Әтәс быны күреү менән кәртә башына осоп ҡунды, ти. Төлкө тәмле телләнеп:

— Әтәс дуҫ, мин айыу менән бүренән ҡайтып киләм әле, уларҙа ете көн буйына ҡунаҡта булдым, — тигән булды, ти. — Ишеттеңме әле һин, Әтәс дуҫ, яңы закон хаҡында? Хәҙер, яңы закон буйынса, ҡуян, бүре, төлкө менән әтәс бер-береһенә теймәйҙәр бит, бер ту-

ғандай йөрөйҙәр. Төшсө бында, дуҫ булышайыҡ! — тине, ти.

Әтәс быны тыңлап торҙо ла:

— Бик яҡшы закон икән, — тине, ти. — Анау яҡтан беҙгә ҡарай бер кеше килә. Ул да килеп етһен дә, бергә-бергә дуҫтарса һөйләшеп тә серләшеп ултырырбыҙ, — тине, ти.

— Минең улай оҙаҡ һөйләшеп ултырырға ваҡытым юҡ шул, күл буйындағы ҡаҙҙарға ҡунаҡҡа бараһым бар, — тигән булып, китеп барҙы, ти, Төлкө.

Айыу менән бүре урман эсенә инәләр ҙә төлкөнөң үҙҙәренә аҙыҡ булып килеүен әле булһа көтөп ултыралар икән.

## АС АЙЫУ, ТӨЛКӨ, ЕГЕТ

Борон заманда бер егет урманға бара. Шунда бер ас айыу осрай. Егетте тотоп ашамаҡ була был айыу. Ашайым тигәндә генә, бер төлкө килеп сыға. Айыу, егетте ысҡындырып: «Һине ашамаҫҡа булдым, төлкөнө ашайым», — ти.

Төлкө егеткә:

— Ни эшләп тораһың? — ти.

Айыу егеттең ҡолағына: «Утын алам, тип әйт тә, мине арбаға төртөп йыҡ. Мин шунда үлгән булып ятырмын. Төлкө, хәлемде белер өсөн, яныма уҡ килер. Шул саҡ мин уны тотоп ашармын», — ти.

— Утын алырға килдем, — ти егет. Айыуҙы арбаға төртөп йыға. Төлкө егеткә:

— Утынды арбаға һалғас, арҡан менән бәйләргә кәрәк. Бәйләйек, — ти. Айыу:

— Дөрөҫ әйтәһең, — тигән була.

Егет айыуҙы уратып-уратып бәйләй.

— Уратып бәйләгәс, ағас менән бырауулап та ҡуялар ул утынды, — ти Төлкө.

Егет бырауулай. Айыу аҡыра, ҡыймылдай ҙа алмай. Төлкө, арбаға бырауулап-борғослап бәйләп һалынған айыуҙың баш осона килеп:

— Бына, йөрөй инең урманды бер итеп, йыртҡыс Айыу, беҙгә көн күрһәтмәй! Хәҙер яттыңмы инде бик һәйбәт кенә утын булып! — тип көлә. Шунан егеткә:

— Утындың йыуанын шына ҡағып яралар ул. Шулай ит, — ти.

Егет имәндән шына яһап, айыуҙың ҡойроҡ аҫтына ҡаға. Егет ҡаға, айыу аҡыра. Айыу аҡыра-аҡыра үлгән шунда. Айыу урынына арыҫлан кейектәр батшаһы булып алған, ти, бынан һуң.

## АЙЫУ МЕНӘН БАЛ ҠОРТТАРЫ

Борон-борон заманда, өйрәк үрәтник, һайыҫҡан дисәтник саҡта, булған, ти, бер тайыш табан айыу. Уның ҡойроғо, төлкө ҡойроғо кеүек үк, оҙон да, йөнтәҫ тә булып, өрпәйеп торор булған, ти.

Айыу бал яратҡан. Балһыҙ йәшәй ҙә алмаған. Гел генә бал ашауҙы уйлаған да йөрөгән.

Бал ҡорттары мыжлап торған ағас ҡыуышын күрҙеме, айыуҙың шатлығы эсенә һыймай башлай икән. Ул, аушаңлап, ағас башына менә лә, умартаны пыр туҙҙырып, бал ашарға тотона икән. Бал ҡорт-

тары айыуҙы һырып алалар ҙа сағырға маташалар, әммә булдыра алмайҙар. Сәнки айыуҙың йөнө оҙон, ә бал ҡорттарының ҡаяуҙары ҡып-ҡыҫҡа. Улар, айыуҙың тәненә яҡынлашырға тырышып, йөн араһына инәләр-инәләр ҙә шунда сырмалып бөтәләр. Ә айыуға шул ғына кәрәк тә. Ул ағастан төшә һала ла ерҙә аунай башлай. Йөн араһында буталып ҡалған бал ҡорттары иҙеләләр ҙә бөтәләр. Улай ҙа булмаһа, һыуға барып бер сумып ала, ти, был, бал ҡорттары шунда сыланып, ҡойолоп төшәләр. Шунан һуң айыу йәнә ағас башына менеп китеп, солоҡтағы бал бөткәнсе, үҙенең эсе күпкәнсе, һыйлана икән, ти.

Бер ваҡыт урманға утын алырға бер кеше килгән икән. Ипләберәк ҡараһа, ағас башында бал ашап ултырған айыуҙы күреп ҡалған. Үҙе бал ашай, ти, айыу, ә йөнтәҫ оҙон ҡойроғо менән бал ҡорттарын ҡыуа икән, ти.

— Эх һин, Тайыш табан, Тайыш табан! Ҡорттарҙы ҡырып, әҙер балды ашап йөрөйһөң икән әле! Муйыныңды өҙмәһәмме, бына күр ҙә тор! — тип, теге кеше ағас башына менеп киткән.

Ул айыуға ҡарап балтаһын һелтәгән. Әммә балта айыуҙың муйынына түгел, ә ҡойроғона тап килеп, уны сабып өҙгән. Шулай итеп, тайыш табан айыу оҙон йөнтәҫ ҡойроғо менән бөтөнләйгә хушлашҡан. Айыу ағас башынан төшкән дә, башын түбән баҫып, урманға инеп юғалған.

Шунан бирле айыуҙар сонтоҡ ҡойроҡло булып ҡалғандар, ти.

Теге кеше солоҡто яҡшылап ҡарап, йүнәтеп сыҡҡан; кәрәҙҙәрҙе үҙ урынына ҡуйған да ҡайтып киткән.

Бал ҡорттары быны күреп, башта ғәжәпләнгәндәр. Улар Инә ҡорттан:

— Ниңә был кеше беҙҙең балыбыҙҙы ашап бөтөрөп китмәне икән? — тип һорағандар.

Инә ҡорт ни тип яуап ҡайтарырға белмәгән. Шулай ҙа ул Бал ҡорттарына:



Төлкө менән Бүҙәнә



Төлкө менән Бөркөт

— Барығыҙ, осоп етегеҙ ҙә ул кешенән беҙҙең балыбыҙҙы ниңә ашамауын һорағыҙ, — тигән, ти.

Бал ҡорттары теге кешене ҡыуып етеп һорағас, ул:

— Әгәр мин балығыҙҙы ашаған булһам, үҙегеҙгә ҡыш ашауға нимә ҡалыр ине? Һеҙ ҙә астан үлер инегеҙ, йәренгә мин дә балһыҙ ҡалыр инем, — тип яуап биргән, ти.

Бал ҡорттары солоҡҡа әйләнеп ҡайтҡандар ҙа инә ҡортҡа теге кешенең һүҙҙәрен әйтеп биргәндәр. Шул саҡта инә ҡорт кәңәшкә бөтә ҡорттарҙы йыйған. Бал ҡорттары, ул кешегә күмәкләп барырға ла, үҙҙәрен айыуҙан һаҡлауын һорарға, тип кәңәш иткәндәр, ти.

Ҡорттар ауылға, теге кеше янына, барып:

— Беҙҙе яуыз Айыуҙан ҡотҡара күр, үҙ эргәңә ал. Ә беҙ һиңә бының өсөн рәхмәт әйтербеҙ, — тигәндәр, ти.

— Яҡшы! Мин һеҙгә бик һәйбәт итеп умарта эшләрмен. Һеҙ шунда йәшәрһегеҙ, бал йыйырһығыҙ, — тип яуап биргән, ти, кеше.

Шул көндән бирле бал ҡорттары кешеләргә бал менән һыйлай башлаған, ти.

## ИШӘК, ДӨЙӘ, ТӨЛКӨ, БҮРЕ

Борон-борон заманда әбей менән бабай йәшәгән. Уларҙың дөйәһе менән ишәге лә булған. Йәшәйҙәр, ти, былар бергәләп, эй йәшәйҙәр, ти, йәшәй торғас, шулай, бер мәлде ишәккә эш күп булып киткән, ти. Йәйҙең бер матур көнөндә ишәк менән дөйә үҙ-ара һөйләшәләр икән:

— Бик эш күп, әйҙә ҡасайыҡ!

Дөйә менән ишәк икәүләшеп ҡасып киткәндәр. Эй, рәхәтләнеп ашап йөрөйҙәр икән былар яланда. Ашап туйып алғас, Ишәк:

— Эй, бынау тиклем матур яланда бер йырлайым әле! — ти икән.

— Ҡуй, йырлама, беҙҙе килеп табып алырҙар, — тигән Дөйә.

Ишәк дөйәне тыңламаған, йырлап ебәргән. Хужалар йырҙы ишетеп ҡалғандар ҙа икеһен дә тотоп алып ҡайтҡандар. Хужалар ишәкте дөйә өҫтөнә һалғандар ҙа бер белгескә күрһәтергә алып киткәндәр. Тау ҡырынан барғанда, ҡырсын ташлыҡҡа тура килгәндәр.

— Ҡайһылай матур! Мин бейейем әле, — ти икән Дөйә.

— Бейей күрмә, мине төшөрөп үлтерерһең, — тигән Ишәк.

Дөйә лә, ишәкте тыңламай, бейей башлаған. Ишәк шыуып төшөп үлгән дә ҡуйған. Хәҙер дөйәнең бер үҙенә төшкән бөтә эш. Дөйә, сыҙай алмайынса, бер үҙе ҡасҡан. Ҡасып барғанда, бер төлкөгә тап булған. Төлкө менән икәүләшеп киткәндәр. Бара торғас, бүрегә осрағандар, өсәүләшеп алғандар. Өсәүләп китеп бара торғас, юлбарыҫҡа осрағандар, дүртәү булып алғандар. Кис булған.

— Эй, туғандар, ни эшләйбеҙ? — тип һораған Төлкө.

— Ятып йоҡлайбыҙ, кем яҡшы төш күрә, шуны һуймайбыҙ, — тигән Бүре.

Дөйә:

— Ҡышҡылыҡҡа хәлем дә юҡ, мине һуйығыҙ! — тигән.

Дөйәне һуялар ҙа төлкө менән юлбарыҫ дөйәнең башын, тояҡтарын, эсәген йыуырға китәләр. Бүре бер үҙе тороп ҡала. Йылға буйына барып еткәс, Төлкө:

— Әйҙә, мин мейеһен, һин йөрәген ашайыҡ, — ти икән.

— Бүре үпкәләр бит.

— Үпкәләһә, үҙен һуйырбыҙ. Йөрәк ҡайҙа? — тиһә, миңә тура ҡара, — тигән Төлкө.

Шунан төлкө дөйәнең мейеһен, юлбарыҫ йөрәген ултырып ашағандар.

Ҡайталар былар, бүре тикшерәнә башлай.

— Ҡайҙа мейеһе?

— Һе, мейеһе булһа, дөйә үҙен-үҙе һуйҙырамы ни? — тигән Төлкө.

— Ҡайҙа йөрәге?

Юлбарыҫ төлкөгә тура ҡараған була.

— Йөрәген ашағанда, миңә ҡарамай инең бит, — ти Төлкө.

Шул ерҙә бүре юлбарыҫты баҫтырып алып китә. Тегеләр киткәс, төлкө бар булған итте өңгә тултырып бөтә лә, үҙе керә лә ята. Юлбарыҫ ҡасып китә, бүре кире әйләнеп килә. Килһә, ит тә юҡ, төлкө лә юҡ. Эҙләп ҡарай, таба алмай.

Яҙ етә. Төлкө өңөнән сыға ла, ҡояшта ҡыҙынып, китап уҡып ятҡан була. Әлеге Бүре килеп сыға.

— Һине, Төлкө, ашайым, мине алданың бит.

— Юҡ, мин ул Төлкө түгел. Мин утыҙ йыл буйына уҡытып ҡына ятам.

— Шаярма, шуға оҡшағанһың бит.

— Ай-һай-й, төлкөгә төлкө оҡшай инде! Балаларың бармы, уҡытырға ебәрәһеңме?

— Ике балам бар, ебәрермен, — ти ҙә Бүре ике балаһын алып килә.

— Киләһе аҙнала килерһең, — тип, Төлкө Бүрене ҡайтарып ебәрә. Үҙе бүре ҡайтып китеү менән бүренең ике балаһын да ашай ҙа икенсе урынға ҡаса. Ҡасып йөрөй торғас, көтөүселәр ташлап киткән кәрзинкәгә тап була. Төлкө шул кәрзинкә менән булашып тора икән, Бүре килеп сыға.

— Э-э-э, һине осрата алмай йөрөй инем, яҡшы булды әле, хәҙер мин һине ашайым!

— Юҡ, һин мине ашай алмайһың, мин утыҙ йыл-

дан бирле кәрзинкә үрәм, мин һин эҙләгән төлкө түгел.

— Шуға оҡшағанһың!

— Юҡ, түгел. Улар кәрзинкә үрә белмәйҙәр. Мин кәрзинкә үреп, тамаҡ аҫрайым.

— Ҡайһылай итеп үрәләр уны?

— Теләһәң, өйрәтәм. Кәрзинкәнең эсенә ин дә, мин үргәнде отоп ултыр.

Бүре кәрзинкә эсенә инеп ултыра, төлкө кәрзинкәне, асыҡ ерен ҡалдырмай, ослап үреп ҡуя.

Бер заман кәтәүселәр кәрзинкә эргәһендә йөрөгән төлкөнө күреп ҡалалар ҙа һөрән һала башлайҙар. Төлкө тора ла ҡаса. Бүре көс-хәл менән кәрзинкәне ватып, туҙҙырып ысҡына.

Төлкө, йөрөй торғас, бер ташландыҡ тирмәнгә тап була. Шунда йәшәп ятҡанда, йәнә әлеге Бүре килеп сыға.

— Ә-ә-ә, Төлкө, һине таба алмай йөрөй инем, хәҙер үҙеңде ашайым!

— Ашай алмайһың, мин һин эҙләгән төлкө түгел. Мин бына утыҙ йыл инде тирмән тарттырам, шуның менән тамаҡ аҫрайым. Ышанмаһаң, ана, мөшкәгә төшөп ҡара.

Бүре мөшкәгә төшә. Төлкө шым ғына сығып, тирмәнде ебәрә лә ҡуя. Бүре көскә һикереп сығып ҡотола. Һуңынан осрашҡан саҡтарында, бүре төлкөгә ҡырын-мырын ғына ҡарап уҙа икән. Ниңә тиһәң, төлкөгә яҡын килергә ҡурҡа, ти.

Төлкө борондан шулай үҙе зирәк, үҙе хәйләкәр булған инде ул.

# ЙОМАРТ ҠУЯН

Байрам көндө бер кеше үҙенең бәләкәс кенә улын ҡунаҡ саҡырырға ебәргән. «Фәлән-фәлән ағайыңды, фәлән-фәлән бабайыңды, фәлән-фәлән еҙнәңде саҡыр», — тип, ҡырҡмаһа ҡырҡ кеше исемен әйтеп сыҡҡан. Малай тыңлап торған, тик ҡапҡанан сыҡҡас та, ҡунаҡҡа кемдәрҙе саҡырырға кәрәклеген онотоп бөтөргән, ти. Өйгә кире инеп, ҡайтанан һорашырға ҡыйыулығы етмәгән. Шунан малай: «Тотайым да бөтә ауыл кешеләрен саҡырып ҡайтайым, шулар араһында мин саҡырырға тейеш кешеләр ҙә булыр әле», — тигән. Малай, өй беренсә йөрөп, бөтә кешене ҡунаҡҡа саҡырған.

Ҡунаҡтар йыйыла башлаған. Аҡрынлап йортҡа бөтә ауыл халҡы килеп тулған, ата менән әсә ҡаушап ҡалғандар:

— Ни эшләргә инде? Был тиклем күп ҡунаҡҡа етерлек һый-хөрмәтте ҡайҙан алмаҡ кәрәк? — тип аптырашҡандар улар.

Ә малай, кемдәрҙе саҡырырға кәрәклеген онотҡанлыҡтан, бөтә ауыл халҡын саҡырып ҡайтыуын атаәсәһенә һөйләп биргән.

Ҡунаҡтар һый-хөрмәт көтәләр. Хужалар булған аҙыҡты ҡырып-һеперел ашъяулыҡҡа килтереп ултырталар, һый барыбер етмәне, ти.

Атаһы малайына:

— Үҙең эште боҙҙоң, хәҙер үҙең рәтлә! — тигән.

Ата-әсәһен шулай оятҡа ҡалдырғаны өсөн малай, күҙ йәштәрен ағыҙа-ағыҙа, өйҙән сыҡҡан да ауыл артына йүгергән, унан урманға барып ингән. Ағас төбөнә ултырып, йәнә үкһеп илай башлаған.

Шул ваҡыт ул бер ҡуян йүгереп килгәнен күргән. Малай былтыр ғына ул ҡуянды үҙ өйөндә аҫрап үҫтергән, үҫкәс, уны урманға ебәргән икән. Ҡуян малайҙы әллә ҡайҙан танып, уның эргәһенә килеп ултырған.

Малай ҡуянға үҙенең ҡайғы-хәсрәтен һөйләп биргән. Ҡуян уны яҡшылап тыңлағандан һуң, оҙон ҡолаҡтарын ҡайсылап, артҡы аяҡтарына ултырып, алғы аяҡтары менән малайҙың ҡулынан тотоп:

— Ярар, ҡайғырма, дуҫҡайым. Бар, өйөңә ҡайт, бөтәһе лә булыр, — тигән. Үҙе һикерә-һикерә урманға инеп киткән.

Малай ҡайтыуға әрһеҙ ҡунаҡтар өйҙә булған һый-хөрмәтте ашап-эсеп бөтөргән булғандар. Урындарынан ҡуҙғалмай, тағы берәй нәмә ашатмаҫтармы, тип ултыралар, ти, былар. Ҡайһы берҙәре хужаға ҡарап:

— Һыйың етерлек булмағас, ниңә беҙҙе ҡунаҡҡа саҡырҙың? — тип асыуланып та ҡуялар икән.

Бер ҡунаҡ тәҙрәнән ҡараһа, ҡаушап ҡалған, уның артынса башҡалар ҙа ҡараһалар, ни күҙҙәре менән күрһендәр: урам кейек-йәнлектәр менән тулған, бөтәһе лә был өйгә табан киләләр, һәр береһе үҙе менән нимәлер алып килә икән. Айыуҙар бал тулы солоҡ тәгәрәтәләр; бүреләр һарыҡ түшкәләре күтәргән; боландар мөгөҙҙәренә һөт тултырған силәктәр элгәндәр; ҡуяндар кәрзин-кәрзин сәтләүектәр, төлкөләр тауыҡтар, ҡаҙҙар күтәреп килтерәләр, ти.

Был әлеге ҡуян эше икән. Ул үҙенең урмандағы дуҫтарын малайға ярҙам итергә саҡырған икән. Ҡуян уларға был малай уны нисек ҡарап үҫтереүен, үҫкәс, ирекkә сығарып ебәреүен һөйләп биргән. Шунан инде улар ана шул байлыҡты малайға илтергә булғандар.

Урман йәнлектәре алып килгән һый-хөрмәттәрҙе ишек алдына ҡуйғандар ҙа үҙҙәре ҡайтып киткәндәр. Ғәжәпкә ҡалған ҡунаҡтар ауыҙ асып һүҙ ҙә өндәшә алмағандар, ти.

Ата менән әсә шатлыҡтарынан ни эшләргә лә белмәгән. Малай уларҙан да былайыраҡ ҡыуанған.

Хужалар өс көн, өс төн буйы кинәнеп ҡунаҡ һыйлаған. Ҡунаҡтар өйҙәренә таралышҡандан һуң да табында ярты һый тороп ҡалған икән, ти.

Һуңынан халыҡ араһында был хәл тураһында оҙаҡ йылдар буйы һөйләп йөрөгәндәр. Ни өсөн тиһәң, бындағылай ҡунаҡ һыйлау бер ҡасан да, бер ҡайҙа ла булмаған икән.

## ҠУЯН МЕНӘН АРЫҪЛАН

Борон-борон заманда бер арыҫлан булған. Башҡа йәнлектәр арыҫландан бик ҡурҡып ҡына йәшәгәндәр. Ни өсөн тиһәң, арыҫлан уларға бер ҙә көн күрһәтмәй икән, ҡайҙа осратһа, шунда тота ла йығып ашай, ти, үҙҙәрен. Арыҫлан йәнлектәрҙең берәүһен тотоп ашаған саҡта, бишәүһе йөрәге ярылып үлә, ти. Ҡасып ҡотолорға һис бер әмәл булмаған, ти, был йыртҡыстан.

Арыҫландың шулай теңкәгә тейеүенән тәҡәттәре ҡалмағас, берҙән-бер көндө урмандағы булған кейек-йәнлектәр йыйылышып, кәңәш ҡорҙолар, ти.

— Был арыҫлан бөтөрә бит беҙҙе, былай булһа. Ул беребеҙҙе тотоп ашағанда, бишәүебеҙ йөрәге ярылып үлә. Ни эшләйбеҙ хәҙер, ағай-эне? — тип әйтте, ти, Төлкө.

— Беҙ көн һайын йәрәбә һалайыҡ. Йәрәбә кемгә сыҡһа, шул арыҫландың ҡорбаны булыр, — тип әйтте, ти, Айыу.

Шулай итеп, былар көн һайын йәрәбә һалырға булдылар, ти. Улар был хаҡта арыҫландың үҙенә лә хәбәр иттеләр, ти.

Беренсе көн йәрәбә ҡуянға сыҡты, ти. Ҡуян йәнлектәргә:

— Ағайҙар! Беҙгә былай итеп һәр ваҡыт арыҫландың ҡорбаны булып үлеү бер ҙә килешкән эш түгел. Берәй хәйлә ҡороп, шунан ҡотолоу яғын ҡарарға кәрәк, — тип әйткән булды, ти.

Төлкө Ҡуяндың һүҙен тыңлап торҙо ла:

— Кит, хәсрәт! Һинме һуң хәйлә ҡороп, арыҫланды алдар йән! Белер-белмәҫ телең менән хәбәр һөйләп торған булаһың, асыуымды килтереп, — тип әрләп ташланы, ти.

Ҡуян арыҫлан янына китте, ти. Бер ҙә ҡабаланманы, ти, был. Көтөп ултырған арыҫлан бик асыуланды, ти, ҡуянға.

— Ниңә улай яй йөрөйһөң һин? Ата-бабаларың яй йөрөмәнеләр заманында. Һин иртәнсәк үк килергә тейеш инең, хәҙер төш етеп килә, — тип әрләп ташланы, ти, ҡуянды.

Ҡуян ҡурҡып ҡына:

— Мине һиңә көндөҙгөлөккә ашарға ебәргәйнеләр, икенсе бер ҡуян һиңә иртәнсәк килергә тейеш ине. Килә ятҡанда юлда башҡа бер арыҫлан осраған да теге ҡуянды тотоп ашаған. Бына мин дә әле һиңә килә ятҡанда шул арыҫланға тап булдым: «Ҡайҙа бараһың?» — тине. Мин уға: «Үҙемдең хужама — арыҫлан ағай янына барам», — тип яуап бирҙем. Шулай тигәс, теге асыуланып үкерә башланы: «Кем бында минән башҡа хужа булырға йөрөй тағы?» — ти. Мин унан көскә-көскә генә ҡасып ҡотолдом. Шуға күрә һуңға ҡалып килдем, — тигән булды, ти.

Арыҫлан ҡуяндан тегенең ҡайҙа йәшәгәнен һораны, ти.

— Ул бынан алыҫ түгел, анау яҡта, — тип яуап бирҙе, ти, Ҡуян.

— Әйҙә, алып бар әле һин мине уның янына. Мин уға күрһәтәйем әле, бында кем хужа икәнен! — тип әйтте, ти, Арыҫлан, асыуланып.

Ҡуян алдан китте, ти, уның артынан арыҫлан төштө, ти. Былар бик тәрән бер ҡоҙоҡ янына килделәр, ти.

— Бына ошо ҡоҙоҡтоң эсендә ултыра теге яман арыҫлан, — тигән булды, ти, Ҡуян ҡурҡып ҡына.

Арыҫлан ҡоҙоҡтоң эсенә ҡараһа, ысынлап та тап үҙенә оҡшаған икенсе бер арыҫланды күрҙе, ти.

Арыҫлан ҡотороноп, үкерә башланы, ти.

— Дөмөктөрәйем әле быны! — тип, гәйрәтләнеп, ҡоҙоҡ эсенә һикерҙе, шунда шомборлап батты ла үлде, ти.

Шатлығы эсенә һыймаған ҡуян, был хәбәрҙе йәнлектәргә тиҙерәк белдерер өсөн, һикерә-һикерә ҡайтып китте, ти.

## ҠУЯН МЕНӘН ТЕРПЕ

Бер заман терпе, өйөнән сығып, көндөң матурлығына хайран ҡалып тора ине, ти. Терпе үҙ алдына үҙе: «Бөгөн көн бик матур икән, баҫыуға барып, ашарға бер аҙ тамыр-томор йыйып килтерәйем әле», — тип баҫыуға сығып китте, ти. Бер аҙ ер киткәйне, бер ҡуянға барып осраны, ти. Ҡуян, һикерә-һикерә, кәбеҫтә баҫыуын ҡарарға китеп бара икән.

— Һаумы, Ҡуян тиҥдәш? — тип иҫәнлек-һаулыҡ һораша Терпе. Ләкин ҡуян бер ниндәй ҙә яуап бирмәне, ти, терпенең сәләменә. Бер аҙ торғас, бик эреләнеп кенә, Терпенән:

— Ни эшләп һин былай иртүк бында йөрөйһөң? — тип һораны.

— Саф һауа еҫкәп йөрөргә сыҡтым, — ти Терпе.

Ҡуян, көлөп:

— Һин ул кәкре аяҡтарың менән арҡыс-торҡос баҫып, тиктәҫкә генә йөрөмәйһеңдер әле, берәй эш ҡуптарырға йөрөйһөңдөр, моғайын! — ти.

Терпегә ҡуяндың был һүҙе бер ҙә оҡшамаған.

Ул бик ғәрләнгән, ти, быға. Ни өсөн тиһәң, терпенең аяҡтары тымыштан кәкре.

— Һин шулай тиһең инде, ярар, — ти Терпе. — Һинең аяҡтарың оҙон булһа ла, минән ары әллә ни ҡыйрата алмаҫһың!

Ҡуян, көлөп, Терпегә:

— Һәр хәлдә, минең аяҡтар һинеке шикелле кәкре түгел инде! — ти.

— Ҡарап ҡарайыҡ, улай булғас, — ти Терпе. — Йүгерешеп ҡарайыҡ, кем уҙыр. Мин, моғайын, уҙырмын һине.

Ҡуян һыны ҡатып көлөргә тотондо, ти.

— Ҡолаҡҡа ятмаған хәбәрҙе һөйләйһең, Терпе ҡустым. Һинме һуң инде мине уҙыр йән әйәһе? Һин тигәнсә булһын, йүгерешеп ҡарайыҡ. Нимәнән? — ти Ҡуян.

— Бер талир тәңкә лә бер шешә һөт.

— Яҡшы. Әйҙә, хәҙер үк йүгерешәбеҙ.

Терпе әҙерәк уйлап торҙо ла, Ҡуянға:

— Ул тиклем ҡабаланырға ярамай. Мин әле тамаҡҡа ла ашамағанмын. Мин тәүҙә өйгә ҡайтып, ашап киләйем. Бер сәғәттән һуң ошо урында осрашырбыҙ, — ти ҙә йәһәт кенә өйөнә ҡайтып китә.

Өйөнә ҡайтып ингәс, уйлай, ти, теге терпе: «Ҡуян үҙенең оҙон боттарына ышана, ярай. Бына мин күрһәтәйем әле уға. Һармаҡ та инде был ҡуян тигәнең! Талир тәңкә менән бер шешә һөтөн бик һәйбәтләп кенә түләһен әле ул Терпе ағаһына!»

Терпе Инә терпене саҡырып ала ла:

— Һин минең менән баҫыуға бараһың, — ти.

— Ни булды һиңә, атаһы?

— Беҙ ҡуян менән кем уҙарҙан йүгерешергә булдыҡ. Һин шаһит булырһың.

— Атаҡ-атаҡ, өнөммө, төшөммө был, атаһы? Ҡуянды нисек йүгерешеп уҙмаҡ кәрәк? — тип аптырап ҡала Инә терпе.

— Уныһы минең эш. Әйҙә, тиҙ бул, күп һөйләнеп торма!

Былар икәүләп ҡуян янына китәләр. Юлда барғанда Ата терпе Инә терпегә:

— Тыңла, мин нимә әйтһәм, һин шуны эшләрһең. Ана, ике оҙон бураҙнаны күрәһеңме? Бына беҙ шул ике бураҙна араһында йүгерешербеҙ. Беҙ арғы бураҙнанан йүгерешә башлайбыҙ. Ә һин бында, бирге бураҙнала ултырып ҡал. Ҡуян һин ултырған бураҙнаға йүгереп килеп етеү менән үк, һин уға: «Мин әллә ҡасан бында инде!» — тип ҡысҡырырһың, ти.

Баҫыуға килеп еттеләр, ти, былар икәүләп. Инә терпе, һөйләшеү буйынса, үҙ урынында ҡала, ата терпе үҙе арғы бураҙнаға китә. Килһә, ҡуян быны көтөп ултыра икән.

— Башларға ярай хәҙер, — ти Терпе.

Былар икеһе лә бураҙна буйына барып, тиңләшергә торҙолар, ти. «Бер, ике, өс!» — ҡуян сабып сығып китте, ти, мин һиңә әйтәйем, бер ваҡыт, ә терпе ҡуяндың ҡойроғон ғына күреп ҡалды, ти. Терпе үҙе бер-ике генә һикерҙе лә бураҙнала ятты ла ҡалды, ти.

Ҡуян бирге бураҙнаға килеп кенә еткәйне, Инә терпе:

— Мин әллә ҡасан бында инде! — тип ҡысҡырып та ебәрҙе, ти.

Ҡуян был хәлде күреп, бик аптырап ҡала.

— Әйҙә, тағы бер тапҡыр кире йүгерешәбеҙ! — ти ҙә, ҡолағын һыртына һалып, кире сабып китә ҡуян. Артынан саңдар туҙып ҡына ҡала. Ҡуян арғы бураҙнаға барып ҡына еткәйне, Ата терпе:

— Мин бында инде, мин бында! — тип ҡысҡырып ебәрҙе, ти.

Ҡуяндың бик асыуы килә быға.

— Әйҙә, ҡабатлап йүгерешәбеҙ! — ти ул.

— Ҡаршылыҡ юҡ, — ти Терпе.

Ҡуян сабып китә. Терпе тағы бураҙна эсендә ятып ҡала.

Шулай итеп, ике бураҙна араһында етмеш ете тапҡыр йүгерҙе, ти, был ҡуян. Ҡайһы ғына бураҙнаға килһә лә: «Мин әллә ҡасан бында инде!» — тигән

һүҙҙе ишетә икән ҡуян. Етмеш һигеҙенсе тапҡыр йүгергәндә, хәле бөтөп тәгәрәне, ти, ҡуян.

Терпе талир тәңкә менән бер шешә һөттө алды ла, бик күңеле булып, инә терпе менән өйөнә ҡайтып китте, ти.

## ИКЕ БУРҺЫҠ

Ата бурһыҡ менән Инә бурһыҡ һәр ваҡыт яланда сысҡан баҫтырып йөрөр булғандар. Бер көндө бик алыҫта бер дөйә күренгән. Дөйәне күреп ҡалған да Ата бурһыҡ Инә бурһыҡҡа:

— Әйҙә, ҡарсыҡ, ҡалдырып торайыҡ шул сысҡандарҙы, киттек дөйә тоторға! — тигән.

Инә бурһыҡ ҡабаланмаған.

— Беҙ хәҙер сысҡандар артынан йүгерә торғас, бик арыныҡ, сысҡандар ҙа арынылар. Арыған сысҡандарҙы ташлап, арымаған дөйә артынан йүгереп эш сыҡмаҫ. «Бөгөнгө йомортҡа иртәгәге тауыҡтан ҡимməтерәк», тип, ҡарттар юҡҡа ғына әйтмәҫ. Ҡарттарҙың был һүҙе дөрөҫ була торған булһа, сысҡандарҙы ташлап китеүҙән ни файҙа? — тигән Инә бурһыҡ ата бурһыҡҡа. Ата бурһыҡ үҙенекен иткән.

— Дөйә була тороп, сысҡандар артынан йүгереп йөрө, имеш, — тигән дә, дөйә артынан китеп тә барған.

Инә бурһыҡ тороп ҡалған. Ул арып, хәлдән тайып бөткән бер нисә сысҡанды тотоп ашаған да, тамағы туйғас, рәхәтләнеп ял итергә ятҡан.

Ата бурһыҡ, бер ни ҙә тота алмайынса, арып-талып, ас көйө өйгә ҡайтып ингән дә Инә бурһыҡ янына йығылған.

Инә бурһыҡ:

— Тоттоңмо һуң дөйәңде? — тип һораған.

— Юҡ, тота алманым, — тип, саҡ-саҡ ҡына әйтә алған тегеһе.

— Мин һиңә әйттем бит, арыған сысҡандарҙы ташлама, бөгөнгө йомортҡа иртәгәге тауыҡтан ҡиммәтерәк, тип, — тигән Инә бурһыҡ.

Ата бурһыҡ инә бурһыҡты тыңламауына бик ҡаты үкенгән, хатта һыңҡылдап-һыңҡылдап тороп иларға тотонған.

## ҺОРОСАЙ МЕНӘН ҠАРАСАЙ

Бер бабай менән әбей йәшәгән, ти. Бала-сағалары булмаған, икәүҙән-икәү генә ғүмер иткәндәр. Күҙгә күренерлек мал-тыуарҙары ла булмаған, бары ике бесәй генә аҫрағандар: береһе — ҡара бесәй, икенсеһе — һоро бесәй.

Бабай ҙа, әбей ҙә бесәйҙәрҙе бик яратҡан. Ҡара бесәйҙе Ҡарасай тип, һоро бесәйҙе Һоросай тип кенә йөрөткәндәр улар.

Һоросай бик уңған булған. Ул, төн йоҡламай, сысҡан тота, көндөҙ ҙә тик ятмай, бөтә тишек-тошоҡто күҙәтеп тора, әбейҙең бөтә ашамлыҡ нәмәләрен сысҡандарҙан һаҡлай, ти.

Ҡарасай бик ялҡау булған. Бер ҙә сысҡан-маҙар тотоп мәшәҡәтләнмәгән. Төнөн әбейҙең һөтөн эсеп, ҡаймағын ашап ҡуя ла, көндөҙ, түшәккә менеп, мырылдап йоҡлай ҙа ята, ти, был.

Әбей аптырауға ҡалған. Уйынмы ни! Ике бесәй аҫрайҙар, шуға ҡарамаҫтан, һәр көн төндә һөт менән

ҡаймаҡ ашап ҡуйылған була. Ни эшләргә кәрәк? Тота ла был ҡартына әйтә:

— Шулай ҙа шулай, төн булдымы, ҡаймаҡ менән һөттө ашап китәләр. Был, ахыры, үҙебеҙҙең бесәйҙәр эшелер, — ти.

— Ҡайһыһы эшләне икән был яуызлыҡты? — ти ҡарт.

— Белмәйем шул, — ти әбей, — Ҡарасай былай бик аҡыллы күренә инде: нисә ҡарама, түшәктә генә ултыра. Һоросай эше булырға тейеш был.

Былар тағы һынап ҡарарға булалар. Ҡарасай төнөн тағы һөт менән ҡаймаҡҡа зыян килтерә. Өҫтәүенә, аҙыраҡ майҙы ла ауыҙ итеп ҡуя. Һоросай был төндә лә сысҡан артынан йөрөп үткәрә.

Иртәгеһен Ҡарасай түшәккә менеп ята ла мырылдап йоҡлап китә. Һоросай, ғәҙәтенсә, тағы тишек-тошоҡтарҙы һағалап йөрөй.

Бабай әйтә:

— Дөрөҫ, Һоросай эше булырға кәрәк был, — ти.

— Эйе, эйе, — ти әбей, — Ҡарасай бик инсафлы, гел шулай ул.

Шунан бабай менән әбей кәңәш итәләр ҙә Һоросайҙы урманға алып барып олаҡтырырға булалар. Бер көн бабай уны тоҡҡа һалып алып китә лә ҡараңғы урманда ҡалдырып ҡайта.

Һоросай, яңғыҙы ҡалғас, ҡайҙа барырға белмәй, бер аҙ аптырап йөрөгән, ти. Ул арала ҡараңғы ла төшөп китә, бүреләр ҙә олой, өкөләр ухылдаша башлаған, ти. Һоросай шөрләп тә ҡуя икән. Шул саҡ, йүгереп килеп, ағас башына менеп, үҙенсә тауыш сығарып, мыяулап ултыра башланы, ти, был.

Урмандағы йәнлектәрҙең бесәй мыяулағанын ишеткәне юҡ икән. Былар бөтөнләй аптырашта ҡалған. Килеп һорарға ҡурҡалар. Ни эшләмәк кәрәк? Йыйылышып алалар ҙа кәңәш итәләр:

Айыу әйтә:

— Тәүҙә беҙ уның кем икәнен беләйек, шуның өсөн арабыҙҙан берәүҙе һайлап ебәрәйек.

Бүре әйтә:

— Ундай эшкә Көлтәгойроҡ төлкө бик шәп була торған. Ул барһын.

Төлкө әйтә:

— Юҡ, мин булдыра алмайым: ауырып торам. Унда бына Шешҡолаҡ барырға тейеш.

Шешҡолаҡ ҡуян, бахыр, ҡурҡыуынан шөрләп үк ебәрҙе, ти. Шулай ҙа ни эшләһен инде, бармай булдыра алмай. Ни өсөн тиһәң, тегеләр быны тотоп ашарға торалар.

Шешҡолаҡ ҡалтырана-ҡалтырана ғына Һоросай ултырған ағас төбөнә килеп өндәште, ти:

— Әйтегеҙсе, һеҙ кем булаһығыҙ?

Һоросай, тегенең ҡурҡҡанын һиҙеп, батырайып китте, ти.

— Минме? Мин бесәй затымын. Исемем Бесәй батыр булыр.

— Ни теләйһең, Бесәй батыр?

— Минме? Миңә сысҡан кәрәк. Сысҡан килтерегеҙ миңә! Сысҡандарҙы ҡырып бөткәс, унан тағы күҙ күрер!..

Шешҡолаҡ ҡуян ҡайтып, тегеләргә хәбәрҙе һала. Урмандағы барлыҡ йәнлектәрҙе йыйып, бесәй батыр өсөн сысҡан тоторға сығып китәләр. Эй йөрөйҙәр, ти, былар урманды ҡыҙырып, эй йөрөйҙәр, ти, тик береһе лә сысҡан таба алмай, ти.

Кисен тағы айыу янына йыйылалар. Ни эшләргә кәңәш итәләр.

Төлкө әйтә:

— Бөгөнгә беҙ бына Шешҡолаҡ ҡуянбикәне балалары менән биреп торайыҡ. Ә иртәгә тағы күҙ күрер, — ти.

Бүре Төлкөгә әйтә:

— Иртәгә сират һиңә була.

— Юҡ, минең ҡойроҡ бик ҙур бит, иртәгә һин барырһың.

Айыу әйтә:

— Юҡ, йәмәғәт, былай ярамай. Былай барһа, ул

беҙҙе берәм-берәм ашап бөтөрөр, беҙ уны саҡырып һыйлап ҡарайыҡ...

Шунан былар бесәй батырҙы саҡырып һыйламаҡ булалар. Һәр ҡайһыһы үҙенсә әҙерләнә: айыу бал килтерә, бүре һарыҡ ите килтерә, Көлтәгойроҡ төлкө тауыҡ ите килтерә, Шешҡолаҡ ҡуян усаҡ ҡайрыһы алып килә. Һый әҙер булғас, Һоросайҙы саҡырырға әлеге Шешҡолаҡ ҡуянды ебәрәләр.

Шешҡолаҡ ҡуян Һоросай янына килеп, ҡурҡа-ҡурҡа ғына өндәшә:

— Мин һеҙҙе, Бесәй батыр, ҡунаҡҡа саҡырып килгәйнем.

Һоросай ҙа сер бирмәй: сысҡан таба алмай асыҡҡан булыуына ҡарамаҫтан, ойоп ҡына ултырған була. Шешҡолаҡтың ҡурҡҡанын күргәс, ул тағы батырайып китә.

— Ярар, барһам барырмын, — тигән була был. Үҙе, Шешҡолаҡ ҡуян ҡайтып киткәс тә, тегенең артынан бара.

Һоросайҙың килергә риза булғанын ишеткәс, тегеләр тағы ҡурҡып китәләр. Кем ҡаршы алырға тейеш? Кәңәш итәләр.

Төлкө әйтә:

— Шешҡолаҡ ҡуянбикә уны белә инде, ул ҡаршы алһын.

Бүре әйтә:

— Дөрөҫ, бик дөрөҫ, Шешҡолаҡ ҡуянбикә ҡаршы алһын.

Айыу әйтә:

— Һеҙ риза булғас, мин дә ҡаршы түгел. Улайһа, һин, Шешҡолаҡ, кәҙерле ҡунағыбыҙҙы ҡаршы ал. Ә беҙ өйҙә көтөп торорбоҙ.

Шунан айыу үҙе ағас башына менеп китә. Бүре шул ағас төбөндәге ялғаш аҫтына кереп ята. Көлтәгойроҡ төлкө сытыр аҫтына инеп китә. Шешҡолаҡ ҡуянбикә генә тороп ҡала. Тегеләр киткәс, был да ҡурҡышынан үлә яҙып, бер түңгәк артына йәшеренә.

Бына бер саҡ, эре генә атлап, Һоросай килә. Килә был, бер-ике атлай ҙа мыраулап ҡуйған була. Үҙе тирә-яҡҡа ҡарап ала. Килеп етә лә әйтә:

— Мырам, мырамм! Бөтәгеҙҙе лә ҡырам! Ҡайҙа бында хужалар?

Яуап юҡ. Ни өсөн тиһәң, тегеләр барыһы ла шөрләп боҫоп бөтәләр. Һоросай эште һиҙеп ала ла тағы ла нығыраҡ итеп мыраулай башлай:

— Мырам, мырамм! Бөтәгеҙҙе лә ҡырам!

Үҙе шул саҡ килеп, тегеләр әҙерләгән һыйҙы тәмләп ҡарай. Ҡараһа — бал да һарыҡ ите, тауыҡ ите лә уҫаҡ ҡайырыһы... Был тағы мыраулап ҡысҡыра:

— Ни эшләп миңә сысҡан әҙерләмәнегеҙ? Мырам, мырам, барығыҙҙы ла ҡырам!

Тегеләр уның һайын ҡурҡышалар. «Инде ни хәл итәйек», — тип ятҡанда ғына, Һоросай түңгәк артында бер нәмә һелкенгәнен күреп ҡала. Ул быны сысҡан тип уйлай. Әлегәсә мыраулап, тегегә табан бара башлай.

— Әһә, эләктеңме?! — ти Һоросай. — Мин һине күпме ваҡыт эҙләп йөрөйөм!

Быны ишеткәс, түңгәк артындағы Шешҡолаҡ ҡуян бөтөнләй һуштан яҙа. Һоросай инде килеп эләктерҙем тигәндә генә, көс-хәл менән атылып, сытыр өҫтөнә менеп китә. Һоросай аптырай, ҡараһа: сытыр аҫтында ла бер нәмә һелкенеп ята. Был тағы мыраулай башлай:

— Әһә, ҡаптыңмы? — ти был. — Юҡ, минән ҡасып ҡотола алмаҫһың!

Һоросай килеп, Көлтәғойроҡ төлкөнөң сытыр аҫтынан күренеп ятҡан ҡойроғон эләктереп ала. Шунан Көлтәғойроҡ төлкө, ҡурҡышынан сытыр аҫтынан сығып, йән-фарманға сабып, урман эсенә инеп юғала. Был хәлгә Һоросай, үҙе лә бик ҡурҡып, тиҙ генә яҡындағы ағас башына менеп китә.

Теге айыу шул ағастың башында ултыра икән. Ҡапыл Һоросайҙың менеп килеүен күргәс, был, ҡурҡып, ултырған еренән йығылып төшә. Шул ағастың төбөндәге ялғашҡа килеп төшә. Ә ялғаш аҫтында бүре ята. Ул да

ҡурҡып китә. «Был Һоросай тигәне тегеләрҙе ашап бөткән икән дә миңә тотонорға булған икән», — тип уйлай. Тиҙ генә ялғаш аҫтынан сығып ҡаса.

Шулай итеп, тегеләр бөтәһе лә, ҡурҡып, ҡасып бөтәләр. Һоросай бер үҙе тороп ҡала.

Ҡалыуында ни файҙа бар инде, әҙерләгән һый ашарлыҡ булмағас! Һоросай ҡарап тора-тора ла ағас башына менеп ултыра.

Кискә табан былЛ йәнлектәр тағы шул ергә йыйылышалар. Шешҡолаҡ әйтә:

— Ҡолағымдан тотоп сытыр өҫтөнә ташланы, кем, йәнем ус төбөндә генә ҡалды, — ти.

Көлтәгойроҡ төлкө:

— Ә минең ҡойроғомдан тотоп алып ырғытты, үләм икән тип торам, — ти.

Айыу:

— Мин менгән ағасты килеп һелкетә башланы, кем, тәгәрәп төштөм дә киттем, — ти.

Бүре:

— Ялғаш аҫтында ятам, әй, теге бер ваҡыт килеп баҫты, көскә сығып ҡотолдом! — ти.

Ярай, былар шулай һөйләшә торһон, Һоросай ағас башында ҡайғырып ултыра торһон, беҙ киләйек ауылға, инәйек әбей менән бабайға.

Бабай Һоросайҙы урманда ҡалдырып ҡайта ла:

— Инде тынысландыҡ, зыян итеүсе булмаҫ, — ти.

Әбей ҙә бик һөйөнә:

— Шулай ғына булһын инде, — ти.

Бер кис ҡуналар былар, ике кис ҡуналар. Ҡараһалар — әбейҙең һаман һөтөн дә эсәләр, ҡаймағын да ашайҙар. Етмәһә тағы, тотоусы булмағас, сысҡандар ҙа күбәйеп китә. Бының Ҡарасай эше икәнен инде хәҙер былар төшөнәләр. Бахыр Һоросайҙы йәлләп алалар. Инде ни аҡыл итергә? Хәҙер бабай Ҡарасайҙы тоҡҡа һалып, әлеге урманға алып китә.

Урманға килә был, бер аҙ ҡарап йөрөй ҙә бер ерҙә туҡтап, тоғоноң ауыҙын сисә башлай. Сисеп тә өлгөрмәй, әлеге Ҡарасай тырнаша ла башлай.

— Әһә, һин әле шулай уҫаллашырға уйлайһыңмы, яуыз? — ти бабай. — Улай булһа, мин һине тоҡтан сығармайым.

Шул көйө тоҡтоң ауыҙын ҡабат бәйләй ҙә ҡарағайға аҫып ҡуя, үҙе ҡайтып китә.

Ҡайта-ҡайта, был бер илаған тауыш ишетеп ҡала. Абайлабыраҡ ҡараһа — тауыш бесәй балаһыныҡына оҡшаған, үҙе яҡында ғына һымаҡ. Бабай шул яҡҡа китә. Китә-китә, бер ҡарама төбөнә килеп сыға. Ҡараһа — ҡарама башында әлеге Һоросай ултыра. Ҡарт тегене күтәреп ала ла бик ҡәҙерләп ҡуйынына тығып, өйөнә алып ҡайтып китә.

Ҡарағай ботағына аҫып ҡуйған Ҡарасай тоҡ эсендә бер аҙ ята ла сығырға тырышып сәбәләнә башлай. Сығырға әмәл таба алмағас, был ҡаты итеп мырылдап ала, улай ҙа булмағас, яман итеп ҡысҡырырға тотона.

Урмандағы йәнлектәр тағы ҡурҡышып китәләр. Йыйылып, тағы кәңәш итәләр.

Айыу әйтә:

— Булмаһа, бүре дуҫ, берәйегеҙ барып килегеҙ әле. Тағы нимә һорай икән?

Бүре әйтә:

— Бик дөрөҫ әйтәһең, айыу ағай, барып килергә кәрәк. Был юлы бына Көлтәғойроҡ төлкө барһа, һәйбәт булыр.

Төлкө әйтә:

— Эйе, эйе, мин дә ҡушылам. Икегеҙ ҙә бик дөрөҫ әйтәһегеҙ, барырға кәрәк, барырға кәрәк. Инде Шешҡолаҡ ҡуянбикә — бер өйрәнгән йәнлек, ул барһа, һәйбәтерәк булыр.

Айыу әйтә:

— Бик дөрөҫ әйтәһегеҙ. Һин, Шешҡолаҡ, бар, тағы барып, ҡарап кил әле. Нимә эшләй икән ул бесәй тигәндәре, тағы нимә һорай икән, белеп кил.

Шунан Шешҡолаҡ ҡуян, ҡурҡышынан илай-илай, тағы китә. Түңгәктән түңгәккә, түмәрҙән түмәргә ышыҡлана-ышыҡлана ғына, Ҡарасай аҫылынып

торған ҡарағай төбөнә килә. Килһә, ни күҙе менән күрһен: ҙур ҡарағай, ҡарағай башында ҙур ботаҡ, ботаҡҡа бер тоҡ эленгән, тоҡ эсендә әлеге бесәй ҡысҡыра. Шешҡолаҡ башта аптырап ҡала, шунан, эштең ниҙә икәнен төшөнөп алғас, шатлығынан һикерә-һикерә, тегеләр янына ҡайтып китә. Ҡайта ла әйтә:

— Ҡурҡмағыҙ, иптәштәр, теге яуыз бесәйҙе бераҡ килеп тоҡҡа һалып, бикләп киткән!

Айыу ҙа, бүре лә, Көлтәгойроҡ төлкө лә был хәбәргә бик һөйөнәләр. Шешҡолаҡ ҡуян артынан эйәреп, әлеге ҡарағай янына киләләр.

Былар килгәс, тоҡ эсендәге Ҡарасай оторо ҡысҡырып ебәрә. Күпме ҡысҡырһаң да, тоҡ эсендә ятып ни эш ҡыраһың инде! Был да шул, хәле бөтөп, тына...

Тегенең тоҡ эсендә икәнен күреп ышанғас, Айыу әйтә:

— Туҡтағыҙ әле, булмаһа, мин ҡарағай башына менәйем. Менәйем дә был яуызды алып төшәйем.

Айыу шатырлап ҡарағай башына менеп китә. Теге тоҡ эленгән ботаҡҡа етә. Шул ботаҡ буйлап тоҡҡа табан килә башлай был. Килә ята, килә ята, инде килеп тоттом тигәндә генә, ботаҡ һынып китә лә, айыу дөрҫөлдәп барып төшә бер яҡҡа, тоҡ эсендәге бесәй — икенсе яҡҡа.

Бүре лә, Көлтәгойроҡ төлкө лә, Шешҡолаҡ ҡуян да ҡурҡып урман эсенә ташлана. Айыу асыуланып ҡысҡыра, ти:

— Ә һин шулай тоҡ менән башҡа һуғаһың икән әле, — тип әйтә, ти, — үҙең тоҡ эсендә ятҡаныңды белмәйһең! Яуыз!

Шунан айыу, асыуланып, тоҡ янына килеп, Ҡарасайҙы туҡмай башлай, ти. Эй туҡмай, ти, был, эй туҡмай, ти, Ҡарасай уның һайын аҡыра, ти. Тауышҡа тегеләр ҙә килеп еттеләр, ти. Ҡыҙып алып, улар ҙа Ҡарасайҙы туҡмарға керешеп киттеләр, ти. Бүре килеп тоҡто сәйнәп-сәйнәп ҡуя, ти. Көлтәгойроҡ төлкө килеп тырнап-тырнап ала, ти. Хатта инде Шешҡолаҡ ҡуян да килеп тоҡто типкеләп китә, ти.

Былар шулай туҡмай торғас, тоҡ эсендәге Ҡарасай тына. Тоҡто сисеп ебәрһәләр, эсенән үлгән ҡара бесәй килеп сыға. Былап аптырап ҡалалар.

Шешҡолаҡ ҡуян әйтә:

— Үлеүен үлгән дә инде, ул хәтле туҡмағас, үлмәй сыҙамаç. Тик бына ни эшләп һоро бесәй ҡараға әйләнде икән һуң?

Айыу әйтә:

— Мин бик ҡаты туҡманым шул. Мин ҡул тейгән ер ҡара янып китә ул.

Бүре әйтә:

— Юҡ, мин бик ҡаты сәйнәнем, мин сәйнәгән ергә ҡап-ҡара ҡан һауа ла ҡуя торған.

Көлтәгойроҡ төлкө әйтә:

— Юҡ, мин бик ҡаты тырнаным уны. Мин тырнаған ер ҡараймай ҡалмай.

Шешҡолаҡ ҡуян әйтә:

— Мин һуң, мин типкеләп ташланым бит уны. Бынау табан менән типкеләүгә ни сыҙамаҡ кәрәк, ҡарайыу түгел, ағарырһың!

Шулай итеп, урмандағы йәнлектәр бесәй тигән ят йәнлектән ҡотолалар. Шунан урман тынып ҡалған, ти.

Ә Һоросай, өйгә ҡайтып, бабай менән әбейгә бик оҙаҡ хеҙмәт иткән, ти.

## ШАЯН БЕСӘЙ

Борон бер ҡарт менән бер ҡарсыҡ йәшәгән. Уларҙың шаян ҡара бесәйе булған. Ҡарсыҡ бесәйҙе бик яратҡан, тик ҡартлығы етеп, үлеп киткән. Ҡарсыҡ үлгәндән һуң, бесәйҙе ашатыр-эсерер кеше булмаған.

Шуға ул үҙенә-үҙе аҙыҡ тапҡан. Күршеләрҙең мөгәрәптәренә, келәттәренә төшөп, май, ҡаймаҡтарын ашай, һөттәрен эсә башлаған.

Берҙән-бер ваҡыт күрше ҡатыны шаян бесәйҙе, һөтөн эсеп ятҡанерендә тотоп алып, картҡа илткән.

— Бына, бабай, бесәйең! — тигән ул. — Теләһәң генә ни эшләт үҙен, тик ул ҡабат минең күҙемә күренмәһен. Ҡара һин уны, нисек урлашырға өйрәнеп алған хәҙер һинең шаян бесәйең!

Күрше ҡатындың был һүҙҙәрен ишеткәс, ҡарт бесәйҙе, тоҡҡа һалып алып, урманға илтеп ташлаған.

Шулай меҫкен бесәй урманда йәшәй башлаған. Бына ул, һырт йөндәрен тырпайтып, яҡ-яғына ҡарана-ҡарана бара ла бара. Үҙе мыяулай, күҙҙәре йәп-йәшел булып яна. Шулай бара торғас, бесәйгә бер ҡуян осрай.

— Бесәй, ҡайҙа бараһың? — тип һорай Ҡуян.

— Урмандағы бөтә йәнлектәрҙе ашарға барам! — тип яуап ҡайтара Бесәй.

Ҡуян, ҡото осоп, йән-фарман сабып китә. Бер аҙ сапҡас, Ҡуян Төлкөгә тап була.

— Һиңә ни булды, дуҫҡайым? Ниҙән өрктөң? — тип һорай Төлкө. — Ҡайҙа ҡасаһың, ҡупшы Ҡуян?

— Ана, тегендә бер Бесәй йөрөй. «Урмандағы бөтә йәнлектәрҙе тотоп ашайым», ти. Шунан ҡасып барам, — ти Ҡуян.

Төлкө лә шөрләй төшкән. Ҡуян менән икәүләп ары сабып китәләр. Быларға бүре осрай.

— Ҡайҙа ҡасаһығыҙ, дуҫҡайҙар?

— Ана, тегендә бер Бесәй йөрөй. Урмандағы бөтә йәнлектәрҙе ашап бөтөрәм, ти.

Бүре лә ҡурҡҡан. Өсәүләп ары ҡасалар. Ҡаршыға айыу килеп сыға.

— Аҡ-ҡараны күрмәй, ҡайҙа былай ҡабаланып бараһығыҙ, дуҫҡайҙарым?

Ҡуян, Төлкө, Бүре бер тауыштан:

— Ҡайҙа барғаныбыҙҙы үҙебеҙ ҙә белмәйбеҙ. Беҙгә тик уҫал Бесәйҙән генә ҡасып ҡотолорға кәрәк, — тиҙәр.

— Улай булғас, мин дә һеҙҙең менән ҡасам, — ти Айыу.

Дүртәүләп китәләр. Арып бөтәләр. Туҡтап, ағас күләгәһендә ял итергә була былар.

— Ит бешереп, бесәйҙе ҡунаҡҡа саҡырабыҙмы әллә? — ти Айыу.

Бөтәһе лә быға риза була. Айыу ит табып килтерергә, Бүре — һыуға, Төлкө утынға китә, ә Ҡуян бесәйҙе саҡырып килергә тейеш була.

Бер аҙ ваҡыт үтеүгә, Айыу бер үгеҙҙе һөйрәп килтерә, Бүре — һыу, Төлкө утын килтергән. Ит бешеп тә сыға, ә Ҡуян менән Бесәй һаман юҡ та юҡ.

Төлкө, Бүре, Айыу ҡурҡыуға төшәләр: «Күрәһең, Бесәй Ҡуянды ашағандыр. Хәҙер ул беҙҙең башыбыҙға етергә әҙерләнәлер», — тигән уйға киләләр. Ҡайҙа етте шунда ҡасып-боҫоп бөтәләр былар.

Айыу ағас башына менеп киткән, бүре, ҡыуаҡ төбөндә соҡор ҡаҙып, шунда төшкән дә, ҡойолған япраҡтар менән өҫтөн ҡаплаған булған, ә төлкө сытыр өйөмө аҫтына йәшенгән.

Ошо арала ҡуян, ҡурҡыуынан ҡалтыранып, бесәйгә яҡын бара алмай торған да торған бер ерҙә ҡатып. Тора торғас, көс-хәлгә:

— Әй! Батыр Мыраубай!.. — тип кенә әйтә алған. Бесәй, был тауышты ишетеү менән, йәшел күҙҙәрен ҡуянға текләгән дә туп-тура уға ҡарай йүгергән. Шунда ҡуян йөрәге ярылып үлгән дә ҡуйған.

Бесәй ары киткән. Бара торғас, тәмле ит еҫен һиҙә был. Әлеге айыу, бүре, төлкө ит бешергән ергә барып сыға. Ҡомһоҙланып ашарға ла тотона. Ҡарт үгеҙҙеке булғанға ит бик ҡаты икән. Бесәй, уның ҡаты булыуына асыуланып, мырылдай-мырылдай ашай икән. Быны ишетеп торған төлкө, яҡшыраҡ йәшенергә булып, ҡуҙғалғандай иткән. Бесәй, сытырҙар шытырлауын ишеткәс, моғайын, был сысҡандыр тип, өйөм өҫтөнә ташлана. Төлкө, уҫал бесәй үҙемде өҙгөләп ташларға булды тип, сытыр аҫтынан ырғып сыға ла йән-фарман ҡасып китә.

Бесәй, бынан ҡото осоп, ситкә һикергән — бүре ятҡан соҡорға барып төшкән. Бүре, бөттө баш тип, ятҡан еренән сығып ҡасҡанын үҙе лә һиҙмәй ҡалған.

Бесәй, бүренән ҡото осоп, ағас башына үрмәләп менеп китә. Унда айыу йәшенеп ултыра икән. Бесәйҙе күреү менән иҫе-һушы киткән айыу гөрһөлдәп ергә ҡолап төшә.

Ергә төшөргә хәүефләнеп, бесәй шул ағас башында өс көн, өс төн ултырған, ти. Шунан һуң ғына урман ҡыҙырып йөрөй башлаған, ти.

## ИШӘК, ЭТ, БЕСӘЙ, ӘТӘС

Борон бер ҡарттың ишәге булған. Ишәк ҡартайғас, ҡарт уны ҡыуып сығарып ебәргән. Ишәк китеп бара, китеп бара, китеп барғанда, бер сүплек башында Эт ята, ти.

— Ишәк ағай, ҡайҙа бараһың?

— Шәһәргә артислыҡҡа китеп барам.

— Берәүҙән икәү яҡшы, мине лә эйәрт?

— Әйҙә! Ниндәй һөнәрең бар?

— Мин матур итеп өрә беләм.

Киттеләр, ти, былар. Бара торғас, бер Бесәй осраны, ти.

— Ҡайҙа бараһығыҙ?

— Шәһәргә артислыҡҡа китеп барабыҙ.

— Мине лә эйәртегеҙ.

— Әйҙә! Ниндәй һөнәрең бар?

— Мин бик шәп итеп мыяулай беләм.

Өсәүләп киткәндәр былар. Бер ауылға еткәндәр. Бер әтәс ҡыйыҡтан ҡыйыҡҡа һикереп ҡысҡыра, ти.

— Шул ҡәҙәре тауышың менән ни эшләп һин ҡыйыҡтан ҡыйыҡҡа һикереп йөрөйһөң, ғүмер әрәм итәһең, әйҙә, беҙҙең менән артислыҡҡа! — тиҙәр икән былар.

Әтәс тә ҡыйыҡтан осоп төшкән дә быларға ҡушылған.

Хәҙер дүртәүләп киткәндәр. Бер ҡара урманға барып еткәндәр. Эңер төшкән. Әтәс шыршы башына менеп төнәмәк булған. Шыршы башына менһә, урмандың тап уртаһында бер өй ултыра икән, шуны күргән был.

— Ана, урман эсендә өй бар, әйҙәгеҙ, шунда барайыҡ! — тигән Әтәс.

Өйгә барһалар, унда ҡараҡтар йәшәй икән. Әтәс өй ҡырындағы ағас башына менеп киткән дә бар көсөнә:

— Кики-рикү-ү-к! — тип ҡысҡырып ебәргән. Бесәй ҙә шул уҡ ағас ботағына менеп, мыяуларға тотонған. Аҫта эт өрә, ишәк баҡыра икән. Ҡараҡтар ҡурҡып, ҡасып бөткәндәр. Ишәк, эт, бесәй, әтәс өйгә инеп, мейестә бешеп ултырған ашты ашап алғандар ҙа йоҡларға ятҡандар. Әтәс урҙаға менгән, бесәй мейес эсенә кергән, эт ишек төбөндә, ишәк тышҡа сығып, тиреҫ башына ятҡан.

Өйһөҙ ҡалған ҡараҡтар ни эшләргә белмәй урманда йөрөгәндәр-йөрөгәндәр ҙә, кәңәш тотоп алғас, өйҙәренә кире ҡайтмаҡ булғандар. Иң батыр ҡараҡты өйгә индереп ебәргәндәр. Ҡараҡ өйгә инһә, өйҙә бер кем дә юҡ. Ҡараҡ мейесте асып ҡараған. Ҡараһа, бесәйҙең күҙе баҙлап ҡына ята, ти. Ҡараҡ быны ҡуҙ икән тип алмаҡ булһа, бесәй тегенең ҡулын тырнаған да алған. Сығып ҡасайым тип, ишек тупһаһы эргәһенә барһа, эт ботон тешләп алған. Инде ҡотолдом, тиреҫкә баҫып, ҡойма аша һикереп сығайым тиһә, ишәктең өҫтөнә барып менгән. Ишәк ҡараҡты тибеп осорған. Әтәс, уянып китеп, төн уртаһында:

— Ки-ки-ри-кү-ү-ү-к... — тип һөрән һалған.

Ҡараҡ, ах та ох булып, иптәштәре эргәһенә көсхәл менән барып етеп йығылған. Иптәштәре ҡурҡып киткәндәр.

— Ни эшләнеләр? — тип һорайҙар икән.

— Мейестәге ашты ҡарайым тиһәм, бәкеһе менән сәнсте, ишек төбөндә берәүһе аяҡҡа балта менән сапты. Тышҡа сыҡҡайным, күҫәк менән тондорҙолар. Етмәһә, иң уҫалы: «Килтер бында, килтер бында!» — тип ҡысҡыра, тип, ҡараҡ башынан үткәндәрен һөйләп бирҙе, ти. Ҡараҡтар:

— Әйҙәгеҙ, был ерҙән ысҡынайыҡ, башыбыҙға етерҙәр, — тинеләр ҙә ҡуйыраҡ урман эҙләп киттеләр, ти.

Ишәк, эт, бесәй, әтәс ҡараҡтар өйөндә донъя көтөп ҡалдылар, ти. Әле һаман шунда йәшәп яталар, ти.

## ӘТӘС БАТЫР

Борон-борон заманда Улаҡлы йылғаһы буйында йәшәгән, ти, бер ҡарт менән ҡарсыҡ. Ҡарты ғүмер буйына эшләп тир түккән, бил бөккән, ә ҡарсығы байбикәләргә йөн теткән, кейем теккән. Икеһе лә сәләмәтлектәрен юғалта башлағас, бай уларҙы йортонан ҡыуып сығарған. Шунан былар бер ауылдың осонда, йылға буйында, ярҙы соҡоп, землянка эшләп ингәндәр. Ауылдың бер мәрхәмәтле кешеһе әбей менән бабайға бер тауыҡ менән әтәс бүләк иткән. Шулай итеп, улар дүртәү йәшәй башлағандар.

Берҙән-бер көндә, яҙ булғас, ҡарт үҙенең төйөнсөгөн биштәрләп, хәйер һорашырға сығып киткән, ҡарсығы өйҙә тороп ҡалған, тауыҡ менән әтәсте ашатып сығарған да үҙе өйҙәге эшенә керешкән. Әтәс менән тауыҡ яр башында, сүплек баштарында, ем эҙләп, тибенеп йөрөгән. Бер ни тиклем ваҡыт үткәс, тауыҡ, ҡыт-ҡытаҡ, ҡытайыҡ,

ҡыт-ҡытаҡ, тип, йомортҡа һалырға инеп киткән, ә этәс ем эҙләп тороп ҡалған.

Этәс, сүплек башында тибенеп йөрөй торғас, һабы һынған ҙур ғына ағас ҡалаҡ башын ҡаҙып сығарып, ярға табан тибеп ебәргән. Ҡалаҡ башы, ярҙан тәгәрәп китеп, һыуға барып төшә. Этәс был икмәк ҡатыһылыр, тауыҡ йомортҡа һалып сыҡҡас, бергә ашарбыҙ тип, ярҙан осоп барып, һыу өҫтөндәге ҡалаҡ башына барып ҡуна. Ҡалаҡ башы, этәстең ҡапыл килеп ҡуныуынан ҡуҙғалып, һыу уртаһына йөҙөп китә. Этәс хәҙер төшөп ярға сыға алмай. «Ни булһа ла булыр, ҡасан да булһа, һыу мине ярға табан яҡынайтыр, шунда осоп сығырмын әле» тигән уй менән киткәндән-китә бара, ти. Етмәһә, ҡуҡырая биреп: «Ки-ки-ри-күк! Бына ҡайҙа китте кәкре ҡойроҡ! Минең менән кем бара? Әйҙәгеҙ, һикерегеҙ!» — тип ҡысҡырған була, ти.

Яр буйында йөрөгән ата ҡаҙға етә ҡалды, ти, этәстең был саҡырыуы, ул да барып ултырҙы, ти, ҡалаҡ башына. Этәс менән ата ҡаҙ йөҙөп китеп баралар, ти. Этәс ата ҡаҙҙы ишкәксе итте, ти. Бер ни тиклем ер киткәс, бер кәзә тәкәһен күрәләр. Ул яр буйына һыу эсергә килгән икән. Кәзә тәкәһе:

— Мә-ә-ә, этәс ағай, ҡайҙа бараһығыҙ? — тип баҡыра, ти.

— Әйҙә беҙҙең менән барабыҙ, — ти Этәс.

Кәзә тәкәһе риза була. Ҡалаҡ башына ултырып алғас:

— Мә-ә-ә, мин тәкә, мә-кә-кә-кә, мин тәкә, тәкә, бында барыу бик мәрәкә, — тип, үҙенең кем икәнлеген әйтә.

Ата ҡаҙ уға яуап итеп:

— Ҡыйғаҡ, ҡыйғаҡ, ҡа-ҡа-ҡа, ға-ға-ға. Мин һиңә аға-ға! Этәс аға беҙҙе баға-ға! — тигән булып, үҙе менән дә, этәс менән дә таныштырып ала. Этәс ата ҡаҙ таныштырыуына ҡәнәғәтләнмәй:

— Ки-кири-күк! Мин кәкре ҡойроҡ! — тип ҡысҡырып ебәрә.

Яр буйында бер ҙур үгеҙ был өсәүҙең йөҙөп барғанын күрә лә:

— Әтәс ағай, мине лә үҙегеҙ менән алмаҫһығыҙмы? Һеҙгә минең кәрәгем булыр, — тип, инәлеп баҡыра башлай.

Әтәс:

— Ки-кири-күк! Һин кәрәк, кәрәк keүек! — тип ҡысҡыра.

Ишкәксе ата ҡаҙ ҡалаҡ башын үгеҙ торған яр буйына килтереп туҡтата. Үгеҙ инеп баҫа. Бер ни тиклем ер киткәс, яр ҡарлуғастарын һағалап тороп, тотоп ашарға килгән бесәй, быларҙы күреп ҡалып:

— Әтәс ағай, ҡайҙа бараһығыҙ! Мине лә үҙегеҙ менән алып китегеҙ әле, — тип ҡысҡыра.

Киң күңелле әтәс, әлбиттә, ҡаршы килмәй, алып китергә риза була. Бесәй ҙә ултыра.

Әтәс ҡалаҡ башының иң осонда, ата ҡаҙ ҡалаҡкәмәне алып бара, үгеҙ ҡойроҡсо, кәмәнең ҡойроғон ҡайҙа борорға кәрәк булһа, шулай бороп бара. Бесәй менән кәзә тәкәһе уртаға ултырғандар ҙа, тирә-яҡтағы бөтә нәмәгә ҡарап, һоҡланып баралар, ти.

Шулай бара торғас, былар бик күп ер киттеләр, урмандар, тауҙар, һыуҙар үттеләр, ти. Быларҙың бик ашағылары килә башланы, ти. Ҡалаҡ-кәмәне урман тәңгәленә килтереп туҡтатып, яр буйына бәйләп ҡуялар ҙа, урманға инеп, һәр кем үҙ тамағын туйҙыра башлай. Төндө ошо урында үткәрмәк булалар. Әтәс ағас башына менеп төнәй, ә ҡалғандары ерҙә ҡунырға ҡалалар. Төн урталары уҙғас, Әтәс:

— Ки-ки-рикүк! Торорға ваҡыт! — тип, урман яңғыратып ебәрә. Әтәстең был тауышын төлкө ишетеп ҡала, үҙенең төнгө табышына шатланып, был яҡҡа килә башлай. Ләкин ул килеп етеү менән эш бөтөнләй башҡаса булып сыға: әтәс ағас башында бик бейектә ултыра, ә ата ҡаҙ үгеҙ менән тәкәнең уртаһында тора, һис кенә лә алырлыҡ түгел. Шуға күрә төлкө был үгеҙ менән тәкә тирәһенә яҡын килергә лә ҡурҡа. Кире китә. Урмандағы бөтә йәнлектәрҙе йыйып килтереп, үгеҙ менән тәкәнән уларға өлөш сығарырға, ә үҙе әтәс менән ата ҡаҙҙы ашарға уйлай.

Төлкөнөң мәкерле уйын һиҙеп, Әтәс ағас башынан төшөп, иптәштәренә:

— Бына нимә, дуҫтар! Мин был Төлкөнө бик яҡшы беләм. Ул үҙ ғүмерендә бик күп ҡош-ҡортто ҡыйратты. Мин быны үҙемә ҡурҡыныс булғаны өсөн генә әйтмәйем. Хәҙер беҙҙең бөтәбеҙ өсөн дә үлем ҡурҡынысы тора. Бесәй, һин барып кәмәне рәтләй тор, беҙ хәҙер барып етербеҙ, — ти.

Былар юлға ҡуҙғалырға торғанда ғына, Бесәй хәле бөтөп сабып килеп етә лә:

— Әтәс ағай! Әтәс ағай! Эш харап! Мин барып етер саҡта ғына әлеге Төлкө ҡалаҡ-кәмәне бәйенән ысҡындырып, ағыҙып ебәрҙе. Ә үҙе, шарҡылдап көлә-көлә, урман араһына инеп юғалды, — ти.

— Әтәс ағай, — ти Ата ҡаҙ, — мин бит бик яҡшы йөҙәм, булмаһа, барып туҡтатайым, ә һеҙ яр буйына бара тороғоҙ. Мин кәмәне ярға сығарғас, ултырып китербеҙ.

— Юҡ, — ти Әтәс, — бындай ҡараңғы төндә ағып барған ҡалаҡ башын таба ла алмаҫһың. Бесәй менән мин ағас башына менә алабыҙ, ә бит Үгеҙ менән Тәкә бер нисек тә ҡотола алмаясаҡ.

Ни булһа ла бергә булайыҡ, ҡурҡынысты бергә еңәйек. Хәҙер беҙ өй ҡорайыҡ тигән уйға киләләр былар. Үгеҙ шунда уҡ, эре-эре ағастарҙы һөҙөп йығып, бүрәнәләр әҙерләй башлай; Бесәй ҡырҡылған бүрәнәләрҙе ҡойроғона тағып ташый; Кәзә тәкәһе бесәй килтергән бүрәнәләрҙән өй бурай башлай; Ата ҡаҙ мүк йолҡа, йолҡҡан мүкте бүрәнә араһына түшәй бара; ә Әтәс яр буйынан таш, балсыҡ ташып, мейес сығара башлай. Бына өй эшләнеп тә бөтә. Әтәс кәштә башына, Ата ҡаҙ һике аҫтына, Бесәй мейес башына, Үгеҙ менән Кәзә тәкәһе һике өҫтөнә һуҙылып төшөп яталар. Рәхәтләнеп йоҡоға киткәс кенә, берәү ишек ҡаға. Бесәй тороп:

— Кем бар унда? — тип һораһа, әлеге Төлкө икән.

— Мин, Төлкө, ас, ас, мин һиңә теймәйем, мин бесәй

итен ашамайым, — тип, йомшаҡ ҡына, юхалап ҡына әйтә, ти.

Бесәй ишекте асмағас, тыштағы йыртҡыс йәнлектәр тәҙрәгә килеп ҡапланалар. Был хәлде күреп торған бесәй үҙенең иптәштәрен уята башлай. Үгеҙ үкерә, Кәзә баҡыра, Ата ҡаҙ ҡаңғылдай, Бесәй мыраулай, Әтәс ҡытҡылдай.

Бындай күмәк тауышты ишетеп, тыштағы төлкө, бүре, айыу шөрләй башлай. Аҙаҡ килеп, улар шым ғына төрлөһө төрлө яҡҡа ҡасып бөтә.

## ҺАРЫБАЙ

Ҡасандыр йәшәгән, ти, бер бабай менән бер әбей. Үҙҙәренең ғүмерендә бала күрмәгәндәр, ти, былар. Һарыбай тигән бер этенән башҡа бер кемдәре лә булмаған. Һарыбай бик яҡшы эт булған. Шуға хужалары уны бик нык яратҡандар. Ләкин ҡарт көндәрендә бабай менән әбейҙең бер балалары булған. Шул көндән алып, Һарыбайҙың ҡәҙере киткән: хужалары уны һанламай, иркәләмәй, һирәк ашата башлағандар. Һарыбай йонсой башлаған.

Берҙән-бер көндө Һарыбай, бабайға эйәреп, урманға барған. Унда үҙенең иҫке дуҫы Бүрене осратҡан.

Бүре унан:

— Һарыбай дуҫ, һиңә ни булды, ябыҡҡанһың, бик бойоҡ күренәһең? — тип һораған.

— Һарыбай:

— Элек мин хужамдың берҙән-бер ҡыуанысы инем, хәҙер бабайҙың улы бар. Шунан һуң миңә көн булмай башланы, — тигән.

— Ҡайғырма, Һарыбай, йәй булғас, һинең хәлең элеккесә булып рәтләнеп китер, бына күр ҙә тор, — тигән Бүре.

Һарыбай уйға ҡалған. Бүренең әйткәненә төшөнмәгән. Шулай ҙа ул йәй етеүен бик көткән.

Бына йәй килеп еткән, ҡыҙыу көндәр башланған. Иген өлгөрөп, ураҡҡа төшкәндәр. Әбей менән бабай, йәш балаларын алып, баҫыуға сыҡҡандар. Бабай менән әбей ураҡ урған, бала арба аҫтында йоҡлаған, ә Һарыбай, әлһерәп, арба күләгәһендә ятҡан.

Уйламағанда теге бүре, ҡасып-боҫоп ҡына, арба янына килгән дә, баланы алып киткән. Бала ҡысҡырған тауышҡа Һарыбай уянып киткән. Шунан ул, абалап өрөп, бүрене баҫтыра башлаған.

Һарыбайҙың өрөүен ишетеп, бабай менән әбей арба янына йүгереп килһәләр, баланың ғәйеп булыуын күргәндәр. Ҡайғыларынан илаша-илаша, Һарыбай артынан киткәндәр.

Һарыбай бүрене ҡыуып етеп, баланы ҡотҡарып алған да арба янына алып ҡайтҡан. Әбей менән бабай бығa бик шатланғандар. Шундай яҡшы этте бығa тиклем аслы-туҡлы тотоп, ябыҡтырып бөткәндәре өсөн бик үкенгәндәр, ти.

## БҮРЕ МЕНӘН КӘЗӘ

Борон-борон заманда ҡалын ҡара урманда йәшәгән, ти, бер ҡомһоҙ ас бүре. Ул бик яуыз булған. Яҡын-тирәләге ауылдарға һис тә тынғы бирмәгән. Йәй көнө булһа, көпә-көндөҙ көтөүгә барып, һарыҡтарҙы күтәреп алып киткән. Ә ҡышын һәр төн һайын

бер аранға төшөп, һарыҡ, кәзәне ҡырған. Уның ҡомһоҙлоғо шул тиклемгә еткән, хатта ул, бер һарыҡты тотоп ашау менән генә ҡәнәғәтләнмәй, арандағы бөтә һарыҡты тамаҡлап сыға торған булған. Ауыл кешеләре, күҫәктәр күтәреп, күп тапҡырҙар уны ҡыуырға сыҡҡандар. Тик һис тә ҡыуып етеп, һуғып үлтерә алмағандар.

Шулай үткән бүренең йәш сағы. Бына ҡартлыҡ килеп еткән. Күҙҙәр ҙә насар күрә, аяҡтар ҙа әкрен йүгерә башлағандар. Шуның менән бергә йөрәктәге элекке ҡыйыулыҡ та юғала барған. Хәҙер инде ул көпә-көндөҙ кәтөүселәр күҙе алдында һарыҡтар күтәреп китеү ғәҙәтен ташлаған. Ауылға ла бик һуң, таң алдында, кешеләрҙең иң ҡаты йоҡоға киткән саҡтарында ғына бара башлаған. Шулай ҙа күп ваҡытта табышһыҙ ҡайтырға мәжбүр булған. Әллә бүре үҙе ҡурҡаҡланған, әллә инде кешеләр уяуланған, уға һис тә һарыҡ ите ашарға тура килмәй башлаған. Аслыҡтан бүренең эсе үткәшкән, күҙҙәре төпкә батҡан, йөндәре ҡойолоп, ялбырап ҡалған. Шулай ҙа ул, элекке ғәҙәтенсә, һәр көн һайын берәр һимеҙ һарыҡ тотоп ашау ниәте менән ауылға барған.

Әбей менән бабай
Ғыр-ғыр йоҡлай,
Яндарында бер бәпес
Һикереп төшөп уйнай.
Арандағы биш кәзә
Мырт-мырт көйшәй.
Һарайҙағы сыбар тай
Сыр-сыр кешнәй.
Соландағы ялбыр көсөк
Ләүек-ләүек өрә.
Биш кәзәнең береһен
Ашарға ине миңә!.. —

тип, йырлай-йырлай барған ул. Тик арандың һалам түбәһен тишеп, эскә төшәм генә тигәндә, биш кәзә бер юлы баҡыра башлаған, сыбар тай кешнәп ебәргән, ялбыр көсөк өрөргә тотонған. Хужа, йоҡоһонан уянып, суҡмар күтәреп, бүрене ҡыуырға сыҡҡан. Ҡартайған, ҡурҡаҡланған ас бүрегә йәһәтерәк урманға ҡасыуҙан башҡа бер ни ҙә ҡалмаған.



Төлкө менән Торна



Төлкө менән Айыу



Ҡарт айыу менән Төлкө



Ас айыу, Төлкө, егет

«Тамаҡ өсөн башыңды һәләк итеп ҡуйыуың бар. Бынан һуң ауылға бармайым, ҡуяндар япраҡ ашап көн күрәләр бит. Мин дә шулай итермен», — тип йыуаткән ул үҙ-үҙен. Тик көн һайын ҡан эсеп өйрәнгән йыртҡыс ҡан эсмәй түҙәме ни? Төн етеү менән бүре тағы, йырлай-йырлай, ауылға китеп барған.

Әбей менән бабай
Ғыр-ғыр йоҡлай,
Яндарында бер бәпес
Һикереп төшөп уйнай.
Арандағы биш кәзә
Мырт-мырт көйшәй.
Һарайҙағы сыбар тай
Сыр-сыр кешнәй.
Соландағы ялбыр көсөк
Ләүек-ләүек өрә.
Биш кәзәнең береһен
Ашарға ине миңә...

Был юлы ла бүре ауылдан ҡыуылып ҡайтҡан.

«Былай астан үлеп, әрәм булыуың мөмкин», — тип уйлай башлаған бүре, ниндәй ҙә булһа берәй йәнлек тотоп ашау уйы менән, урман ҡыҙырып китеп барған. Шул саҡта ул бер бейек тау өҫтөндәге ҡая ташҡа барып менгән. Ә ул ҡая таш өҫтөндәге кескәй генә бер өйҙә үҙенең биш бәрәсе менән бер ҡыр кәзәһе йәшәй икән. Бүре өйгә яҡын бер таш артына барып баҫҡан, кәзә уны күрмәгән. Балаларына ишекте ныҡ бикләп ултырырға, бер кемгә лә асмаҫҡа ҡушҡан да гәҙәтенсә ҡырға, үлән ашап, һөт йыйып ҡайтырға китеп барған.

«Әһә, — тигән ас Бүре, тештәрен шығырлатып, — хәҙер барам да хәйлә менән ишектәрен астырам. Унан һуң инде, рәхәтләнеп, бәрәс иттәре менән һыйланырға ғына ҡала...»

Кәзә китеп, бер аҙ ваҡыт үткәс, ул өй янына килгән, ишекте бик ҡаты шаҡылдатып, ҡалын, йәмһеҙ тауыш менән ҡысҡырған:

— Балаҡайҙарым, ишек асығыҙ, мин ҡайттым!..

— Беҙҙең әсәй улай һөйләшмәй, — тигәндәр Бәрәстәр. Ишекте асмағандар. Бүре аптырап ҡалған.



3 Заказ 376

«Нисек һөйләшә икән һуң ул?»

Ул ишекте астырыуға берәй хәйлә уйлап сығарыр өсөн, тағы баяғы таш артына барып ятҡан. Бер аҙҙан һуң һикереп торған да тағы өй янына килгән. Килгән дә, ишекте әкрен генә шаҡылдатып, нәҙек кенә тауыш менән:

— Балаҡайҙарым, ишекте асығыҙ, мин ҡайттым!..

— Беҙҙең әсәй улай һөйләшмәй, — тигәндәр Бәрәстәр. Ишекте асмағандар.

Бүре тағы ла нығыраҡ аптырап ҡалған. «Яңы хәйлә табып булмаҫмы икән?» — тип уйлана-уйлана, тағы шул таш артына барып ауған. Ноҡот башын ватып, төрлө хәйләләр уйлап ята торғас, Бүре, тағы ниҙер иҫенә төшөп, ҡыуаныстан олоп ебәргән.

«Инде минең тештәрҙән һеҙгә ҡотолоу юҡ», — тигән дә ул, өйҙөң ишек төбөнә еткәс, бик килештерергә тырышып, бер-ике тапҡыр кәзә булып мыҡырлап ебәргән.

— Бә-ә-ә! Бә-ә-ә!.. Балаҡайҙарым, ишек асығыҙ! Мин ҡайттым...

— Беҙҙең әсәй улай һөйләшмәй, — тигәндәр Бәрәстәр. Тағы ла ишек асмағандар.

Инде бөтөнләй аптырауҙа ҡалған бүре, бүтән хәйлә табыуҙан өмөт өҙөп, яңынан баяғы таш артына барып боҫҡан. Шунда ятып, кәзәнең ҡайтыуын көтөргә, уның нисек итеп ишек астырыуын белергә уйлаған.

Бына бер ваҡыт, ашап-туйып, елендәрен һөт менән тултырып, төшкөләккә балаларын ашатыу өсөн, Кәзә ҡайтып килгән. Өй тупһаһына баҫып, күңелле итеп йырлап ебәргән:

Ҡырҙан ҡырға йөрөнөм,
Ҡыр емешен мин ейҙем.
Илдән илгә йөрөнөм,
Ил емешен мин ейҙем.
Һөтлөгәндән һөт алдым,
Һутлығандан һут алдым.
Балаҡайым, ишек ас!
Балаҡайым, ишек ас!

Бәрәстәр, йүгереп килеп, ишекте асып ебәргәндәр. Кәзә һикереп өйгә ингән, балаларын һөйә-һөйә имеҙеп

туйҙырған да, ишекте бер кемгә лә асмаҫҡа ҡушып, тағы ҡырға киткән.

«Әһә, булды, хәҙер ишекте нисек астырырға белдем», — тигән Бүре, ҡыуанып.

Кәзә китеп, бер аҙ торғас, ул ишек төбөнә килгән дә, тап кәзә булып йырлап ебәргән:

Ҡырҙан ҡырға йөрөнөм,
Ҡыр емешен мин ейҙем.
Илдән илгә йөрөнөм,
Ил емешен мин ейҙем.
Һөтлөгәндән һөт алдым,
Балтырғандан бал алдым.
Балаҡайым, ишек ас!
Балаҡайым, ишек ас!

Бәрәстәр, әсәләре ҡайтҡан икән тип ҡыуанып, йүгереп килеп, ишекте асып ебәргәндәр. Шул саҡта, тештәре ыржайып, эсе үткәшеп, йөндәре ялбырап торған бүрене күреп, ҡоттары осоп, бәрәстәр тырым-тыраҡай ҡасып бөткәндәр. Ҡайһыһы мейес аҫтына, ҡайһыһы мейес артына, ҡайһыһы урындыҡ аҫтына йәшенгән. Яуыз бүре уларҙы берәм-берәм табып, боттарынан һөйрәп сығарып, ашап бөтәргән. Тик мейес аҫтына ҡасҡан иң кескәй бәрәсте генә таба алмаған ул. Ашап туйғас, бүре сығып киткән. Күп тә үтмәй, күңелле итеп йырлай-йырлай, Кәзә үҙе ҡайтып килгән.

Ҡырҙан ҡырға йөрөнөм,
Ҡыр емешен мин ейҙем.
Илдән илгә йөрөнөм,
Ил емешен мин ейҙем.
Һөтлөгәндән һөт алдым,
Һутлығандан һут алдым.
Балаҡайым, ишек ас!
Балаҡайым, ишек ас!

Хәҙер уға бер кем дә ишек асмаған. Бер кем дә уйнап-һикереп ҡаршы алмаған. Ул, ишекте үҙе асып, өйгә ингән, илай-илай балаларын эҙләй башлаған. Мейес аҫтына йәшенгән бәләкәй бәрәс, әсәһен бүре тип белеп,

бик оҙаҡ өндәшмәй торған. Ахырҙа, үҙ әсәһе икәненә тамам ышанғас ҡына, баҡырып илап, мейес аҫтынан килеп сыҡҡан:

— Бүре килде, әсәй, апайҙарымды ашап китте...

— Бүре!.. Ах, ер йотҡоро!.. Ҡайҙан килеп сыҡҡан ул?!

— Эйе, әсәй, бүре...

— Ниңә һуң, балаҡайҙарым, улға астығыҙ, ниңә әсәйегеҙҙең ҡушҡанын тыңламанығыҙ!..

— Ул һин булып инде шул, әсәй... Ах, ул ниндәй ҡурҡыныс, ниндәй усал!.. Әсәй, мин ҡурҡам, мине йәшер...

— Әй балаҡайым!..

Кәзә яңғыҙ балаһын ҡосаҡлаған да урындыҡ өҫтөнә ултырып, бик оҙаҡ илаған. Унан һуң был яуыз бүренән үс алыр өсөн юлдар эҙләй башлаған.

— Туҡта, балаҡайым, иламайыҡ, — тигән ул Бәрәсенә. — Һин ошонда ултырып тор. Ә мин бынау ишек төбөндәге ике иҙәнде асайым да, иҙән аҫтындағы ҙур мискәгә һыу тултырайым. Иҙәнһеҙ урынды кейеҙ менән ҡаплап ҡуйырбыҙ. Унан һуң мин ҡырға киткән булырмын да, өй артындағы ҡарағай араһына йәшеренермен. Ҡомһоҙ бүре, һине ашайым тип, шунда уҡ килеп етер. Ингәс, ишекте асҡас, һин урындыҡҡа һикерерһең. Ул, һине тотам тип ырғып, ошо кейеҙ өҫтөнә баҫыр ҙа, йығылып төшөп, мискәләге һыуға батыр. Шулай итеп, беҙ унан үс алырбыҙ, яраймы, бәбекәйем!

— Юҡ, әсәй, мин ҡурҡам. Бүрегә ишек асмайым, — тип илаған бәләкәс Бәрәс.

— Улай булғас, һинең бер ғәйепһеҙ апайҙарыңды ашаған яуыз Бүрене язаһыҙ ҡалдырабыҙмы ни?! — тип асыуланған әсәһе. «Ысынлап та, яуыз Бүренән үс алырға кәрәк шул», — тип уйлаған бәләкәй Бәрәс. Шуңан һуң әсәһенең кәңәшенә күнгән, ҡурҡмаҫҡа булған.

Бына бер ваҡыт кәзә баҙҙағы мискәгә һыу ташый башлаған. Мөлдөрәмә итеп һыу менән тултырғас, иҙәндең асыҡ урынын кейеҙ менән ҡаплаған да үҙе,

ҡырға киткән булып, өй артындағы ҡарағай артына йәшенгән. Ә теге бүре шунда уҡ килеп тә еткән. Туп-һаға баҫҡан да, йәнә кәзә булып йырлаған.

Бәләкәс бәрәс ишекте асҡан да, әсәһе өйрәткәнсә, артҡа, урындыҡ өҫтөнә, һикергән. Бүре лә уның артынан ырғыған — урындыҡҡа етә алмай, тап кейеҙ өҫтөнә тура килеп, иҙән аҫтына төшөп киткән дә мискәләге һыуға сумған. Шул саҡта кәзә лә, йәшенгән урынынан сығып, йүгереп ҡайтып ингән. Ә бүре, ҡысҡыра-ҡысҡыра, бата башлаған, сөнки мискә бик тәрән, ситтәре йәбешеп сыҡ-ҡыһыҙ шыуғалаҡ булған. Шуның өҫтәүенә, мискәләге һыу, тап йылғаның өйрөлтмәкле сөмөкәй ере шикелле, бүрене өйрөлтөп, төпкә һөйрәй, йөҙөргә һис тә ирек бирмәй икән.

— Ай, һыу билемдән булды, муйыныма етте. Инде ҡолағымдан булды. Батып үләм... Кәзәкәйем, мине ҡотҡа-рып ҡына алһаңсы!.. Бынан һуң бер ҡасан һинең үҙеңә лә, балаларыңа ла, хатта кәзә тип аталғандың береһенә лә теймәҫ инем. Дуҫ булыр инек, — тип ялынған Бүре кәзәгә. Үҙе эсенән: «Их, тартып ҡына сығарһа, кәзәне хәҙер үк, өҙөп-йолҡоп, ашап ташлар инем», — тип уйлаған.

Кәзә, әлбиттә, уның ялыныуҙарына ҡолаҡ та һал-маған.

— Минең алма кеүек балаларымды ашап, мине ҡан илатҡанда, яҡшы инеме?! Әйҙә, тонсоҡ, батып үл! Был һиңә иң гәҙел яза, — тигән.

Шулай итеп, ҡомһоҙ яуыз бүре, кәзәгә ялынып, олой-олой батып үлгән.

Бынан һуң кәзә үҙенең кескәй бәрәсе менән ҡая таш өҫтөндәге бәләкәй өйҙәрендә иркенләп, рәхәтләнеп йә-шәй башлаған. Хәҙер инде уларҙы бер нәмә лә ҡур-ҡытмаған. Бер кем дә борсомаған. Улар әле ошо көндә лә һаман шулай, таштан ташҡа һикереп, ҡырҙан ҡырға йүгереп, уйнап, көлөп ғүмер итәләр, ти. Ҡара урман эсендәге ҡая таштар араһында ҡыр кәзәһенең күңелле йыры әле булһа шулай яңғырап тора, ти:

Ҡырҙан ҡырға йөрөнөм,
Ҡыр емешен мин ейҙем.
Илдән илгә йөрөнөм,
Ил емешен мин ейҙем.
Һөтләгәндән һөт алдым,
Һутлығандан һут алдым.
Балаҡайым, ишек ас!
Балаҡайым, ишек ас!..

## КӘЗӘ ТӘКӘҺЕ МЕНӘН ТАЛАҠ

Борон-борон заманда, һайыҫҡандар ала саҡта, олатайҙар бала саҡта, йәшәгән, ти, ике хан. Улар бербереһе менән бик дуҫ булғандар, сыбар-ала ҡуй һуйғандар. Баш-тояғын элек һалғандар, талағын аҙаҡ һалғандар, ләкин талаҡ ҡаҙандан сығып ҡасҡан.

Эй бара, ти, был талаҡ, эй бара, ти. Бара торғас, осраған, ти, бер сип-сип иткән турғайға. Талаҡ уны шунда уҡ йотоп та ебәргән. Китеп бара талаҡ, китеп бара, китеп бара торғас, ул осраған ҡар-р-рҡ иткән ҡарғаға. Ҡарға унан:

— Ҡайҙа бараһың, Талаҡ ағай? — тип һорай икән.

— Мин сип-сип иткән турғайҙы йоттом, инде хәҙер һине лә йотам, — тигән дә, шунда уҡ ҡарғаны йотоп та ебәргән, ти. Китеп бара икән Талаҡ, китеп бара торғас, осраған, ти, утынсыға. Утынсы унан:

— Талаҡ, ҡайҙа бараһың? — тип һораған.

— Мин сип-сип иткән турғайҙы йоттом, ҡар-р-рҡ тигән ҡарғаны йоттом, инде һине лә йотам, — утынсыны ла йотҡан, ти. Эй бара, ти, Талаҡ, бара торғас, уға бер бесәнсе осраны, ти.

— Талаҡ, ҡайҙа бараһың? — тип һораған бесәнсе.

— Мин сип-сип иткән турғайҙы йоттом, ҡар-р-рҡ иткән ҡарғаны йоттом, утынсыны йоттом, инде хәҙер һине лә йотам,— тигән дә, шунда уҡ бесәнсене лә йотоп ебәргән, ти.

Шунан һуң Талаҡ үҙенең юлын дауам иттергән. Бара торғас, осраған, ти, ебәксенең ете ҡыҙына. Улар:

— Талаҡ ағай, ҡайҙа бараһың? — тип һорағандар.

— Сип-сип иткән турғайҙы йоттом, ҡар-р-рҡ иткән ҡарғаны йоттом, утынсыны йоттом, бесәнсене йоттом. Инде хәҙер һеҙҙе лә йотам, — тигән дә Талаҡ ебәксенең ете ҡыҙын да йотҡан да ебәргән, ти.

Эй бара, ти, Талаҡ, эй бара, ти. Бара торғас, осраған, ти, думбырасының туғыҙ улына. Улар ҙа:

— Талаҡ ағай, ҡайҙа бараһың? — тип һорағандар.

— Мин сип-сип иткән турғайҙы йоттом, ҡар-р-рҡ иткән ҡарғаны йоттом, утынсыны йоттом, бесәнсене йоттом, ебәксенең ете ҡыҙын йоттом, инде һеҙҙе лә йотам, — тигән дә шунда уҡ думбырасының да туғыҙ улын йотоп ебәргән.

Эй бара, эй бара, ти, Талаҡ, бара торғас, осраған, ти, кәзә тәкәһенә.

— Талаҡ ағай, ҡайҙа бараһың? — тип һораған Кәзә тәкәһе.

— Мин сип-сип иткән турғайҙы йоттом, ҡар-р-рҡ иткән ҡарғаны йоттом, утынсыны йоттом, бесәнсене йоттом, ебәксенең ете ҡыҙын йоттом, думбырасының туғыҙ улын йоттом, инде хәҙер һине лә йотам, — тигән Талаҡ.

— Юҡ, йотмай тор әле һин мине, Талаҡ ағай, — тип әйткән, ти, Кәзә тәкәһе. — Һин тау түбәнендә тор, мин үренә менеп торайым. Ауыҙыңды асып тик тор, мин ауыҙыңа үҙем килеп керермен, — тигән.

Талаҡ быға риза булған. Тау түбәнендә ҡалған, кәзә тәкәһе тауҙың үренә менеп баҫҡан. Баҫты ла Тәкә, йүгереп килеп, Талаҡтың ауыҙына кереп китте, ти. Шунда уҡ тегенең эсе ярылды, ти? Талаҡ эсенән тәүҙә турғай осоп сыҡты, уның артынан ҡарға, уның артынса утынсы, унан һуң бесәнсе, шунан ебәксенең ете ҡыҙы, улар

артынан думбырасының туғыҙ улы, иң һуңынан тәкә үҙе килеп сыҡты ти.

Сыҡҡан бере кәзә тәкәһенә рәхмәттәр әйтеп, үҙ юлдарына китеп барҙы, ти. Улар бөтәһе лә әле булһа ла иҫән-һау, ти. Шатланып, рәхәтләнеп йәшәп ята, ти. Кәзә тәкәһен һәр береһе өсәр көн ҡунаҡ иткән, ти.

Әкиәтем — ары, үҙем — бире, һике аҫтында — һигеҙ бүре.

# ТАУЫҠ МЕНӘН ТӨЙЛӨГӘН

Бер заман тауыҡ менән төйлөгән дуҫлашып китте, ти. Төйлөгән тауыҡҡа ҡунаҡҡа ла йөрөй башлай. Килгән һайын ул, донъяһын онотоп, гел генә һауала осоп йөрөүҙең рәхәтлеген һөйләй торған була. Бынан күрмәксе тауыҡта ла осоп йөрөү дәрте ҡуҙғалып китте, ти. Әммә ул, күпме генә тырышмаһын, үҙе ҡуна торған ситәндән дә бейек оса алмай.

Быны күреп торған төйлөгән тауыҡты осорға үҙе өйрәтмәк булды, ти. Шулай ҙа барыбер эш сыҡмай. Төйлөгән тауыҡты осорға ғына өйрәтә башлағайны, араға этәс килеп ҡыҫылып, янъял ҡубып китте лә, тауыҡ менән төйлөгәндең дуҫлығы бөттө лә ҡуйҙы, ти. Ни өсөн тиһәң, тауыҡ менән дуҫлашҡанға тиклем, төйлөгән муйынына бик матур муйынса кейеп, башына шундай уҡ аҫыл тараҡ ҡаҙап йөрөр булған. Этәстең бына шуға күҙе төшкән икән. «Ул тараҡ ни эшләп минең башта түгел дә, шул муйынса ни эшләп тауыҡ муйынында түгел?» — тип уйлай икән этәс. Бына шул арҡала ике арала янъял сығып китеп, тауыҡ осорға өйрәнә алмай ҡалған да инде.

Ә ул янъял бына нисек сығып киткән. Берҙән-бер көндө (был — төйлөгәндең һуңғы тапҡыр ҡунаҡҡа килеүе булған да инде) әтәс менән тауыҡ төйлөгәнде тилебәрән орлоғо менән һыйлаған. Шунан төйлөгән бөтөнләй иҫереп йығылды, ти. Шул саҡта әтәс уның тарағын алып, бик һәйбәтләп кенә үҙ башына ҡаҙап ҡуйҙы, ә муйынсаһын алып, тауыҡ муйынына кейҙерҙе, ти. Төйлөгән шулай иҫһеҙ булып ятып ҡалды, ә ҡупшыланып алған әтәс, башын юғары күтәрә биреберәк, «күрҙегеҙме ағайығыҙҙы?» тигән һымаҡ, яҡ-яғына ҡарана-ҡарана, күрше-күлән араһына йөрөргә сығып китте, ти.

Төйлөгән иҫенә килеп торһа, муйынса ла, тараҡ та юҡ, ти. Шунан ул яҡында ғына йөрөп ятҡан тауыҡты күреп:

Бир минең муйынсамды! — тип ҡысҡыра.

Ә теге бирмәй ҙә бирмәй икән. Ни өсөн тиһәң, муйынса тауыҡҡа, берҙән, бик килешеп тора; икенсенән, кеше әйберен һорамай алырға ярамауын бөтөнләй белмәй ҙә икән был тауыҡ мейеле ҡош! Бына шунда инде ике арала ыҙғыш-талаш китте, янъял ҡупты, ти.

Төйлөгән үҙенең ҡотһоҙ тырнаҡтары менән тауыҡ муйынынан муйынсаны тартып алырға иткәйне, муйынсаның ебе өҙөлөп, мәрйендәре сәселде лә китте, ти. Шунан төйлөгән бөтөнләй асыуланып:

— Ярар, беҙҙең дуҫлыҡтың бөтөүе шулдыр инде. Мин һиңә күрһәтермен әле күрмәгәнеңде! — тип янаны ла осоп китте, ти.

Ә был ваҡытта әтәс, төйлөгәндең тарағын кикрек итеп, ауылдың теге осонда маһайып йөрөп ҡалды, ти.

Бына бер ваҡыт тауыҡ оя баҫып, себеш сығара. Бер көндө ул үҙенең себештәре менән сүплектә тибенеп йөрөһә, һауала төйлөгәндең талғын ғына осоп йөрөүен күреп ҡала. «Минең иҫке дуҫ рәхәтләнеп осоп йөрөй икән. Муйынса тураһында ла бөтөнләй онотҡандыр әле ул», — тип уйлап ҡуйҙы, ти Тауыҡ.

Онотор һиңә төйлөгән! Ул шунда уҡ ергә шыҡыйып

килеп төшә лә бер себеште тырнаҡтары менән эләктереп алып, яңынан юғарыға күтәрелеп тә китә.

Тауыҡ менән әтәстән төйләгән үҙенең үсен ана шулай ала башлай. Шунан бирле себештәрҙе берәм-берәм алып китеп кенә тора икән был ҡәһәр һуҡҡырың.

Тауыҡ ҡайғыға һабышты, ти. Аптырағас-йөҙәгәс, ул, йылдың-йылында гел генә ҡабатланып торған был бәләнән ҡотолор өсөн, төйләгәнгә муйынсаһын ҡайтарып бирмәк була. Үҙе артынан себештәрен эйәртеп, әтәс менән бергә төйләгән муйынсаһының сәселеп юғалып бөткән мәрйендәрен эҙләп, тиреҫлектә, сүп-сар араһында тибенеп-тибенеп ҡаҙынырға тотоналар. Эй эҙләнәләр, эй эҙләнәләр, ти, былар, тик бер генә мәрйен дә таба алмайҙар.

Берҙән-бер көндө әтәс төйләгән муйынсаһының бер мәрйенен табыуын тапҡайны ла, бер ҙә иҫе китмәне, ти, уның быға; был хаҡта тауыҡҡа ла әйтеп торманы, ти. Төкөрөп бирҙе әтәс һинең муйынса бөртөгөңә! Башында шундай кикрекләнеп торған аҫыл тараҡ була тороп, ҡуҡыр әтәс муйынса бөртөгө эҙләп йөрөймө һуң!

Ә бахыр тауыҡ ана шул сәселеп китеп юғалған мәрйендәрҙе әле булһа тибенә-тибенә эҙләп йөрөй икән.

## ҺАНДУҒАС

Борон-борон заманда бер ауылда бик бай сауҙагәр йәшәгән. Уның байлығының иге лә, сиге лә булмаған. Өйөндәге келәмдәре Персиянан, һауыт-һабалары Ҡытайҙан алып ҡайтылған булған. Сауҙагәрҙең өҫтөндәге еләне Төркиәнән, хеҙмәтселәре Һиндостандан алынған икән. Ҡайҙа ғына барһа ла, ул үҙенә иҫтәлек өсөн берәй нәмә алып ҡайта торған булған.

Сауҙагәр өйөндә бер һандуғас йәшәгән. Һандуғастың ситлеге алтындан эшләнгән, ә түбәһе быяланан булған. Ситлектең иҙәненә лә алтын ҡом һибелгән булған. Һандуғасы өсөн сауҙагәр бер нәмәһен дә ҡыҙғанмаған.

Иртән дә, төш ваҡытында ла, кисен дә хеҙмәтсе һандуғас өсөн һалҡын һыуҙы көмөш һауытҡа һалып, ә орлоҡтарҙы гәрәбә батмусҡа һалып килтергән. Шулай итеп, һандуғас бер ҡайғы ла күрмәйенсә, йырлап көнөн уҙғара торған булған. Ә йырлауға ул оҫталарҙың да оҫтаһы булған.

Берҙән-бер көндө сауҙагәр үҙ эштәре менән сит илгә китергә йыйынған. Был турала Һандуғас белеп ҡалған да хужаһынан былай тип һораған:

— Хужам, һин минең менән һәр ваҡыт яҡшы мөғәмәләлә булдың, нимә һораһам, шуны бирҙең, бер һорауыма ла, теләгемә лә ҡаршы килмәнең. Был юлы ла минең теләгемде үтә инде. Һин минең тыуған илемә бараһың. Унда аҫыл емештәр үҫкән бер баҡса булыр, шул баҡсала минең барлыҡ туғандарым йәшәй. Уларҙы эҙләп табып, минән бик күп сәләм әйт, минең һау-сәләмәт икәнлегемде, бер төрлө лә ауырлыҡ күрмәүемде белдер, — тигән.

Һандуғастың был теләген үтәргә хужа һүҙ биргән. Оҙон юлға сыҡҡан. Бик күп көндәрҙән һуң ул был илгә килеп еткән. Һатаһы нәмәләрен һатып, алаһыларын алып бөткәндең һуңында, һандуғас әйткән баҡсаны эҙләп тапҡан. Баҡса шул тиклем матур, әйтеп тә, һөйләп тә бөтөрөрлөк түгел, ти. Баҡсала үҫкән ағастар күҙҙең яуын алып тора, ә ағастағы емештең иге-сиге күренмәй, ти. Һауа хуш еҫ менән тулы, ти, һәр ағаста һандуғастар һайраша, уларҙың тауышына бөтә баҡса күмелгән, ти. Был баҡсаға килеп ингәс, сауҙагәр һуштан яҙған да, бик оҙаҡ ни өсөн килгәнен онотоп ултырған. Шул саҡ уның ҡаршыһына килеп, бер һандуғас һайрай башлаған. Ул шул тиклем матур һайраған, сауҙагәр был минең һандуғастың ҡустыһы тип уйлап, уға мөрәжәгәт иткән.

— Тыңла әле, Һандуғас! Минең өйҙә алтын ситлектә һинең ағайың йәшәй. Ул һиңә лә, башҡаларығыҙға ла

күп итеп сәләм әйтеп ебәрҙе. Бик яҡшы йәшәгәнлеген, ҡайғы-хәсрәт күрмәгәнлеген белдерҙе, — тигән.

Сауҙагәр һөйләп бөткәс тә һандуғас, атып төшөргән кеүек, ергә йығылған. Сауҙагәр нимә эшләргә белмәй икән. Иңкәйеп һандуғасҡа ҡараһа, ул инде тын да алмай, ҡанаттарын йәйеп, ауыҙын асып, үлеп ята, ти.

«Ах, юҡҡа мин быға ағаһы тураһында һөйләнем, ҡайғыһынан үлде, ахыры», — тип, сауҙагәр үҙ эсенән уйлап алған. Ул үлгән һандуғасты алған да ситкә ырғытҡан. Ә һандуғас ергә барып бәрелеү менән киренән терелгән дә осоп киткән. Һайрай-һайрай күҙҙән дә юғалған. Сауҙагәр ҡысҡырып ҡараһа ла, һандуғас кире әйләнеп килмәгән.

Өйгә сауҙагәр бик ҡайғылы әйләнеп ҡайтҡан, эштең нисек булғанын һандуғасына һөйләп биргән. Хужаһының һөйләгәнен ишеткәс тә, һандуғас бик ҡайғырған, көнө буйы бер нәмә ашамаған да, эсмәгән дә, һайрамаған да. Ә иртәгеһен хеҙмәтсе ашарға-эсергә килтергәндә, һандуғас үлеп ятҡан. Быны ишеткәс, сауҙагәр саҡ иламаған. Ул һандуғасын терелтеү өсөн төрлөсә эшләп ҡараған, ауыҙы менән һыу ҙа эсереп ҡараған, ҡояшта ла йылытҡан. Ләкин бер нәмә лә ярҙам итмәгән. Һандуғас үлгән. Сауҙагәр хеҙмәтсеһен саҡырып алған да һандуғасты сығарып ташларға ҡушҡан. Хеҙмәтсе һандуғасты сүплеккә илтеп ташлаған. Һандуғас ергә барып бәрелеү менән терелгән дә, күңелле итеп һайрап, үҙ иленә осҡан.

## ЭТ НИСЕК ХУЖА ТАПҠАН

Борон-борон заманда бер эт булған. Ул үҙенә хужа эҙләгән. Сөнки уның көнкүреше бик ауыр икән.

Бер ваҡыт ул башы һуҡҡан яҡҡа сығып киткән дә бер

йылға буйына барып еткән. Йылға буйында бер бүре ултырғанын күреп:

— Иҫәнме, Бүре? — тигән. Бүре:

— Ниңә килдең? — ти икән. Эт:

— Мин үҙемә хужа эҙләп йөрөйөм, мине үҙеңә алсы! — тигән.

Шунан бүре быны алған. Хәҙер икәүләп киткәндәр. Бара торғас, Бүре туҡтаған да:

— Уй, әйҙә ҡасайыҡ, ана Айыу килә! — тигән. Шунан Эт, Бүренең ҡурҡаҡ икәнен белеп, Айыу янына барған да:

— Мине үҙеңә алсы! Мин хужа эҙләйем, — тигән.

Айыу уны алған. Былар баралар, баралар икән, бара торғас, Айыу шып туҡтаған. Туҡтағас, Эткә:

— Әйҙә, ҡасайыҡ, ана Арыҫлан килә, беҙҙе ашар, — тигән.

Шунан эт айыуҙың көсһеҙ, ҡурҡаҡ икәнен белгән дә, уны ташлап, арыҫлан менән киткән. Баралар, баралар былар, бара торғас, бер яланға килеп сыҡҡандар. Унда бер кеше йөрөй икән, Арыҫлан күреп ҡалған да:

— Ах, ана кеше килә, беҙҙе үлтерер, әйҙә ҡасайыҡ! — тигән.

Шунан эт, быны да көсһеҙ икәнен белеп, теге кеше янына китә. Килеп етә лә:

— Мине үҙеңә алсы? — тип ялына. Шунан кеше этте үҙенә ала. Эт, хужа табыуына шатланып:

— Эх, кешенән дә көслөһө юҡ икән! — тигән. Шул замандан башлап, эт кешегә хеҙмәт итә икән.

## ҠАҘҘАР НИҢӘ АЛА БУЛҒАН?

Бынан бик күп заман элек, олатайҙарыбыҙҙың олатайҙары малай саҡта, өләсәйҙәребеҙҙең өләсәйҙәре ҡыҙ

ваҡытта ҡаҙҙар гел аҡ булған, ә ала ҡаҙ исем өсөн генә булһа ла осрамаған, ти.

Ала ҡаҙҙар Ҡотһоҙ Ҡотой тигән бер кешенең яуызлығы арҡаһында ғына килеп сыҡҡандар икән.

Ҡотһоҙ Ҡотой, сабый балаларҙы урлап, ете урман, ете диңгеҙ артындағы дейеүҙәргә илтеп һата торған булған. Берҙән-бер көндө бына шул Ҡотһоҙ Ҡотой Хәлимә исемле бер бите ай, бер бите көн кеүек һылыу ҡыҙ баланы урлап, тимер ситлеккә бикләгән дә, үҙе башҡа балаларҙы урларға тип китеп барған, ти. Китер алдынан ул ситлек эргәһенә сихырлы аҡ таштар һала торған булған. Был таштар ситлекте, хужаһы килгәнсе, һаҡлап торалар икән.

Аҡ таштар тын ғына ятыр, ә инде ситлеккә ябылған бала унан берәй нисек сыға ҡалһа, шунда уҡ уға ташланып, аяҡтарына йәбешер булғандар. Меҫкен бала ҡуҙғала ла, ҡысҡыра ла алмай, ҡатып ҡала торған булған.

Ә Ҡотһоҙ Ҡотой бер китһә, аҙналар, ҡайһы саҡта айҙар буйы йөрөй икән.

Хәлимә бахыр ана шул ситлек эсендә ултыра икән, уның бында икәнлеген бер кем дә белмәгән, ти. Ул, шундай тоҡкон булып ултыра торғас, ябығып, юнышҡы һымаҡ булып ҡалған, алһыу йөҙө һарыға һабышҡан. Ә ситлек сығып ҡасырлыҡ түгел: сит-ситтәре бик ныҡ, түшәм кеүек нәмәһе бик бейек булған, тик ишеге аҫтында ҡаҙ бәпкәһе һыйырлыҡ ҡына бер тишек бар икән.

«Ниңә мин ҡаҙ бәпкәһе булманым икән — ошо тишектән сығыр ҙа китер инем?» — тип илай икән Хәлимә бахыр. Зарығып ултыра торғас, Хәлимә кибеп бәләкәйләнә башлаған. Шулай бәләкәйләнгәндән-бәләкәйләнә барған да йомортҡанан яңы ғына моронлап сыҡҡан һап-һары ҡаҙ бәпкәһе кеүек булып ҡалған, ти. Аяҡтары урынында — ҡаҙ бәпкәһенең тәпәйҙәре, ҡулдары урынында — бәпкә ҡанаттары, ти, бының. Хәлимә, шатлығынан, әле ҡауырһыны ла ҡатып етмәгән бәләкәс

кенә ҡанатҡынаһын ҡаҡҡылап, ишек аҫтындағы тишектән тышҡа килеп тә сыҡҡан, ти.

Теге сихырлы таштар, ҡаҙ бәпкәһен күрһәләр ҙә, быныҡ Хәлимә икәнен белмәгәндәр.

— Был ҡаҙ бәпкәһе ҡайҙан килеп сыҡты һуң әле? — тип хайран ҡалғандар улар, ни эшләр икән был тип, уны күҙәтеп торғандар.

Ҡаҙ бәпкәһе яй ғына киткән дә киткән. Шул ерҙә теге аҡ таштар, ҡаҙ бәпкәләренә әүерелеп, Хәлимә артынан төшөп алғандар ҙа баҫтырып киткәндәр, ти.

Хәлимә бер йылға буйына барып сыҡҡан. Яр башында бик күп ҡаҙ үҙҙәренең бәпкәләре менән емләп йөрөй икән. Хәлимә шулар араһына барып һыйынған. Ләкин ысын ҡаҙ бәпкәләре был ят бәпкәне суҡырға тотонғандар. Хәлимә улар менән талашып тормаған, ситләшкән дә уларҙан ары китеп барған. Шунан ул йылғаға төшөп алған да йөҙөп киткән. Ә бәпкәгә әүерелгән теге сихырлы таштар, Хәлимәне күҙҙән юғалтып, ситлек янына кире ҡайтҡандар ҙа ҡайтанан аҡ ташҡа әйләнгәндәр, ти.

Ләкин Хәлимә үҙенең әүәлге хәленә ҡайта алмаған, ғүмергә ҡаҙ булып ҡалған, ти. Уның баяғы ысын ҡаҙ бәпкәләре суҡыған ерҙәре ала-ҡола булып ҡалған. Ә үҙе оло ҡаҙ булып, ояя баҫҡас, бәпкәләре лә уның ала булып яралған икән. Бына шунан башлап донъяла ала ҡаҙҙар үрсеп киткән, имеш, ти.

## ҠАРҒА НИ ӨСӨН ИСЕМЕН ӘЙТЕП БӨТӨРМӘЙ?

Берҙән-бер көндө ҡарға кәкүк менән осраша. Улар бер-береһенең хәл-әхүәлдәрен һорашҡандар. Кәкүк, ҡарға менән хушлашып, үҙ юлына китә. Осоп барып, бер ағасҡа ҡуна ла бик матур итеп:

— Кәк-күк, кәк-күк, — тип ҡысҡыра башлай. Ҡарға быны ишетеп ҡала ла көнләшеп ҡуя.

— Мин кәкүк кеүек үҙ исемемде әйтеп ҡысҡырырға булдыра алмайыммы ни? Минең тауышым да көр, һыным да матур, — ти ул.

Шунан һуң инде ҡарға: «Ҡар-ға, ҡар-ға», — тип ҡысҡырып йөрөр булған.

Бер көндө ҡарға аҙыҡ эҙләп йөрөгәндә бер турғайҙы эләктереп ала ла ауыҙына ҡаба. Шул саҡ турғай ҡарғанан үтенә башлай:

— Ағай, мин барыбер үләм инде. Шулай ҙа исемеңде белеп ҡалайым. Һин миңә үҙ исемеңде әйтә күр инде, — ти. Тәүҙә Ҡарға суҡыштарын ҡыҫып ҡына:

— Ҡарр, ҡарр, — тигән. Турғай:

— Минең ҡолаҡтарым бик бәләкәй, ишетелмәй, ағай, ҡысҡырыбыраҡ әйтсе, — тигәс, ҡарға ауыҙын ҙур итеп асып:

— Ҡар-ға, ҡар-ға, — тип ҡысҡырған. Шуны ғына көтөп торған турғай ҡарға ауыҙынан осоп сығып та киткән. Ҡарға турғайҙы ҡыуып ҡараған, яңынан эләктерә алмаған.

Шулай итеп, турғай үлемдән ҡотолоп ҡалған. Ҡарға үҙ исемен әйткәнгә бик үкенгән. Шунан һуң ул үҙ исемен бер ваҡытта ла тулыһынса әйтмәй икән. «Ҡарр, ҡарр», — тип кенә йөрөй икән.

## УРАЛ ҺЫУЫ

Борон-борон заманда, түбәһенә ҡараһаң, түбәтәйең төшөрлөк бейек, кеше үткеһеҙ шыр урманлы тау итәгендәге бер ауылда ҡарт һунарсы булған, ти. Уның Түҙемғол исемле бер генә улы булған.

Түҙемғол үҙе матур, үҙе батыр, ҡыйыу ҙа, сос та булған. Ҡулынан килмәгән эше булмаған уның. Ул бала саҡтан уҡ атаһы менән бергә һунарға йөрөгән. Тауҙағы һәр бер ҡая таш, һәр бер йәнлек һуҡмағы таныш булған уға; хатта ҡайһы тау шишмәһенең ҡайҙан башланып, ҡайҙа барып ҡойоуына тиклем яҡшы белгән ул.

Берҙән-бер көндө, иптәштәре менән һунарға йөрөгәндә, Түҙемғолға урманда ҡунырға тура килгән. Төн урталары еткәс, ҡапыл ел-дауыл күтәрелеп, ағас баштары шаулай башлаған, ҡая таштар, шарлауыҡтар үкергән, күк йөҙөн ҡуйы ҡара болот ҡаплап алған, ти. Шунан һуң ҙур бер болот кисәге ергә төшөп, йоҡлап ятҡан Түҙемғолдо биләүҙәге бала кеүек итеп ураған да һауаға күтәреп алып киткән. Бер заман йоҡоһонан уянып, тирә-яғына ҡараһа, Түҙемғол бөтөнләй ят ерҙә ята икән. Уны шулай дейеү пәрейе Ҡафтау артына алып киткән.

Был дейеүҙең өс ҡыҙы бар икән. Ул ана шул ҡыҙҙарын саҡырып алған да, уйын-көлкө, мәҙәк һүҙҙәр менән егеттең күңелен асырға ҡушҡан. Ҡыҙҙар, егеттең ма-

турлығын күреп, хайран ҡалған, ти. Уны хозур бер ҙур һарай эсенә алып инеп, һыйлай башлағандар; йыр, бейеү, уйын-көлкө менән күңелен асырға тырышҡандар. Ә Түҙемғол, быға бер ҙә иҫе китмәйенсә, ашамай-эсмәй, өндәшмәй-нитмәй, бойоғоп тик ултыра икән. Дейеү ҡыҙҙары бер нисек тә егеттең күңелен таба алмағандар. Шунан дейеү, үҙе килеп:

— Егет, ниңә һин былай бойоҡ? Ашамайһың-эсмәйһең, йыр ҙа тыңламайһың, — тигән. Мин бит һинең үҫеп, батыр булыуыңды оҙаҡ көттөм. Ни өсөн тиһәң, минең батшалығымды һаҡларлыҡ, ғәскәремде яуға алып барырлыҡ бер кемем дә юҡ. Миңә тоғро хеҙмәт итһәң, теләгән бер ҡыҙымды бирермен. Күрәһеңме, минең байлығым ҡайһылай күп? Ни теләйһең, шуны алырһың, бөтә батшаларҙан да байыраҡ йәшәрһең, — тигән.

Түҙемғол дейеүҙең һүҙҙәрен тыңлап торған да:

— Миңә һинең байлығың да, ҡыҙҙарың да кәрәкмәй, — тигән. — Һинең донъянан айырылған һарайыңда йәшәгем килмәй, тыуған еремә кире ҡайтар мине. Беҙҙең тауҙарыбыҙ һинең һарайҙарыңдан бейегерәк, болондарыбыҙ һинең бынау келәмдәреңдән дә матур, урмандарыбыҙ һинең гөл баҡсаңдан йәмлерәк, шишмәләребеҙҙең һыуы саф, тәмле, кешегә көс биреп тора, — тигән.

— Иҫең киткән икән юҡҡа! — тигән дейеү. — Бик кәрәк булһа, мин һинең тауыңды ла, урманыңды ла бөтә йылғаһы-ние менән бергә бына ошонда килтерәм дә ҡуям!

Дейеү кис менән үҙенең бөтә хеҙмәтселәрен, ҡолдарын йыйып алған да бер төн эсендә бейек тау өйөргә ҡушҡан. Иртән тороуға түбәһе болоттарға теймәле бейек тау яһап та ҡуйылған. Тик уның битләүендә бер генә ағас әҫәре лә, бер бөртөк үлән дә булмаған.

Түҙемғол ана шул яланғас тау башына менгән. Шул саҡта үҙенең тыуып үҫкән ерҙәре — Урал урмандарында һунарға йөрөгән, йылғаларында балыҡ ҡармаҡлаған саҡтары иҫенә төшкән. Уға бик яманһыу

булып киткән, үҙе лә һиҙмәҫтән, моңло итеп бына ошолай йырлап ебәргән ул:

Иҫтәремдән сыҡмай Уралҡайым,
Шишмәләре, сахра, туғайы,
Йәннәт түҫөн биргән сәскәләре,
Һандуғастай моңло ҡурайы.
Тыуғанда ғына үҫкән төйәккәйем
Урал буйы, ҡыҙрым сауҡа икән.
Уралҡайҙы һағынып, бер йырлаһаң,
Күңелдәргә үҙе лә зауҡы икән.

Дейеү был йырҙы тыңлап торған. Шунан ул кисә эшләткән тауын Түҙемғолдоң тыуған ерендәге кеүек итеп үҙгәртергә булған. Уның бойороғо менән ҡолдар тау битләүенә урмандар үҫтереп, төрлө йәнлектәр, ҡоштар ебәргәндәр, тау шишмәләре ағып ятҡан. Ләкин был да Урал егетенең күңелен аса алмаған. Ул һаман моңланып йырлаған да йырлаған:

Һары ҡамыш беҙҙең күлдәрҙә,
Шау-шыу килә ҡаты елдәрҙә.
Күлдән генә алған балыҡ кеүек,
Ғәзиз башым сит-ят илдәрҙә.

Шунан Түҙемғол Ҡафтау артындағы был дейеү батшалығынан ҡасып китмәксе булған, ти. Бер тапҡыр ҡасып ҡараған, ике, өс тапҡыр ҡасып ҡараған, ләкин дейеүҙең хеҙмәтселәре уны ярты юлда тотоп, гел генә кире алып ҡайтып торғандар. Һуңынан, дейеүҙең әмере буйынса, уны ҡул-аяҡтарын сынйырлап, ҡараңғы зинданға ябып уҡ ҡуйғандар, ти.

Хәтһеҙ көндәр үткәс, дейеү Түҙемғолдо ябылған еренән сығарған да:

— Йә, егет, инде миңә хеҙмәт итәһеңме? — тигән.

— Юҡ! — тип яуап биргән Түҙемғол.

Шунан һуң дейеү уны һуңғы тапҡыр һынап ҡарарға булған. Түҙемғолдоң ҡул-аяғын сынйырҙан алып:

— Мин һине, егет, туҡмап үлтермәйем, һин минең күҙ алдымда тонсоғоп үләсәкһең, — тигән. — Минең батшалығымдың һауаһы шундай: кем дә кем миңә буйһона — шул иркен тын алып, рәхәт йәшәй; кем дә кем буйһонмай — ул кеше минең һауанан тыны ҡыҫылып, интегеп үлә. Ҡайһыһына ризаһың: миңә тоғро хеҙмәт итеп йәшәргәме әллә тонсоғоп үлергәме? — тигән.

— Үлергә — тигән Түҙемғол.

Шул ваҡыт асыуынан ярһыған дейеү, үҙенең тау шишмәһенә ятып, күп итеп һыу уртлап алған да, бер алдына, бер артына ҡарап, бер һулға, бер уңға боролоп, ауыҙындағы һыуҙы бөркөп ебәргән. Шунан һауа томраланып, тынды ҡура торған булып киткән, ти.

Дейеү, үҙе тағы ла еңелерәк тын алып:

— Ләкин һин тиҙ генә үлеп ҡотола алмайһың әле! Тәүҙә өс көн башың әйләнеп, күҙ алдарың ҡараңғыланып, әлһерәп йөрөйһөң, шунан өс көн йүнләп тын ала алмай, интегеп ятаһың, ә етенсе көндө инде тонсоғоп үләһең, — тигән дә китеп тә барған.

Бер ағас төбөндә иҫәңгерәп ятҡанда, Түҙемғол әргәһенә йөҙ йәшәр бер әбей килеп, уны дейеүгә буйһонмағаны өсөн маҡтаған. Шунан үҙенең кем икәнен һөйләп биргән. Был әбейҙе һылыу ҡыҙ булып етеп килгән сағында ғына ана шул дейеү урлап алып киткән икән. Дейеү уға ла Түҙемғолға ҡуйған шартты ҡуйған, әбей, үлемдән ҡурҡып, дейеүгә хеҙмәт итеп йәшәргә риза булған.

Бында минең хәлде белә торған кеше лә бар икән әле тип, Түҙемғол бик ҡыуанған. Шунан әбейҙән:

— Һин бында нимә эшләйһең һуң, әбей? — тип һораған.

Әбей, көрһөнөп:

— Һорама инде, улым, — тигән. — Анау йылға төбөндәге ҡомдо яр башына сығарып, ҡояшта киптерәм, кипкәс, яңынан йылғаға һибәм. Шунан ҡомдо ҡайтанан йылға төбөнән алып, ярҙа киптерәм дә, кипкәс, тағы йылғаға ташлайым. Бөтә ғүмерем бына шулай заяға үтте минең, — тип иларға иткәйне, күҙенән бер бөртөк тә йәш

сыҡманы, ти. Шунан был әбей Түҙемғолға: — Һин, улым, бик түҙем күренәһең, үҙ һүҙеңдә ныҡ тор, дейеүгә бирешмә, ә мин һине ҡотҡарыу әмәлен табырға тырышырмын, — тигән дә юҡ та булған.

Йөҙйәшәр әбей дейеү янына барып:

— Беҙҙең эштәр бик мөшкөл бит әле, шуны беләһеңме икән? — тип кәңәш бирә башлаған. — Туғыҙ башлы улың яуҙан әйләнеп ҡайтманы, ете башлы туғаныңды былтыр уҡ тураҡлап киттеләр. Бер үҙең генә тороп ҡалдың. Үҙең һайлап алып ҡайтҡан теге егет тә ййға килмәне, хәҙер ана тонсоғоп ята. Бөтә батшалығыңды килеп ҡыйратып китеүҙәре бар. Хуп күрһәң, минең шундай кәңәшем бар: миңә берәй ергә барып, бына тигән ике-өс батыр алып ҡайтырға рөхсәт ит. Бына шунан һуң ҡурҡыу белмәй йәшәр инек, — тигән.

Әбейҙең һүҙҙәренә яуап бик тиҙ генә булмаған. Ни өсөн тиһәң, дейеү үҙенең ун ике башындағы барлы-юҡлы аҡылын йөрөтөп уйлағансы, көн үтеп, кис булған, ти. Шунан ул, баяғы әбейҙең әйткән кәңәшенә ҡушылып, кирелеп баҫҡан да, ауыҙын ҙур итеп асып, өс тапҡыр иҫнәгән. Шул саҡ уның эргәһенә туғыҙ юрған ҙурлығы ҡуйы болот килеп төшкән. Әбей шул болотҡа уранып, баш тартҡан яҡҡа осоп та киткән.

Дейеү ҡулында йөҙ йәшәгән әбей Уралтауҙың иң бейек еренә килеп еткәс, ергә төшөп, болотто ҙур бер ағас башына элеп ҡуйған да, тау итәгенә төшөп, Түҙемғолдоң атаһы торған ауылды эҙләп киткән. Барып тапһа, Түҙемғолдоң ҡартлыҡтан да, улы ғәйеп булыу ҡайғыһынан да мәлйерәп бөткән атаһы иҫән икән әле, ти.

Әбей Түҙемғолдоң атаһына бөтә хәлде нисек булһа, шулай, түкмәй-сәсмәй, энәһенән ебенәсә һөйләп биргән. Шунан Түҙемғолдоң атаһы, тирә-яҡтың батыр аҙаматтарын саҡырып, Ҡафтау артына барып, ун ике башлы дейеүҙе ҡыйратып, Түҙемғолдо алып ҡайтыу кәрәклеген әйткән. Аҙаматтар шундай эште күтәреп, ярһынып ҡына торғандар икән. Түҙемғолдоң атаһы баш аҙаматҡа, улыма

эсерерһең, тип, Яйыҡтан[1] бер шешә һыу ҙа тултырып алып биргән, ти.

Урал тауына күтәрелгәс, баяғы әбей аҙаматтарға:

— Фәлән ҡарама тәңгәленә еткәс, аттарығыҙҙың бер бөртөк ялын тартырһығыҙ, Ҡафтауҙың фәлән ерен артылғанда ҡындан ҡылыстарығыҙҙы сығарып, ҡояшта ялтыратырһығыҙ, — тигән. Үҙе ағас башына элеп ҡалдырған болотона ултырып алған да китеп тә барған.

Аҙаматтар әбей әйткән ҡарама тәңгәленә еткәс, аттарының бер бөртөк ялдарынан тартҡандар икән, аттар ҡанатлы толпар булып осҡандар; Ҡафтауҙы артылғанда ҡылыстарын һурып алғандар икән, йөҙ һыбайлы күрер күҙгә биш йөҙ булып күренә башланы, ти.

Ҡоралды аҙаматтар дейеү батшалығына ер һелкетеп, донъя шаулатып килеп еткәндәр, ти, бер заман, дейеү ни эшләргә белмәй тора икән.

Аҙаматтарҙың бер нисәһе Түҙемголдо эҙләп киткән, ҡалғандары дейеүҙең һарайын ҡамап алды, ти.

Түҙемгол шул уҡ ағас төбөндә етенсе көн инде үлем көтөп ята икән. Ул хәҙер бөтөнләй хәлһеҙ, иҫен юғалтҡан, ирендәре кипкән, күҙҙәре йомоҡ, тауыш-тыны юҡ икән. Дейеү әйткән үлем сәғәте бөтөнләй килеп еткән икән. Шул ваҡыт аҙаматтарҙың башлығы Түҙемголдоң атаһы биреп ебәргән шешәләге һыу менән Түҙемголдоң ирендәрен сылатҡан икән — ирендәре ҡыймылдай башлаған, һыуҙы бер йотторһа — егеттең күҙҙәре асылған, икенсе тапҡыр йотторһа — иркенләп тын ала башлаған, тағы бер тапҡыр йотторған икән — иҫенә килеп, тороп уҡ ултырған. Шунан инде шешәне үҙе тотоп, ярты һыуҙы эскәйне — бөтөнләй сәләмәтләнеп, көс-хәл кереп, аяғына баҫып, иптәштәренә үлемдән алып ҡалғандары өсөн ҙур рәхмәттәр әйтеп, улар менән күрешеп сыҡты, ти.

Түҙемгол шау-шыу килгән яҡҡа бороло п ҡараһа, уны ҡотҡарырға килгән аҙаматтарҙың күбеһе дейеүҙе

---

[1] Яйыҡ — 1770 йылдарға тиклем хәҙерге Урал йылғаһы шул исем менән йөрөгән.

уратып алған. Түңәрәк эсендә дейеү шарҡылдап көләп тора, ә аҙаматтар уға яҡын да бара алмайҙар, ти. Ни өсөн тиһәң, саф һауа етмәүҙән тындары ҡыҫылып, улар берәм-берәм аяҡтан йығылып ҡына торалар икән. Быны күреп торған Түҙемғол атаһы ебәргән һыуҙы дүрт тапҡыр уртлап, бер алдына, бер артына ҡарап, бер уң яғына, бер һул яғына әйләнеп, ауыҙындағы һыуҙы бөркөп ебәргән икән, шунда уҡ тонсоҡторғос һауа бөтөп, тирә-яҡты Урал буйындағы саф һауа солғап алған, ә аҙаматтар көс-хәл инеп, элеккесә батырланып киткән, ти. Шуға бәрәбәр дейеүҙең ғәйрәте кәмей башланы, ти.

Түҙемғолдоң ҡушыуы буйынса, иптәштәре дейеү һарайындағы бөтә байлыҡты бер ергә йыйып өйҙөләр, зиндандағы тотҡондарҙы иреккә сығарҙылар, ә дейеүҙең үҙен ҡыҙыҡ итергә булдылар, ти.

Түҙемғол баяғы әбейҙән:

— Дейеүгә ниндәй яза бирәбеҙ? — тип һораған.

Әбей:

— Тәүҙә мин эшләгән эште эшләтәйек, шунан үҙен тураҡлап ташларбыҙ, — тигән.

Шунан былар дейеүҙән йылға төбөндәге ҡомдо яр башына сығартып, ҡояшта киптерә, кипкәс, яңынан йылғаға ҡойҙорта башланылар, шунан ул ҡомдо, яңынан киптереп, йәнә һыуға түктерттеләр, ти. Был мәғәнәһеҙ эш иртәнән кискә тиклем барған. Дейеү йән тиргә төшөп, арып-талып бөткән, ҡомдо ла илке-һалҡы ғына ташый башлаған, ти. Шунан Түҙемғол үҙенең булат ҡылысы менән дейеүҙең ике башын бер юлы сабып өҙҙө, ти.

Шул ерҙә дейеү ялынып-ялбарып:

— Йылғама ятып ике генә йотом һыу эсәйемсе! — тип һораған.

Түҙемғол рөхсәт иткәс, дейеүҙең бысраҡ йылға һыуын ике йотоуы булған — ҡырҡылған ике башы үҙ урындарына килеп тә ултырҙы, дейеү үҙе хәлләнеп китте, ти.

Дейеүҙән былдай эште эшләтеүҙең насар икәнлеген белгәс, Түҙемғол дейеүгә үҙе ете көн һауа етмәй интегеп ятҡан ағас төбөнә ултырырға ҡушҡан. Дейеү шунда ултырғас:

— Бигерәк һыуһаным, берәй генә мискә һыу бирер инегеҙ — ти икән.

Үҙенең йылғаһынан шулай бер мискә һыу эсеп алып, бөтөнләй ғәйрәтләнеп китергә лә тегеләрҙе ҡыйратып ташларға иҫәбе бар икән был дейеүҙең.

Түҙемғол дейеүгә:

— Мин һиңә һыу бирермен. Тик һин миңә теге болотондо ғына бына шунда төшөрт! — тигән.

Көсө кәмегәндән-кәмей барған дейеү быға риза булып, ултырған ерҙән генә ауыҙын ҙур итеп асып, өс тапҡыр иҫнәгәйне, тығыҙ юрған ҙурлығы ҡуйы болот ергә төшөп йәйелде лә ятты, ти. Шунан Түҙемғол үҙен үлемдән ҡотҡарышҡан баяғы йөҙйәшәр әбейҙе саҡырып алып:

— Әбей, хәҙер һинең дүрт яғың ҡибла. Ошо болотҡа ултырып теләгән ереңә кит, һин хәҙер ирекле! — тигән.

Йөҙйәшәр әбей быға бик ныҡ шатланған, хатта әллә ҡасан кибеп бөткән күҙ йәштәре лә яңынан сығып, шатлыҡтан тәгәрәй башланы, ти. Түҙемғол менән уның аҙаматтарына күп рәхмәттәр әйтеп, ҙур теләктәр теләп, теге болотҡа ураныл, баш тартҡан яҡҡа осоп китеп тә барҙы, ти.

Түҙемғол, дейеүгә боролоп:

— Бына хәҙер һиңә һыу эсергәндә лә ярай. Тиҙҙән бер мискә һыу килтерерҙәр, ә хәҙергә ошо һыуҙы йотоп тор — тамағың бик кипкәндер, — тип, атаһы ебәргән шешәләге әле эселеп бөтмәгән һыуҙы биргән.

Был һыу дейеүҙең тамағын сылатырлыҡ ҡына булһа ла үҙ эшен эшләгән. Яйыҡ йылғаһының саф һыуынан дейеүҙең бөтөнләй тыны ҡыҫылып, тонсоғоп үлеп ҡалды, шул арала Түҙемғол үҙенең иптәштәре менән дейеүҙең урлап йыйған бөтә байлығын аттарына тейәп алып, тыуған илдәренә ҡайтып киттеләр, ти.

## УМЫС

Борон-борон заманда бар ине, ти, бер ауыл. Ул ауылдың бер яҡ осонда ғына, башҡа өйҙәрҙән айырым, тәҙрәһе ҡарындыҡ, башы һалам менән ябылған бер тупалаҡ ҡына өй бар ине, ти. Был өйҙөң эйәһе Яф исемле көтөүсе ҡарт ине, ти. Ул йыл да һарыҡ көтә ине, ти. Бисәһе Ишсолтан әбей, һәр көн бабайҙы иртә торғоҙоп, ашатып-эсереп оҙатып ҡала, ә үҙе, бабайы ҡайтҡансы, көнөн тирә-күршеһендә йөн иләп уҙғара ине, ти. Бына шулай йәшәп ятҡанда, берҙән-бер көндө Ишсолтан әбейҙән бер ир бала тыуа. Уға Умыс тип исем ҡушалар.

Бер ваҡыт Яф бабай ҡырҙа шулай һарыҡ көтөп йөрөгәндә, әллә ниндәй бер яу килеп сыға. Бабайҙың үҙен үлтереп, көтөүен ҡыуып алып китәләр. Ишсолтан әбей бабайҙың үлеү ҡайғыһынан аяҡҡа баҫа алмай, Умысҡа ни бары өс йәш тигәндә, үлеп китә.

Умыс, ҡайҙа кис булһа, шунда ҡунып, күрше-күләндә туйынып йөрөнө, ти. Шулай үҫеп буйға етте, ти, был.

Берҙән-бер ваҡыт Умыс бер ҡарттың тай етәкләп йөрөгәнен күрә. Тай бының күңеленә бик ятты, ти. Умыс ҡарттан:

— Тайҙы һатаһыңмы, бабай? — тип һорай. Ҡарт:

— Һатам, хаҡы фәлән тәңкә, — ти.

— Аҡсам да шул тиклем генә ине, мә, ал, — ти Умыс.

Умыс тайҙы һатып ала. Тапҡан-таянғанын шул тайҙы аҫрауға ебәрә. Тай бик аҡыллы була. Умысҡа эйәреп кенә йөрөй. Умыс үҙе лә еткән егет булды, тайы бына тигән ат булды, ти.

Бер ваҡыт Умыс, уҡ-һаҙағын алып, һунарға сыға. Шул саҡ бер аҡлан уртаһында бесән кәбәне янып ултырыуын күрә. Кәбәндең башында бер ҡыҙ утҡа ҡамалып ҡалған да, ни эшләргә лә белмәй, ыҙалана икән.

Умыс, атын шарт һуғып, кәбәнгә ҡарап саба. Сабып барышлай ул ҡыҙҙы тотоп ала. Ә ҡыҙ Умыстың бөтә кәүҙәһенә йылан булып урала. Шунда уҡ йылан тағы ҡыҙға әүерелә:

— Һин, егет, миңә яҡшылыҡ эшләнең, бының өсөн мин һиңә бүләк бирәм. Атыңа мен дә миңә эйәр, мин ҡайҙа барһам, шунда булырһың, — ти. Үҙе яңынан йыланға әйләнә лә китеп тә бара. Умыс уның артынан ҡалмай бара.

Былар бер ер тишегенә барып етәләр. Шунда инәләр. Шул саҡ йылан тағы ла ҡыҙға әүерелә. Ҡыҙ:

— Егет, хәҙер ете ҡат ер аҫтына китәбеҙ, ер аҫтында үҙенә бер донъя булыр, ул донъяла беҙҙең йортобоҙ бар. Йортобоҙҙа минең атайым менән апайҙарым булыр, — ти. — Апайҙарым, һин барып кергәс тә: «Уф-ф, әҙәм еҫе килә, кемде эйәртеп йөрөйһөң?» — тип һорарҙар. Һин уларҙан бер ҙә ҡурҡма. Унан һуң атайым янына керербеҙ, һин унан иҫке сәкмәнен, иҫке бүркен, иҫке итеген, иҫке ҡылысын һорарһың, ул бирмәҫкә тырышыр, һин һаман да ныҡышып, шуларҙан башҡа нәмә кәрәкмәй, тип әйтерһең, — ти йылан-ҡыҙ.

Былар икәүләшеп төшөп киттеләр, ти. Бер ваҡыт барып сыҡтылар, ти, бер бик матур донъяға, барып туҡтанылар, ти, алтындан ҡойолған бер һарай алдына. Ул һарайҙың бер урынында ла ишеге күренмәй, тик бөтә ере баҙлап ҡына тора, ти. Ҡыҙ барып борсаҡтай ғына бер төймәне баҫҡайны, ишек асылып китте, былар кереп китте, ти. Ҡыҙҙың апалары:

— Уф, уф-ф, әҙәм еҫе килә, кемде эйәртеп йөрөйһөң? — тиҙәр. Ҡыҙ:

— Был мине үлемдән ҡотҡарған егет, — ти. Шунан ҡыҙ Умысты атаһы янына алып китә. — Атай, мин ҙур бәләгә осраным, инде һәләк булдым тигәндә, бынау егет ҡотҡарҙы, — ти. Атаһы:

— Улай булғас, бының өсөн үҙе күпме теләһә, шул тиклем алтын, көмөш бирергә кәрәк, — ти. Шул ваҡыт Умыс:

— Юҡ, бабай, миңә алтын да, көмөш тә кәрәкмәй. Миңә иҫке сәкмәнеңде, иҫке бүркеңде, иҫке итегеңде, иҫке ҡылысыңды бир, — ти. Ҡарт:

— Юҡ, балам, уларҙы мин һиңә бирмәйем, — ти. Умыс тағы ла:

— Миңә алтын-көмөш кәрәкмәй, бирһәң, мин һораған нәмәләрҙе бирәһең, бирмәйһең икән, мин ҡайтам, — ти. Шул ваҡыт ҡыҙ:

— Бирәйек, атай, — тип, һыҡтап ебәрә. Ҡарт:

— Ярар, балам, ал инде, әммә йәнеңдән артыҡ һаҡла, — ти ҙә иҫке сәкмәнен, бүркен, итеген, ҡылысын бирә. Биргән ваҡытта, күҙенән йәше мөлдөрәп-мөлдөрәп ағып төштө, ти. Умыс бабайға:

— Хуш бул, — тип биргән нәмәләрен алып сығып китә. Уның артынан ҡыҙы эйәреп сыға, ер өҫтөнә сыҡҡансы оҙата бара. Айырылышҡанда:

— Йә, егет, был иҫке нәмәләрҙе ни эшләтмәк булып алдың? — тип көлөп һорай. Умыс:

— Үҙең шулай ҡуштың да, — ти. Ҡыҙ:

— Быларҙың файҙаһы һиңә ҙур буласаҡ: иҫке сәкмәнде кейһәң, һиңә уҡ үтмәҫ, бүректе кейһәң, һине берәү ҙә күрмәҫ, итекте кейһәң, күҙ күргән ергә бер аҙым менән етерһең, ә инде ҡылысың менән һелтәгәндә, йөҙ саҡрым ергә ут яуҙырырһың, — ти. Шунан ҡыҙ хушлашып, ер аҫтына төшөп китте, ти.

Умыс, бара торғас, йәйәүле дүрт кешене күрҙе лә, кинәт кенә иҫенә төшөп, туҡта, бүректе кейеп, шул кешеләр менән һөйләшеп ҡарайым әле, ти. Атын бер ағасҡа бәйләй ҙә тегеләрҙең алдына сыға.

— Әй, һеҙ мине күрәһегеҙме? — тип һорай. Тегеләр:

— Юҡ, күрмәйбеҙ, — тиҙәр.

Шунан Умыс бүректең файҙаһы буласағына ышана. Атына атланып артабан китә. Ай китте, йыл китте, әллә ниндәй урмандар үтте, тауҙар, һыуҙар кисте, ти, был. Барып сыҡты, ти, икенсе бер батшалыҡтың еренә. Барып етте, ти, батшаның үҙе торған ҡалаға. Барып инде, ти, был ҡаланың ситендә генә яңғыҙ ултырған бер өйгә. Өйҙөң хужаһы булған әбей быны ашатты,

эсерҙе, ти. Егет, әҙерәк йоҡлап, хәл дә йыйҙы, ти. Шунан һуң әбейҙән:

— Илегеҙ тынысмы, ниндәй хәлдәр бар? — тип һораша башлай. Әбей:

— Боронораҡ бик тыныс ине. Батшабыҙҙың ҡыҙы буйға етә башлағас, үҙен кемдер һәр көн төндә алып китә лә таң ваҡытында килтереп ҡуя. Ҡарауыллаған егеттәр быны белмәй ҡалалар, шуның өсөн һәр ҡайһыһының башын ҡырҡып торалар, — ти. Умыс:

— Улай булғас, әбей, мин үҙем ҡарауыллап ҡарайым. Бар, һин батшаға был хәбәрҙе әйт, — ти.

Әбей Умыстың был һүҙҙәрен батша санаттары арҡылы батшаның үҙенә еткерә. Батша Умысты алдырырға иң яҡшы арбаларын ектереп ебәрә. Умыс, үҙенең атын әбей ҡарамағына ҡалдырып, батша аттарына ултырып, батша һарайына китә. Барып еткәс, уға хәлде һөйләп бирҙеләр, ти. Кис була. Умысты бер бүлмәгә индерәләр. Унда ҡырҡ ҡыҙ тора, ти. Бары ла бер төҫлө кейем кейгән, ти. Үҙҙәре лә бер-береһенә, һуйып ҡаплаған кеүек, оҡшаған, ти. Аранан береһен батшаның үҙ ҡыҙы тип күрһәтәләр. Кис ҡыҙҙар, төрлө уйындар уйнап күңел асҡылар ҙа, йоҡларға яттылар. Умыс, уларҙы һаҡлап, абайлап ҡарап тора башланы, ти.

Бына бер ваҡыт ишек үҙенән-үҙе асылып китә. Бик сибәр бер егет килеп инә. Инеү менән туҙан һымаҡ бер нәмәһен бүлмәгә һибеп ебәрә. Умыс был туҙандан йоҡлай яҙып, йоҡлай яҙып ҡала. Егет батша ҡыҙын уята ла алып сығып та китә. Умыс уларҙы баҫтырып бара. Егет ҡыҙҙы осортоп алып китәм генә тигәндә, Умыс быларға ҡарап, бабай биргән иҫке ҡылысын һелтәй башлай. Һелтәгән һайын ҡылыстан ут яуа, ти. Теге егет Умыстың ҡылысынан ҡотола алмаҫын белде лә ташлап ҡасты, ти. Умыс ҡыҙҙы бүлмәһенә алып инеп, урынына һалды ла йәнә ҡарауылларға ултырҙы, ти.

Бер ваҡыт батша яғынан ҡарап йөрөй торған кешеләр киләләр. Ҡыҙҙың урынында икәнен күреп, шатланалар. Батшанан барып һөйөнсө алалар. Шунан батша

Умысты ҡыҙҙы тағы ла бер нисә көн ҡарауылларға ҡушты, ти.

Тағы кис була. Әлеге ҡырҡ ҡыҙ йәнә уйнанылар, көлдөләр, ти. Шунан йоҡларға яттылар, ти. Бөтә һарай тынғас, Умыс теге бүректе кейҙе, ҡылысын таҡты ла батша ҡыҙын һаҡларға ултырҙы, ти. Күп тә үтмәй, теге егет килеп тә керә. Кергәс тә, туҙанын һибеп ебәрә, батша ҡыҙының янына барып, битенән һыйпай, ҡыҙ йылмая биреп уянып китә. Шунан икәү етәкләшеп сығып та китәләр. Умыс та улар артынан ҡалмай. Бына былар осоп китергә йыйыналар. Шул ваҡыт Умыс ҡылысы менән һелтәнә башлай. Егет ҡылыстан яуған утҡа сыҙай алмай, ҡыҙҙы ташлап китә. Умыс ҡыҙҙы тағы урынына индереп ятҡыра.

Таң ваҡытында ҡарап йөрөүселәр килә. Ҡыҙҙың өйҙә ятҡанын күреп, тағы хайран ҡалалар. Шулай итеп, Умыс был ҡыҙҙы ете төн ҡарауыллап, етеһендә лә теге егеткә бирмәй алып ҡала. Шунан һуң теге бөтөнләй килмәҫ була.

Батша Умысты саҡыртып алды ла:

— Ҡыҙым һинеке булды инде, һин минең кейәүем булдың, батшалығым, бөтә малым һиңә булһын, — ти. Шунан ат еткән ергә ат, хат еткән ергә хат ебәреп, халыҡты туйға саҡырта. Бер заман ҡара сәүкә шикелле халыҡ төркөмө ағылып килә башлай. Ат саптырыу, кем уҙарҙан йүгерешеү, башҡа уйындар менән туйҙы бик шәп итеп атҡарып, Умысты батша итеп күтәреп, халыҡ өйҙәренә таралды, ти.

Умыс батша булып бер ни тиклем ваҡыт торғас, теге ҡәһәр һуҡҡыры егет быға ҡаршы һуғыш башлай. Ул булған икән дейеү пәрейҙәре батшаһының улы. Матур егет ҡиәфәтендә йөрөгән.

Умыс, үҙе башлыҡ булып, ғәскәрен йыйҙы, ти. Билдәләнгән көндө һуғышҡа сығып китәләр. Дейеү пәрейҙәре ҡара болот шикелле эркелеп килә, ти, бер заман. Умыс, быларҙы күргәс, үҙенең егермеләп һалдатын ала ла, ҡалған ғәскәрен шул урында ҡалдырып, дейеү пәрейҙәренә ҡаршы китә. Барып етер ваҡытта ғына теге сәкмәнен,

бүркен, итеген кейеп, ҡылысын тағып ала. Дошманына ҡаршы ут яуҙыра башлай. Арттан ҡарап торған ғәскәр быға хайран ҡала. Был көндө лә ул дейеү пәрейҙәре яуынан берәүһен дә ҡалдырмай ҡырып бөтөп, һарайына ҡайтып китә. Һалдаттары теп-теүәл көйөнсә урындарында ҡала. Умыс, һарайына ҡайтҡас, бисәһе уның алдында тыштан ҡыуанып йөрөгән булһа ла, эстән генә сибәр егет яуының еңелеүенә бик ҡайғыра ине, ти. Хәйләкәр бисә кис, ире янына яткас, хайран ҡалған булып, Умыстың дошманды шулай анһат еңеү серен һорай. Умыс әйтмәй.

Умыс икенсе көн тағы һуғышҡа китә. Һалдаттарына мискә-мискә бал алдырып эсергә ҡуша, ә үҙе дейеү пәрейҙәренең болот кеүек ағылып килгән ғәскәрен тағы ла ҡыра-ҡыйрата. Шунан, хәл алырға тип, һарайына ҡайта. Ҡайын-ҡайнылы уны йәнә ҡыуанып ҡаршы ала. Бисәһе генә һаман һораша, төпсөнә, серҙе белергә тырыша. Умыс әйтмәй. Шулай ҙа ахырында, кис ятҡас, мут ҡатыны бик теңкәһенә тейгәс:

— Минең тышта һөйәүле торған көрәгем генә һау булһын, уның менән теләгәнемде эшләй алам, — ти.

Умыс йоҡлап китә, бисәһе сығып, үҙенең кешеләре арҡылы һөйгән егетенә еңеүҙең сере көрәк икәнен, шул көрәкте алмаштырып алырға кәрәклеген белдерә. Шымсылар көрәк урынына көрәк ҡуйып, тегеһен алып китәләр. Иртәгеһенә Умыс тағы ла һуғышҡа китә. Был ваҡытта уның ғәскәре дыу килеп, бал эсеп иҫереп ята ине, ти. Умыс бынығында ҡайтмай һуғыша. Дейеү пәрейҙәренең ябырылып килгән ғәскәрен йәнә ҡырып бөтөрә.

Бер нисә көндән һуң ҡайта был, халыҡ еңеү хөрмәтенә байрам үткәрә. Бисәһе, үпкәләгән кеше булып, серен тағы ла ныҡышыбыраҡ һорай. Юхаланып, күп һораны, күп ялынды, ти ул. Бик йәнде ҡыйып барғас, Умыс ысын серҙе әйтеп бирҙе, ти.

— Минең көсөм — иҫке сәкмән, иҫке бүрек, иҫке итек, ҡылысым, — ти. Бисәһе шул ваҡыт:

— Һуң улар ни эшләй? — тип һорай. Умыс:

— Сәкмәнемдән уҡ үтмәй, бүркем үҙемде күрер

-күҙгә күрһәтмәй, итегем теләгән еремә баҫтыра, ҡылысым ут яуҙыра, — тип әйтте лә туҡтаны, ти. Умыс ниңә әйткәненә үкенә лә башлай. Үкенһә лә, эш уҙған була. Хәйләкәр бисә барлыҡ серҙе, Умыс йоҡоға киткәс кенә, шымсыларына әйтте, уларға Умыстың сәкмәнен, бүркен, итеген, ҡылысын амаштырып биреп ебәрҙе, ти.

Иртәгеһенә Умыс һуғышҡа сығып китә. Ғәскәрен ҡалдырып, элеккесә, үҙе генә һуғышырға уйлай. Иллә-мәгәр быны итеге алыҫҡа атламай, бүркенең дә, ҡылысының да рәте киткән, ти. Шул арала дейеү пәрейҙәре быны, тотоп алып, батшаларына алып киттеләр, ти. Батша малайы Умыстан ниндәй яза менән үлергә теләүен һорай. Умыс:

— Кәүҙәмде быуын-быуынымдан тураҡлап, аҡ уҡаға төрөп тегегеҙ ҙә әйәремдең ҡанъяғаһына бәйләп ебәрегеҙ. Атым тыуған илемә алып ҡайтыр, туғандарым, ағай-энеләрем һөйәгемде тәрбиәләп күмер, — ти.

Умысты быуын-быуынынан тураҡланылар, ти. Үҙе әйткәнсә, аҡ уҡаға төрөп тектеләр, шунан әйәренең ҡанъяғаһына бәйләп, атын бер һуғып ебәрҙеләр, ат сабып сығып китте, ти. Ат Умыстың тыуып үҫкән йортона уҡ барманы, теге заман бесән кәбәне янып ятҡан аҡланға туҡтаны, шунда утлап йөрөй башланы, ти. Ә теге сибәр егет һынлы дейеү пәрейе, бөтә батшалыҡты баҫып алып, үҙ хөкөмдәрен йөрөтә башланы, ти. Умыстың хәйләкәр бисәһен үҙенә алды, ә хәйләкәр бисәнең ата-әсәһен зинданға яптырҙы, ти. Ҡатыны быны өсөн бошонманы, бар тип тә белмәне, ти.

Берҙән-бер көндө Умыстың аты туҡтаған ергә ҡасандыр сәкмән, бүрек, итек, ҡылыс биргән ҡыҙ килеп сыға. Был ҡыҙ шунда уҡ атты таный, йәһәт кенә уҡаны һүтеп ҡарай. Ҡараһа, Умыстың кәүҙәһе тураҡланған хәлдә икәнен күрә. Шунан был, күп уйлап тормай, йыланға әүерелә лә, бер ҡарғаның балаһын тотоп ала. Үҙе яңынан ҡыҙ була. Шул ваҡыт ҡарға ҡыҙҙан балаһын ҡотҡарыуҙы һорай. Ҡыҙ:

— Бына һиңә кескәй генә буш ике шешә, икеһен ике аяғыңа тағам, алыҫта йәнәшә ятҡан ике күл булыр,

шул күлдәрҙең береһенән бер шешәгә, икенсеһенән икенсе шешәгә һыу тултырып кил, — ти. — Күлдәрҙең һаҡсыһы булыр, ул ике күлдең уртаһында ятыр. Шул һаҡсы тапҡырына еткәс, бынау алтын киҫәктәрен төшөрөрһөң. Һаҡсы шул алтындарҙы алам, тип, күлдән ситкәрәк киткәс, сапсан ғына әйләнеп, икеһенән дә һыу алырһың да осорһоң, — ти.

Ҡарға ҡыҙ әйткәндәрҙе тыңлап тора ла күлгә ҡарай осоп китә. Һаҡсы тапҡырына еткәс, бер алтын киҫәге төшөрә. Һаҡсы был алтынды алып, иҫе китеп ҡарап торғанда, ҡарға йәнә берҙе төшөрөп ебәрә, һаҡсы уныһын барып алыуға, ҡарға сапсан ғына борола ла, ике күлдән ике шешәһенә һыу тултырып алып, осоп та китә. Ҡайтҡас, ҡыҙ, бының шешәләрен алып, ҡарға балаһын ҡотҡара. Шунан ул бер шешәләге һыуҙы Умыстың тураҡланған кәүҙәһенә ҡойоп сыға. Тураҡланған кәүҙә бергә ойошоп, элекке хәленә килә. Икенсе шешәләге һыуҙы Умыстың ауыҙына ҡоя. Шул ваҡыт Умыс:

— Ай-һай-һай, оҙаҡ йоҡлағанмын да һуң, — тип килеп тора. Ҡыҙ:

— Оҙаҡ йоҡлағанһың атаң башы! — ти. Умыс, ҡыҙҙы күреп, хайран ҡала. Шунан үҙенең үлгәнен иҫенә төшөрә. Ҡыҙ Умыстың ҡайһылай был хәлгә юлығыуын һораша ла:

— Бына һиңә, улай булғас, ике доға өйрәтәм. Кәрәк ваҡытта уҡырһың, — ти.

Умыс бер доғаны уҡып ҡарағайны, өйрәк булды, икенсеһен уҡығайны, яңынан кеше булды, ти. Шунан һуң ҡыҙ быға:

— Һин ул дейеү пәрейҙәренә бар. Һине ташлап киткән бисәң ул батшаның улы менән һәр көн иртән сарҙаҡҡа сығып ултырыр. Сарҙаҡтан алыҫ түгел бер күл күренеп тора. Ана шул күл ҡамышлығына атыңды кертеп ҡуйырһың да үҙең доғаңды уҡығас, иртәнсәк күлдә алтын өйрәк булып йөҙөп йөрөрһөң. Шул ваҡыт теге егет, һине күреп, бисәһе менән күл янына килмәй булмаҫ, һин дә күл ситенәрәк барған булырһың; шул ваҡытта егет һине, йыуаш өйрәк икән тип белеп, итеген, сәкмәнен,



Айыу менән Бал ҡорттары



Ишәк, Эт, Бесәй, Әтәс

бүркен, ҡылысын һалып, һине тоторға тип, күлгә төшөр. Һин ул яҡынлаған һайын, аҙ ғына ҡасынҡыраған булып алдаштырып, бер талай ер эйәртеп барырһың да, сапсан ғына осоп, егеттең өҫ-баш, аяҡ-кейемдәре менән ҡылысы янына төшөп, кеше булырһың, ҡылысты ҡулыңа алырһың, — ти.

Умыс, ҡыҙға рәхмәттәр әйтеп, хушлашып, атын менеп китеп тә барҙы, ти. Урмандар үтте, һыуҙар, тауҙар кисте, ти. Бараһы еренә барып еткәс, ҡыҙ әйткәнсә, атын ҡамыш араһына индерә. Үҙе доғаны уҡып, алтын өйрәккә әүерелә лә күлдә йөҙөп йөрөй башлай. Иртәнсәк теге егет бисәһе менән сарҙаҡҡа сыҡты, ти. Ҡаранып торғас:

— Ана, бер алтын өйрәк йөҙөп йөрөй, кейен, барып атып алайым, — ти. Сарҙаҡтан йүгереп төшөп китә, үҙемде өйрәк күрмәһен тип, бүркен кейә, йәнә сәкмәнен, итеген кейеп, ҡылысын тағып ала ла күл буйына китә. Артынан ҡатыны бара. Өйрәктең ситтә генә йөрөгәнен күргәс:

— Бик йыуаш икән, мин быны терелəй тотоп алайым, — тип, сисенеп, күлгә төшә. Өйрәк тоттормай, бер талай ер алдатып алып бара. Теге бисә лә, өйрәк киткән яҡҡараҡ, күл ситләп китә. Шул ваҡыт алтын өйрәк, пыр итеп осоп, егеттең кейемдәре менән ҡылысы янына төшә лә, икенсе доғаны уҡып, кеше була, шунан ҡылысын алып:

— Хәҙер һеҙ минең ҡулымда! — тип ҡысҡыра.

Шул ваҡыт теге сибәр егет тә, хәйләкәр бисә лә һыҡтап ебәрә. Умыс икәүһен дә ҡулға ала. Әҙме-күпме үҙе батша булып торған илгә алып ҡайта. Батшалығын Умысҡа биргән бабайҙы, йәнә уның әбейен зиндандан ҡотҡара ла:

— Дейеү кейәүегеҙ менән хыянатсы ҡыҙығыҙға ниндәй яза бирәйек? — тип һорай.

— Энә менән тураҡлап үлтерергә кәрәк үҙҙәрен! — тиҙәр тегеләр.

Шунан һуң Умыс дейеү егет менән бисәһен энә менән тунап үлтерҙе, ти. Ҡайны ҡартты яңынан батша итеп

ултыртып, үҙе: «Сит илдә солтан булғансы, үҙ илемдә олтан булайым», — тип тыуған-үҫкән иленә ҡайтып китте, ти.

## ҺУНАРСЫ БАЙҒУЖА

Борон-борон заманда бер ҡарт менән ҡарсыҡ йәшәгән. Ҡарт оҫта һунарсы булған. Бер ваҡыт батша, һунарсыларҙы йыйып, уларҙың иң шәбен һайлай, ти. Батша вәзирҙәре, ҙур бер урманды яҡ-яҡтан ау ҡороп ҡамап алалар ҙа, һайт та һойт итеп йәнлектәрҙе ҡыуалар икән. Бер яҡтан ғына йәнлектәргә сығыу юлы ҡалдырыла. Бына шул урынға ун бишләп һунарсыны берәм-берәм ҡуялар. Улар ҡасып барған йәнлекте атырға тейештәр икән. Һунарсыларҙың береһе лә тейҙерә алмай, ти.

Теге ҡартты алып киләләр. Ул һәр бер йәнлекте йығып һалып ҡуйҙы, ти. Ҡалған һунарсылар, бының даны күтәрелеүҙән көнләшеп, уны алыҫҡа, урман эсенә алып барып, ҡарсығы менән ҡалдырып китәләр. Ҡарт менән ҡарсыҡ урманда рәхәтләнеп йәшәп яталар, ти. Уларҙың бер улы донъяға килә. Уға Байғужа тип исем ҡушалар. Бер ни тиклем шатланышып йәшәгәс, ҡарт һунарсы үлеп китә, ти.

Ҡарсыҡ менән улының бер ваҡыт аҙығы бөтә. Инде ни эшләргә? Ҡарсыҡтың ҡартынан ҡалған өс йөҙ һум аҡсаһы була. Ул, улын ҡалаға ебәреп, унан аҙыҡ-түлек алып ҡайтырға ҡуша. Ул йөҙ һум аҡса алып, һуҡмаҡ буйлап ҡалаға йүнәлә. Оло юлға килеп сыға. Ни күҙе менән күрһен, бесәйҙе үкертеп туҡмайҙар, ти. Малай ҡарап тора ла ғәжәпкә ҡалып һорай:

— Ҡайҙа бараһығыҙ, ағайҙар? Бесәйҙе ниңә интектерәһегеҙ?

— Беҙ ҡалаға барабыҙ, бына ошо бесәйҙең тиреһен һыҙырып тапшырабыҙ, беҙгә аҡса кәрәк, — тиҙәр тегеләр.

— Һеҙ, ағайҙар, бесәйҙе миңә бирегеҙ, мин һеҙгә йөҙ һум аҡса бирәм, — ти малай.

Малай бесәйҙе ҡуйынына тыға ла әсәһе янына ҡайтып китә. Әсәһе көйәләнә:

— Икәүҙән өсәү булдыҡ, инде нисек йәшәрбеҙ икән? — ти.

Бер аҙ торғас, тағы йөҙ һум аҡса биреп, әсәһе Байғужаны ҡалаға ебәрә. Улы тағы китә. Әлеге ергә еткәс, бер этте, ағас башына аҫып, интектереп ятҡан кешеләрҙе осрата, ти.

— Ағайҙар, был этте ниңә интектерәһегеҙ, һеҙ уны миңә һатығыҙ, — ти икән малай.

— Йөҙ һумыңды бир ҙә ал, — тиҙәр тегеләр. Шулай итеп, теге малай этте етәкләп әсәһе янына әйләнеп ҡайтып китә. Әсәһе тағы асыулана:

— Мин һине аҙыҡ артынан ебәрәм, ә һин тик тамаҡ һанын ғына арттыраһың! Инде ни эшләйбеҙ? — ти. Һуңғы йөҙ һум аҡсаны биреп, әсә улын тағы ҡалаға ебәрә.

Малай ошо юлға барып етһә, юлсылар бер йыланды илертеп-ҡотортоп туҡмап алып баралар, ти. Малай был йыланды ла һатып алып ҡайтып китә. Әсәһе төн буйы йонсоп, ҡайғырып сыға.

— Был йылан үҙебеҙҙе йотоп ҡуя бит хәҙер, — ти әсә.

Ә йылан, өйҙө ике тапҡыр уратып алып, ҡарсыҡтың әрләшеүенә ҡолаҡ һалып ята икән. Иртә менән малай тышҡа сыҡһа, теге йылан телгә килә, ти:

— Әсәйең ниңә былай йонсой, әллә риза түгелме берәй нәмәгә? — тип һорай. Малай бар хәлде йәшермәй һөйләп бирә. Шул ерҙә йылан малайға әсәһе менән хушлашырға ҡуша:

— Әйҙә, бергә-бергә киттек, — ти.

Байғужа әсәһе менән хушлаша ла, әсәһенең риза булмауына ҡарамайынса, йылан менән сәфәр сығып китә. Былар бара торғас, аяҡ баҫҡыһыҙ күп йыландар

һыҙғырышып ятҡан ергә килеп етәләр. Йылан малайға күҙен йомоп, үҙенең артынан бер иле лә ҡалмайынса барырға ҡуша. Йыландар, баш күтәреп, юл бирәләр. Былар шулай бара торғас, ер аҫтына инә торған юлға килеп сығалар. Малайға көтөп торорға ҡушып, йылан үҙе эскә инеп китә. Был йылан аждаһа йыландарҙың улы икән. Атаһы-әсәһе улының ҡайтыуына бик кинәнәләр:

— Кем генә һине ҡотҡарҙы? — тип һорайҙар.

— Теймәҫ булһағыҙ, әйтәм, — ти йылан. Ата-әсәһе теймәҫкә вәғәҙә бирәләр. Йылан егет янына сыға ла уны эскә алып инә. Малайҙы ике-өс көн буйына бик яҡшылап ҡунаҡ итәләр. Бер көндө йылан егетте тышҡа алып сыға ла:

— Атайым һиңә үҙең күтәргәнсе алтын бирергә итә. Ә һин алтынды алма, уның ҡулындағы алтын балдағын һора. Ул тикәй генә түгел. Уны кис менән сығып һыҙғыртһаң, пәрейҙәр йыйылалар, улар, ни ҡушһаң, шуны эшләп бирерҙәр, — ти.

Байғужа ҡайтырға әҙерләнә. Уға ҡарт йылан үҙе күтәрә алғансы алтын тәҡдим итә. Тик егет риза булмай, балдаҡты һорай. Ҡарт уңайһыҙланып китә. Шунда улы һүҙгә килә:

— Атай, балдағың минән дә ҡыйбатмы ни? — ти. Ҡарт риза булып балдаҡты егеткә бирә. Йылан быны килгән юлдан сығарып, оҙатып тороп ҡала.

Егет өйөнә ҡайтып инһә, әсәһе бер мөйөштә, эт менән бесәй икеһе ике мөйөштә яталар, ти. Аслыҡтан интегеп, күҙҙәре эренләп бөткән, ти. Хәҙер ни эшләргә? Кис булып, мәҙе ваҡыты еткәс, егет, тышҡа сығып, балдаҡты һыҙғыртып ебәрә. Пәрейҙәр йыйылып китә:

— Егет, һиңә беҙҙән ни кәрәк? — тип осоп төшөп торалар, ти.

— Күккә еткән күк һарай төҙөгөҙ. Бөтә мөмкинлектәре, һәр төрлө аҙыҡтары булһын, ти, егет. Пәрейҙәр йәнфарман эшкә тотоналар. Ҡайһыһы бура бурай, ҡайһыһы ашлыҡ, мал үҫтерә, ҡайһыһы йорт, баҡса, ҡура яһай, ти. Таң атыуға йорт әҙер булды, ти. Иртә тороп сыҡһа, ҡар-

сыҡ, йортто күреп, хайран ҡалды, ти. Йүгереп барып улын уята. Улы һарайға иҫе китмәй генә:

— Әсәй, әйҙә яҡшы итеп бешерен, — ти. Шул көндән алып былар яҡшы итеп йәшәп китәләр.

Бер ваҡыт мәҙе ваҡытында егет балдаҡты тағы һыҙғыртып ебәрә. Пәрейҙәр йыйыла ла:

— Егетем, тағы ла ни кәрәк? — тиҙәр. Егет бәүелеп кенә торған кырандас егелгән, йылтыр еҙ ышлыялы, ҡара тояҡлы пар ат һорай. Егеттең теләгәне шунда уҡ алдына килә. Егет, әсәһен кырандасҡа ултыртып, батша ҡыҙын кәләшлеккә һорарға ебәрә. Әбей бара, үҙенең йомошон әйтә. Әбей үҙенең һорауын әйткәс, батша көлөмһөрәй ҙә үҙ шартын ҡуя:

— Күккә еткән һеҙҙең йорттан минең йортҡа тиклем улың хрусталь күпер һалдырһын, уның аҫтынан һөт, бал йылғаһы ағып ятһын. Күперҙең ике яғында төрлө емеш ағастары үҫеп, бешеп, емештәре ергә төшөп ултырһын, һандуғастар туҡтауһыҙ һайрап торһондар, — ти.

Әсәһенең ҡайтып етеүе була, мәҙе төшә. Мәҙе етеү менән егет, пәрейҙәрҙе тағы йыйып алып, эшкә ҡуша. Таң атыуға барыһы ла батша әйткәнсә була. Егет, атына ултырып, батша ҡапҡаһы янынан барып әйләнә.

Туй ваҡыты етә. Егет әсәһен, этен, бесәйен алып туйға бара. Ҡыҙҙың еңгәләре кейәүҙең серен белергә тырышалар. Егет әйтмәй. Быны бик ныҡ эсерәләр, был һаман өндәшмәй. Тағы ныҡыраҡ эсерәләр. Иҫереп китеп, егет, маҡтанып, балдағын күрһәтә.

— Бына ҡайҙа ул минең серем! — ти. Еңгәләре быны иҫерткәнсе эсерәләр ҙә, балдаҡты ҡулынан алып, үҙен тиҙәклеккә ташлайҙар. Ә батша ҡыҙы бер пәрей менән ҡасып китә.

Иртә менән тиҙәк түгеүсе егетте таный ҙа батшаға барып әйтә. Егетте батша алдына алып киләләр. Батша уға өс сәғәт эсендә ҡыҙҙы табып килтерергә ҡуша.

— Был ваҡыт бик ҡыҫҡа, өс көн бир, — ти егет.

— Ярай, өс көн булһын, — ти батша.

Егет, атына ултырып, үҙе менән этте, бесәйҙе алып, юлға сығып китә. Юлда барғанда бесәй:

— Ҡорола булһа, мин табам, — ти.

— Һауала булһа, мин табам, — ти эт.

Баралар, баралар, ти, былар. Бара торғас, бер ҙур һыуға килеп етеләр. Байғужа һыу буйында аты менән тороп ҡала, ә теге эт бесәйҙе ултыртып ала ла һыуҙы арҡыры йөҙөп китә. Һыу аша сыҡҡас, эт һыу буйында ҡала, бесәй бер үҙе эҙләп китә. Эй китә, эй китә, китә торғас, ул бер туп-тумалаҡ өйгә барып етә. Өйгә инеп китәйем тиһә, ишеген тапмай. Эҙләй торғас, ишекте эҙләп таба ла ишек асылырҙы көтөп ултыра. Ишек асылыуға, йылт итеп өйгә инә лә һике аҫтына йүгерә. Өйҙәгеләр:

— Ә йорт бесәйе килгән икән, — тип быға иғтибар итмәйҙәр.

Кис була, хужалар йоҡларға яталар. Бында пәрейе менән батша ҡыҙы тора икән. Ут һүнеү менән үк, бесәй бер урынды ла ҡалдырмай балдаҡты эҙләй. Хатта усаҡтағы көлдө лә бөртөкләп ҡарай. Таба алмағас, бер хәйлә уйлап таба. Мыяулаған булып, хужалар янына һыйына. Шул арала ҡойроҡ осон хужа ҡатынының танауына тығып өлгөрә. Ҡатындың сөскөрөп ебәреүе була, ауыҙындағы балдаҡ ырғып китә. Бесәй тиҙ генә уны эләктереп ала ла урындыҡ аҫтына инеп боҫа.

Иртә менән ишек асылыуға бесәй сығып тая. Эткә ултырып йылға аша сығып килә, ти. Күп юл да китмәй. Эттең намыҫы килә башлай.

— Балдаҡты бесәй тапҡан тип әйтәләр инде, — тип уйлай ҙа бесәйҙән балдаҡты үҙенә биреүен һорай. Бесәй бирмәй. Эт бесәйҙе бер һелкетеп ала:

— Әгәр бирмәһәң, һыуға төшөрөп ебәрәм, — ти. Бесәй ҡурҡа ла балдаҡты эткә бирмәк булып ынтыла. Шул арала балдаҡ һыу төбөнә төшә лә китә.

Был икәү бик көйәләнеп, ярға кире йөҙөп сығалар. Шунда балыҡсылар балыҡ тотоп йөрөйҙәр икән. Балыҡсылар быларҙы йорт бесәйе менән йорт эте тип ҡабул итәләр. Күп итеп балыҡ тоталар ҙа таҙартырға ултыралар. Балыҡтың эсен бесәй менән эткә ырғыталар.

Бер балыҡ эсенән бер ауыр нәмә килеп сыға. Бесәй быны тиҙ генә элеп ала ла былар икәүләп балыҡсылар эргәһенән таялар. Был әлеге балдаҡ икән. Хәҙер эт бер ҙә балдаҡты үҙенә биреүен һорамай, ти. Һыуҙан аша сығып, балдаҡты егеткә тапшыралар ҙа былар, өсәүләп батша янына әйләнеп ҡайталар. Батшаға ҡыҙының пәрей менән ҡайҙа тороуын һөйләп бирәләр.

Батша ҡыҙҙы ла, пәрейҙе лә барып үлтереп килергә бойора, егеткә күп итеп ғәскәр бирә. Егет ғәскәре менән теге ергә барып етә. Пәрей менән ҡыҙ һаман да йоҡлап яталар икән. Егет уларҙың уянғандарын көтә.

— Йоҡлап ятҡан кешеләрҙе үлтерергә ярамай, — ти. Пәрей менән ҡыҙ уянып китһәләр, тирә-яҡ ғәскәр менән тулы. Ғәскәр һә тигәнсе быларҙы үлтереп, йорттарын туҙҙырып ташлай.

Был мәлде хрусталь күпер ватыла башлаған, ағастар һарғайған, йылғалар кипкән, ҡоштар осоп киткән булалар.

Батша барыһын да яңыртырға ҡуша. Егет балдаҡты һыҙғыртып ебәрә, пәрейҙәр йыйылып киләләр. Егет ҡушыуынса, улар күперҙе өр-яңынан һалып ҡуялар. Күпер аҫтынан һөт, бал йылғалары аға. Тирә-яҡта төрлө емеш ағастары, емештәре бешеп өлгөрөп, ергә ҡойолоп торалар. Һандуғастар ҙа, башҡа ҡоштар ҙа, сутылдашып һайрап ултыралар, ти.

Барыһы ла яңынан эшләнгәс, егеткә батша кесе ҡыҙын бирә. Байғужа уға өйләнә. Гөрләтеп туй яһайҙар, һуңынан, уйнап-көлөп, рәхәт ғүмер итәләр.

## СӘЙФЕЛМӨЛӨК

Борон-борон заманда бер батша йәшәгән. Уның Сәйфелмөлөк исемле улы булған. Сәйфелмөлөк һунарға һәр ваҡыт бер үҙе йөрөр булған. Бер көндө ул эңер төшкәнсе

йөрөгән, бер йәнлек тә ата алмаған. Ҡапыл тиҫкәре яктан әсе ел сыҡҡан, урман шаулаған, күк күкрәп, йәшен йәшнәп, ямғыр ҡоя башлаған. Сәйфелмөлөк ҡайтыу яғына боролған. Шул саҡ уның ҡаршыһына әҙәмгә лә, хайуанға ла оҡшамаған һыңар мөгөҙлө бер йән эйәһе килеп сыҡҡан. Өҫтөндә йыртыҡ ҡара тун, ти. Сәйфелмөлөк ҡурҡыуға төшкән, шулай ҙа, был йәнде атырға тип, уғын төҙәй башлаған. Шул ваҡыт теге, телгә килеп:

— Егет, һин миңә атма: миңә уҡ үтмәй, һыу һеңмәй, ут та мине яндырмай, — тигән. — Өҫтөндәге кейемеңде миңә һыпырып бир, алмашҡа минең тунды алырһың, — тигән. Сәйфелмөлөктөң затлы кейемдәрен иҫке тунға алмаштырғыһы килмәгән. Теге йән оҙаҡ көтөп тормаған, егеттең бөтә кейемдәрен һалдырып алған да үҙенең ҡара ялбыр тунын ҡалдырып киткән.

Сәйфелмөлөк, ҡайтайым тиһә, бер урында өйрөлөп тик йөрөй икән. Шулай аҙашып йөрөй торғас, бер ут күреп ҡалып, ут янына киткән.

— Йоҡларға индерегеҙ әле, — тип тәҙрә шаҡыған. Өйҙөң хужаһы, егеттең йыртыҡ тунын күргәс, был йә берәй ҡасҡындыр тип уйлап, ишекте ныҡ бикләп ҡуйған. Үҙенең батша улы булыуын, уны талап йыртыҡ тун кейҙереп китеүҙәрен һөйләгәс, хужа уны өйгә индергән. Был урман ҡарауылсыһы икән.

Сәй эсеп, Сәйфелмөлөк йоҡларға ятҡан. Тик ул һис тә йоҡлап китә алмаған: күҙен йомһа, күҙ алдына йыртыҡ туны менән теге нәмә килеп баҫҡан. Шулай яфаланып ята торғас, төн уртаһы еткән. Урман ҡарауылсыһының әтәсе лә ҡысҡырып ебәргән. Шул мәлде Сәйфелмөлөктөң күҙе ҡаршыһында эленеп торған теге ялбыр ҡара тунға төшкән. Ҡараһа, ни күҙе менән күрһен: әлеге ялбыр тунда бик матур ҡыҙ һүрәте тора, ти. Һүрәттәге ҡыҙ тирә-яҡҡа нур сәсеп бөтә өйҙө яҡтыртҡан да юғалған. Сәйфелмөлөк һүрәт ҡыҙҙы күпме генә күрергә тырышып ҡараһа ла, тунда ҡыҙ яңынан күренмәгән. Егет төнө буйы керпек тә ҡаҡмай сыҡҡан. Күҙен йомһа, күҙ алдында әлеге ҡыҙ һүрәте генә торған.

Иртәгеһен урман ҡарауылсыһы егеткә юл өйрәтеп ҡайтарып ебәргән. Батша улының бер табышһыҙ, иҫке тун кейеп ҡайтып кереүенә аптыраған. Сәйфелмөлөк башынан үткән хәлдең бөтәһен дә атаһына һөйләгән, тик тунда күренгән һүрәт ҡыҙҙы әйтмәгән. Шул көндән башлап Сәйфелмөлөк ашамаған-эсмәгән, уйнамаған-көлмәгән, һунарға ла ҡабат сыҡмаған. Төндәрен ул йоҡлай алмаған.

Атаһы әлеге тунды соланға элдереп ҡуйған икән. Сәйфелмөлөк, төн уртаһы еткәс тә, сығып юғала торған булған. Батша улын күҙәтергә булған. Улының соланға инеп ултырғанын белгәс, кире кереп йоҡларға ятҡан. Икенсе төндө батша, улынан алда барып, соланға кереп бикләнгән. Төн уртаһы еткәс, соланға Сәйфелмөлөк килеп ингән. Әтәс ҡысҡырғас та, тунда ҡыҙ һүрәте хасил булған. Батша эштең асылын аңлаған, улының һарғайыуына сәбәпсе тундағы һүрәт икәненә төшөнгән.

Берҙән-бер көндө ул, сихырсыға барып, сихыр ҡайтарырға уйлаған.

— Өс тау, өс диңгеҙ аша үтеп кенә сихыр ҡайтарыусыға барып була, — тигәндәр уға.

Батша вәзирҙәре, өс көн, өс төн барып, өс тау, өс диңгеҙ аша үтеп, сихырсыны эҙләп тапҡандар. Эштең нимәлә икәнен ҡарсыҡҡа һөйләп биргәндәр. Ҡарсыҡ уларға:

— Ул ҡыҙ донъяла бар. Ул ендәр батшаһы Күк ҡарғаның иң кесе, ун икенсе, ҡыҙы. Мин уға алып барыу юлын өйрәтә алмайым. Уны минең уртансы апайым белә. Уға ете диңгеҙ аша үтеп кенә барып була, — тип әйтеп ҡайтарған.

Сәйфелмөлөктөң ҡыҙҙан башҡа тора алмаясағын белгәс, батша улына караптар, кешеләр биреп, бәхетле юл теләп, илап-илап, алыҫ юлға оҙатҡан. Юлда барғанда, дауыл ҡубып, караптар ватылып бөткән, ә ярандары үлеп ҡалғандар.

Карап таҡтаһына тотоноп ҡалған Сәйфелмөлөктө дауыл утрауға сығарып ташлай. Был утрауҙа ҡырағай кешеләр йәшәгән була. Улар Сәйфелмөлөктө үҙҙәренең атамандарына килтереп бирәләр. Атамандың еткән

ҡыҙы Сәйфелмөлөккә ғашиҡ була, был турала атаһына әйтә. Атаман Сәйфелмөлөккә:

— Йә һин минең ҡыҙыма кейәү булаһың, йә, кешеләремә биреп, мин һине теткеләтеп ташлайым, — ти. Сәйфелмөлөк атамандың ҡыҙына өйләнергә риза булмай. Бер көндө ул ҡасып китә, ете ай тулды тигәндә, сихырсы ҡарсыҡтың уртансы апаһын эҙләп таба. Сихырсының уртансы апаһы:

— Бик ҡурҡыныслы юлға сыҡҡанһың. Унда барған кешеләр береһе лә кире ҡайта алмай. Дейеү батша кешеләрҙе теткеләп ташлай. Унда барыу юлын минең оло апайым белә. Мин һиңә алтын балдаҡ бирәм. Оло апайым был балдаҡтың ниңә кәрәклеген аңлатыр, — тип сихырсы ҡарсыҡ оло апаһына юл өйрәтеп ебәрә.

Туғыҙ диңгеҙ, туғыҙ тау аша үтеп, Сәйфелмөлөк сихырсының оло апаһын эҙләп таба. Сихырсы ҡарсыҡ егеткә дейеү батшаға барыу юлын өйрәтә.

— Дейеү батшаһының ун ике ҡыҙы булыр. Улар һәр көн иртән, ун ике аҡҡош булып, ҙур күл буйына осоп килерҙәр. Күлдең уртаһында ҡуйы ҡыуаҡлыҡтар менән ҡапланған утрау булыр. Ун икеһе лә осоп килерҙәр ҙә сисенеп һыуға сумырҙар. Ун бере бер урынға, ун икенсеһе икенсе урынға сисенер. Һин уларҙың сисенгәнен ҡарап тор ҙа ун икенсе ҡыҙҙың кейемдәрен алып йый. Тик һин, уны күреп һуштан яҙмаҫ өсөн, кәнфит ҡап, ә ҡыҙ һине яратһын өсөн һеңлем биргән балдаҡты уның урта бармағына кейҙер, — ти.

Егет, бик оҙон юл үтеп, һыуҙы эҙләп таба. Иртән аҡҡоштарҙың осоп килгәнен күҙәтә башлай. Тап ҡарсыҡ һөйләгәнсә, ун ике аҡҡош осоп килә. Сисенәләр, ҡыҙ һүрәтенә инәләр ҙә һыуға сумалар. Иң кесе һеңлеләре юғарыраҡ сисенә, һыуға ла һуңыраҡ сума. Шуны ғына көтөп торған Сәйфелмөлөк ҡыҙҙың әйберҙәрен ала ла ҡыуаҡ артына ҡаса. Бер аҙҙан һуң ҡыҙҙар һыуҙан сығалар ҙа: «Фу-фу, әҙәм еҫе килә», — тип тиҙ-тиҙ генә кейенеп осоп китәләр. Ә ун икенсе ҡыҙ, кейеме булмағас, аҡҡошҡа әүерелә алмай, илап тороп ҡала. Шунан ул кейемен йыйған кешене эҙләй башлай.

— Әгәр ҡатын-ҡыҙ булһаң, мәңгегә ҡыҙ булырмын, әгәр ир-егет булһаң, мәңгелек йәр булырмын, тик, зинһар, кейемдәремде бир, — ти ҡыҙ.

«Мәңгелек йәр булырмын» тигәнде ишетеү менән егет ҡыҙҙың кейемдәрен бирә, балдаҡты кейҙерә лә ни өсөн килгәнен һөйләп бирә. Сәйфелмөлөк ҡыҙға оҡшай, тик ул, алып ҡайтһа, дейеү Сәйфелмөлөктө ашаясағын әйтә. Ҡыҙ атаһына ҡарағанда ла оҫта сихырсы була. Уйлап тора торғас, ул егетте энә итеп, ҡауырһыны араһына ҡыҫтырып алып ҡайта. Ҡыҙы ҡайтып инеү менән дейеү:

— Фу-фу, әҙәм еҫе сыға, — ти.

Ҡыҙ егетте ниндәй генә һүрәткә индерһә лә, сихырсы атаһынан һис ҡотола алмай. Егетте әҙәм һүрәтенә баҫтырырға була. Егет дейеүгә нисек килгәнен һөйләп бирә.

— Ярай, улай булғас, һин өс һынауҙы үтәһәң, ҡыҙ һинеке булыр, — ти дейеү. — Беренсеһе: энә күҙенә уҡтан атып тейҙер ҙә күҙен миңә килтер.

Ҡыҙ өйрәтеүе буйынса, егет энә күҙенә ата, һынып ҡалған күҙҙе дейеүгә килтерә.

— Икенсеһе: минең йортта торған ҡара айғырға атланып, сабышҡа сыҡ, — ти дейеү. Ҡыҙ егеткә:

— Йортта торған ҡара айғыр атайым үҙе булыр, ул йүгән кейҙергәнсе генә һине тыңлар, ә һуңынан күтәреп һуғып үлтерер. Йүгәнләгәндә айғырҙың һул күҙен соҡоп ал, — ти.

Икенсе көндө егет ҡара айғырҙы йүгәнләп эйәрләй ҙә, күҙен соҡоп алып, ат сабышында беренсе килә. Шунан ул айғырҙың күҙен дейеүгә килтерә. Ҡараһа, дейеүҙең һул күҙе юҡ. Дейеү егеткә:

— Егет икәнһең. Тағы бер шартты үтә. Минең ун ике ҡыҙым араһынан иң кесе ҡыҙымды танып ал, — ти. Ҡыҙ уға:

— Беҙ бөтәбеҙ ҙә бер төрлө кейемдән, бер төҫлө булырбыҙ. Һин беҙҙең йөҙөбөҙгә ҡарама, ҡулыбыҙға ҡара. Минең йөҙөгөмдөң ҡашы булмаҫ: атайым күрмәгәндә, мин уны әйләндереп ҡуйырмын, — ти.

Егет, ҡыҙ өйрәтеүе буйынса, иң кесе ҡыҙҙы күрһәтә.

Дейеүгә иң яраткан ҡыҙынан айырылыуы ҡыйын була. Ул егетте яптырап ҡуя ла икенсе көндө ашарға уйлай. Ҡыҙ, быны һиҙеп ҡалып, егетте туҙанға әйләндерә, шунан тишектән алып сығып ҡаса. Сыҡҡас, үҙенең бүлмәһе ишеге алдына өс урынға төкөрөп китә. Иртән ҡыҙҙы сәй эсергә саҡыралар. Беренсе төкөрөк:

— Кейенәм әле, — тип яуап бирә. Икенсе тапҡыр апаһы килә.

— Аяғыма кейәм, — тип яуап бирә икенсе төкөрөк. Өсөнсө тапҡыр атаһы килә:

— Хәҙер барырмын, — тип ҡала өсөнсө төкөрөк. Күпме генә көтһәләр ҙә, ҡыҙ килмәй. Килеп ҡараһалар, бер нәмә лә юҡ.

Дейеү ҡасҡалаҡты алып килергә тип ғәскәр сығара. Ғәскәр ҡыуып етә башлағас, ҡыҙ тараҡ ташлай — ҡуйы урман хасил була, ғәскәр урманды үткән арала улар байтаҡ ҡына юл үтәләр. Ғәскәр ҡуйы урмандан үтеп сыға ла тағы ҡыуа башлай. Ҡыҙ арттарына таҫтамал ташлай — ташҡын киң даръя барлыҡҡа килә. Ғәскәр, даръяны сығып, ҡыҙ менән егетте тағы ҡыуа башлай. Ҡыҙ быны күреп ҡала ла, үҙе һандуғас була, егетте ағас итеп үҫтерә. Ғәскәр эҙләй-эҙләй, таба алмай, ҡайтып китә. Дейеүгә юлда нимә күрһәләр, шуны һөйләп бирәләр. Дейеү бик асыулана, ағас менән һандуғастың егет менән ҡыҙ булыуын әйтә. Ғәскәр яңынан ҡыҙ менән егетте эҙләргә сыға, ә был ваҡытта ҡыҙ менән егет үҙ юлдарын дауам итәләр. Улар тағы ла ғәскәр килеүен күргәс, һарыҡ көтөүе менән көтөүсе ҡарт һүрәтенә инәләр. Ҡыҙ менән егетте таба алмай, ғәскәр яңынан ҡайта. Өсөнсө ҡабат дейеү батша үҙе сығып китә. Атаһының килгәнен күргәс, ҡыҙ үҙе сиркәү һүрәтенә инә, ә егетте сиркәү ҡарауылсыһы итә. Дейеү быларҙы ҡыҙ менән егет тип уйламай, ҡайтып китә. Ҡайтып өс көн торғас ҡына, уның уйына сиркәү менән ҡарауылсы килеп төшә. Ул яңынан юлға сыға, тик хәҙер сиркәү урынында елдәр иҫкән.

Өс көн тигәндә Сәйфелмөлөк кәләше менән үҙ батшалығына ҡайтып инә. Ҡайтһа, атаһы үлгән, был илдә

батша таба алмайҙар, ти. Сәйфелмөлөк батша була, улар гөрләтеп туй яһайҙар. Хәҙер ҙә йәшәйҙәр, ти. Ә дейеү ҡыҙы менән кейәүен һаман таба алмай, эҙләп йөрөй, ти.

## АЛА ҠАРҒА

Борон-борон заманда, кәзә команда, өйрәк үрәтник, күркә дисәтник саҡта, һайыҫҡан һалдат, әтәс эфисәр, торналар янарал булғанда, бер ала ҡарға тотто ла диңгеҙҙән китеп барған бер карапты туҡтатты, ти. Караптың эйәһе, бер бай сауҙагәр:

— Был ни эшең, ала ҡарға? — тип һораны, ти. Ала ҡарға:

— Йә мин һораған нәмәңде бирәһең, йә карабыңды батырам! — тип әйтте, ти.

Ҡурҡыуынан ағарынған сауҙагәр ала ҡарғаның һораған нәмәһен бирергә риза булды, ти. Ала ҡарға:

— Илеңә әйләнеп ҡайтҡас, һинең йортоңа минән бер ала бейә барыр. Кем дә кем шуны беренсе булып күрә, шул уға атланып китергә тейеш. Ҡаршылыҡ күрһәтер булһаң, донъяңдың аҫтын-өҫкә килтерермен! — тип иҫкәртте, ти.

Сауҙагәр сәфәр йөрөп ҡайтыуҙың икенсе көнөндә үк уның йорт кәртәһе янына эйәрле бер ала бейә килеп туҡтаны, ти. Быны башлап сауҙагәрҙең хеҙмәтсе малайы күрҙе, ти. Малай, өйгә инеп, был ат хаҡында сауҙагәргә әйткәйне, сауҙагәр уны башлап күреүсе үҙе булмауына бик шатланып, хеҙмәтсеһенә:

— Хәҙер үк ана шул ала бейәгә атланып ал да, ул ҡайһы яҡҡа табан алып сапһа, шунда кит! — тип әйтте, ти.

Шунда был егет эйәрле ала бейәгә атланды ла китеп тә барҙы, ти. Эй китте, ти, был, эй китте, ти. Бына бер заман ала бейә бер ҡара урман уртаһындағы йоҙроҡ хәтле генә бер өй алдына килеп туҡтаны, ти. Егет атынан төшөп өйгә инһә, унда йүнтерәп бөткән бер әбей йөн тетеп ултыра, ти.

Иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡас, был әбей егеттән:

— Ҡайҙа табан юл тоттоң, балам? — тип һорай.

— Мин юлды тотманым, юл мине тотто. Ҡайҙа алып баралыр, үҙем дә белмәйем, әбей, — ти егет.

— Һин белмәһәң, мин беләм, — тип әбей юлсыға барыр юлын өйрәтеп алып китте, ти. — Ете диңгеҙ кисеп, ете урманды уҙғас, бер һөт күле булыр. Шул күл ярында ҡамыш үҫкән булыр. Барып еткәс тә, һин ана шул ҡамыш араһына инеп ултыр. Күл буйына алты аҡҡош осоп килер. Шунда улар, үҙҙәренең мамыҡ тундарын һалып, һылыу-һылыу ҡыҙҙарға әйләнерҙәр ҙә күлгә төшөп ҡойона башларҙар. Һин ҡурҡытма, шым ғына ултырыуыңды бел. Бына шунда тағы бер аҡҡош килер ҙә, мамыҡ тунын һалып, күлгә төшөр. Шул ваҡытта инде һин аҡрын ғына бар ҙа ана шул етенсе ҡыҙҙың мамыҡ тунын йәшер. Алты ҡыҙ күлдән сыҡҡас, яңынан аҡҡош булып, осоп китер, ә теге етенсеһе тунын таба алмайынса тороп ҡалыр. Шунан һуң ул: «Минең тунымды алған кем икән, рәхмәт төшкөрө!» — тип әйтер. Һин өндәшмә. «Әгәр һин оло кеше булһаң, минең ағай булырһың, минән кесе булһаң, ҡустым булырһың. Күренсе, һин кем?» — тип һорар. Һин һаман өндәшмә. «Әллә һин мине күҙләп йөрөгән берәй егет булаһыңмы?» — тип әйтер. Бына шунда инде һин ҡамыш араһынан сыҡ та, ҡыҙҙың янына барып, мамыҡ тунын бир. Ҡалған яғын үҙегеҙ аңлашырһығыҙ, — тигән.

Егет, ҡарсыҡҡа рәхмәт уҡып, ул өйрәткән юл менән киткән. Ете диңгеҙҙе кисеп, ете урманды үткәс, һөт күленә барып сыҡҡан. Шунда ул күл тирәһендәге ҡамыш араһына инеп боҫҡан да тауыш-тынһыҙ ғына ултыра биргән. Оҙаҡ та үтмәй, алты аҡҡош килеп, мамыҡ тундарын һалып, күлгә төшкәндәр. Бер аҙҙан һуң етенсе

аҡкош килеп, шулай уҡ мамыҡ тунын һалып, тегеләре янына күлгә төшкән. Күлгә инеү менән, улар береһенән-береһе матур ете ҡыҙға әйләнгәндәр. Шул саҡ егет теге етенсеһенең мамыҡ тунын алып йәшергән. Күп тә үтмәй, алты ҡыҙ алты аҡкош булып осоп киткәс, етенсеһе үҙенең тунын эҙләргә тотонған. Егет башта ҡыҙҙың һорауҙарына ҡаршы өндәшмәй ултырған. Иң аҙаҡтан ҡыҙ: «Әллә күҙләп йөрөгән берәй егет булаһыңмы?» — тигәс кенә, егет, ҡамыш араһынан сығып, ҡыҙға мамыҡ тунын биргән. Ә ҡыҙ бер күреүҙә егеткә ғашиҡ булған да ҡуйған. Шунда ул:

Мин хәҙер өйөмә осоп китәм. Һин минең артымдан ҡалма, мине күрә-күрә бар. Мин һөт күле батшаһының ҡыҙымын. Атайым йортона етер-етмәҫ мин һине ҡаршы алырмын, — тигән.

Ҡыҙ мамыҡ тунын кейеп аҡкошҡа әйләнгән дә осоп киткән, ә егет, уны күрә-күрә бара торғас, һөт күле батшаһының һарайы янына килеп етә яҙған. Теге ҡыҙ, уны шунда ҡаршы алып, атаһының да, үҙенең дә кем икәнен һөйләп биргән. Уның атайым тип йөрөгән кешеһе әҙәм затынан түгел, дейеү пәрейе затынан икән. Теге ваҡыт диңгеҙҙә китеп барған карапты туҡтатып, бай сауҙагәрҙең ҡотон алған ала ҡарға бына ошо дейеү булған да инде. Баяғы алты аҡкош тигәнебеҙ ошо дейеү батшаһының үҙ ҡыҙҙары, ә быныһы, етенсе булып йөрөгәне, имсәк бала ваҡытында уҡ урлап килтерелгән бер бахыр ҡыҙ икән. Ул үҙенең ата-әсәһен белмәй, дейеүҙең алты ҡыҙы ла, уның әҙәм затынан икәнен белмәйенсә, ҡарындашыбыҙ тип йөрөйҙәр икән.

Ҡыҙ бына шуны егеткә һөйләгән дә уға батша янына инеп күренергә, ул ни ҡушһа, шуны эшләргә риза булырға ҡушҡан.

Батша был егеткә:

— Бар әле, малай, миңә ҡара туры айғырҙы һуғарып ҡайт! — тигән.

Егет ҡара туры айғырҙы һуғарырға алып киткән. Ҡыҙ уға бер таяҡ тотторған.

— Һуғарыр алдынан өс тапҡыр, һуғарғас, йәнә өс тапҡыр ошоноң менән һуғырһың, — тигән.

Егет шулай эшләгән. Айғырҙы һарайына алып ҡайтып ябып ҡуйған.

Шунан батша:

— Бар әле, малай, анау алты бүртә бейәне һуғарып ҡайт! — тигән.

Егет алты бүртә бейәне һуғарырға алып китер алдынан батша ҡыҙы янына ингән. Ҡыҙ уға:

— Батшаның алты бүртә тигәне алты бейә түгел, алты ҡыҙы була. Һыу буйына барғас, улар аҡҡош булып осоп китерҙәр. Һин буш ҡул менән тороп ҡалырһың. Шунан, минең алты бүртә бейәмде ҡайҙа иттең тип, батша һинең башыңды ҡырҡасаҡ, — тигән.

Егет:

— Ни эшләйем һуң? — тип һораған.

— Һин уларҙы теҙеп баҫтыр ҙа маңлайҙарына берәр тапҡыр сиртеп сыҡ. Һуғарғас, тағы бер тапҡыр сиртеп алырһың. Шунан улар нисек килһәләр, шулай ҡайтырҙар, — тигән.

Егет ҡыҙ ҡушҡанса эшләгән. Батша, алты бүртә бейәнең шул көйө әйләнеп ҡатҡанын күреп, аптырап ҡалған. Шунан ул егеткә:

— Бер төн эсендә анау урман буйындағы һөрөлмәгән ерҙе һөр ҙә, сәселмәгән игенде сәсеп, үҫтереп, урып, көлтәләргә бәйләп, ер өҫтөнә теҙеп баҫтырып ҡуй! — тигән.

Егет:

— Ярар! — тигән булған. Бик күңелһеҙләнеп кенә теге ҡыҙ янына барған. Ҡыҙ уның зарын тыңлаған да:

— Төн уртаһы еткәс, минең яныма килерһең, — тип ҡайтарып ебәргән. Егет төн уртаһы еткәс килһә, ҡыҙ тәҙрәһен асҡан да, бармағындағы йөҙөгөн һалып, шуға өргән. Шунда уҡ тәҙрә алдына ен-пәрейҙәр килеп тулған. Шунан ҡыҙ, егеткә ҡарап:

— Батша ҡушҡан эште ҡуш үҙҙәренә, — тигән.

Егет ен-пәрейҙәр көтөүенә:

— Таң атҡансы, анау урман буйындағы һөрөлмәгән

ерҙе һөрөгөҙ ҙә, сәселмәгән игенде сәсеп, үҫтереп, урып, көлтәләргә бәйләп, ер өҫтөнә теҙеп баҫтырып ҡуйығыҙ! — тигән.

Ен-пәрейҙәр шунда уҡ юҡ булғандар.

Батша таң атыуға ер өҫтөнә барһа, бөтәһе лә ул тигәнсә эшләнгән. Егет ҡойолоп ҡалған башаҡтарҙы йыйыштырған кеше булып йөрөй, ти.

Батша, үҙенең аптырап ҡалыуын һиҙҙермәҫкә тырышып:

— Былай эште еренә еткереп эшләгәнһең икән, — тигән булды, ти. Үҙе бик шөрләй, ти. Ни өсөн тиһәң, был әҙәм балаһы минең батшалығымды тартып алмағайы, тип ҡурҡа, ти. Шуның өсөн ул егеткә бер ҙә ҡаты бәрелмәҫкә, уның күңелен табырға булды, ти.

— Ҡушҡан эштәремде еренә еткереп эшләгәнең өсөн мин һиңә ете ҡыҙымдың үҙеңә оҡшағанын һайлап алырға рөхсәт итәм, — тип әйтә һалды, ти, был батша.

Егет ете ҡыҙ араһынан үҙенә гел генә аҡыл өйрәтеп, эште уң иткән баяғы ҡыҙҙы һайлап алды, ти. Былар ана шулай ирле-ҡатынлы булып тора ла башланылар, ти.

Берҙән-бер көндө батшаның өлкән кәңәшсеһе батшаға:

— Был ике әҙәм балаһы беҙҙе имен йәшәтмәҫ. Ҡулдарынан килмәгән эштәре юҡ. Һөт күлебеҙҙең аҫтын-өҫкә килтерерҙәр. Көт тә тор бына. Үлтереп, ҡотолайыҡ буларҙан! — тип әйтте, ти.

Батша был кәңәште бик хуп күргән.

Был ваҡытта кейәү менән ҡыҙ йәйрәп ятҡан икһеҙ-сикһеҙ һөт күле буйын хозур итеп йөрөйҙәр ине, ти. Батша уларҙы тотоп алып ҡайтырға ҡыуғындар ебәрҙе, ти. Ҡыҙ, быны һиҙенеп, ҡыуғындар килеп етер алдынан үҙе ҡуйға әйләнде, егетте көтөүсе ҡартҡа әүерелдерҙе, ти. Ҡыуғынсылар был көтөүсе ҡарттан:

— Бабай, бынан бер егет менән ҡыҙ үтмәнеме? — тип һоранылар ти.

— Үтмәнеләр, — тип яуап бирҙе, ти, көтөүсе.

Шунан батшаның хеҙмәтселәре кейәү менән ҡыҙҙы эҙләнеләр-эҙләнеләр ҙә, таба алмағас, буш ҡул менән ҡайтып киттеләр, ти.

Батша, һеҙҙән рәт сыҡмаç, ахыры, тип, ҡыҙы менән кейәүен әҙләп үҙе сығып китте, ти. Ҡыҙ дейеү батшаһының ел-дауыл ҡуптарып килеүен күреп, бер әбейгә әүерелде, кейәүен бер ҡурайсы ҡартҡа әйләндерҙе, ти. Батша атынан төшөп әбей ҡиәфәтенә ингән ҡыҙын тотоп алайым тигәйне, ҡыҙ ҡыйғыр булып осоп китте, батша ыласынға әйләнеп, уны баçтыра китте, ти. Бер йылға янына барып еткәс, ҡыйғыр һыуға төштө лә сабаҡҡа әйләнеп йөҙөп китте, ти. Ыласын, ҡапыл суртанға әйләнеп, сабаҡты ҡабып йотайым тигәндә генә, тегенеһе һыу алып торған бер ҡыҙҙың силәгенә атылып инде лә алтын йөҙөк булды, ти. Суртан егеткә әйләнеп, ҡыҙҙан:

— Был минең йөҙөгөм, — тип йөҙөктө һорай башланы, ти. Иллә-мәгәр был ҡыҙ йөҙөктө бирмәне, ти. Егет, ҡыҙ артынан ялынып-ялбарып, ауылға саҡлы барҙы, ти.

Ауылға ингәс, егет, ҡыҙ минең йөҙөгөмдө алды ла бирмәй, тип янъял ҡуптарҙы, ти. Ҡыҙ, намыçланып, йөҙөктө атып бәргәйне, ергә төшөү менән, тары ярмаһы булып сәселеп китте, ти. Шул ваҡыт йәш егет төçөндәге дейеү батша, этәскә әйләнеп, ярма бөртөктәрен сүпләй башланы, ти. Бер генә бөртөк ярма ҡыҙҙың аяғы аçтына тәгәрәп кереп, һаҡланып ҡалған икән. Шул бер бөртөк тары ярмаһы, бөркөткә әйләнеп, этәстең муйынын өҙөп тә ҡуйҙы, ти.

Яуыз уйлы һөт күле батшаһының йән биреүе ана шул булды, ти.

Ҡыҙ, бөркөттән йәнә үҙ һынына инеп, егет янына китте, ти. Ул, һаман ҡарт ҡурайсы булып, үҙенең ҡурайын һуҙып ултыра ине, ти.

Былар икәүләп үҙҙәре баш, үҙҙәре түш булып, дейеү батшаһы һарайында ғүмер итә башланылар, ти.

Әле булһа улар шунда гөрләшеп йәшәп яталар икән, ти.

## СЕРЛЕ ЙӨҘӨК

Элек бер ҡарт менән әбей йәшәгән, уларҙың бер улы булған. Теге ҡарт көн дә бәләкәй сана менән йүкә алып ҡайта. Сабата үрергә тотоналар. Ҡайырын һыҙыралар, сығарып ташлау юҡ. Үрәләр, үрәләр ҙә йүкә өҫтөнә ятып йоҡлайҙар. Ҡайыр тәҙрәнең тупһаһына еткән, ти.

Сабатаны бабай баҙарға илтеп һата. Бер көндө бабай бахыр үлеп китә. Ҡарттың дүрт һум аҡсаһы ҡалған, бөтә байлығы шул икән.

Бер ваҡыт быларҙың ашарына бөттө, ти. Әбей улына бер тәңкә аҡса биреп:

— Баҙарға барып, он алып ҡайт, — ти.

Улы китә. Санаһын һөйрәп йөрөй-йөрөй, бер ҙә он баҙарына барып әйләнмәй ти үҙе. Тегеләй ҙә үтә, былай ҙа үтә, тик йөрөй. Баҙар тарала башлай. Шул саҡ бер ҡарт эт етәкләп килә икән. Эт тигәс тә, бәләкәй генә көсөк, ти.

— Бабай, ҡайҙа алып бараһың был көсөктө? — тип һорай егет.

— Һатам, — ти бабай.

— Күпме тора?

— Әллә, күпме тип ни, янында күпме аҡсаң бар, бир ҙә ал!

Егет, кеҫәһендәге бер тәңкәһен биреп, көсөктө алып ҡайтҡан. Ҡайтҡас, әсәһенә:

— Бына бер тәңкәгә эт алдым, — тигән.

— Һәләк иткәнһең икән, атайыңдан ҡалғас, асҡа үлермен инде! — тип зарланған әсәһе.

Икенсе баҙар етә. Әсәһе йәнә бер тәңкә аҡса биреп, улын баҙарға ебәрә. Улы он баҙарына барып та әйләнмәй, йөрөй ҙә йөрөй, йөрөй ҙә йөрөй. Бер ҡарт бесәй тотоп йөрөй икән шунда.

— Бесәйҙе ҡайҙа алып бараһың, бабай?
— Һатам.
— Күпме тора?
— Әллә, янында күпме аҡсаң бар, бир ҙә ал.
Егет, бер тәңкәһен биреп, бесәйҙе алды ла ҡайтты, ти. Әсәһе бахыр тағы илай. Тегеләй-былай, бейәләй бәйләп, ойоҡ бәйләп, тамаҡланалар былар.
Йәнә бер аҙна үтә. Әсәһе йәнә баҙарға ебәрҙе, ти, улын, бер тәңкә аҡса тоттороп.
— Улым, инде бер нәмәгә лә ҡарама, туп-тура он баҙарына бар ҙа он ал да ҡайт! — тигән.
Киткән улы. Элекке кеүек, йөрөй ҙә йөрөй, йөрөй ҙә йөрөй, ти, баҙарҙа. Берәү мылтыҡ тотоп тора икән. Мылтығы ярылып бөткән, ти.
— Бабай, һатаһыңмы?
— Һатам алған кешегә.
— Күпме тора?
— Мин хаҡын һорамайым. Янында күпме аҡсаң бар, бир ҙә ал.
Егет, бер тәңкәһен биреп, мылтыҡты алып ҡайтты, ти. Әсәһе он көтөп тора. Ашарға юҡ. Әсәһе, ярыҡ мылтыҡты күрҙе лә, илай башланы, ти. Эй илай, эй илай, ти.
— Ҡуй, әсәй, илама. Мин иртәгә һунарға китәм, — ти улы.
Мылтығын арлы-бирле ҡаҙаҡлап, иртәгеһен ҡуянға сығып китте, ти, был. Йөрөй торғас, бер ҡуянды атып алды, ти. Аяғы ергә теймәй ҡайтты, ти, был.
— Бына, әсәй, беҙгә дүрт көнгә етә был ҡуян, ти.
Һөйөнөп киткән булды, ти, әсәһе. Бешереп ашанылар, ти. Иртәгеһен йәнә сығып китә улы һунарға саңғы менән. Бер ҡуянды атты, ти, бото һынып, китте, ти, теге. Ҡуянды юллап китә был. Юллап бара торғас, күреп ҡала: бер һыңар саңғылы кеше былың ҡуянын юллап ҡыуа бара. Бәй! Был ниндәй ғибрәт! Баҫтырып бара торғас, һыңар саңғылы теге ҡуянды тота, ти.
— Ниңә минең ҡуянды алдың? Бир!
— Үҙем баҫтырып алдым.
— Юҡ! Ҡуян минеке, бир!

— Ҡуй талашмайыҡ, әйҙә бергә барып бешереп ашайыҡ.

Китәләр былар. Бер тауға барып инеп китте, ти, был һыңар саңғылы. Инмәҫ борон егеткә әйтте, ти:

— Минең бик матур ҡәрендәштәрем бар, алдыңа килеп торорҙар, теймә уларға.

Инеп ултыралар, ҡыҙҙар йымылдашып ҡына йөрөйҙәр. Бер ҡыҙ килеп, терәлеп кенә ултыра. Был егет төрткән дә ҡуйған тегенең бөйөрөнә. Төртөүе булды, ҡыҙ егетте быуҙы ла ташланы, ти.

— Әҙәм ҡағылды ла әҙәм ҡағылды, — тип ҡысҡыра икән үҙе.

Шунан араны яйланы, ти, теге һыңар саңғы менән йөрөгән егет. Һин дә мин һөйләшеп тик йөрөйҙәр хәҙер. Бер көн ята был, ике көн ята ашап-эсеп, өсөнсө көндө:

— Мин ҡайтайым инде, әсәйем дә мине юғалтып торор, — ти.

— Ярар, — тигән һыңар саңғылының атаһы, — бына һиңә көсөң еткәнсе аҡса бирәм, алып ҡайт, күпме күтәрһәң дә күтәр.

Теге алып ҡайтҡан егет:

— Һин аҡсаһын алма уның, бер йөҙөгө бар, йөҙөгөн һора, — ти икән шыбырлап ҡына.

Егет бабайға:

— Юҡ, аҡсаң кәрәкмәй миңә, ҡулыңдағы йөҙөктө бир. Шунан ҡайтам, — ти.

— Юҡ, һиңә кәрәкмәй ул йөҙөк, ҡайҙа ул!

— Бирмәһәң, ҡайтмайым.

Аптырағас, биргән йөҙөктө. Теге егет быны оҙатып килгән.

— Кәрәк ваҡытта ошо йөҙөк аша әсе итеп һыҙғырт, шунан һинең ҡаршыңа ен-шайтан килеп баҫыр. Ә һин нимә кәрәк булһа, шуны һорарһың, — тигән.

Егет бер аҙ киткәс тә йөҙөктө һыҙғыртып ебәрҙе, ти. Дүрт шайтан килеп тә баҫҡан ҡаршыһына.

— Ни хәжәтең бар? — тиҙәр.

— Хәжәтем шул инде, бына әсәйемдең дә бер кейеме юҡ, үҙемдең дә кейемем юҡ. Кейем кәрәк ине, — ти егет.

— Ярар, әҙерәк кенә сабыр ит. Ятып тор, йоҡла, — тиҙәр уға.

Теге йоҡлай бер ағас төбөндә. Уянып китһә, ботаҡ тулы кейем килтереп элеп ҡуйғандар, ти. Көсө еткәнсе күтәреп киткән егет.

Ҡайтҡан был йөкмәнеп.

— Уй-й! Ҡайҙа йөрөнөң? Юлбаҫар булдыңмы? Кемде таланың? — тип әрләй икән әбей улын.

— Юҡ, юҡ, әсәй, берәүҙе лә таламаным. Күктән көткән ерҙән килде инде, — ти улы.

Йоҡларға яталар. Төн уртаһы еткән икән, улы тышҡа сығып, йөҙөгө аша һыҙғыра. Әлеге ендәр килеп төшәләр.

— Ни кәрәк?

— Ашарға бер нәмәбеҙ ҙә юҡ. Он да юҡ, ит тә юҡ беҙҙең. Шулар кәрәк.

— Ярар, ярар, ятып тор.

Ята. Уянып китһә, быныҡ үтә-һүтә күренеп торған алама ғына аласығы туп-тулы ашамлыҡ та эсемлек, ти. Ул тоҡ-тоҡ ондар, ул ите тулып ята, күгәрсен һөтө генә юҡ, ти. Әсәһе:

— Был ниндәй ғибрәт? Ай-һай, улым, ҡулың таҙамы икән! — ти.

— Таҙа, әсәй, таҙа, шикләнә күрмә, — ти улы.

Икмәк бешереп ташланы, ит бешерҙе, ти, әсәһе. Бына тотондолар, ти, ашарға. Көсөк тә туҡ, бесәй ҙә мырылдап йәбешкән, ти.

Ашап, туйып, йоҡларға яталар былар. Төндә егет, тышҡа сығып, балдағын һыҙғыртып ебәрҙе, ти, әлеге ендәр килеп төштө, ти.

— Ни кәрәк?

— Бына кирбестән йорт һалырға ине. Ике ҡатлы булһын, һәйбәт булһын.

Иртәнсәк торһалар, әсәһе менән улы яңы өйҙә яталар. Эт тә шунда, бесәй ҙә шунда, ти. Ҡото осоп уянды, ти, әбей.

— Уй-й! Ни булды беҙгә, ни булды?

— Булмаған, бына шундай йорт һалдыҡ.

Хәҙер өйгә карауаттар кәрәк, тәҙрәләргә пәрҙәләр кәрәк. Уйлап ултыра егет, тағы нимәләр кәрәк икәнен уйлап бөтә. Кис була, йәнә һыҙғырып ебәрә. Уйлағаны алдына килгән: карауаты ла бар, пәрҙәләр ҙә ҡоролоп бөткән.

— Быныһы ла булды! Фәлән батша ҡыҙын алайым, булмаһа, — ти егет.

Ендәрҙе саҡырып, егет:

— Бына ошонан фәлән батшаға хәтле тимерҙән күпер булһын, — ти.

Иртән тороуға күпер һалынған. Егет, сүкеш алып, тимерҙәргә шаҡ та шоҡ һуғып йөрөгән була, ти. Йәнәһе, үҙе һалған.

Шунан егет батшаға яусы ебәргән.

— Биреүен бирермен, шундай егет булғас. Тик туйға килерһегеҙ фәлән ваҡытта, бер төҫ аттар менән, бер төр күсерҙәр менән. Утыҙ пар.

Төндә егет ендәргә бойороҡ биргән. Иртәгеһен уянып китһәләр, утыҙ пар бер төҫ ат егелгән, бер төҫлө кейенгән күсерҙәр дилбегәләрҙе тотоп ҡына ултыралар, ти. Туйға китәләр.

Батша һарайында шаулатып туй үткәрәләр. Хәҙер кейәү ҡунаҡҡа саҡыра.

— Ҡайтырға утыҙ пар бер төҫ ат булһын, — ти ул. Батша тегенән дә эҙләп ҡарай, бынан да эҙләп ҡарай, юҡ, таба алмай.

Кис була, егет һыҙғыртып ебәрә. Әлеге аттар килеп тә торҙо, ти. Шуларға ултырып ҡайтып киттеләр, ти, кейәү менән ҡыҙ. Донъя көтә башлайҙар. Килен ниҙер һиҙенә. Ә батша уны ҡоторта икән. Хәйерсе малайы ул, һиңә иш түгел, ти. Тылсымлы нәмәһен ҡулыңа төшөр ҙә үҙен ташлап кит, ти. Ҡыҙы ирен аңдый башлай. Аңдып йөрөй торғас, йөҙөктө эләктерҙе, ти. Һыҙғыртып ебәргән, әлеге ендәр килеп тә төшкән.

— Ни эшләргә?

— Был һарайҙы атайымдың йортона ҡапма-ҡаршы илтеп ултыртығыҙ!

Ендәр йортто күтәреп алып барғандар ҙа ултырт-ҡандар. Уянып китһәләр, егет, әбей, бесәй, эт әлеге алама өйҙәрендә яталар, ти. Егет ырғып тора. Ни эш-ләргә хәҙер. Шул арала батша егетте ҡулға алып та китә. Күсерелгән йорттоң аҫтын зиндан иткән икән. Быны шунда яптылар, ти. Ни эшләргә хәҙер? Ҡотолоу юлын табырлыҡ аҡыл юҡ, йөҙөк тә юҡ!

Бесәй менән эт үҙ-ара һөйләшәләр:

— Әйҙә эҙләп китәйек. Табырбыҙ, моғайын.

Киттеләр, ти, былар, бахырҙар. Эй баралар, эй баралар, бер дәү диңгеҙҙән дә сығып киттеләр, ти. Эт йөҙә, бесәй эт өҫтөндә ултырып бара. Барып таптылар, ти, батшаның торған ерен. Яйын тура килтереп, бесәй төрмәгә, хужаһы янына үтеп инде, ти. Бесәй менән егет илашып алдылар, ти. Бесәй йөҙөктө табырға һүҙ бирҙе, ти.

Бына бесәй, өйҙө тирәләтеп, ипләп кенә урап йөрөй. Өйгә нисек инергә? Эт йәшенеп ята, ти. Ишек асылған ыңғайға, бесәй аяҡ араһынан һиҙҙермәйенсә генә өйгә үт-те, ти. Хәҙер йөҙөктө ҡалай итеп алырға? Эҙләй, эҙләй йөҙөктө, ҡайҙа икәнен дә белә алмай. Һағалап ултыра торғас, килендең ауыҙына ҡапҡанын белеп ҡала. Бер сысҡан тотҡан да бесәй тегенең ҡойроғон ипләп кенә өҙөп алған. Ҡыҙ йоҡлап киткән икән, танауына ғына йы-бырлатҡайны, теге сәскөрөп ебәрҙе, йөҙөк төштө лә китте, ти. Бесәй элеп тә алды, ти, тегене. Батша ҡыҙы, сәсәп-сәсәп, тышҡа сығып киткәйне, бесәй ҙә уның артынан ҡалманы, ти. Эткә барып һөйөнсө алған был.

— Әйҙә, киттек зинданға!

Егеткә барыу өсөн бер ҙур һыу аша сығырға кәрәк икән. Эт әйтә:

— Йөҙөктө миңә бир! Бирмәһәң, мин һине алып сыҡ-майым, теләһә нисек сыҡ! — ти.

— Ҡуй, юғалтырһың, — ти бесәй.

— Юҡ, төшөрмәйем, бир, бирмәһәң, сығармайым.

— Ярай, улай булғас, мә, төшөрмә!

Эт йөҙөктө ауыҙына ҡапҡан, бесәй эткә атланған, йөҙөп баралар былар. Һыуҙы сығыр алдынан ғына, бер дәү балыҡ эттең эйәге аҫтынан ғына үтеп бара икән.

Эт түҙмәгән. Һам тип тешләгән ыңғайға, йөҙөк һыуға төш тә кит. Теге балыҡ йөҙөктө эләктереп тә алған. Ярға сығалар былар.

— Ҡайҙа йөҙөк?

— Төштө ул, балыҡты тотайым тигәнсе төштө.

Эт менән бесәй һуғышып та киттеләр, ти. Ҡанға туҙыштылар. Арып, хәлдән тайып, яттылар, ти, былар.

Шул саҡ бер егет килә икән, ҡармаҡ күтәргән. Эт тегенең эргәһенә ялпылдап бара ла бер ҙә эргәһенән китмәй.

Егет ҡармаҡ һала, һала, балыҡ бер ҙә ҡапмай.

Һиңә атап һалып ҡарайым әле, тип һалған икән, әлеге дәү балыҡ килеп тә эләккән.

— Бына бәхетең бар икән әле! — тип, егет балыҡты эткә ырғытҡан. Эт эсен ярып ебәрһә, әлеге йөҙөк килеп тә сыҡҡан. Балыҡ ҡайғыһы ла юҡ, эт бесәй янына сапҡан.

— Йөҙөктө таптым! Бына, балыҡ эсенән килеп сыҡты.

Уйнаҡлашып сығып киттеләр, ти, былар, ни эшләргә белмәйҙәр, ти. Зинданға баралар, бесәй элеккесә инеп китә. Егеткә йөҙөктө бирә.

Кис булған. Егет йөҙөктө һыҙғыртып ебәргән. Теге ендәр килеп тә төшкәндәр.

— Ни эшләйбеҙ?

— Һарайҙы кире илтеп ултыртығыҙ.

Егет тә, эт тә, бесәй ҙә һарай аҫтындағы зинданда ултырып баргандар, ти. Батша ҡыҙын да алып киткәндәр.

— Килеп ҡаптыңмы? Һырт ҡайышыңды алам, — ти икән егет.

Батшаны ла елтерәтеп килтертәләр.

— Ҡыҙыңды ҡотортоп, минең башты һәләк итергә йыйынғайның, хәҙер мин башыңа етәм, — тигән.

Егет ярылып бөткән мылтығы менән батшаны шунда уҡ үлтергән. Ҡатынын, ғәфү итеп, бер юлға ҡалдырған, ти.

# БЫЖЫРМӘРГӘН

Борон заманда булған, ти, бер бабай менән бер әбей. Уларҙың Быжырмәргән тигән улдары булған. Бик ярлы йәшәгәндәр, ти, былар. Атаһы Быжырмәргәнгә уҡ юнып биргән, малайы шул уғы менән ҡош атып йөрөгән. Быжырмәргәндең уҡсы булып даны киткән, ти.

Берҙән-бер көндө, һунарға китеп барғанда, Быжырмәргән юл өҫтөндә ятҡан утҡа тап була. Ҡараһа, ут эсендә бер йылан үрһәләнеп ята, ти. Быжырмәргән уғы менән әләктереп, йыланды ситкә алып ташлай. Йылан уға:

— Быны өсөн рәхмәт һиңә. Әйҙә хәҙер беҙгә ҡунаҡҡа барайыҡ, — ти. Китәләр.

— Беҙҙең өйгә барып ингәс тә, атайыма сәләм бир. Ул һине ҡунаҡ итер. Киткән сағыңда үҙеңә оҡшаған бер һандыҡты алырға ҡушыр, ҡыҙылынмы, йәшеленме, ағынмы, ҡараһынмы — күңелең ниндәйен теләһә, шуныһын ал тип әйтер. Ҡара һандыҡты алһаң, эсе тулы йылан булыр, йәшелен алһаң, кеҫәртке мыжлап ятыр, ҡыҙылында ут булыр. Ағын ал.

Былар йыландың өйөнә баралар. Быжырмәргән сәләм бирә.

— Ана шул сәләмең булмаһа, мин һине икегә өҙөп ҡапҡан булыр инем! — ти дейеү. Егетте һыйлай башлай. — Улымды уттан ҡотҡарғаның өсөн рәхмәт инде, — ти.

Быжырмәргән, миңә ҡайтырға ваҡыт тип, хушлаша башлай. Йыландың атаһы уға:

— Туҡта әле, мин һиңә бүләк бирәйем, бына ошо һандыҡтарҙың үҙеңә оҡшағанын һайлап ал, — ти.

Быжырмәргән аҡ һандыҡты һайлап ала.

— Үҙ ереңә сыҡмай тороп, һандыҡты асып ҡарама! — ти йыландың атаһы.

Быжырмәргән:

— Ярар, — ти ҙә ҡайтып китә.

Ул үҙҙәренең еренә аяҡ баҫыу менән, һандыҡты асып ебәрһә, шунда уҡ бына тигән бер йорт һалына, мин һинең кәләшең булам тип, бер һылыу ҡыҙ сығып баҫа, самауыр тиһеңме, башҡа нәмә тиһеңме — бөтәһе лә тулып ята. Бындай йорт батшаның үҙендә лә булмаған, ти. Быжырмәргән байып китә. Ата-әсәһен дә үҙе янына алдырта.

Батшаның быға бик асыуы килә: нисек инде ниндәйҙер бер Быжырмәргәндең йорто батша һарайынан яҡшы булһын, имеш, ти! Батша уға: «Минең менән һуғышҡа әҙер торһон!» — тигән хәбәр менән үҙенең бер һалдатын ебәрә.

Был хәбәрҙе ишеткәс, Быжырмәргән өйөнөң ишегенә ҡарай ҙа илай, түренә ҡарай ҙа көлә. Шунан уның бисәһе:

— Бар, атайыма барып, яу уҡтары алып ҡайт! — ти.

Быжырмәргән ҡайныһына барып, яу уҡтары һорай.

— Бына һиңә өс мең уҡ, шуларҙы ҡыҙыма алып ҡайтып бир, ҡалған яғын ул үҙе белер! — ти ҡайныһы.

Быжырмәргән өс мең уҡты бисәһенә алып ҡайтып бирә. Бисәһе уларҙы күлгә алып барып, ап-аҡ итеп йыуып, тәҙрә алдына сығарып, эскәмйә өҫтөнә теҙеп һалып ҡуя. Бына бер заман батша ғәскәрҙәре ябырылып килә башлайҙар. Бисәһе Быжырмәргәнгә өй башына менеп ултырырға ҡуша. Уҡтар ҡыймылдап-ҡыймылдап ҡуя — атылырға итәләр, ти. Батша һалдаттары туп-тура өйгә ҡарап атырға тотоналар. Бына шул саҡта инде уҡтар ҙа үҙҙәренән-үҙҙәре атыла башлай. Тейгән бере һалдатта туҡталып ҡалмаҫтан, аша үтеп, икенсеһенә инеп, өсөнсөһөнән сығып, ғәскәрҙе ҡыйратып ҡына баралар, шунан, атылып киткән урындарына кире осоп ҡайтып, йәнә теҙелешеп яталар, ти. Батшаның яуы шунда уҡ ҡырылып бөтә. Һуғыш туҡтай.

Шунан батша Быжырмәргәнгә: «Мин көрәш асам, ете йәшлек үгеҙем бар, һин шуның менән көрәшерһең!» — тигән хәбәр ебәрә.

Быжырмәргән ишеккә ҡарай ҙа илай, түргә ҡарай ҙа көлә. Бисәһе уға:

— Ҡурҡма юҡҡа! — ти. — Уҡтарҙы атайыма илт тә ебәк билбауын алып ҡайт! — ти.

Быжырмәргән, ҡайныһына уҡтарҙы кире илтеп, уның ебәк билбауын алып ҡайта. Бисәһе уны:

— Майҙанға барғас, һиңә ит бирһәләр ҙә аша, бирмәһәләр ҙә тартып алып аша. Төртһәләр ҙә, төртмәһәләр ҙә йығыл. Үгеҙ һине һөҙәм тигәндә генә бына ошо билбауҙы мөгөҙөнә ташла, — тип өйрәтеп ҡуя.

Быжырмәргән майҙанға бара. Кеше ҡулындағы итте тартып алып ашай; төртһәләр ҙә, төртмәһәләр ҙә йығылып бара. Халыҡ унан:

— Ҡайҙан килгән был батыр! — тип эсе ҡатып көлә, ти.

Көрәшер ваҡыт етә. Батшаның хеҙмәтселәре майҙанға бик ҙур бер үгеҙ сығаралар. Бына ул Быжырмәргән өҫтөнә килә башлай. Үгеҙ һөҙәйем тигәндә генә, Быжырмәргән уны билбауы менән мөгөҙөнән эләктереп йөрөтә башлай: билбауҙан үгеҙҙең көсө кәмей, Быжырмәргәндеке арта. Быжырмәргән үгеҙҙе әйләндереп-тулғандырып йөрөтә-йөрөтә лә ун ете таяҡҡа күтәреп тә бәрә. Үгеҙ шунда уҡ аяғын һуҙа.

Йыйылған халыҡ, хайран ҡалышып, майҙандан таралыша.

Ун көнләп ваҡыт үткәс, батша Быжырмәргәнгә: «Әйҙә, ат сабыштырабыҙ; минең ат уҙһа, һинең башты ҡырҡабыҙ, һинеке уҙһа, минең башты!» — тигән хәбәр ебәрә.

Быны ишеткәс, Быжырмәргән ишеккә ҡарай ҙа илай, түргә ҡарай ҙа көлә, ти. Шунан һуң:

— Хәҙер ни эшләйбеҙ инде? — тип һорай бисәһенән.

— Атайыма ебәк билбауын илтеп бир ҙә толпарын алып ҡайт! — ти.

Бежырмәргән билбауҙы ҡайныһына илтеп бирә. Ҡайныһы уны үҙенең толпарына атландыра ла:

— Күҙеңде йом да толпарға бер һуҡ! — ти.

Бежырмәргән, күҙен йомоп, толпарға бер һуға, күҙен асһа, ҡайтып та еткән, үҙенең йорто алдында тора, ти, был.

Майҙанда бәйге башлана. Батша аты менән Бежырмәргән аты сабышырға китә. Күп тә үтмәй, Бежырмәргәндең толпары беренсе булып майҙанға килеп тә инә, алты ебәк таҫманы өҙөп үтеп, етенсеһенә килеп туҡтай. Батшаның аты бик һуңлап килә.

Бына шунан һуң Бежырмәргән батша булып алған, имеш, ти.

## ӘРМӘНДЕ ТУН

Бик борон заманда бер ярлы ғына бабай менән әбей йәшәгән. Уларҙың өс улдары булған. Уландары ир етеп, кеше булғандан һуң, берҙән-бер көндө әбей ҡартҡа:

— Бабай, уландарыбыҙ ир еттеләр, һин дә, мин дә ҡартайҙыҡ бит инде, хәҙер уларҙың һәр береһенә кәләш алып бирергә кәрәк, балаларыбыҙҙың балаларын үҙ күҙебеҙ менән күреп үлербеҙ, ти. Ҡарт, әбейҙең был һүҙенә риза булып:

— Ярай улайһа, алып бирәйек, үҙ бәхетенә яҙғанды алһындар. Бының өсөн күптән бирле минең уйлап йөрөгән шартым бар: өсөһөнә лә уҡ менән ян яһап бирәм, һауаға уҡ сорғотһондар. Ҡайһыһының уғы кем өйөнөң башына төшһә, шул кешенең ҡыҙын алып бирәм, — тип, үҙ шартын аңлатып бирҙе, ти. Уландары ла был эшкә риза булып:

— Ярай, атай кеше әйткәс, беҙ был шартҡа ҡаршы түгелбеҙ инде, — тип атаһының яһаған уғын сорғоторға әҙерләнә башлайҙар. Иң тәүҙә оло улы уҡ менән янды алып, үргә уҡты сорғотоп ебәрә. Уҡ хәлле генә бер кешенең өй башына барып ҡаҙала. Икенсе улы уҡты сорғотоп ебәрә — уҡ урта хәлле бер кешенең өй башына барып ҡаҙала. Унан һуң иң кесе улына сират етә. Кесе улы уҡты алып, үргә сорғотоп ебәрә, уҡ бик юғары менә лә, бер кемдең дә өй башына төшмәйенсә, һаҙ араһына барып төшә. Шул ваҡыт ҡарт:

— Бына минең шартым шул ине, хәҙер, оло улым менән уртансы улым, мин һеҙгә үҙ яҙмышығыҙға бирелгән ҡыҙҙарҙы әйттерәм, унан һуң туй яһарбыҙ, — ти. Был һүҙгә ике улы ла шатлана. Бабай, кесе улына ҡарап:

— Улым, мин һиңә бер ни ҙә эшләй алмайым, бәхетең һаҙ, батҡаҡ араһындалыр, әйҙә, шунда кит, — тип шунда ебәрҙе, ти.

Бабай оло улына яҡшы хәлле кешенең, уртансы улына урта хәлле кешенең ҡыҙҙарын әйттереп, туй яһай башлайҙар. Туй бик күңелле, бик матур үтә. Шул ваҡыт кесе малай туйға килергә еңгәләренән рөхсәт һорай, тик еңгәләре лә, ағалары ла рөхсәт итмәйҙәр. Унан һуң атаһынан һорап ҡарай. Атаһы уға асыулана:

— Һин, улым, кит бынан, мин һиңә үҙ шартымды әйтеп, кәләш алып бирергә теләнем, тик һин бәхетһеҙ булып сыҡтың, әйҙә, бар уғың төшкән һаҙға, — тип тағы ла ҡыуып ебәрҙе, ти, быны.

Малай илай-илай һаҙға бара ла ҡаҙалған уғы тирәһендә әйләнеп йөрөй башлай. Шул ваҡыт ул бер йәшел төҫтәге әрмәндән, телгә килеп:

— Ни эшләп илайһың, егет? — тип әйткән тауышын ишетә. Был ҡурҡып китә, ҡыҫҡа-ҡыҫҡа башынан үткәндәрен һөйләп бирә.

Әрмәнде егеттең һөйләгәнен тыңлағандан һуң:

— Юҡҡа ҡайғырма, егет, ят та йоҡла, бары ла булыр, ағаларыңдың өйөнән дә яҡшы өйөң булыр, ни теләһәң, шул булыр, тик сабырлы бул, — тине лә күлгә

сумып та китте, ти. Егет был эшкә ғәжәпкә ҡалһа ла, әрмәнде һүҙенән һуң,түңгәк өҫтөнә ятып, йоҡлап китте, ти.

Егет йоҡонан уянып китһә, ни күҙе менән күрһен: бик матур бер өй, тирә-яҡтары матур рәшәткәләр менән уратып алынған, төрлө-төрлө емештәр үҫеп ултыра, һәр емеш ағастарында төрлө ҡоштар һайрай. Быларҙы күреп, егет, төшөммө, әллә өнөммө тип, тирә-яғына ҡаранып алды, ти. Был арала күлдән әрмәнде килеп сыға ла егетте өй эсенә алып инә. Өй эсендәге йыһазға егет бөтөнләй хайран ҡала. Шул ваҡыт әрмәнде үҙенең әрмәнде тунын сисеп ташлай ҙа тулған айға оҡшаған ҡыҙ ҡиәфәтенә инә. Ҡыҙ үҙенең егеттең буласаҡ кәләше икәнлеген оялып ҡына әйтеп бирә. Егет бик ныҡ шатлана ла, ҡайғыра ла, ти, сөнки кәләшенең әрмәнде ҡиәфәтендә кейенеп йөрөүе ағалары, еңгәләре, ата-әсәһе алдында оят булып күренер һымаҡ. Егеттең ҡайғырғанын һиҙеп, ҡыҙ уға:

— Ниңә ҡайғыраһың, егет, әллә мине яратмайһыңмы? — ти. Егет, белгертмәҫкә тырышып:

— Юҡ, ҡайғырмайым, тик бына ағайҙарыма ҡунаҡҡа барырға кәрәк ине, беҙҙең ат та юҡ, етмәһә, һәҙлыҡ, йөрөү өсөн күпер ҙә юҡ, шуны уйлап бер аҙ борсолам, — тигән булды, ти. Әрмәнде шул ваҡыт:

— Ҡайғырма, егет, ят та йоҡла, бары ла булыр, — ти. Егет, сисенеп, бик йомшаҡ йәйелгән урынға ята, уның эргәһенә әрмәнде, тунын сисеп ташлап, бик матур бер ҡыҙ булып килеп ятты, ти. Егет иртән торғанда, ни күҙе менән күрһен, бик матур алтын һарай, уның эсендә уйнап торған ике айғыр. Улар өйөнән ағалары өйөнә тиклем көмөштән һалынған күпер, күпер аҫтынан сылтырап, терегөмөш кеүек, һыу аға, тирә-яғы баҡсалыҡ, ағас һайын һандуғас, башҡа ҡоштар һайрап ултыра, ти. Егеттең саҡ һушы китмәне, ти.

Бер көндө ағалары ҡустыһын ҡунаҡҡа саҡырырға булалар. Оло ағаһы саҡырырға килә. Егет менән ҡыҙ, ике айғыр егелгән еңел тәгәрмәсле арбаға ултырып, көмөш күпер өҫтөнән ҡунаҡҡа китәләр. Күпер өҫтөнә менгәс, ҡыҙ әрмәнде тунын кейеп ала ла, бер арбанан

һикереп төшөп, бер арбаға һикереп менеп бара башлай. Егет ҡайғыра. Әрмәнде, быны һиҙеп:

— Ни эшләп ҡайғыраһың? — тип һорай. Егет уға үҙенең әрмәнде бисә менән ағаларына ҡунаҡҡа барырға оялыуын әйтә. Әрмәнде уға:

— Һин минең был эшемә риза бул, мин унһыҙ йәшәй алмайым, үтенәм, йоҡлаған ваҡытта мин үҙ тунымды һалып ятам, тик һин уға теймә, минең бөтә үтенесем шул, — ти. Егет быға риза була.

Быларҙы ағалары менән еңгәләре ҡаршы сығып алалар, әрмәндене күреп, еңгәләре шар-шор килеп өйгә инеп китәләр. Әрмәнде өйгә инеү менән тунын сисеп һандыҡ эсенә һала ла бик матур, ҡояш кеүек бер ҡыҙ була. Хәҙер инде еңгәләре унын һылыулығына көнләшеп ҡуялар. Еңгәләре егеттән уның әрмәнде кәләш алыуынан көлгән булалар, әрмәнде тунды яғырға ҡушалар. Егет үҙ һүҙен боҙорға теләмәй, был эштән тыйылып ҡала.

Былар өс көн, өс төн ҡунаҡ булғандан һуң, ағалары менән хушлашып, ҡайтып китәләр. Бер ни тиклем ваҡыт үткәндән һуң, ағаларының үҙҙәрен ҡунаҡҡа саҡыралар. Ағалары килеп, бик яҡшы ғына ҡунаҡ булалар. Еңгәләре һаман да әрмәнде киленден тунын яғырға ҡушалар. Егет башта риза булмаһа ла, өсөнсө көн йоҡларға ятҡас, ҡыҙҙың әрмәнде тунын яғыу өсөн, уның тышҡа сығыуын көтә башлай. Ҡыҙҙың тышта ниндәйҙер ҡунаҡ хөрмәтләү эше бөтмәгән була. Ҡыҙ тышҡа сығыу менән үк, егет әрмәнде тунды усаҡҡа ырғытты, ти. Шул мәлдә эшен бөтөрөп ҡыҙ ҙа өйгә инә. Инеү менән өй эсендәге ниндәйҙер еҫте һиҙеп:

— Уф, уф, ниндәй еҫ сыға? Әллә һин минең әрмәнде тунымды яҡтыңмы? — тип һораны, ти. Егеткә танырға урын ҡалмағанлыҡтан:

— Эйе, яҡтым шул! Ағай, еңгәләрем араһында бик уңайһыҙ бит, — тине, ти. Ҡыҙ, бик асыуланып:

— Был яғына һин минеке түгел, мин һинеке түгел. Мин һиңә бөтә яҡшылыҡтарҙы эшләнем, хатта үҙем дә кәләш булдым, быны һин аңламаның. Ярай, был



Ҡуян менән Арыҫлан



Ике Бурһык

яғына мине күрә алмаҫһың инде, — тип, өйҙән күгәрсен булып осоп сығып китте, ти. Шул ваҡытта күҙ асып йомғансы егеттең торған өйҙәре, һарайҙары, күперҙәре, сылтырап ағып ятҡан һыуҙары ла юҡ булды, ти. Унның ағалары, еңгәләре һаҙ уртаһындағы түңгәк араһында ятып ҡалалар, үкенә-үкенә, өйҙәренә ҡайтып китәләр.

Егет бик ҡайғыра. Балауыҙ һыға-һыға ла бисәһен эҙләп сығып китә. Ете көн, ете төн барғандан һуң, ул урман ситендә бәләкәй генә бер өй күрә, өй ишеге алдына килә лә ишек ҡаға. Өйҙән:

— Әйҙә, ин, улым, — тигән тауыш ишетелә. Егет, инеп, иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡандан һуң, өй эсендә ултырған әбейгә үҙенең хәлен түкмәй-сәсмәй һөйләп бирҙе, ти. Әбей, тыңлап бөткәндән һуң, егеткә үҙенең бынан бик алыҫ булмаған ерҙә уртансы апаһы булыуын, уның күберәк нәмә белеүен әйтте лә егеткә юл өйрәтеп ебәрҙе, ти. Егет, әбейгә рәхмәттәр әйтеп, уртансы апаһын эҙләп юлға сыҡты, ти. Өс ай, өс көн барғандан һуң ғына урман эсендә бер урта ҙурлыҡтағы өй күрә. Өй янына барып, ишек ҡаға. Өйҙән:

— Әйҙә, ин, егет! — тигән тауыш ишетелә. Егет инә, бөтәһен дә һөйләп бирә. Әбей, уның тамағын туйҙырып, ял иттергәндән һуң, үҙенең был турала бер ни ҙә белмәүен әйтеп, алыҫта, урман ситендә күпте күргән, күпте белгән өлкән апаһына юл өйрәтеп ебәрҙе, ти. Егет китә, барып, әбейҙе таба. Әбей:

— Был тиклем алыҫ аралыҡта ни эшләп кенә йөрөйһөң, улым? — тип һораны, ти. Егет барыһын да һөйләп бирә. Әбей был хәлде тыңлай ҙа:

— Эй улым, улым, — ти. — Һин бик хата эшләгәнһең, кеше һүҙенә төшмәү кәрәк ине. Мин был турала бик үк белеп етмәйем. Шулай ҙа әйтер һүҙем бар: миңә көн һайын диңгеҙ аръяғындағы батшалыҡтан өс күгәрсен ҡыҙ килеп уйнай, икәүһе күк төҫтә, берәүһе аҡ төҫтә. Ни эшләптер аҡ төҫтәгеһе көн дә бойоҡ була, бер ҙә рәтләп уйнамай. Улар миңә күгәрсен булып осоп киләләр ҙә, күгәрсен тундарын сисеп һалып, матур, тулған ай



5 Заказ 376

кеүек ҡыҙ булалар, арығансы уйнап ҡайталар. Улар килеү менән, бөтә урындарҙы ла ҡарап сығалар, ишектәрҙе бикләтәләр, кеше-фәлән юҡлығына ышанғандан һуң ғына уйнай башлайҙар. Шул бойоҡ күгәрсен-ҡыҙ һинең кәләшең түгелме икән? Мин унан һорап ҡарайым әле, — ти.

Күгәрсендәрҙең осоп килер мәле еткәс, әбей егеткә мунсала йоҡлап торорға ҡуша. Егет риза була. Кис өс күгәрсен осоп килеп төшә лә уйнай башлай. Әбей бер яҡта, бойоғоңҡорап, уйынға аҙ ҡатнашыусы ҡыҙ янына килеп, уның ни эшләп бойоғоуын һорай. Ҡыҙ әбейгә:

— Эй әбей, әбей, һин минең ҡайғымды белмәйһең шул. Мин бер егеттең ҡатыны инем, минең әрмәнде туным бар ине. Шул тунды яратмайынса, егеттең еңгәләре әрмәнде тунымды утҡа яҡтырҙылар. Мин, гәрләнеп, күгәрсен булып осоп сығып киттем. Ул егетте мин башҡа күрә алмам инде. Бына иптәш ҡыҙҙарым уйнайҙар, ә мин ҡайғырам, — тип, илап ебәрҙе, ти. Әбей уға:

— Әгәр ҙә ул егет килеп сыҡһа, барыр инеңме? — тип һораны, ти. Ҡыҙ әбейгә:

— Ҡайҙа ул уны башҡа күреү, ул хәҙер бик алыҫта, кеше үтеп килә алмаҫлыҡ урмандар, тауҙар аръяғында ҡалды, бәлки, үлгәндер ҙә инде. Әгәр ҙә килеп сыҡһа, барыр инем, — тине, ти. Әбей уның һүҙен ала, үҙе бер ни ҙә өндәшмәй.

Ҡыҙҙар, уйын бөткәс, осоп сығып китәләр. Егет өйгә килә лә әбейҙән һораша башлай. Әбей уға ҡыҙҙың һүҙҙәрен түкмәй-сәсмәй һөйләп бирә. Егет ҡыуанып китә. Тик нисек осрашыу юлын белә алмай ҡайғыра башлай. Шул ваҡыт әбей уға:

— Улым, юҡҡа ҡайғырма. Мин һине улар күгәрсен тундарын сисеп һала торған һандыҡ эсенә йәшерермен. Ә һин, улар ҡыҙып уйнай башлағас, һандыҡтың ҡапҡасын ас та аҡ төҫлө күгәрсендең тунына йәбеш. Унан һуң ул ҡыҙ бер ҡайҙа ла китә алмаҫ, яңынан һинеке булыр, — ти.

Икенсе көндө кис булғас, әбей егетте һандыҡ эсенә һалып ябып ҡуя ла күгәрсендәр килеүен көтә башлай. Күгәрсендәр осоп киләләр ҙә, бер кем дә булмағас, тундарын сисеп, һандыҡ өҫтөнә һалалар ҙа уйнай башлайҙар. Уйын бик ҡыҙып киткән бер ваҡытта егет һандыҡты аса ла аҡ күгәрсендең тунын тартып ала. Күк күгәрсен тунлылар осоп сығып китәләр. Тунһыҙ ҡалған ҡыҙ илай, инәлә башлай:

— Егет, һин зинһар мине ебәр, ни теләһәң, шуны бирәм, иптәштәремдән айырма, мин барыбер һиңә кәләш була алмайым, — ти. Егет уға:

— Юҡ, һин миңә кәләш булмаһаң, минән тунынды ала алмаҫһың, — тигән. Шунан әбей килеп:

— Һин үҙең әйттең бит: «Әгәр ҙә мәгәр минең егетем килһә, һис шикһеҙ, барыр инем», — тинең. Әй ҡыҙым, ҡыҙым, һүҙеңде боҙорға ярамай, был бит һинең ирең, — тине, ти. Ҡыҙ, егетте танып, бынан һуң мәңге бергә торорға һүҙен биреп, ҡосаҡлашып үбешteләр, ти.

Егет ҡыҙҙы алып ҡайтып, шул һаҙлыҡ эсенә яңынан матур өй һалып, донъя көтә башланылар, ти. Уларҙың донъялары элеккенән дә гүзәлләнә төшә, ә ағалары һаман да үҙҙәренең утар кеүек өйөндә йәшәй бирәләр, ти.

Егет менән ҡыҙҙың хәҙер биш улы, өс ҡыҙы бар, ти. Үҙҙәре ҡарт менән ҡарсыҡ булғандар, шулай ҙа бик татыу йәшәүҙәрен дауам итәләр, ти.

## ҺЫУ ҠЫҘЫ

Борон-борон заманда булған, ти, бер бабай менән бер әбей. Быларҙың ир еткән өс улы булған, ти. Улар һәйбәт кенә көн иткәндәр. Өлкән улы менән уртансы

улына кәләш әйттергәс, аталары үлеп киткән, кинйә улына кәләш алып бирергә өлгөрә алмай ҡалған. Ағалары, донъя үҙҙәренә ҡалғас, ҡустыларын күҙле-башлы иттереү яғын уйлап та бирмәгәндәр.

Бер ваҡыт кинйә малай һыу буйында йөрөп ятһа, һыу ситендә ултырған бер ҡыҙға тап була. Былар икәүләп үҙ-ара һөйләшеп китәләр. Егет:

— Һин кем булаһың? — тип һорай.

— Мин һыу ҡыҙы булам, — ти ҡыҙ.

— Миңә кәләшкә киләһеңме?

— Һинең кемдәрең бар?

— Әсәйем менән ике ағайым бар.

— Ағайҙарың байҙыр, мин ярлы. Ҡайһылай мин һиңә кейәүгә барайым, гәрләнмәйенсә.

Ҡыҙ үҙе бик һылыу, ти. Эй һөйләшәләр былар, эй һөйләшәләр. Һөйләшә торғас, ирле-ҡатынлы булырға һүҙ ҡуйыштылар, ти.

Егет, ҡайтып, бисәләр кейеме алып килә. Һыу ҡыҙын кейендереп, өйөнә алып ҡайтып китә. Бергә тора башлайҙар. Был киленде ҡәйнәһе маҡтап бөтөрә алмай.

— Киленем бигерәк уңған инде! — ти. — Ун һыйырҙы һә тигәнсе һауып ҡуя, өлкән килендәрем ише генәме һуң! Ҡулынан килмәгән эше юҡ, — ти.

Берҙән-бер көндө йәш килен үҙенең ирмәнде ярыһынан эшләнгән кейемен һалып ҡаҙауға элеп ҡуя ла һыйыр һауырға ултыра. Ире:

— Бында ниндәй сүп эленеп тора? — ти ҙә, шул кейемде алып, утҡа ташлай. Кейем яна, бәләкәй бер киҫәге генә тороп ҡала. Һыу ҡыҙы, быны күреп:

— Ни эшләнең һин? Харап ҡына иттең! — ти. Үҙе шунда уҡ ҡош булып оса ла китә.

Ире илап тороп ҡала. Ни эшләргә белмәй уйланып ултыра-ултыра ла ҡатынын эҙләп сығып китмәксе була.

Үҙе менән күп итеп аҙыҡ алып, көньяҡҡа ҡарап, эй китте, эй китте, ти, был, бик күп тауҙарҙы, йылғаларҙы үтте, ашар аҙығы ла ҡалманы, өҫтө-башы ла өҙгөләнеп бөттө, ти. Шунда бер иҫке тирмә кейеҙе табып,

сәкмән менән эшләпә тегеп кейҙе лә йәнә алға китте, ти.

Бара торғас, алыҫта уймаҡ кеүек кенә бер өй күрә был. Өйҙән ҡармаҡ ебе кеүек кенә төтөн сығып тора, ти. Кинйә шунда бара. Ишеген асып инһә, бер әбей ултыра.

— Әбей, иҫән генә тораһыңмы? — ти егет.

— Сыҡмаған йән бар әле. Ҡайҙан килеп ятаһың? — ти әбей.

Шунан егет:

— Ҡатыным осоп киткәйне, шуны эҙләп йөрөйөм. Бик асыҡтым, берәй нәмә ашатыр инең, әбей? — ти.

Әбей уға:

— Мин үҙем дә аслы-туҡлы ғына торам шул, улым, ашатыр нәмәм юҡ, — тип, әсе ҡатыҡ менән бер телем ҡатҡан икмәк кенә бирә.

Егет шуны ҡапҡылай ҙа үҙ юлы менән китеп бара. Бара торғас, йәнә уймаҡ һымаҡ ҡына бер өй күрә ул. Был өйҙән дә ҡармаҡ ебе кеүек кенә төтөн сығып тора, ти. Ул шунда бара. Ишекте асып инһә, бер әбей ултыра. Иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡас, егет:

— Ҡатынымды юғалтҡайным, шуны эҙләп йөрөйөм. Бик асыҡтым, берәй нәмә ашатыр инең, әбей! — ти.

Әбей уға:

— Мин һинең ҡатыныңды беләм, минең апайымдың ҡыҙы ул, — ти. Иллә-мәгәр уның йортона үтеп инерлек түгел; бөтә ере бикле. Бына мин һиңә бер асҡыс бирәм, шуны ҡойма башына ырғытырһың.

Кинйә асҡысты алып китә. Барып етеп өйҙө таба. Асҡысты ҡойма башына ырғытыу менән ҡапҡа асылып китә. Өйҙән бер әбей ҡаршы сығып:

— Әйҙә өйгә ин, ни йомошоң бар? — ти.

— Ҡатыным юғалғайны... — ти егет.

— Ул минең ҡыҙым да баһа, — ти әбей.

— Уны нисек күрергә һуң?

— Бына минең кейәүем ни өсөн килгән икән!.. Ҡыҙҙарым хәҙер ҡайтырҙар, үҙеңде үлтереп тә ҡуйырҙар! — ти әбей.

Әбей кейәүен тотоп һелкеткеләй башлай. Егет шунда

уҡ энә кеүек кенә булды ла ҡалды, ти. Шунан әбей уны бүрәнә мүгенә ҡаҙап ҡуя. Шулай ҙа ул өй эсендәге бөтә нәмәне күреп, белеп тора. Бына өйгә туғыҙ ҡаҙ осоп инә, ҡанаттары менән елпенәләр ҙә туғыҙ ҡыҙ булалар. Үҙҙәре еҫкәнәләр.

— Бында кем бар? Хәҙер үҙен үлтерәбеҙ! — тиҙәр.

— Юҡ, үлтерергә ярамай, — ти әсәйҙәре.

— Ул һинең артыңдан килгән, дуҫлашырға кәрәк! — ти үҙенең бер ҡыҙына.

Ҡыҙы риза була. Әсәһе бик үк ышанып бөтмәй. Шуның өсөн ул ҡыҙынан:

— Әйткән һүҙемдә торормон, — тип, ант иттерә. Шунан әбей, энәне мүктән алып, һелкеп-һелкеп ҡуя — энә үҙе бысраҡ, үҙе ҡысыулы ла ҡутырлы бер кешегә әйләнә.

— Мин уның менән йоҡламайым! — ти әбейҙең ҡыҙы, үҙенә айырым урын йәйеп ята. Егет тырнаша ла ҡашына, ҡашына ла тырнаша. Башы ауырта башлай быҡның. Тора-бара бөтөнләй ауырыуға һабыша.

Егет йоҡлап киткәс, әбейҙең ҡыҙы уны икмәк көрәгенә һалып, дөрләп янған мейескә ырғыта ла ҡуя, унан бер ус көл генә тороп ҡала. Шунан әбейҙең ҡыҙы шул көлдө тап-таҙа яулыҡҡа төрөп ала ла, ҡапыл һауаға һибеп, борҡотоп ебәрә, шунда уҡ ҡаршыһына ап-аҡ итеп йыуынған, матур итеп кейенгән ир килеп баҫа.

Иртән торғас, әбей кейәүенән:

— Төшөңдә нимә күрҙең? — тип һорай.

— Төнө буйы тынғы булманы: утҡа тотоп ташланылар, иҙмәләй иҙҙеләр, сепрәккә һалдылар, ҡаҡҡыланылар, һуҡҡыланылар, — ти. Бары ла хәтерендә. Тик төш түгел икәнен генә белмәй икән был. Шунан ул ҡатынына:

— Йә, үҙебеҙгә ҡайтайыҡ инде! — ти.

— Мин ҡайтмайым әле, һин үҙең генә ҡайта тор, юлда икмәгең етмәһә, бына был тоҡсайҙы ал, һелккән һайын аҡса ҡойолор. Иллә-мәгәр ул аҡсаға икмәктән башҡа нәмә һатып алма! — ти ҡатыны.

Ире тоҡсайҙы алып ҡайтып китә. Эй китте, ти, эй китте, ти, был, китеп ултырһа, алыҫта уймаҡ кеүек кенә бер өй күренә, ә өйҙөң мөрйәһенән ҡармаҡ ебе кеүек кенә төтөн сығып тора, ти. Ул шунда барып, ишегеп асып инһә, бер бабай менән бер әбей ултыра, ти.

— Хужа өйҙәме? — ти егет.

— Өйҙә, һин кем булаһың? — ти бабай.

— Һат миңә йортоңдо, бөтә ҡаралтыһы менән алам да ҡуям! — ти егет.

— Һатам. Хаҡы өс һауыт алтын булыр,— ти бабай.

Кинйә тоҡсайын өс тапҡыр һелккәйне — бабай тотоп торған өс һауыт алтын менән тулды ла ҡуйҙы, ти.

Бабай менән әбей, алтындарын алып, аяҡ тартҡан яҡҡа сығып китә, егет бөтә йортҡа хужа булып ҡала. Шунда тора башлай был. Күп тә үтмәй, ҡатыны быны белеп, артынан килеп етә.

— Ниңә мин әйткәнде тыңламай, йорт һатып алдың? — тип, ирен әрләй. — Бер юлға ҡалдырам, икенсе улай ҡыланаһы булма! — ти. Өйгә ут төртөп, көлөн күккә осора ла ҡуя.

Икәүләп ҡайтып китәләр. Ҡайтһалар, ауыл юҡ, ауыл урынында тип-тигеҙ ер, ти. Кешеләр ҙә ҡалмаған. Йөрөй торғас, бер баҙ өйгә тап булалар. Эсенә инһәләр, ике бабай, бер әбей ултыра, ти, унда. Ҡолаҡтары ишетмәй, күҙҙәре күрмәй. Абайлабыраҡ ҡараһалар: ике бабай тигәне — үҙенең ике ағаһы, әбей тигәне үҙенең әсәһе икән.

Шунан һыу ҡыҙы баҙ өй алдына ут яға ла иренең әсәһен дә, ике ағаһын да шул утҡа ырғыта. Тегеләр янып бөтәләр. Көлдәре генә ҡала. Ҡатын көлдө яулығына төрөп ала ла тирә-ягына һибеп ебәрә — ҡаршыға элеккесә һап-һау ҡәйнәһе менән ике ҡайнағаһы килеп баҫа.

Шунан улар бергә-бергә донъя көтөп алып китәләр.

## ҮГӘЙ ҠЫҘ ГӨЛБИКӘ

Борон заманда йәшәгән, ти, бер тол ҡатын. Уҫалдың-уҫалы, ямандың-яманы булған, ти, ул. Ике ҡыҙы бар ине, ти, бының: береһе — үҙ ҡыҙы, икенсеһе — үгәй ҡыҙ. Үҙенең ҡыҙы Миңлебикә, үгәй ҡыҙы Гөлбикә исемле булған.

Был ҡатын Гөлбикәне көнөн-төнөн эштән бушатмаған: ебен дә иләткән, йөнөн дә теттергән, һыу ҙа ташытҡан, керен дә йыуҙырған, башын да ҡалҡытмай эшләгән дә эшләгән, әммә үгәй әсәһенә барыбер ярай алмаған, ти.

Бер ваҡыт үгәй әсә Гөлбикәнең иләгән ебен оҡшатмайынса, тотҡан да тәҙрәнән ырғытҡан. Гөлбикә илай-илай йомғағын эҙләргә сығып киткән. Эй барған, эй эҙләгән — таба алмаған. Буш ҡул менән өйгә инһә, үгәй әсәһе туҡмарын белеп, Гөлбикә йомғағын эҙләй-эҙләй алыҫ китеп барған.

> Йомро-йомро, йомғағым,
> Ҡайҙа китеп юғалдың? —

тип, юл менән бара ла бара икән Гөлбикә.

Юлда осраған бер кешенән ул:

— Йомро-йомро йомғағым тәгәрәп киткәйне, шуны күрмәнегеҙме? — тип һорай икән.

— Анау яҡҡа бер йомғаҡ тәгәрәп китеп бара ине. Шул булғандыр әле һинең йомғағың, — тигән уға осраған бер кеше.

Гөлбикә шул яҡҡа табан барған да барған. Бара торғас, һыйыр көтөүсеһенә осраған.

— Йомро-йомро йомғағым тәгәрәп киткәйне. Шуны күрмәнегеҙме? — тип һораған.

Көтөүсе:

— Бынау яҡҡа бер йомғаҡ тәгәрәп китеп бара ине. Шул булғандыр әле һинең йомғағың, — тигән.

Гөлбикә шул яҡҡа бер аҙ барғас, йылҡы көтөүсеһенә тап булып, унан да:

— Йомро-йомро йомғағым тәгәрәп киткәйне. Шуны күрмәнегеҙме? — тип һораған.

Йылҡы көтөүсеһе лә:

— Ана теге яҡҡа бер йомғаҡ тәгәрәп китеп барғанын күргәйнем. Шул булғандыр әле һинең йомғағың, — тип яуап биргән.

Гөлбикә шул яҡҡа барған да барған. Оҙон-оҙон яландарҙы ла үткән, соҡор-саҡыр ерҙәрҙе лә уҙған. Ә йомғаҡ һаман табылмаған. Бара торғас, ул бер ҡара урманға ла килеп ингән.

Бына ҡараңғы ла төшә башлаған. Уңда ла, һулда ла бүреләр генә олоп тора икән, ти, был урманда. Алда йымылдап ҡына бер ут күренгән. Гөлбикә шул утҡа ҡарап барған да барған. Барып етһә, йоҙроҡ саҡлы ғына бер өйҙән ҡыл кеүек кенә төтөнө сығып тора икән. Тәҙрәһенән ҡараһа, бәлтерәп бөткән бер әбей еп иләп ултыра, ти. Гөлбикә ҡурҡа-ҡурҡа ғына өйгә ингән дә:

— Һауғынамы, әбекәй? — тигән.

— Һау әле. Бында ни эшләп килеп сыҡтың? — тигән әбей.

Шунан Гөлбикә.

— Йомро-йомро йомғағым тәгәрәп китеп юғалғайны. Шуны эҙләп килеп сыҡтым. Шул йомғаҡты табып ҡайтмаһам, үгәй әсәйем күҙемде лә асырмаç, үлтергәнсе туҡмар, — тип илап та ебәргән.

Әбей быны тыңлап торған да:

— Ярар, юҡҡа балауыҙ һыҡма, ҡыҙым! Миндә бер ике-өс көн торорһоң да өйөңә ҡайтырһың. Бер ни ҙә булмаç, — тип йыуатҡан.

— Мин һиндә ни эшләп кенә торормон һуң, әбекәй? — тигән Гөлбикә.

— Мине ҡарарһың, ашарға-эсергә әҙерләрһең. Эш табылыр ул, ҡыҙым, эшләйем тигән кешегә, — тигән.

Гөлбикә быға риза булған. Иртәгеһен әбей уға:

— Келәттә тары ярмаһы булыр. Шуны килегә һалып төшөр ҙә, ононан ҡоймаҡ ҡой, — тигән.

Гөлбикә:

— Ә нисек ҡойорға һуң, әбекәй? — тип һораған.

Әбей:

— Нисек булһа ла ярар. Шунда берәй табаҡҡа һыу һал да он һибеп буташтыр ҙа ҡуй, — тигән.

Гөлбикә тары ярмаһын килелә ваҡ ҡына итеп төйөп, уны ҡыл иләктән үткәреп, бик һәйбәтләп кенә шыйыҡ ҡоймаҡ ҡамыры әҙерләп ҡуйған да әбейҙән:

— Хәҙер нисек бешерәйем инде? — тип һораған.

— Нисек бешерһәң дә ярар. Әйҙә, шунда әҙерәк бешер-бешмәҫ, көйөр-көймәҫ булдымы — ярар. Көйөп сыҡһа ла тамаҡҡа тормаҫ, — тигән әбей.

Гөлбикә күпереп-күпереп торған йомшаҡ ҡына ҡоймаҡ бешергән дә, мул итеп майлап, әбей алдына килтереп ҡуйған. Ҡапһаң, телеңде йоторһоң — шулай уңған, ти, Гөлбикәнең ҡоймағы.

Икенсе көндө әбей Гөлбикәгә:

— Ҡыҙым, мунса яғып индерер инең, — тигән.

— Нисек яғырға һуң уны? — тип һораған Гөлбикә.

— Нисек яҡһаң да ярар шунда. Мейесенә утын тултыр ҙа ут төрт тә ебәр, — тигән әбей.

Гөлбикә мунсаны һәйбәтләп тороп яҡҡан. Мунса уҙғас, ҡыҙыуы һүрелмәҫ борон томалап ҡуйған. Шунан ул:

— Әбекәй, мунса әҙер. Һине нисек алып барырға икән һуң? — тигән.

— Сәсемдән тот та елкәмә төрт, — тигән әбей.

Гөлбикә әбейҙе иплəп кенә урынынан торғоҙоп ҡултыҡлаған да әкрен генә мунсаға алып барған. Эләүкәгә мендереп ултыртҡас:

— Һине нисек сабындырайым? — тип һораған.

— Миндектең һабы менән төй ҙә төй арҡамды, — тигән әбей.

Ҡыҙ уны хуш еҫ бәреп торһон өсөн мәтрүшкә ара-

лаштырып бәйләнгән йомшаҡ ҡына япраҡлы ҡайын миндек менән арҡаһының ҡысыуы ҡанғансы, рәхәтләндереп сабындырған да һәйбәтләп йыуындырып, өйөнә алып ҡайтҡан. Шунан ҡарт һөйәктәре йомшап төшкән әбей:

— Хәҙер, ҡыҙым, миңә шунда берәй нисек сәй эсер ҙә килгән ереңә кире ҡайтып китерһең, — тигән.

Гөлбикә самауыр ҡайнатып, бик һәйбәтләп сәй әҙерләгән. Әбей самауырҙы йыҡҡансы, ете ҡат тире атылып сыҡҡансы тәмләп тороп сәй эскән, ти. Әбей сәй эсеп бөткәс, Гөлбикә өҫтәлде йыйыштырған да:

— Йә, әбекәй, мин ҡайтайым инде, — тигән.

— Ярар, ҡыҙым, ҡайтырһың. Әммә минән буш ҡул менән китмә. Бына һинең йомро-йомро йомғағың. Ә хәҙер һин сарҙаҡҡа менеп төш. Унда бәләкәй генә бер йәшел һандыҡ булыр. Шуны үҙеңә алырһың. Илләмәгәр өйөңә ҡайтып инмәйенсә һандыҡты аса күрмә, — тигән әбей.

Гөлбикә, әбей менән хушлашып-аманлашып, биргән бүләге өсөн уға бик күп рәхмәт әйтеп, йүгерә-атлай ҡайтып киткән, ти. Ҡайтып еткәс, бәләкәс кенә сәүек эттәре, ҡапҡа аҫтынан йүгереп сығып, Гөлбикәне өрә-өрә ҡаршы алған:

— Һау-һау, һау-һау, үлергә киткән апай иҫән-һау ҡайтҡан, үҙе бай!

Юҡты өрәһең, кит бынан, өтөк! — тип, Гөлбикә этте ҡыуып ебәргән дә өйгә инеп киткән. Ә эт уның артынан баяғыса өрөп ҡалған.

— Һау-һау, һау-һау, үлергә киткән апай иҫән-һау, үҙе бай!

Үгәй әсәһе, Гөлбикәнең иҫән-һау әйләнеп ҡайтҡанын күргәс, асыуынан ярылып үлерҙәй булған, ти.

Гөлбикә теге әбей биреп ебәргән йәшел һандыҡты асып ебәрһә — эсе тулы алтын-көмөш, ти. Быны күреп, үгәй әсә:

— Ҡайҙан алдың һин был тиклем хазинаны? — тип ҡысҡырған.

Гөлбикә булған хәлде, түкмәй-сәсмәй, әнәһенән-ебенәсә һөйләп биргән. Шул ерҙә үгәй әсә:

— Минең үҙ ҡыҙым да шулай байлыҡ тейәп ҡайтһын әле, — тип, Миңлебикәнең йомғағын алған да ишектән ырғытҡан, ти. Йомро-йомро йомғаҡ тәгәрәп киткән. Ҡыҙы йомғаҡты эҙләп ҡараһа ла, таба алмаған. Шунан ул, яңғыҙы ғына йөрөргә ҡурҡһа ла, яланға сығып бер юл менән китеп барған. Юлда уға Гөлбикәгә осраған һыйыр көтөүсеһе менән йылҡы көтөүсеһе тап булған. Миңлебикә уларҙан:

— Йомро-йомро йомғағым тәгәрәп киткәйне, шуны күрмәнегеҙме? — тип һораған.

Көтөүселәр:

— Анау яҡҡа бер йомғаҡ тәгәрәп китеп бара ине барыуын. Шул булманымы икән һинең йомғағың? — тигәндәр.

Бара торғас, ҡыҙ ҡара урманға барып кергән. Алда йымылдап ҡына бер ут күренгән. Шунда барып етһә, йоҙроҡ саҡлы ғына бер өйҙән ҡыл кеүек кенә төтөнө сығып тора, ти. Тәҙрәһенән ҡараһа, бәлтерәп бөткән бер ҡарсыҡ еп иләп ултыра, ти.

Әбей, Миңлебикәне лә һынап ҡарамаҡсы булып, миндә бер ике-өс көн торорһоң да шунан ҡайтып китерһең, тигән. Ҡыҙ риза булған. Шунан әбей:

— Ҡыҙым, миңә ҡоймаҡ бешереп бирһәнә! — тигән.

— Нисек бешерергә һуң уны? — тип һораған Миңлебикә.

— Нисек бешерһәң дә ярар. Шунда әҙерәк бешер-бешмәҫ, көйөр-көймәҫ булдымы — ярар. Көйөп сыҡһа ла тамаҡҡа тормаҫ, — тигән.

Миңлебикә бер ни эшләй белмәй икән. Ҡоймаҡтары йә янып-көйөп бөткән, йә сейле-бешле булған.

Икенсе көндө әбей Миңлебикәгә:

— Ҡыҙым, бик мунса кергем килде, мунса яғып ебәрер инең! — тигән.

— Уны нисек яғырға? — тип һораған ҡыҙ.

— Нисек яҡһаң да ярар шунда. Мейесенә утын

тултыр ҙа ут төрт тә ебәр, янып бөткәс, тағы өҫтәрһең, — тигән.

Миңлебикә утын килтерергә иренеп, мунсаны һалам менән яҡҡан. Төтөнө-есе сығып бөтмәҫ борон уҡ мунсаны томалаған да әбейгә:

— Мунса әҙер, һине нисек алып барырға? — тигән.

— Ярамағанмы шунда — сәсемдән тот та елкәмә төрт, — тигән әбей.

Миңлебикә әбейҙе сәсенән урабыраҡ тотҡан да елкәһенән төртөп үк ебәргән.

Мунсаға барып ингәс, Миңлебикә:

— Әбей, һине нисек сабындырырға? — тигән.

— Нисек булһа ла ярар. Миндектең һабы менән төй ҙә төй арҡамды, — тигән әбей.

Миңлебикә әбейҙең арҡаһын миндектең һабы менән төйгән. Шунан һуң ул әбейҙе, мунсаға нисек алып килгән булһа, өйөнә лә шулай алып ҡайтҡан: сәсенән тотҡан да елкәһенән төртөп ебәргән.

Өйөнә ҡайтҡас, әбей:

— Ҡыҙым, мунсанан һуң бик тамаҡ кипте, һин миңә сәй ҡайнатып эсер инде, шунан ҡайтып китерһең, — тигән.

Миңлебикә ашыҡ-бошоҡ ҡыланып, самауыр ҡуйып, әбейгә ҡайнар-ҡайнамаҫ сәй эсергән дә:

— Әбей, миңә ҡайтһам да ярайҙыр инде? — тигән.

— Ярар, ҡыҙым, ҡайтырһың, — тигән әбей. — Миңә килгән ҡыҙҙар буш ҡул менән китмәйҙәр. Бына һинең йомро-йомро йомғағың. Хәҙер һин сарҙаҡҡа менеп төш. Унда бәләкәй генә бер һары һандыҡ булыр. Шуны үҙең менән алырһың. Иллә-мәгәр өйөңә ҡайтып инмәйенсә һандыҡты асып ҡарайһы булма, — тигән.

Миңлебикә һары һандыҡты алып, йүгерә-атлай ҡайтып киткән. Ҡайтып еткәс, бәләкәс кенә сәүек эттәре, ҡапҡа аҫтынан йүгереп сығып, Миңлебикәне өрә-өрә ҡаршы алған, ти.

— Һау-һау, һау-һау, апай ҡайтты — ҡыуандыҡ, хәшәрәттәре — бер һандыҡ.

Миңлебикәһен дүрт күҙ менән көтөп алған әсәһе әтен:

— Ниңә шулай өрәһең, ҡороғоро! — тип тукмап ташлаған.

Өйгә инеү менән Миңлебикә һары һандыкты асып ебәрһә — һандыҡ эсе мыжлап тулған хәшәрәт, ти: йылан-саяндар, кеҫәрткеләр, тағы әллә ниндәй тәлмәрйендәр тулып ята икән, ти.

Йыландар, һандыҡтан ыҫылдашып сығып, үгәй әсә менән ҡыҙын сағырға тотонғандар. Гөлбикәгә яҡын да юламағандар, ти.

## СӘФӘР

Борон-борон заманда Эйек йылғаһы буйында йәшәгән, ти, бер ҡарт менән бер әбей. Уларҙың булған, ти, өс улы. Кесе улы Сәфәр исемле булған. Ҡарт менән әбей бик ҡартайған, улдары ир еткән.

Берҙән-бер көндө әбей үлеп киткән. Бына үлем түшәгенә бабай ҙа ятҡан. Ҡарттың булған, ти, ике аты, ике баш һыйыры, ҡыйыҡһыҙ бер өйө, йәнә кәртә-ҡуралары. Үлер алдынан ҡарт улдарын саҡырып ала ла:

— Йә, балалар, мин был донъяны ташлайым инде. Минән ҡалып, минең кеүек ҡартайып, бәхетле тормош итеүегеҙҙе теләйем. Шунан, улдарым, минең байлығым күп түгел, шулай ҙа булғанын һеҙгә бүлеп биреп китмәксе булам. Һеҙҙең арағыҙҙа талаш-бүлеш булмаһын. Тәүҙә һеҙҙән шуны һорайым: ҙур улым, һиңә нимә кәрәк? Байлыҡмы, аҡылмы? — тигән. Ҙур улы:

— Минең үҙ аҡылым үҙемә еткән, байлыҡ кәрәк, — тигән. Уртансы улы ла шул яуапты ҡайтара. Ҡарт өсөнсө улынан һорай:

— Йә, иң кесе улым, һиңә нимә кәрәк, байлыҡмы әллә аҡылмы? Өсөнсө улы:

— Мин байлыҡ менән ҡайҙа барайым? Миңә аҡыл кәрәк, — тигән. Шул ерҙә ҡарт:

— Оло улдарым, ошо байлыҡты бүлешеп алығыҙ, ә, Сәфәрем, һиңә аҡыл өйрәтәм. Һин, мин үлеп киткәс, ағайҙарың менән хушлашып, сығып китергә тейешһең. Башың ҡайһы яҡҡа теләй, шул яҡҡа кит. Ололарға кеселекле бул, сәләмеңде бир, кеселәргә өлкән булырға тырыш. Юлыңда берәү яфа сикһә, боролоп үтеп китмә, уға ярҙам ит. Шул аҡылды тотһаң, һәр ваҡыт бәхетле булырһың, донъяла бер кемдән дә кәм-хур булмаҫһың! — тип, ҡарттың әйтеп бөтөүе булған, үлеп тә киткән.

Ҡартты ҡәҙерләп ерләп ҡуйғандан һуң, оло ағайҙары ата малын бүлешеп, үҙ алдарына донъя көтә башлайҙар. Сәфәр, тыуып үҫкән ата йортон ташлап, баш һуҡҡан яҡҡа сығып китә. Йөрөй был сит-ят ерҙәрҙә. Тамағы асыҡҡан ваҡытта ҡармаҡ менән балыҡ тотоп ашай. Шулай һыу буйлап йөрөгәндә, Сәфәргә бер балыҡсы ҡарт осрай.

— Йә, балам, ни эш бөтөрөп йөрөйһөң? Ҡайҙан киләһең? — тип һорай ҡарт.

Сәфәр:

— Мин, бабай, алыҫ яҡтарҙан киләм. Торор урыным да, барыр ерем дә юҡ. Ул иткән кешегә ул булам, ҡол иткән кешегә ҡол булам, — ти.

Шул ваҡыт ҡарт, кәмәһенән ярға сығып:

— Улым, бик сирләп тә торам, кәмәгә ултырып, минең йылымдарымды ҡарап сыҡ әле, — ти. Сәфәр:

— Була ул, бабай! — тип кәмәгә һикереп төшөп тә ултыра.

Әмәлгә ҡаршы, йылымдарға балыҡ бик күп эләккән була. Сәфәр, ауҙарҙы ҡарап бөткәндән һуң, ярға сыға. Бер аҙ һөйләшеп ултырғандан һуң, ҡарт:

— Әйҙә, улым, ултыр кәмәгә, ал ишкәкте, беҙгә барып тамаҡ ялғап алайыҡ, — тигән.

Былар кәмәгә ултырып ауылға ҡайтып китәләр.

Ҡайтһалар, әбейҙең самауыры гөрләп ҡайнап ултырған була.

— Әйҙүк, балам! Бабай, ҡунаҡ алып ҡайтҡанһың икән, — тип, асыҡ йөҙ менән ҡаршы ала.

Ҡарт менән Сәфәр, балыҡтарҙы урынлаштырып, бит-ҡулдарын йыуып, сәй янына ултыралар. Шул ваҡыт ҡарт әбейгә Сәфәрҙең ҡайҙан килеп сығыуын түкмәй-сәсмәй һөйләп бирә. Сәфәрҙең теләген дә әйтә. Әбей, бабайҙың уйлаған уйын белгәндәй, былай тип әйтеп һала:

— Бабай, беҙҙең улдарыбыҙ юҡ бит, ул итәйек, — ти. Ҡарттың күңеле күтәрелеп, ҡыуанып китә. — Берҙән-бер ҡыҙыбыҙ ғына бар. Ошо айҙа ун дүрт тулып, ун бишкә китте. Исеме Зөләйхә. Хәҙер ҡайтыр, утын-фәлән алып ҡайтырға киткәйне, — ти.

Шулай тип әйтеүе була, бер матур ҡыҙ килеп тә инә. Күрмәгән-белмәгән малайҙан оялып, бер аҙ тартынып тора.

— Бына был егет һинең ағайың булыр, исеме Сәфәр, — ти атаһы.

Ҡыҙ, баҙыҡ-баҙыҡ атлап, килеп күрешә. Шунан бөтә ғаиләһе менән тәмләп ултырып сәй эсәләр. Тамаҡ туйҙырғандан һуң, Сәфәр:

— Йә, бабай, нимәләр эшләйем? — тип һорай. Ҡарт:

— Юҡ, балам, һин бик йонсоғанһың, йыуынып, ял итеп ал, иртәгәнән эш башлап ебәрербеҙ, — тигән.

Шулай итеп, Сәфәр, бабай кеүек, балыҡсы булып киткән.

Айҙар, йылдар үткән, Сәфәр ун һигеҙе тулып, ун туғыҙға киткән, Зөләйхәгә ун ете йәш тулған. Сәфәр шул тиклем уңған егет булып сыға, ауылдағы ҡыҙҙар Сәфәрҙе телдән төшөрмәй маҡтайҙар. Ауыл араһында күпте күреп, күпте ишетеп йөрөгән әбей бабайға:

— Сәфәрҙең аҡыл-фиғеле, уңғанлығы бөтә ауылға билдәле. Үҙен уллыҡтан кейәү итеү яғын ҡарарға ине, — ти.

— Әсәһе, ҡыҙ менән һин һөйләш, ә егет менән мин үҙем һөйләшермен, — ти бабай.

Балыҡта йөрөгәндә һүҙ ыңғайында һүҙ сығарып, бабай үҙенең теләген әйтә. Сәфәр:

— Мин, бабай, һеҙгә иң тәүҙә күрешкәндә үк үҙемде белдерҙем, һеҙ ни теләһәгеҙ, мин шуға риза, тик ҡыҙығыҙ риза булһын, — ти.

Балыҡ тотоп, эш бөтөрөп ҡайтҡандан һуң, бабай әбейгә:

— Йә, һинең яҡтан эштәр нисек? Мин егет менән һөйләштем, егет риза, Зөләйхә ризамы? — ти. Әбей:

— Ҡыҙ һис бер тартынмайынса риза булды, — ти.

Шул көндө үк, ҡулдарынан килгәнсә туй яһап, ҡыҙ менән егетте өйләнештерәләр. Шунан һуң үҙ алдына хужа булып, рәхәт тормошта йәшәй башлайҙар. Шулай йәшәй торғас, ҡарт менән әбей донъялыҡты ташлап, үлеп китәләр. Зөләйхә хужабикә булып, үҙ эшен үҙе бөтөрә. Өй эштәренән башҡа ла Зөләйхәнең төрлө-төрлө һөнәрҙәре күп була. Ул төрлө ҡул эштәренә бик оҫта була. Рәсемдәр төшөрә, келәмдәр һуға, төрлө таҫтамал, ашъяулыҡтар эшләй белә. Йәйҙең иң йәмле айҙарында илдең бер үҙәк ҡалаһында бер тапҡыр йәрминкә асыла торған була. Зөләйхә үҙенең ҡул эштәрен йылдан йылға йыйып килә. Бер көндө ул Сәфәрҙе үҙенең ҡул эштәре менән йәрминкәгә ебәрә.

— Әгәр был әйберҙәрҙе ҡайҙан алдың, кем эшләне тип һораһалар, сит илдәрҙән йөрөп алып ҡайттым, тип яуап бир, — тип әйтеп ебәрә.

Бер нисә йылдар буйы Сәфәр шулай тип яуап бирә. Берҙән-бер йылды: «Ни эшләп мин үҙ ҡатынымдың эштәрен йәшерәм әле», — тип уйлай ҙа дөрөҫөн әйтә. Шул ерҙә Сәфәрҙе ҡулға алып, батша алдына илтеп баҫтыралар. Батша:

— Был әйберҙәрҙе һинең ҡатының эшләй икән, әйберҙәреңә күпме һорайһың? — тип һорай.

Сәфәр, ҡурҡып-өркөп тормайынса, әйберҙәренең хаҡтарын әйтә. Батша, ҡарышып тормайынса, һораған

хаҡты тулыһынса түләргә бойора. Был егеттең ҡайҙан икәнлеген белергә ҡуша.

Сәфәр ҡаланан байып ҡайта. Сәфәрҙең ҡулындағы байлыҡты күреп, Зөләйхә һораша башлай:

— Йә, ни хәлдә йөрөнөң? Минең һүҙҙе тотманыңмы, ҡатыным эшләй белә тип маҡтандыңмы? — ти.

— Эйе, Зөләйхә, хаталыҡ миндә булды. Һин әйткәнсә эшләмәнем, дөрөҫөн әйттем дә бирҙем. Алда ниҙәр булыр, унын белмәйем, — ти Сәфәр.

— Ярар, Сәфәр, ҡайғырма, ҡулдан килгәнен эшләрбеҙ, — ти Зөләйхә.

Берҙән-бер көндө Сәфәргә батша янына барырға бойороҡ була. Сәфәр батшаға барып инә. Батша:

— Бына, егет, һиңә минән әмер. Һин миңә өс ҡыр аты тотоп килергә тейешһең. Һиңә бер аҙна ваҡыт, — ти. — Ошо әмерҙе үтәмәһәң, ҡатыныңды тартып алам, үҙеңә үлем язаһы бирәм, — ти.

Сәфәр, ни эшләһен, тиҙерәк ҡайтып китә. Ҡайтып инеүе менән, Зөләйхә:

— Йә, батша ниндәй бурыс бирҙе? — ти. Сәфәр:

— Батша бер аҙна эсендә өс ҡыр аты тотоп алып килергә ҡушты. Алып килмәһәң, ҡатыныңды үҙемә алам, ә үҙеңә үлем язаһы бирәм, тип әйтте, — ти.

— Ярай, ят, йоҡла, ҡайғырма, берәй әмәлен табырбыҙ әле, — тип йыуата Зөләйхә ирен.

Сәфәр иртәнсәк йоҡоһонан торһа, өс ебәк йүгән әҙер була. Иртәнге сәйҙе эскәндән һуң, Зөләйхә:

— Бына һиңә дарыу. Фәлән ерҙәге фәлән шишмәгә бар, шул шишмәгә һәр ваҡыт ҡыр аттары килеп һыу эсәләр. Аттарҙы тәүҙә ҡарап ят. Ҡайһы ваҡыт төшөп һыу эскәндәрен бел. Улар һыу эсергә төшөр ваҡыттары еткәс тә ошо дарыуҙы шишмәгә һиберһең, үҙең йәшеренерһең. Аттар һыуҙы эсерҙәр ҙә, яр башына сығып, һуштан яҙып тәгәрәрҙәр. Шул ваҡыт үҙеңә өс ат һайлап алып, баштарына йүгән кейҙереп, аттар аңынатоңона килгәнсе, бына ошо ҡамсы менән торғоҙоп, ике атты ике аяғыңа бәйләп, урталағы атҡа үҙең атланып, аттар ҡайҙа алып китә, шул яҡҡа аттар талсыҡҡансы

елдерә бир. Улар талсыҡҡас, һин ҡайҙа бойораһың, улар шул яҡҡа китерҙәр. Шулай итеп, һин ул аттарҙы батшаға алып барып тапшырырһың, — ти.

Сәфәр батша биргән бер аҙнаны бер тәүлеккә алдан үтәй. Батша, Сәфәрҙең был ҡыйын әмерҙе үтәүенә хайран ҡалып, аптырап тора. Шул ерҙә Сәфәр:

— Иә, батша, мин бушаныммы? — ти. Батша:

— Юҡ, егет, һинең алдыңда үтәй торған тағы ҙур бер эш бар. Һиңә өс йыл ваҡыт. «Белмәйем — ниҙе, алып кил шуны», — ти.

Сәфәр, бер ни төшөнмәй, өйөнә ҡайтып китә. Зөләйхәһе:

— Батша ни бойорҙо? — тип һорай. Сәфәр батшаның бойороғон әйтә. Шунан Зөләйхә: — Ярар, ҡайғырма, ашап-эс, төн урталарына тиклем ял ит, — ти.

Төн урталары килеп еткәс, ҡатыны Сәфәрҙе тәмле йоҡоһонан уятып, тоҡҡа Сәфәрҙең көсө етерлек аҙыҡ-түлек тултырып, үҙҙәре йәшәгән Эйек йылғаһының яр башына алып сығып китә. Әмәлгә ҡаршы, төн бик матур, тын, ай яҡты була. Шул ваҡыт Зөләйхә ҡулындағы алтын йөҙөгөн һурып алып, йөҙөк үтә әсе итеп һыҙғырып ебәрә. Һыҙғырыуы була, һауалағы ҡоштар, ер йөҙөндәге януарҙар, һыуҙа йөҙгән терек-лектәр барыһы ла бер ергә тупланалар. Һәр ҡайһыһы үҙҙәренсә Зөләйхәнән:

— Беҙҙән һиңә ни кәрәк? — тип һорайҙар. Зөләйхә:

— «Белмәйем — ниҙе, алып кил шуны» һүҙенең мәғәнәһен әйтегеҙ, кем белә? — ти. Һауалағы ҡоштар:

— Беҙ белмәйбеҙ, — тип осоп китәләр. Ер йөҙөндәге януарҙар ҙа:

— Белмәйбеҙ, — тип таралышалар. Һыуҙағы балыҡтарҙың береһе:

— Беҙҙең бик күп йәшәгән бер суртан бабайыбыҙ килеп етә алмайынса артта ҡалды, бәлки, ул белер, — ти.

Суртан килеп етә. Зөләйхә менән Сәфәр суртандан:

— Эй, суртан, «белмәйем — ниҙе, алып кил шуны» һүҙенең мәғәнәһен әйт әле беҙгә, — тиҙәр. Суртан бабай:

— Юҡ, балалар, белмәйем мин уны. Ошо Эйек буйлап бик оҙаҡ барһаң, бер йәшел өй күрерһегеҙ. Шул өйгә инеп, йәшел өҫтәл аҫтына инеп ултырығыҙ ҙа нимә булғанын күҙәтегеҙ. Шунан ни эшләргә кәрәген үҙегеҙ белерһегеҙ, — ти.

Сәфәр, Зөләйхәһе менән хушлашып, бер үҙе генә юлға сығып китә. Бик оҙаҡ барғандан һуң, бер йәшел өй күренә. Шул йәшел өйгә инә, бөтә булған нәмәләрҙе ҡарап сыға. Бер яҡ ситтә бер йәшел таяҡ, йәшел сәкмән, йәшел эшләпә, йәшел сабата элеүле торған була. Ә өйҙөң уртаһында йәшел эскәтер ябылған өҫтәл, йәшел ултырғыс. Сәфәр, уйлап-нитеп тормай, суртан әйткән буйынса, өҫтәл аҫтына инеп ултыра. Бик ныҡ арығанлыҡтан, асыҡҡанлыҡтан ул йоҡоға китә. Ишек асылыуға һиҫкәнеп, уянып китә. Ни күҙе менән күрһен, бер аҡ һаҡаллы ҡарт килеп инә. Ул йәшел әйберҙәрҙе кейеп, йәшел таяҡты ҡулына алып, йәшел ултырғысҡа килеп ултыра ла:

— Үзбәк, ашамаҡ-эсмәк кәрәк, — ти. Шул ваҡыт өҫтәл өҫтөндә төрлө-төрлө ашамлыҡтар барлыҡҡа килә.

Сәфәр быға бик ныҡ аптырай. Бабай шул тиклем ҡомһоҙланып ашай, хатта Сәфәрҙең дә ашағыһы килеп китә, ләкин тыйыла. Бабай ашап бөтөп, ҡалғандарын кеҫәһенә тултырып, кейгән кейемдәрен сисеп сығып китә. Сәфәр өҫтәл аҫтынан сығып, әлеге йәшел кейемдәрҙе кейеп, йәшел өҫтәл артына килеп ултыра ла:

— Үзбәк, ашамаҡ-эсмәк кәрәк, — ти. Шул ваҡыт тәмле ашамлыҡтар барлыҡҡа килә. Сәфәрҙең бер үҙенең генә ашағыһы килмәй. Ул:

— Эй, Үзбәк, кил минең яныма, икәү бергәләп ашаһаҡ, яҡшыраҡ булыр. Был тиклем ашамлыҡты нисек итеп ашап бөтмәк кәрәк, — ти. Әйтеп бөтөүе була, Үзбәк күренә лә:

— Хөрмәтле егет, һеҙҙең шул тиклем яҡшылығығыҙ өсөн ҙур рәхмәт. Мин һеҙҙең кеүек кешеләрҙе ғүмеремдә күргәнем булманы. Бына яңы ашап сыҡҡан ҡарт шул тиклем ҡомһоҙ, ҡайһы ваҡыт ике өҫтәл ашамлыҡ һорап ашап сығып китә, — ти.

Сәфәр менән Үзбәк һүҙ ҡуйышып, бергә сығып китәләр. Эй баралар, эй баралар, бер ҡомлоҡ ергә килеп сығалар. Яңы ғына ҡом бураны булып баҫылған саҡ була. Яҡындараҡ ҡына кеше тауыштары ишетелә. Шул тауыш сыҡҡан яҡҡа китәләр. Барһалар, кешеләр үҙҙәренең дөйәләрен, иптәштәрен ҡом араһынан ҡаҙып алып йөрөйҙәр. Быларҙы ҡом бураны баҫып киткән була. Был кешеләр, сауҙа итеп, байлыҡ тейәп ҡайтып килгән булалар. Улар бик асыҡҡан, һыуһаған.

Ашарҙарына ла бөткән була. Сәфәр быларҙың яндарына бара ла:

— Һеҙгә һыу кәрәкме? — ти.

Кешеләр ни эшләргә белмәйҙәр, был кеше алдайҙыр, юрый беҙҙән көләлер тип, Сәфәрҙе туҡмамаҡсы булалар. Шул мәлде Сәфәр:

— Бына ошо ерҙән һыу сығырға тейеш, һеҙ уны киңерәк итеп ҡаҙығыҙ, — ти.

Тегеләр әй ҡаҙалар, эй ҡаҙалар, һыу сыҡмай ҙа сыҡмай, ҡаҙыусылар бик ныҡ арыйҙар. Сәфәр былай ти:

— Тәүҙә үҙегеҙ эсәһегеҙме әллә дөйәләрегеҙҙе туйҙыраһығыҙмы?

— Үҙебеҙ нисек булһа ла түҙер инек әле, тәүҙә дөйәләребеҙҙе эсерер инек, — тиҙәр каруансылар.

— Ярай улай булһа, барығыҙ, дөйәләрегеҙҙе алып килегеҙ, — ти. Үҙе, тегеләр дөйәләрен алып килгәнсе, йәшел эскәтерҙе түшәп: «Үзбәк, дөйәләргә эсергә һыу кәрәк», — ти. Шул ваҡыт ҡаҙыған ерҙән һыу атылып килеп сыға. Кешеләр дөйәләрен эсерә башлайҙар, үҙҙәре лә ятып эсәләр. Һыуға туйғас, кешеләр ял итергә яталар. Бөтәһе лә йоҡлап бөткәс, каруан хужаһы Сәфәргә:

— Әйҙә, дуҫ кеше, һинең ошо Үзбәгеңде бер тылсымлы һандыҡҡа алышайыҡ, уға өҫтәп ҡиммәтле тауарҙар, иң көслө дөйәмде бирәм. Был Үзбәк менән дөйәләрем бер ваҡытта ла сарсамаҫтар, — ти.

— Үзбәк риза булырмы икән? — ти Сәфәр. Үзбәк

үҙенең ризалығын белдерә. Сәфәрҙең үҙенә ишетелерлек кенә итеп:

— Мин риза, һин дә риза бул. Мин барыбер һиңә әйләнеп ҡайтырмын, — ти.

Сәфәр, серле һандыҡты алып, дөйәгә атланып, байлыҡты тейәп ҡайтып китә. Ҡайтып барышлай, каруан хужаһынан алған тауарҙарын ярлыларға өләшә. Ҡатыны уны асыҡ йөҙ менән ҡаршы ала. Теге һандыҡ эсендә ҡоралланған һалдаттар була.

Сәфәрҙең сығып китеүенә өс йыл тулып, дүртенсе йылға китә. Батша Сәфәрҙе алып килергә әмер бирә. Сәфәр:

— Батшаға мин кәрәк икән, батша үҙе килһен, — ти.

Һалдат батшаға ҡайтып әйтә. Батша асыуынан ни эшләргә белмәй, тағы ла өс ҡоралды һалдат ебәрә. Сәфәр теге серле һандыҡтан өс һалдат сығара ла:

— Бер һалдатын ҡасырығыҙ, ә ике һалдатын ҡулға алығыҙ, — ти.

Ҡасып ҡотолған һалдат, батшаға ҡайтып, нимәләр булғанын һөйләп бирә.

— Уларҙың һалдаттары бар, атһаң да, сәнсһәң дә үлмәйҙәр, — ти.

Батша ни эшләргә белмәй, бик күп ғәскәр ебәрә. Сәфәрҙең иҫе китмәй, үҙе рәхәтләнеп ишек алдында эшләп йөрөй, ә һандыҡтан сыҡҡан ғәскәр батшаның һалдаттарын ҡыйрата. Сөнки Сәфәр, донъя гиҙеп, «Белмәйем — ниҙе, алып килгән шуны».

Батша яңынан ғәскәр ебәрә. Сәфәрҙең һалдаттары тағы ла батша ғәскәрен ҡыйраталар. Батшаның үҙен ҡулға алып, үлем язаһына хөкөм итәләр.

Шулай итеп, батшаны үлтереп, илде дан ҡылып, үҙе батша урынына ҡала.

# ЕҘТЫРНАҠ

Борон-борон заманда бер ҡарт менән бер ҡарсыҡ йәшәгән. Быларҙың биш балалары булған. Икеһе ул, өсөһө ҡыҙ. Йүнле генә донъя көтөп ятҡан ваҡытта, ҡарсыҡ ауырып та тормай үлеп киткән. Ҡарт та, шул ҡайғынан йомшарып китеп, үҙен насар һиҙә башлағас, улдарын саҡырып алып, васыятын әйтмәксе булды, ти.

— Балаларым, мин инде бик ҡартайҙым, донъя үҙегеҙгә генә ҡала инде. Тик шуны ғына һорайым: һеңлеләрегеҙҙе ҡаҡмағыҙ, ниндәй йән эйәһе килһә лә үҙҙәрен биреп ебәрегеҙ, яҡшы тормош күрһендәр, — тип әйткәндән һуң, икенсе көндө ҡарт үлеп тә киткән, ти.

Балалары, аталарын бик ҡәҙерләп күмеп, үҙҙәре генә донъя көтәләр икән. Ҡарттың васыяты бөтә донъяға билдәле булған. Бер көндө бер айыу ерҙе бер әйләнеп ҡайтып барғанда:

— Туҡта әле, мин ни эшләп яңғыҙ йөрөйөм, өйләнергә кәрәк, — тип, бер умарта бал күтәреп, тегеләр яғына йүнәлгән. Ауыл егеттәрен төрлөһөн төрлө яҡҡа тибеп осороп, был тегеләрҙең ҡапҡаһына килеп һөрән дә һалды, ти.

— Айыу кейәүегеҙ бүләктәр менән килде, ҡапҡағыҙҙы асығыҙ! — тип ҡысҡырҙы, ти, был.

Оло ағалары сыға ла:

— Беҙҙең кейәү йыртҡыс хайуан булырға тейеш түгел, — тип мылтығын ата ла кире кереп китә.

Кесе ағалары сығып, айыу менән һөйләшә, ҡапҡаны асып, айыуҙы кертә.

Бүләктәрен айыу ҡыҙға, ҡайнағаларына тапшырып, ҙур байрам, туй яһап, оло ҡыҙҙы алып ҡайтып китә.

Бер ваҡыт ер әйләнәһен ике тапҡыр әйләнеп ҡайтып

барған бөркөт, мәрхүм ҡарттың васыятын иҫенә төшөрөп:

— Туҡта әле, ни эшләп мин бөркөт башым менән яңғыҙ йәшәйем, — ти ҙә, бер ҡуйҙы бүләккә алып, тегеләр йортона йүнәлә. Ауыл эттәренең һауаға ҡарап өргәненә иҫе лә китмәй, тегеләрҙең ҡапҡа төптәренә килеп төшөп, үҙенең килгәнен белдерә:

— Бөркөт кейәүегеҙ бүләктәр менән килде, ҡапҡаны асығыҙ, — тип ҡысҡыра. Оло ағалары, быны ишетеп сығып, бөркөт икәнен күргәс:

— Йыртҡыс ҡош беҙгә кейәү була алмай — тигән.

Кесеһе был юлы ла, бөркөт менән һөйләшеп, өйгә индерҙе, ти.

Ҙур байрам, туй яһап, уртансы һеңлеләрен бөркөткә кәләш итеп бирер ебәрҙеләр, ти.

Былар яҡшы ғына донъя көтә икән. Ағалары һунарға йөрөп, кесе туғандары өйҙә ашарға әҙерләп тора икән.

Бер ваҡыт ер әйләнәһен өс тапҡыр урап ҡайтып барған ҡарағош:

— Мин ни эшләп ҡарағош һынлы ҡарағош башым менән яңғыҙ йөрөйөм, — ти ҙә, бер ҡыр кәзәһен тибеп, тегеләрҙең торған еренә йүнәлде, ти. Ауыл эттәренең ашарҙай булып абалауына ҡарамай, бүләге менән ҡапҡа төбөнә килеп тә төштө, ти. Һөрән һалып:

— Ҡарағош кейәүегеҙ килде, бүләк менән килде, ҡапҡа асығыҙ, — тип ҡысҡырҙы, ти, был. Оло ағалары сығып:

— Һеңлебеҙҙе йыртҡыс ҡошҡа бирер хәлебеҙ юҡ, — тип яуап бирә икән. Ҡарағош китмәгәс, мылтығын алырға тип өйгә йүгереп инһә, кесе туғаны, уның мылтығын һыпыра тартып алып ситкә быраҡтырып, үҙе сығып, ҡарағош менән һөйләште, уны өйгә алып инде, ти.

Ҙур байрам, туй яһап, кесе һеңлеләрен дә бирер ебәрҙеләр, ти, былар.

Берҙән-бер көндө оло аға, өйләнергә дәрт итеп, бер байҙың ҡыҙын алып ҡайтты, ти. Кәләш алған көндән башлап кесе туғанын бөтөнләй онотто, гел үҙенең донъяһын ғына ҡайғыртып йәшәй башланы, ти.

Берҙән-бер көндә кесе егет бик ҡайғырып, үҙенең тормошон нисек ҡороп ебәрергә белмәй, ағаһына кәңәш итә.

— Ағай, һинең тормош яҡшы инде, миңә ни кәңәш бирәһең? — ти. Оло ағаһы:

— Ҡәрендәштәреңде биреп ебәргәндә, минән кәңәш һораманың бит, хәҙер үҙең теләһәң ни эшлә, — тип ҡустыһын өйҙән үк ҡыуып сығарҙы, ти.

Егет бик ҡайғырып, мылтығын күтәреп, күл буйына һунарға китте, ти. Яр башына ултырып, һағышлы ғына көй һыҙғырып, күлдең матурлығына һоҡланып ултырғанда, күл уртаһында бер өйрәктең тыныс ҡына йөҙөп йөрөгәнен күреп ҡалды, ти, был. Мылтығын төҙәп, атайым тиһә, мылтығы ут бирмәй ҙә ҡуя икән бының. Шунан өйрәк:

— Егет кеше, мине атма. Мин һине аңлайым. Минең уң ҡанатымдан бер ҡауырһын, һул ҡанатымдан бер ҡауырһын йолҡоп ал да, ауырлыҡ килгәндә, йә берәй теләгеңдең ҡабул булыуын теләһәң, уң ҡанат ҡауырһынын уң ҡулыңда, һул ҡанат ҡауырһынын һул ҡулыңда тотоп уйла, — ти икән.

Егет өйрәкте ирекҡә ебәргән, өйөнә ҡайтып киткән. Өйөнә ҡайтып, уң ҡанатын уң ҡулына, һул ҡанатын һул ҡулына тотоп, ошо уйының ысынға әүерелеүен теләне, ти, был.

«Ағайымдың йорто эргәһендә генә алтын ҡыйыҡлы йорт һалынып, шул ҡыйыҡҡа ҙур сәғәт урынлаштырылып, бөтә халыҡ, шунан файҙаланып, ваҡытты белһә ине. Эргәһендә баҡса булып, ағастарының олондары алтындан булып, емештең алтын ҡабыҡтарын ҡоштар халыҡҡа төшөрөп торһа ине. Булһа ине ете бүлмә: берәһендә сисенә торған, икенсеһендә йыуына торған, йыуынғас, кеше бөтөнләй үҙгәреп, йәшәреп китһә ине. Өсөнсө бүлмә кейенеү өсөн булып, күҙҙең яуын алып торһон, матур ҡыҙҙарҙың күҙен ҡыҙыҡтырырлыҡ булып тегелгән яҡшы кейемдәр менән тулһа ине. Дүртенсе бүлмә аш бүлмәһе булып, ебәктән генә кейенгән ҡыҙҙар аш әҙерләп, алтын һауыт-һабаларға һалып, аш

килтереп торһа ине. Бишенсе бүлмә йоҡо бүлмәһе булып, унда йоҡлап торғас, кеше үҙендә бөтмәҫ-төкәнмәҫ көс тойһа ине. Алтынсы бүлмә ашхана булып, ил халҡын, ас кешеләрҙе ҡунаҡ итерлек аш менән тулһа ине. Етенсеһе булһа ине шундай иркен бүлмә, уның эсенән һөт шикелле аҡ һыуҙар ағып торһа ине. Шул уҡ бүлмәлә уйындар уйналып, бик яҡшы, аҡыллы йән дуҫым ҡыҙ булһа ине. Шунда уҡ алтын бағаналы сарҙаҡ булып, шунан бөтә халыҡтың тормошон күреп булһа ине. Тағы ла булһа ине ике һарай, шул һарайҙар араһында ике күпер һалынып, шул күпер тирәләй аҫыл емеш ағастары үҫеп, аҫыл емештәрен ҡойоп торһа ине. Шунда уҡ күл булып, өйрәктәр йөҙөп йөрөһөндәр ине. Булһа ине ете асҡыс, ошо асҡыстарҙың һәр береһенә — бер һарай. Беренсеһе — ниндәй көслө һуғыш ҡоралдары бар, шулар менән тулһын; икенсеһендә — ер йөҙөндә күпме халыҡ бар, шуларҙың барыһына ла етерлек аҙыҡ; өсөнсөһөндә — үҫемлектәр ултырта торған ҡоралдар; дүртенсеһендә — бөтә халыҡҡа етерлек кейемдәр; бишенсеһендә — төрлө үҫемлек орлоҡтары; алтынсыһында булһа ине ике арғымаҡ: береһе ерән, береһе күк, өҫтәрендәге эйәрҙәре алтындан...»

Етенсеһен уйлай башлағанда, егет йоҡлап киткән, ти.

Ағаһы йоҡоһонан уянып, ҡустыһын күреп:

— Был йолҡош ни эшләп ҡайтып килгән! — тип, елкәһенән тотоп алған ыңғайы, егет уянып китә. Ҡараһа, көн тыуған, бөтә донъя яҡтырып киткән. Шул арала ике ҡыҙ килеп инеп, быны күтәреп тә алған. Егеттең уйлағаны бөтәһе лә тулы ғына көйөнсә алдына килгән, ти.

Беренсе бүлмәлә сисенеп, икенсе бүлмәлә йыуынып, өсөнсө бүлмәгә кереп кейенһә, быны элек белгән кешеләре танымай ҙа торалар, ти. Дүртенсе аш бүлмәһенә керһә, стеналары көҙгөнән булып, был үҙен-үҙе танымай ҙа тора, ти. Бишенсе бүлмәгә кереп ял итмәксе булһа, ял итеү ҙә кәрәкмәй икән; бының күкрәгенә шунда уҡ көс тулған. Алтынсы бүлмәгә, ашханаға инһәләр, бының

уйлаған халҡы шатланып, үҙен күтәреп ҡаршы алды, ти. Шул ваҡыт бер ҡыҙ килеп:

— Мин һинең ғүмерлек иптәшең булам, — тип белдергән, ти, быға. Былар матур итеп донъя көтөп яталар икән, оҙаҡламай етеҙ генә, теремек кенә улдары тыуған. Быға Сәлим тип исем ҡушып, иркәләп үҫтерә башлағандар, ти.

Көндәрҙән бер көндө былар икәү генә сарҙаҡта ултырғанда, еңгәләренең урман сейәһе йыйып ҡайтып килеүен күрәләр. Ҡатыны:

— Мин дә иртәгә еңгәйгә барып, ҡыр сейәһе йыйып алып ҡайтайым, мин юҡта теге беҙ асып ҡарамаған һарайҙы асып ҡарай күрмә, — тигән.

Икенсе көндө ҡатыны сейәгә киткәс, егет етенсе һарайҙы ҡарамаҡсы була. Асып ебәрһә, ни күҙе менән күрһен, еҙ тырнаҡлы ҡош сылбырҙа бәйле тора икән. Шул ваҡыт Еҙтырнаҡ:

— Мине ҡотҡарһаң, бер үлемдән ҡотҡарырмын, — ти.

Теге ҡотҡармай. Еҙтырнаҡ тағы ла:

— Ҡотҡар мине, ике үлемдән ҡотҡарырмын, — ти. Был һаман да ҡотҡармай.

Еҙтырнаҡ тағы ла ҡабатлап:

— Әгәр ҡотҡарһаң, өс үлемдән ҡотҡарырмын, — ти.

Егет Еҙтырнаҡты йәлләп ысҡындырып ебәреүе була, теге ҡош ауылға яҡынлашып килгән ҡатынын тибеп алды ла китте, ти. Шунан, көн-төн ҡайғырып, егет ағаһына барып кәңәш һорай.

Ағаһы:

— Миңә кәңәш менән килмә, һинең кейәүҙәрең бар бит, — ти.

Был һүҙҙе ишеткәс, егет, күк арғымағына атланып, уҡтай атылып сығып китте, ти. Кейәүҙәрен осратыуҙы өмөт итеп китеп бара икән был. Бара торғас, аты бер ҙур имән төбөнә килеп туҡтаған да артабан һис китмәй икән. Атынан төшөп ҡараһа, имән төбөндә ҙур бер тишек күргән. Эсенә инеп ҡараһа, был оло һеңлеһе менән кейәүенең өйө икән. Егет, һеңлеһен танып, һаулыҡ

һорашып, ҡосаҡлашып, илашып күрешкән. Һеңлеһе:

— Айыу кейәүеңдең ерҙе бер әйләнеп ҡайтыр ваҡыты яҡын; оло ағай тип уйлап, үҙеңде ботарлап ташламаһын, ҡасып тор. Тынысланғас ҡына әйтермен, — тип, ағаһын ҡасырып ҡуйҙы, ти.

Айыу, ах-вах килеп, юлдан ҡайтып төштө лә:

— Фу, әҙәм еҫе килә, — тип еҫкәнә башланы, ти.

Ҡатыны:

— Ниңә, мин әҙәм бит, минең еҫте шулай тояһыңдыр, — тип яуап биргән икән, айыу:

— Юҡ, һинең еҫең башҡа, бында сит кеше ҡасып ята булырға тейеш, — тине лә эҙләргә тотондо, ти. Ҡатыны:

— Әгәр ағайым килһә, ни эшләр инең? — тип һорағас, айыу:

— Олоһо булһа, ботарлап ташлар, кесеһе булһа, һый-хөрмәт итер инем, — тип әйтте, ти.

Шунан һеңлеһе кесе ағаһын ҡасырған еренән сығарып, ҡунаҡ иткәндәр; егет айыу кейәүенә бар булғанды әнәһенән ебенәсә һөйләп биргән. Айыу:

— Минең ер әйләнәһен бер тапҡыр ғына әйләнеп сығырлыҡ ҡеүәтем бар. Әйҙә, бергәләп бөркөт бажаға барайыҡ, — тип, икәүләшеп юлға сығып киткәндәр былар.

Барып керһәләр, бөркөт ер йөҙөн ике урап сығыу юлына киткән икән, күп тә үтмәй дауыл ҡуптарып, ер һелкетеп ҡайтып керҙе, ти, был. Бөркөт, аяҡ үрә баҫып, быларҙың хәл-әхүәлдәрен һорашҡас, былай тип яуап бирҙе, ти:

— Мин ер йөҙөн ике тапҡыр ғына әйләнәм, дейеү пәрейенең өйө ҡырынан ғына үтәм, быны яҡшылап белһә белер ҡарағош бажа.

Шунан былар өсәүләшеп юлға сығып киткәндәр. Барып етеп, ҡарағоштоң ер әйләнәһен өс урап ҡайтҡанын көтә башлағандар. Бер ваҡыт ағастарҙы тамырынан ҡуптарып, ятҡан таштарҙы һелкетеп, ҡарағош осоп ҡайтып та төштө, ти. Хәл-әхүәлде һорашып, йүгереп

йөрөп ҡунаҡ иткәс, һөйләшергә ултырҙылар, ти, былар. Бөтә хәлде төшөнгәс, ҡарағош:

— Мин уның өңөн беләм, тик бик һаҡ булырға кәрәк; һине ҡатының янына индереп ебәрербеҙ, — тигән.

Айыу менән бөркөт аҙыҡ-түлек йөкмәп, ҡарағош бажаһының арҡаһына ултырып, сығып та киттеләр, ти. Барып еткәс, ҡарағош ҡайнағаһына ҡатынының баҡыр һарайҙа булыуын әйтте, ти.

— Шунда уҡ торған баҡыр сәғәт эсенән баҡыр асҡысты алып, һарайҙы асып кереп, ҡатыныңды сығар, — тине, ти. Кейәүҙәр, ҡайнағаларына уңышлыҡ теләп, үҙҙәренең башҡа кәрәктәре булмағас, ҡайтып та киттеләр, ти.

Егет, ҡарағош өйрәткәнсә, барып керһә, баҡыр һарайҙы шаңғырлатып баҡыр сәғәт һуғып тора, ти. Егет шунан асҡысты ала һалып, һарайҙы асып ебәрһә, ни күҙе менән күрһен, иҫәбе-хисабы булмаған халыҡ эркелешеп килеп сыҡты, ти. Былар бөтәһе лә арыған, танырлыҡ та түгел, ти. Көс-хәл менән үҙенең ҡатынын табып алғас, ҡатыны быға:

— Дейеү оҙаҡ юлға сыҡҡайны, бына-бына ҡайтып етергә тейеш, ни эшләйбеҙ һуң? — тип әйтте, ти. Егет:

— Әйҙә, ҡасайыҡ, — тип, ҡасып та киттеләр, ти, былар. Оҙаҡ та тормай, тауҙарҙың дерелдәүенә, урмандарҙың һығылыуына әйләнеп ҡараһалар, Еҙтырнаҡ ғәйрәтләнеп килеп, быларҙы тотоп та алған, ти. Еҙтырнаҡ:

— Егет, мин һине бер үлемдән ҡотҡарырға һүҙ биргәйнем, шул һүҙемде тотам, — тип әйтте лә ҡатынын тибеп алып та китте, ти.

Был бәләне кейәүҙәре ишетеп, һә тигәнсе килеп етеп, өйҙәренә алып ҡайтып, ял иттереп, тынысландырып, икенсе көндө тағы ла бергәләшеп юлға сыҡтылар, ти. Барып етеп, егет тағы ла баҡыр һарайҙың асҡысын алып асып ебәрһә, теге халыҡтар бер-берећен төртә-йыға килеп сыҡтылар, ти. Еҙтырнаҡтың ярҙамсылары быларҙы кире ябып ҡуйған булған икән. Егет ҡатынын тағы ла алып ҡаса. Юлда килешләй ҡатынына:

— Әгәр ҙә дейеү беҙҙе тағы ла ҡыуып етә ҡалһа, һин уны, алдаштырып, йәненең ҡайҙа булыуын һора, — тип әйтеп тә өлгөрмәй, Еҙтырнаҡ ҡыуып килеп тә етә.

— Егет, мин һине ике үлемдән ҡотҡарырға һүҙ биргәйнем, шуның өсөн генә ҡалдырам, — тип егеттең ҡатынын тағы ла тибеп алып китте, ти, был.

Егеттең ҡатыны юлда Еҙтырнаҡтан йәненең ҡайҙалығын бик юхаланып һорай икән. Тегене аҙыраҡ маҡтап та ебәргәс, йомшарып, сиселеп китеп, үҙенең йәне менән көсөнөң серен һөйләп ташланы, ти, был.

— Диңгеҙ буйындағы бер утрауҙа баҡыр һарай бар. Шул һарай эсендә еҙ һандыҡ, еҙ һандыҡ эсендә алтын һандыҡ, алтын һандыҡ эсендә көмөш һандыҡ, көмөш һандыҡ эсендә бер йомортҡа булыр. Бына шул йомортҡа минең ҡеүәтем инде, — тип маҡтанып та ҡуйған, ти, был.

Еҙтырнаҡ ҡатынды ҡайтарып ҡуйып, тағы ла юлға сығып киткән. Ҡайнағаларының ауыр хәлдә ҡалыуын ишетеп, кейәүҙәре тағы килеп еткән. Күмәкләшеп йәнә тегендә киткәндәр былар. Барып, егет яңынан ҡатынын алып ҡасты, ти. Ҡатыны хәбәрҙе һөйләп бөтәр-бөтмәҫтән, Еҙтырнаҡ килеп етеп:

— Егет, өс үлемдән ҡотҡарҙым, һуңынан үҙеңә үпкәлә, — тип, ҡатынды тибеп алып та китте, ти.

Егет менән кейәүҙәре диңгеҙҙәге утрауға йүнәлделәр, ти, хәҙер. Айыу ерҙән көс биреп, бөркөт дәрт биреп, ҡарағош ҡайнағаһын күтәреп, барып та еттеләр, ти.

Үткер ҡарағош һарайҙың ҡайҙа икәнен белеп алып, барып бер типкәйне, һарайҙың көлө күккә осто, ти. Бөркөт еҙ һандыҡты, айыу алтын һандыҡты, егет көмөш һандыҡты йән асыуы менән тибеп ебәргәйнеләр, теге йомортҡа килеп тә сыҡты, ти. Егет йомортҡаны тағы ла нығыраҡ ҡыҫҡайны, Еҙтырнаҡ йығылып килеп тә төштө, ти. Айыу күп уйлап та тормай барып, тибеп ебәргәйне, теге бишкә тәкмәсләп китте, ти. Бөркөт барып тибеүгә, аяҡ-ҡулы ҡыбырлап ҡына ята, ти,

бының. Ҡарағошҡа эш ҡалмай, егет үҙе тибеп ебәргәйне, Еҙтырнаҡ бөтөнләй дөмөктө, ти.

Егет, халыҡтарҙы ҡотҡарып, оло ағаһы кеүек ҡара эсле кешеләрҙе ек күреп, матур ил төҙөп, әле булһа йәшәп ята, ти.

## НӨРХӨТДИН

Борон-борон заманда бер бабай менән әбей йәшәгән. Уларҙың Нөрхөтдин исемле бер улы булған. Улдары ҙурайғас, әбей менән бабай уны уҡыуға бирергә уйлай башлағандар. Берҙән-бер көндө бабай әбейгә:

— Юлға бер айлыҡ аҙыҡ әҙерлә, мин Нөрхөтдинде бик алыҫҡа уҡытырға алып барам, — тигән. Әбей бер айлыҡ аҙыҡ әҙерләгән, бабай менән Нөрхөтдин юлға сығып киткән. Әбей, күҙ йәштәрен һөртөп, уларҙы оҙатып ҡалған.

Бабай менән Нөрхөтдин эй баралар, эй баралар, ти. Күп тауҙар, урмандар, һыуҙар үткәндәр. Бара торғас, бабай арыған да бер түңгәккә уф тип барып ултырған. Шул саҡ ер аҫтынан бер дейеү килеп сыҡҡан да:

— Бабай, ниңә миңә ҡысҡырҙың, ни хәжәтең бар? — тип һораған. Бабай:

— Мин һиңә ҡысҡырманым. Оҙаҡ килеп арығайным, шуға уф тип түңгәккә ултырҙым, — тигән. Дейеү пәрейе:

— Юҡ, уф тип, һин мине саҡырҙың. Минең исемем Уф, — тигән. Дейеү пәрейе малайға ҡарап:

— Был малайҙы ҡайҙа алып китеп бараһың? — тигән.

— Уҡытырға алып барам, — тигән бабай. Шунан дейеү:

— Малайыңды миңә ҡалдыр, мин уҡытырмын, — тигән. Бабай риза булған. Дейеү пәрейе бабай менән Нөрхөтдинде ер аҫтына төшөрөп алып киткән. Шунан өс көн буйы быларҙы дейеү пәрейе ҡунаҡ иткән. Бабайҙың ҡайтыр ваҡыты еткәс:

— Малайыңды өс йылға уҡытырға алып ҡалам. Тәүлек* тулһа, малайыңды күрергә килерһең. Килгән ваҡытта танышаң, малай һинеке булыр, танымаһаң, минеке булыр, — тигән.

Бабай, малайы менән хушлашып, ҡайтып киткән. Дейеү пәрейе уға йыуасалар һалып оҙатып ҡалған. Әбей бабайҙы түҙемһеҙлек менән көтөп торған. Бабай:

— Нөрхөтдинде өс йылға уҡытырға бирҙем, тәүлек тулғас та малайҙы күрергә барам, барған саҡта малайҙы таныһам, малай беҙҙеке, танымаһам, дейеү пәрейенеке була, — тигән.

Көн үткән, ай үткән, йыл үткән. Бабай Нөрхөтдин ҡашына китергә булған. Әбей йыуасалар бешереп, бабайҙы улы ҡашына ебәргән.

— Нөрхөтдинде танырға тырыш, — тип илап ҡалған.

Бабай китеп ултыра, китеп ултыра, ти. Шунан бер мәлде бабай алдына бер ҡош осоп килеп төшкән дә, ҡағынып-ҡағынып, бабайҙың улына әйләнгән. Ул атаһы менән күрешкән дә:

— Атай, һин мине танырға тырыш, дейеү пәрейе беҙҙе ҡаҙ итеп, бер яланға сығарып йөрөтөр. Мин бер ҡанатым менән ерҙе һыҙып-һыҙып китермен, — тигән. — Һин ҡарап тор ҙа: «Бына минең улым!» — тип, бар ҙа миңә йәбеш, — тигән. Шунан Нөрхөтдин, кире ҡошҡа әйләнеп, осоп киткән. Бабай түңгәккә барып етеп, уф тип ултырған икән, ер аҫтынан дейеү пәрейе килеп тә сыҡҡан.

— Килдеңме, бабай? — тип, бабай менән күрешкән дә уны ер аҫтына алып төшөп тә киткән. Дейеү пәрейе

---

* Тәүлек — был осраҡта йыл мәғәнәһендә ҡулланылған.



Шаян бесәй



Һандуғас



Урал һыуы



Быжырмәргән

бабайҙы өс көн ҡунаҡ иткәндән һуң, малайын күрһәтергә булған. Ул:

— Малайыңды башҡа шәкерттәр менән бергә ҡаҙға әйләндереп яланда йөрөтәм, — тигән. — Таныһаң, малай һинеке, танымаһаң, минеке, — тигән.

Былар яланға барғандар. Барһалар, унда бер төҫтәге ун ике ҡаҙ йөрөй.

Бабай ҡарап-ҡарап торған да бер ҡанаты менән ерҙе һыҙа-һыҙа йөрөгән ҡаҙҙы:

— Бына минең улым, — тип барып тотҡан. Дейеү пәрейе:

— Ебәр, ул һинең улың түгел, — тип, ергә төкөргән икән, уның еленә бабай ҡалҡып-ҡалҡып ҡуйған. Шулай ҙа ҡаҙҙы ебәрмәгән. Шунан һуң дейеү пәрейенең ҡушыуы буйынса, ҡаҙҙар, ҡағынып, шәкерттәргә әйләнгәндәр. Улар, бабай менән күрешеп, өс көн буйына бабай менән ҡунаҡ булғандар. Шунан бабай: «Был юлы малайымды таныным», — тип шатланып ҡайтып киткән. Дейеү пәрейе уға йыуасалар һалып оҙатып ҡалған.

Бабай, шатланып, өйөнә ҡайтып ингән. Әбейенә:

— Был юлы Нөрхөтдинде таныным, тағы ике йыл ҡалды, ул ике йылда ла малайҙы таныһам, малай беҙҙеке була, — тигән. Әбей шатлығынан илап ебәргән.

Тағы ла көн үтә, ай үтә, йыл үтә. Бабайҙың малайы ҡашына китер ваҡыты етә. Әбейенән йыуасалар бешертеп, юлға сығып китә.

Бик оҙаҡ барғас, бабайҙың алдына йәнә бер ҡош осоп килеп төшкән. Ҡағынып-һуғынып, Нөрхөтдингә әйләнгән. Ул, атаһы менән күрешеп:

— Был юлы беҙҙе күгәрсен итеп йөрөтөр. Мин муйынымды уң яҡҡа ҡыйшайтыңҡырап йөрөрмөн, — тигән дә, кире ҡошҡа әйләнеп, осоп та киткән.

Бабай әлеге урынға барып еткәс, дейеү пәрейе уны ер аҫтына алып төшөп киткән. Өс көн ҡунаҡ иткәндән һуң, бабайҙы малайын күрһәтергә алып сыҡҡан. Был юлы шәкерттәр, күгәрсен булып, яланда ем ашап йө-

рөйҙәр икән. Бабай ҡарап-ҡарап торған да муйынын уң яҡҡа ҡыйшайтыңҡырап йөрөгән күгәрсенде:

— Бына минең улым, — тип барып тотҡан. Дейеү пәрейе:

— Ебәр, ул һинең улың түгел, — тип ергә төкөрөп ебәрә, бабай уның еленә ҡалҡып-ҡалҡып ҡуя, ти. Шулай ҙа күгәрсенде ысҡындырмаған. Шунан һуң, дейеү пәрейенең ҡушыуы буйынса, күгәрсендәр, ҡағынып-һуғынып, шәкерттәргә әйләнгәндәр ҙә, бабай менән күрешеп, өс көн буйына бергә ҡунаҡ булғандар.

Бабай, шәкерттәр менән хушлашып, ҡайтып киткән. Дейеү пәрейе йыуасалар һалып, оҙатып ҡалған. Бик оҙаҡ барғандан һуң бабай өйөнә ҡайтып еткән. Әбей уны түҙемһеҙлек менән ҡаршы алған. Бабай:

— Улыбыҙҙы был юлы ла таныным, тағы бер танынһам, малай — беҙҙеке, танымаһам, дейеү пәрейенеке була, — тигән. Әбей шатлығынан илап ебәргән.

Тағы ла көн үтә, ай үтә, йыл үтә. Бабайҙың малайы ҡашына китер ваҡыты килеп тә етә. Йыуасалар бешертеп алып, бабай юлға сығып та китә. Әбей:

— Нөрхөтдинде нисек тә булһа танырға тырыш инде, — тип илап ҡала.

Бер ваҡыт бабайҙың алдына бер ҡош осоп килеп төшкән дә, ҡағынып-һуғынып, Нөрхөтдингә әйләнгән. Ул атаһы менән күрешеп:

— Атай, дейеү пәрейе беҙҙе был юлы дөйә итеп йөрөтөр. Мин ҡойроғомдо бер яҡҡа ҡыйшайтыбыраҡ һалып йөрөрмөн, һин ҡарап-ҡарап тор ҙа: «Бына минең улым», — тип, бар ҙа йәбеш, — тигән. Шунан ҡошҡа әйләнеп осоп та киткән.

Бабай барып еткәс, уның тауышын ишетеп, ер аҫтынан дейеү пәрейе килеп сыҡҡан. Бабай менән күрешеп, бабайҙы ер аҫтына алып төшөп тә киткән. Өс көн ҡунаҡ иткәндән һуң бабайға:

— Мин шәкерттәрҙе дөйә итеп йөрөтәм, үҙ малайыңды таныһаң, малай — һинеке, танымаһаң, минеке була, — тигән.

Былар яланға баралар, унда ун ике дөйә үлән ашап

йөрөй, ти. Бабай ҡарап торған-торған да ҡойроғон бер яҡкараҡ һалып йөрөгән дөйәгә:

— Бына минең улым, — тип барып йәбешкән. Дейеү:

— Ебәр, ул һинең улың түгел, — тип ергә төкөрөп ебәрә, уның еленә бабай ҡалҡып-ҡалҡып ҡуя. Шулай ҙа дөйәне ебәрмәй. Дөйәләр шәкерттәргә әйләнгән. Шәкерттәр бабай менән күрешеп, өс көн буйы ҡунаҡ булған. Шунан бабай күп һөнәргә эйә булған улын алып ҡайтып киткән. Дейеү пәрейе малайҙы, хайуан һүрәтенә кереп күп йөрөмәҫкә ҡушып, оҙатып ҡалған.

Бара торғас, Нөрхөтдин атаһына:

— Мин хәҙер ат булам, һин атланып ҡайт, — тигән дә шул ике арала ат булып та ҡуйған. Бабай атҡа атланып алған. Бара торғас, ағас башында бер һайыҫҡан шыҡырлай, ти. Ат телгә килеп:

— Был һайыҫҡан нимә тип шыҡырлай, беләһеңме? — тип һораған. Бабай:

— Белмәйем, — тигән.

— Кешене күп алдаһаң, улыңдың ҡул йыуған һыуын эсерһең, ти ул, — тигән. Былар ҡайтып еткән. Ат, ҡағынып-һуғынып, Нөрхөтдингә әйләнгән. Әсәһе менән күрешеп, өс көн буйына ҡунаҡ булған.

Бабай менән әбей ярлы йәшәгән. Быны күреп, Нөрхөтдин уйға ҡалған.

Берҙән-бер көндө ул атаһына:

— Шундай-шундай шәһәрҙә йәрминкә була. Һин бик яҡшы сана эшлә. Мин бик яҡшы атҡа әйләнәм. Һин мине шул санаға ек тә ултырып баҙарға бар, — тигән. — Әгәр ҙә сауҙагәрҙәр: «Атыңды һат», — тип ныҡышһалар, мине һат, йүгәнеңде һатма, — тигән.

Бабай, бик яҡшы сана эшләп, шәһәргә сығып киткән. Ат бабайҙы елдереп шәһәргә алып барып та индергән.

Бабай туп-тура йәрминкәгә барған. Сауҙагәрҙәр, яҡшы атты күреп, һырып алдылар, ти.

— Атыңды һат та һат, — тип йөҙәтә башланылар, ти, былар. Шунан бабай атын ат башындай алтынға һатып

та ебәргән, ә йүгәнен, сауҙагәр күпме генә ныҡышһа ла, һатмаған. Сауҙагәр атты алып, елдереп ҡайтып киткән. Ә бабай ат башындай алтынды алып, ҡайғыра-ҡайғыра, өйөнә йүнәлгән.

Ҡайтып бара торғас, бабай артына әйләнеп ҡараһа, артынан Нөрхөтдин эйәреп килә, ти. Шатлығынан бабайҙың түбәһе күккә тейгән. Нөрхөтдин, атаһына килеп етеп күрешкәс, ҡабат атҡа әйләнеп, атаһын ултыртып алып ҡайтып киткән.

Былар ат башындай алтынға бик байығып киткәндәр. Күпмелер ваҡыт үткәс, икенсе бер шәһәрҙә йәрминкә була тигән хәбәр таралған. Бабай тағы ла бик яҡшы сана эшләгән. Былар тағы ла йәрминкәгә киткәндәр. Бабай атын йәнә ат башындай алтынға һатып ҡайтып киткән. Бара торғас, артына әйләнеп ҡараһа, Нөрхөтдин килә. Бабайҙың шатлығы күкрәгенә һыймай, ти. Нөрхөтдин, тағы ла атҡа әйләнеп, атаһын ултыртып ҡайтып киткән. Былар тағы ла нығыраҡ байып киткәндәр.

Күпмелер ваҡыт үткәс, былар тағы ла бер шәһәрҙә йәрминкә була тип ишеткәндәр. Бабай тағы ла сана эшләгән. Санаға яҡшы ат егеп, йәрминкәгә барып та ингән. Бабайҙы сауҙагәрҙәр һырып алған. Бөтәһе лә:

— Бабай, атыңды һат та һат, — тип ныҡыша, ти. Бабай атын һатырға булған, ә йүгәнен һатмай икән. Оҙаҡ ныҡыша торғас, бер сауҙагәр атын да, йүгәнен дә һатып алған. Был сауҙагәр теге ваҡытта Нөрхөтдинде уҡытҡан дейеү пәрейе булған. Ул атҡа менеп алған да:

— Мин һиңә хайуан һүрәтенә кереп күп йөрөмә тинем бит, — тип ҡамсыһы менән атты ярып, шәһәр буйлап сабып йөрөй икән. Шунан атты арытып, бер өйҙөң ҡапҡа бағанаһына теҙгененән тарттырып бәйләп ҡуйған. Ә үҙе өйгә инеп киткән. Шул ваҡытта урамдан кешеләр үтеп баралар икән. Улар аҫыла биреп торған атты күреп ҡалғандар ҙа: «Аһ-аһ, бынау атты интектереп, ҡайһылай аҫып ҡуйғандар!» — тип, теҙгенен барып ҡырҡып ебәргәндәр икән, ат шунда уҡ

төлкөгә әйләнеп, сабып сығып та киткән, ти. Ә өйҙә ултырған дейеү пәрейе йүгереп ҡилеп сыҡҡан да, бүрегә әйләнеп, төлкөнө баҫтыра башлаған. Эй баҫтыра, эй баҫтыра, төлкөнөң артынан ҡыуып етә яҙып бара, ти, ҡәһәрең. Төлкө бер йылға буйына барып еткән дә, һыуға сумып, алабуға балығына әйләнгән. Ә быны күреп ҡалған бүре, суртан булып, йәнә тегенең артынан төшкән. Эй ҡыуа, эй ҡыуа, етә яҙып, етә яҙып бара, ти, был йыртҡыс. Шул ваҡытта бер хан ҡыҙы таш өҫтөндә ҡулдары менән һыуҙы сәсрәтеп уйнап ултыра икән. Алабуға ҡыҙҙың эргәһенә килеп еткән дә, йөҙөк булып, ҡыҙыҡайҙың бармағына кейелгән. Ә суртан килеп етеп егеткә әйләнгән дә:

— Минең йөҙөгөмдө бир, — тип ныҡыша башлаған. Ә ҡыҙыҡай бирмәй икән.

Ҡыҙ йөҙөктө алып ҡайтып киткән. Ә егет уның артынан эйәргән. Хандың һарайына еткәс, теге егет ханға:

— Һинең ҡыҙың минең йөҙөгөмдө бирмәй, — тигән. Хан ҡыҙына бирергә ҡушҡан.

— Мә, йөҙөгөң! — тип, ҡыҙ йөҙөктө иҙәнгә ташлаған. Йөҙөк иҙәнгә төшкәс тә, тарыға әйләнеп таралып киткән. Теге егет, шунда уҡ әтәскә әйләнеп, тарыларҙы сүпләй башлаған. Хан ҡыҙы бер тарыға баҫҡан да уны әтәскә бирмәй икән. Әтәс:

— Бир минең тарымды, — тип ныҡыша, ти. Бик ныҡыша торғас, хан ҡыҙы, стенала элеүле торған атаһының ҡылысын алып, әтәстең бөрләтәүен яра сапҡан да ҡуйған, ти. Шунда уҡ әтәстең бөрләтәүенән:

— Әтәстең бөрләтәүе сабылды, минең хаҡым табылды, — тип Нөрхөтдин һикереп килгән дә сыҡҡан. Нөрхөтдин, хандың үҙе менән дә, ҡыҙы менән дә күрешеп, быларҙа өс көн буйына ҡунаҡ булған. Һуңынан хан уға үҙенең ҡыҙын, ярты ханлығын биргән. Ә Нөрхөтдиндең атаһы, атын йүгәне менән һатып, артына ҡарай-ҡарай ҡайтып киткән. Күпме генә ҡараһа ла, улы Нөрхөтдин уны ҡыуып етмәгән. Шулай итеп, ул яңғыҙы ғына ҡайтҡан. Әбейенә булып үткән хәлде һөйләп бир-

гән. Былар бик нык ҡайғырышҡандар. Шулай ҙа Нөрхөтдиндең ҡайтыуынан өмөт өҙмәгәндәр.

Бик оҙаҡ йәшәгәс, былар ярлыланып киткән. Бабай ил буйлап, хәйер-саҙаҡа һорарға сығып киткән. Күп йөрөй торғас, ул хан һарайына барып сыҡҡан. Уға хан ҡатыны ашарға биргән дә йоҡо өсөн иҙәндең бер мөйөшөнә генә урын йәйгән. Был ваҡытта Нөрхөтдин өйҙә булмаған икән. Һуңынан ул, ҡайтып йоҡларға ятһа, төн уртаһында берәүҙең тастан һыу эсеүен ишеткән.

— Кем тастан һыу эсә? — тип һораған ул.

— Бер хәйерсе төшкәйне, шул эсәлер, — тип әйткән ҡатыны.

Нөрхөтдин уйланып ятҡас, теге һайыҫҡандың шыҡырлағаны иҫенә килеп төшкән. Шәм тоҡандырып ҡараһа, теге хәйерсе атаһы булып сыҡҡан. Шунан ул атаһына яңы кейемдәр кейҙереп, өс көн, өс төн ҡунаҡ иткән. Һуңынан атаһы менән әсәһен үҙенә йәшәргә алған.

Улар әле лә иҫән-һау йәшәп яталар, ти.

## ӨС КИЛЕН

Элекке заманда бер ҡарт өс яҡҡа ҡарап өс уҡ атҡан да өс малайын:

— Шул уҡтар ҡайҙа барып төшһә, шул ерҙән үҙегеҙгә кәләш алып ҡайтығыҙ! — тип, сығарып ебәргән.

Был кешенең тәүҙә атҡан уғы алыҫтағы бер байҙың өй түбәһенә төшөп ҡаҙалған. Өлкән улы шул байҙың ҡыҙын алып ҡайтҡан.

Икенсе уғы бер сауҙагәрҙең ҡапҡа башына килеп төшкән. Уртансы улы шул сауҙагәрҙең ҡыҙын алып ҡайтҡан.

Өсөнсө уҡ әллә ҡайҙа, ҡара урман араһына төшөп юғалған. Уҡ атыусының кинйә улы уҡты таба алмай йөҙәп бөткән.

Ете көн, ете төн урманды ҡыҙырып йөрөгәндән һуң, кинйә улы бер мәмерйә алдына килеп сыҡҡан. Эсенә төшөп ҡараһа, аҫыл таштарҙан ғына эшләнгән һарай, ти. Һарайҙы асып инһә, бер әбей ултыра, ә иҙәндә ҡаҙаулы уҡ тора, ти. Был иҫәңгерәп бөткән әбей:

— Хуш киләһең, егет, әйҙә, түрҙән уҙ. Бына һинең уғың ошонда үтеп ҡаҙалғайны. Яҙмышҡа ҡаршы килеп булмай, миңә һинең бисәң булырға, ә һиңә минең ирем булырға тура килә инде! — тигән.

Егет, бер уҡҡа, бер йәнтерәп бөткән әбейгә ҡарап, ауыр итеп көрһөнөп ҡуйған. Шул саҡ әбей һул ҡулы бармағындағы йөҙөгөн уң ҡулы бармағына кейгән дә бик һылыу бер йәш ҡыҙға әүерелгән. Егеттең быны күреп иҫе-аҡылы киткән.

— Бына мин кем, һинең бер әбейҙе күреп ҡотоң осҡайны! — тигән теге ҡыҙ. — Мин әбей ҙә була алам, теләгән бер нәмә һүрәтенә инә алам, — тигән.

— Мин бер нәмә лә төшөнмәйем, — тигән егет.

— Төшөнмәһәң, хәҙер төшөнөрһөң, — тип, ҡыҙ һөйләп алып киткән. — Мин бер үгәй ҡыҙ инем. Үгәй әсәм мине ошо урманға килтереп ташлатҡан. Шунда мине дейеү үҙ һарайына алып сихырға өйрәткән. Мин ошонда үҫтем. Берәй батыр егет килеп сығып, мине ҡотҡарыр әле тигәйнем. Шул егет һин булаһың икән, тик һиңә дейеү менән алышырға тура киләсәк. Шулай ҙа һин уның менән көрәшәһе булма, барыбер еңә алмаҫһың. Дейеүҙең бөтә көсө һаҡалында. Ана шул һаҡалын йолҡоп ал, — тигән.

Егет мәмерйә ауыҙына сыҡһа, дейеү ҡайтып килә икән. Дейеү уны күреү менән:

— Малыңмы, йәнеңме? — тигән.

— Көрәшеп ҡарайыҡ, шунан үҙең күрерһең, — тигән егет.

Дейеү егетте биленән әләктереп алайым тигәндә генә егет уның һаҡалын урап тотоп йолҡоп та сығарған.

Дейеү бөтөнләй көсһеҙләнеп йығылған. Батыр егет дейеүҙе бер ағас менән үлтерә баҫтырып, уның һарайындағы байлыҡты тейәп, теге ҡыҙҙы үҙенә кәләш итеп алып, атаһы йортона ҡайтып киткән.

Өс улы ла уҡтары төшкән ерҙән үҙҙәренә кәләш алып ҡайтҡас, аталары килендәренең уңғанлығын һынап ҡарамаҡсы булған. Килендәрҙең өсөһөнә лә берәр батман он биргән дә икмәк бешереп килтерергә ҡушҡан. Бешереп килтерһәләр, кинйә улының кәләше бешергән икмәк ашап туйғыһыҙ булып уңған, ә ҡалған ике килендең икмәге таш һымаҡ, ватып алғыһыҙ ҡаты булған, ти.

Шунан ҡайнылары килендәренә йыуып килтерегеҙ тип, өсөһөнә өс күлдәген биреп ебәргән. Йыуып килтерһәләр, өлкән улы менән уртансы улының кәләштәре күлдәкте ағартабыҙ тип, кейерлеген ҡалдырмай өҙгөләп бөтөргәндәр, кинйә улының кәләше йыуған күлдәк ап-аҡ, бөгөн генә тегелгән кеүек булған.

Был юлы ҡайнылары бик асыуланып:

— Иртәгә иртән ошо етенде иләп һуғып, һәр ҡайһығыҙ миңә берәр күлдәк тегеп килтерегеҙ! — тип, килендәренә талҡыған етен биреп ебәргән.

Өлкән килендәр кесе киленде, был нисек эшләр икән тип, ҡасып күҙәтеп торғандар. Теге етенде ҡайсы менән ҡырҡҡылаған да ишек алдына сығып, елгә осороп бөтөргән, шунан йөҙөгөн ауыҙына ҡабып:

— Эй, ен-пәрейҙәр, иртән тороуға ошо етендәрҙән минең ҡайныма күлдәк тегеп килтерегеҙ! — тип ҡысҡырған.

Бынан күрмәксе өлкән килендәр ҙә шулай иткән. Иртән тороуға ен-пәрейҙәр кесе килен осорған етенде иләп, һуғып, бына тигән күлдәк тегеп килтергәндәр. Өлкән килендәр, әҙер күлдәк көтөп ултырып, илай-илай күҙҙәре шешенеп бөткән.

Кинйә улының кәләше, күлдәкте һәйбәтләп төрөп ҡайныһына алып барырға торғанда, өлкән килендәрҙең ҡасып ҡына күҙәтеүҙәрен һиҙеп ҡалған. Шунан был, улай кешенең ни эшләгәнен күҙәтеп йөрөй торған бул-

һағыҙ, үҙегеҙҙе ҡыҙыҡ итәйем әле тип, улар күҙ алдында сепрәккә таш төрөп алған булған, ҡапҡанан сыҡҡанда, уны ырғытып ҡалдырған.

Бынан күрмәксе, өлкән килендәр, сепрәккә таш төрөп алып, ҡайныларына барғандар.

Ҡайнылары:

— Иә, мин биргән етендән күлдәк тегеп килтерҙегеҙме? — тип һораған.

Килендәре:

— Тегеп килтерҙек, — тигәндәр.

— Килтерһәгеҙ, нимә ҡарап тораһығыҙ, күрһәтегеҙ күлдәктәрегеҙҙе!

Өлкән килендәре төргәктәрен башлап асырға ҡыймайыраҡ торалар. Кинйә улының кәләше төргәген асып, ҡайныһына бына тигән күлдәк тоттора—үҙе ап-аҡ, үҙе йоҡа ғына, үҙе йомшаҡ—етендән һуғып эшләнгән тимәҫһең дә.

— Бындай күлдәкте мин ғүмере кейгәнем юҡ ине, рәхмәт, килен! — тип, ҡайныһы шатланған.

Шунан өлкән улы менән уртансы улының кәләштәре, ҡайнылары алдына килеп үҙҙәренең төргәктәрен сискән, сисһәләр — икеһендә лә таш!

Ҡарт шунда уҡ улдарын саҡырып алған, өлкәне менән уртансыһына ҡарап:

— Күрҙегеҙме инде бисәләрегеҙҙе? — тигән. — Икмәк һалырға ҡуштым, таш кеүек икмәк бешереп килтерҙеләр, күлдәк тегеп килтерергә ҡуштым, таштың үҙен килтерҙеләр! Һеҙгә был кәләштәрҙе һайлауҙа мин ғәйепле: атҡан уҡтарымды донъя көтөрлөк ҡыҙ үҫтергән кешеләр йортона төшөрә алмағанмын.

Шулай тигән дә был ҡарт бай ҡыҙы менән сауҙагәр ҡыҙын, ҡулығыҙҙан һуҡыр бер тинлек эш килмәй тип, аталарына ҡайтарып ебәргән, үҙе шунда уҡ уң яғына ҡарап бер уҡ, һул яғына ҡарап бер уҡ атҡан: ошо уҡ барып төшкән ерҙән үҙеңә кәләш алып ҡайт тип, өлкән улын уң яҡҡа, уртансы улын һул яҡҡа ебәргән.

Ҡарттың өлкән улы менән уртансы улы әле булһа аталары атҡан уҡты эҙләп йөрөйҙәр икән, ти, ә кинйә улы үҙенең ҡатыны менән теттереп донъя көтөп ята икән, ти.

# ШӘҒӘЛЕ

Борон-борон заманда бер ҡарт йәшәгән. Ҡарсығы үлгәс, яңы ҡатын алған. Был ҡатындың артынан килгән Шәғәле тигән бер улы булған. Ҡарттың өйөр-өйөр йылҡылары араһында яратып менгән бер һары аты бар икән. Был атын ул бер кемгә лә ышанып ҡарарға ҡушмаған, гел үҙе ҡараған.

Бер көндө ҡарт һары атын мәкегә һыу эсерергә алып киткән. Эсерәйем тиһә, ат мәкенән эсмәй икән. Бышҡырып, биртенеп, ҡайтыу яғына ынтыла, ти.

— Ни эшләп эсмәй был, мәкелә берәй нәмә бармы әллә? — тип, ҡарт мәкенән ятып ҡараһа, мәскәй әбей ҡарттың һаҡалынан эләктереп алған да йәбешеп килеп тә сыҡҡан.

— Үҙеңде ашайыммы әллә атыңды ашайыммы, хәҙер үк әйт, — ти икән мәскәй әбей. Ҡарт ни эшләргә лә белмәгән, ҡурҡыуынан үгәй улын ашатмаҡсы булған.

— Үҙемде лә ашамайһың, атымды ла бирмәйем, бер үгәй улым бар, шуны аша, — тигән.

— Уны мин нисек тотоп ашармын һуң?

— Уның алтын ашығы бар. Беҙ күсеп китербеҙ, алтын ашыҡты көлдөксәгә ҡалдырып китербеҙ. Ашығын алырға килгәндә, һин уны тотоп ашарһың, — тигән. Убырлы ҡарсыҡ кире мәкегә сумған. Ҡарт ҡайтып, ҡарсығын күсеп китергә ҡабаландыра башлаған. Алан-йолан йыйынып, икенсе урынға күсеп тә киткәндәр. Малайҙың ашығын ҡарт көлдөксәлә ҡалдырып киткән.

Барып-барып, бер урынға туҡтағандар. Шәғәленең ашығы менән уйнағыһы килгән, ашыҡты әсәһе менән эҙләп ҡарайҙар, таба алмайҙар.

— Бар, атайыңдан һора, ул беләләр, — тигән әсәһе.

— Атай, минең ашығым ҡайҙа ул, һин күрмәнеңме? — тип һорай икән малай.

— Һай эттәгенәһе, көлдөксәлә ята ине, алырға онотҡанмын бит. Бар ҡайтып алып кил инде, — тигән атаһы.

Шәғәле алтын ашығы артынан ҡайтып килергә була.

— Атай, һаратыңды биреп тор, тиҙ генә ҡайтып киләйем, — ти малай. Атаһы малайҙы орошоп сығарҙы, ти. Шәғәле өс мәртәбә атаһынан һораны, өсөһөндә лә атаһы рөхсәт бирмәне, ти.

— Ана, өйөргә сыҡ та ҡороғонды ҡылтырат, йүгәнеңде шылтырат. Ҡайһы ат әйләнеп ҡараһа, шуны менеп китерһең, — ти. Малай өйөргә барып ҡороғон ҡылтыратып, йүгәнен шылтыратҡайны, быға алама баҡталы бер ябағай ат әйләнеп ҡараны, ти. Малай илап атаһына бара. Атаһы:

— Өс мәртәбә ҡороғонды ҡылтырат, йүгәнеңде шылтырат, ҡайһы ат әйләнеп ҡараһа, шуны менеп китерһең, — ти. Малай тағы ла өйөргә бара. Өс мәртәбә ҡороғон ҡылтыратып, йүгәнен шылтыратып ҡарай, өсөһөндә лә әлеге алама баҡталы ябағай әйләнеп ҡарай. Ахырҙа ябағайҙы тотоп йүгәнләгәйне, баҡтаһы ҡойолоп төштө, ти. Эйәр һалғайны, ябағай, баҡтаһын бөтөнләйгә ҡойоп, бына тигән һары дүнәнгә әйләнде, ти.

Шәғәле һары дүнәнгә атланды ла китте, ти. Барып етер саҡта аты телгә килде лә былай тине, ти:

— Беҙ барып еткәндә, өйҙә мәскәй әбей булыр. Атайың һине шул мәскәй әбейҙән ашатырға ебәрҙе. Һин барып ингәндә, мәскәй мейес яғып торор, алтын ашығың көлдөксәлә ятыр. Мәскәй әбей: «Ашығыңды үҙең ал», — тип әйтер. Тиҙ генә ынтылып ал да ишектән сыҡма, тәҙрәнән сыҡ. Мин тәҙрә төбөндә көтөп торормон, мен дә сап, — ти.

Барып еттеләр, ти, былар. Шәғәле атын тәҙрә төбөнә ҡуйҙы ла, үҙе сәләм биреп, ишектән инде, ти.

— Әйҙүк, улым, түрҙән уҙ, — ти икән мәскәй әбей.

— Уҙып тормайым, инәй, минең алтын ашығым ятып ҡалған, шуны ала килгәйнем, — ти Шәғәле.

Мәскәй әбей ҡыҙыу итеп тороп ут яҡҡан, үҙе, ҡыҙара-бүртенеп, мейесте болғап тора, ти.

— Ашығың көлдөксәлә ята, үҙең ал, — тип әйтеүе булды, ти, әбейҙең, Шәғәле бер ынтылыуҙа ашыҡты алды ла, тәҙрәнән һикереп сығып, атына ултырҙы ла сапты, ти. Мәскәй әбей саҡ-саҡ ҡына тота алмай ҡалды: ҡулы тейә биреп, тейә биреп, һыпырылып тороп ҡалды, ти. Шунан ҡаҡырып — киле, төкөрөп төйгөс яһап алды ла, килене ат итеп, төйгөстө ҡамсы итеп, шаҡ та шоҡ һуға-һуға, Шәғәленең артынан ҡыуа төштө, ти.

Йән-фарманға ҡыуышып килә торғас, Һарат тағы ла телгә килде лә:

— Атайыңдарға барып еткәс, тиҙ генә төш тә өйгә ин. Соҡалаҡта атайыңдың тарағы, ҡайрағы, көҙгөһө ятыр, шуларҙы йәһәт кенә ал да мен дә сап, — тип әйтте, ти.

Шәғәле Һарат өйрәткәнсә эшләгән. Иүгереп инеп, соҡалаҡтағы тараҡты, ҡайраҡты, көҙгөнө алған да, атын менеп, ары сапҡан.

Шул арала мәскәй ҙә Шәғәленең атаһына килеп етте лә, ҡарттың һаҡалынан тотоп алып:

— Атыңды бирәһеңме, йәнеңде бирәһеңме? — тигәс, ҡарт Оло Һаратты килтереп бирҙе, ти. Мәскәй әбей оло Һаратты менеп алды ла саң борҡотоп сапты, ти.

Шул ваҡыт Шәғәленең аты арый башлай. Кесе Һарат, телгә килеп:

— Хәҙер оло апайыңдарға етәбеҙ. Миңә алтын табаҡ менән һоло бирһендәр, көмөш табаҡ менән һыу эсерһендәр, тиерһең, — ти. Оло апаларына килеп еткәс, Шәғәле:

— Апай, мине мәскәй әбей ҡыуып килә, атым арыны, алтын табаҡ менән һоло ҡуй, көмөш табаҡ менән һыу эсер, ти. Һаратҡа, алтын табаҡтан һоло ашатып, көмөш табаҡтан һыу эсергәс, хәл керҙе, ти. Шунан ары саптылар, ти.

Бара торғас, Кесе Һарат тағы ла арый башлай.

Тағы ла телгә килеп:

— Хәҙер уртансы апайыңдарға килеп етәбеҙ. Миңә алтын табаҡтан һоло ашат, көмөш табаҡтан һыу эсер,

тип әйтерһең, — ти. Уртансы апаларына килеп еткәс, Шәғәле йүгереп барып өйгә инә лә:

— Апай, мәскәй әбей баҫмалатып ҡыуып килә, атыма алтын табағынан һоло ашат, көмөш табағынан һыу эсер, — ти. Кесе Һарат алтын табаҡтан һоло ашап, көмөш табаҡтан һыу эсеп алғас, тағы ла сабып киттеләр, ти. Эй сабалар, ти, былар, эй сабалар, ти. Сабып бара торғас, Кесе Һарат тағы телгә килә:

— Егет, хәлем бөтә башланы, кесе апайыңдарға барып еткәс тә, мине ашатып ал, — ти.

Кесе апаларына килеп етәләр. Шәғәле атына алтын табаҡ менән һоло, көмөш табаҡ менән һыу бирә. Ашап-эсеп алғас, Кесе Һарат йән-фарманға сабып китте, ти. Эй баралар, ти, былар, эй баралар, ти. Бара торғас, арттарында бер саң болото күренде, ти. Мәскәй Оло Һарат менән быларҙы ҡыуып етеп килә, ти. Шул саҡ Оло Һарат һамаҡлап ебәрҙе, ти:

Энем Һарат, тороп тор,
Энем Һарат, тороп тор:
Дүрт аяғым бик талды.
Туҫтаҡтай күҙем һыуалды;
Энем Һарат, тороп тор,
Энем Һарат, тороп тор.

Кесе Һарат та һамаҡлап яуап бирҙе, ти:

Ағам Һарат, тормайым,
Ағам Һарат, тормайым:
Дүрт аяғың бик талһа,
Туҫтаҡтай күҙең һыуалһа,
Өҫтөңдәге мәскәйҙе
Һелкеп ташлап китһәнә.

Оло Һарат мәскәйҙе ташлайым тип һелкенгәйне, мәскәй уның ике аяғын ашаны ла ҡуйҙы, ти. Эй ҡыуышалар, ти, былар хәҙер, эй ҡыуышалар, ти. Оло Һарат сатанлап сабып килә, ти. Килә торғас, Оло Һарат тағы ла һамаҡлай башланы, ти:

Энем Һарат, тороп тор,
Энем Һарат, тороп тор:

Туҫтаҡтай күҙем быуалды,
Ай тояғым һыуалды,
Ике аяғым бик талды;
Энем Һарат, тороп тор,
Энем Һарат, тороп тор.

Кесе Һарат та һамаҡлап яуап бирҙе, ти.

Ағам Һарат, тормайым,
Ағам Һарат, тормайым:
Туҫтаҡтай күҙең быуалһа,
Ай тояғың һыуалһа,
Ике аяғың бик талһа,
Өҫтөңдәге мәскәйҙе
Һелкеп ташлап китһәнә.

Оло Һарат мәскәйҙе ташлайым тип һелкенгәйне, мәскәй уның ҡалған ике аяғын ашаны ла ҡуйҙы, ти. Оло Һарат түше менән шыуышып бара башланы, ти, хәҙер. Бара торғас, бөтөнләйгә хәлдән тайҙы, ти, был. Тағы ла һамаҡлай башланы, ти:

Энем Һарат, тороп тор,
Энем Һарат, тороп тор:
Туҫтаҡтай күҙем төн алды,
Ай тояғым, дүрт аяғым
Убыр ҡарсыҡ ялманы;
Энем Һарат, тороп тор,
Энем Һарат, тороп тор.

Кесе Һарат та һамаҡлап яуап бирҙе, ти:

Ағам Һарат, тормайым,
Ағам Һарат, тормайым:
Туҫтаҡтай күҙең төн алһа,
Ай тояғың, дүрт аяғың
Убыр ҡарсыҡ ялмаһа, —
Өҫтөңдәге мәскәйҙе,
Һелкеп ташлап китһәнә.

Оло Һарат мәскәйҙе һелкәйем тип ҡымшанғайны, мәскәй уны бөтөнләйгә һоғондо ла ҡуйҙы, ти. Шунан үҙе ҡаҡырып — киле, төкөрөп төйгәс яһап алды ла, килене ат итеп, төйгәсте ҡамсы итеп, шаҡ та шоҡ һуға-һуға ҡыуып китте, ти.

Эй сабышалар, ти, былар, эй ҡыуышалар, ти. Ҡыуыша торғас, мәскәй ҡыуып етә башланы, ти. Шул саҡ Һарат, телгә килеп:

— Егет, хәлем насарланды. Мәскәйҙең шаҡ та шоҡ һуғып ҡыуып етеп килгәнен ишетәм, тарағыңды артҡа ташла, — тип әйтте, ти.

Егет ҡуйынындағы тараҡты алып артҡа ташлағайны, ҡуйы ҡара урман барлыҡҡа килде, ти. Шул саҡ мәскәй:

— Шәғәле, был урманды нисек сыҡтың? — тип ҡысҡыра, ти.

Шул саҡ Кесе Һарат, телгә килеп: «Ҡулым менән ҡумарҙым, типтем дә йыҡтым, шулай итеп сыҡтым», — тип яуап бирергә ҡушты, ти. Шәғәле аттың әйткәнен ҡабатланы, ти:

— Ҡулым менән ҡумарҙым, типтем дә йыҡтым, шулай итеп сыҡтым.

Бер ваҡыт мәскәй әбей шарт та шорт һуғып, ағастарҙы тамырынан ҡулы менән ҡумарып, тибеп йығып, килеп сыҡты, ти. Килеп сыҡты ла ҡаҡырып — киле, төкөрөп төйгөс яһап алып, тағы ла ҡыуа төштө, ти. Килә торғас, Һарат тағы ла арый башлай. Шунан йәнә телгә килеп:

— Мәскәйҙең килеһе менән төйгөсөн күрәм. Аяҡтарым тала, тыным ҡурыла башланы. Артыңа боролоп, ҡайрағыңды ташла, — ти.

Шәғәле, артына боролоп, ҡайрағын ташлағайны, ҡаялары күккә төртөлгән бейек тау барлыҡҡа килде, ти. Мәскәй әбей:

— Шәғәле, тауҙы нисек сыҡтың? — тип ҡысҡыра, ти.

Һарат телгә килеп: «Ҡулым менән ҡумарҙым, тешем менән ҡайырҙым, шулай итеп сыҡтым», — тип әйтергә ҡуша.

Шәғәле атының әйткәнен ҡабатлай. Эй, бер ваҡыт дөбөр ҙә шатыр килә башланы, ти. Мәскәй әбей өлкән-өлкән таштарҙы ҡулы менән ҡумарып, теше менән ҡайырып, ах та ух булып, тауҙы өңөп килеп сыҡты, ти.

Сыҡты ла, ҡаҡырып — киле, төкөрөп төйгөс яһап алып, ҡыуа төштө, ти, тағы.

Эй сабалар, эй сабалар, ти, былар. Сабышып килә торғас, Һарат тамам хәлдән тая башланы, ти. Телгә килеп:

— Егет, минең бер мыҫҡал да хәлем ҡалманы. Мәскәйҙең тын алғанын ишетәм, көҙгөңдө артҡа ташла, — ти.

Шәғәле көҙгөнө артҡа ташлағайны, осһоҙ-ҡырыйһыҙ, төпһөҙ күл барлыҡҡа килде, ти. Мәскәй әбей күлдең аръяғынан:

— Шәғәле, күлде нисек сыҡтың? — тип ҡысҡыра, ти.

Һарат: «Биләмә таш баулап сыҡтым», — тип әйтергә ҡуша. Егет аты әйткәнде ҡабатлап:

— Билемә таш баулап сыҡтым! — тип ҡысҡыра.

Мәскәй әбей ҡаҡырып — ҡыл яһаны ла, төкөрөп-төкөрөп тороп, ҡыл арҡаны ишеп алды, ти. Шунан биленә таш баулап, күлгә төшөп китте, ти.

Шул ерҙә Һарат Шәғәлегә:

— Егет, мин ары бара алмайым, бөтөнләйгә хәлдән тайҙым. Ошо ерҙә мине һуй, ҡаныма ҡамсыңды сәнес, бер тирәк үҫеп сығыр, тирәктең башына мен дә ултыр. Мәскәй әбей күлдән килеп сыҡһа, эттәреңде ярҙамға саҡыр, — тип әйтте, ти.

Шәғәленең өйҙә өс бурҙайы булған икән. Уларҙы атаһы һәр саҡ бикләп тотор булған.

Шәғәле атынан төшкән дә илай-илай Һаратты салған. Һараттың ҡаны аҡҡан ергә ҡамсыһын ҡаҙаған. Шул ерҙә үҙе сикһеҙ йыуан, үҙе сикһеҙ бейек тирәк үҫеп сыҡҡан. Егет шул тирәктең башына менеп ултырған. Тирәк башынан ҡараһа, мескәй ах та ух килеп, бата-сума күлдән сығып ята, ти. Сыҡҡан да ҡаҡырып — ҡайраҡ, төкөрөп балта яһап алған, шунан тирәкте шарт та шорт ҡырҡырға тотонған.

Тирәкте яртылаш тумырғайны, бер төлкө килеп сыҡты, ти.

— Арып бөткәнһеңдер, ҡайҙа мин дә ҡырҡышайым, — тигән төлкө.

— Мә, улайһа, мин ятып ял итеп алайым. Тирәкте йыҡҡас та мине уятырһың, — тип, мәскәй хәл йыйырға ятҡан. Ятыуы булған, йоҡлап та киткән. Төлкө тирәктең ҡырҡылған ерен ялап-ялап бөтәйткән дә, балта менән ҡайраҡты күлгә ырғытып, киткән дә барған.

Шәғәленең баш осонан ғына ҡарғалар осоп бара икән. Шәғәле шуларға инәлеп һамаҡлай башлаған:

Эй, ҡарғалар, ҡарғалар,
Минең яндан үтегеҙ,
Минең әйткән сәләмде
Һаҡколаҡҡа илтегеҙ,
Һаҡколаҡҡа илтегеҙ;
Мәскәй әбей ашай, тип
Суҡколаҡҡа әйтегеҙ,
Суҡколаҡҡа әйтегеҙ;
Минең һуңғы һүҙемде
Ташйөрәккә әйтегеҙ,
Ташйөрәккә әйтегеҙ.

Ҡарғалар:

— Ҡар-р-р, ҡар-р-р, бында аҙыҡ бар-р-р, бар-р-р, — тинеләр ҙә, ергә төшөп, тирәктең йығылыуын көтә башланылар, ти. Шул саҡ бер көтөү һайыҫҡан осоп бара икән. Шәғәле тағы ла һамаҡларға тотондо, ти:

Һайыҫкандар — һағауыл,
Бар донъяға — бағауыл,
Минең яндан үтегеҙ,
Минең әйткән сәләмде
Һаҡколаҡҡа илтегеҙ,
Һаҡколаҡҡа илтегеҙ;
Мәскәй әбей ашай, тип
Суҡколаҡҡа әйтегеҙ,
Суҡколаҡҡа әйтегеҙ;
Минең һуңғы һүҙемде
Ташйөрәккә әйтегеҙ,
Ташйөрәккә әйтегеҙ.

Һайыҫҡандар:

— Шыҡыр-шыҡыр, шулай булмай ни, бер ҡашыҡ булһа ла ҡаныңды эсербеҙ, — тип, ҡарғалар эргәһенә төшөп ултырҙылар, ти. Шул саҡ баш осонан, сыр ҙа

сыр килеп, бер көтөү турғай осоп бара икән. Шәғәле турғайҙарға һамаҡлап әйтте, ти:

Эй, турғайҙар, турғайҙар,
Минең яндан үтегеҙ,
Минең әйткән сәләмде
Һаҡҡолаҡҡа илтегеҙ,
Һаҡҡолаҡҡа илтегеҙ ҙә,
Убырлы ҡарсыҡ ашай, тип
Суҡҡолаҡҡа әйтегеҙ.
Суҡҡолаҡҡа әйтегеҙ ҙә
Минең һуңғы һүҙемде
Ташйөрәккә әйтегеҙ,
Ташйөрәккә әйтегеҙ.

Турғайҙар:

— Күрә алһаҡ, әйтербеҙ, күрә алһаҡ, әйтербеҙ, — тип, бер түбән төшөп, бер юғары күтәрелеп, сыр ҙа сыр килеп осоп киттеләр, ти.

Шәғәленең атаһы, эттәрҙе таш һарайға бикләп, ҡолаҡтарына ҡурғаш ҡойоп ҡуйған була. Турғайҙар эттәрҙе эҙләйҙәр-эҙләйҙәр, таба алмайҙар. Шул ваҡыт бер турғай, ҡыйыҡта үҙе һыйырлыҡ тишек табып, таш һарай эсенә инә. Эттәргә ҡысҡыра-ҡысҡыра, эттәр бер нәмә лә ишетмәйҙәр. Шунан эттәрҙең ҡолаҡтарына ҡунып әйтәйем тиһә, ҡолаҡтарына ҡурғаш ҡойолған. Ҡурғашты соҡоп алып, турғай эттәргә Шәғәленең сәләмен әйтә. Шул ерҙә эттәр таш һарайҙы күтәреп килеп сығалар ҙа йән-фарманға сабып китәләр.

Был ваҡытта йоҡоһонан торған мәскәй ҡаҡырып — ҡайраҡ, төкөрөп балта яһап, төлкөнө һүгә-һүгә, тирәкте яңынан ҡырҡырға тотонған. Шул арала арттарында саң болото күтәреп, Шәғәленең бурҙайҙары килеп етәләр. Быны күреп, мәскәй күлгә сума. Бурҙайҙар Шәғәлегә:

— Һин тирәк башынан төшмәй тор, беҙ мәскәй артынан күл төбөнә төшәбеҙ. Ҡыҙыл ҡан сыҡһа, беҙ үлгән булырбыҙ, ҡара ҡан сыҡһа, мәскәй үлгән булыр, — тиҙәр ҙә күл төбөнә төшөп тә китәләр.

Бер аҙ торғас, күлдән ҡыҙыл ҡан сыға башлай. Шәғәле илап ебәрә. Шул ваҡыт күлдән урғып-урғып

ҡара ҡан сыға башлай. Шәғәле көлөп ебәрә. Күп тә тормай, Һаҡҡолаҡ мәскәйҙең ботон, Суҡҡолаҡ ҡулын, Ташйөрәк башын тотоп, күлдән килеп сығалар. Бурҙайҙарҙың һыңар ҡолаҡтары юҡ, ти. Шуға тәүҙә күл төбөнән ҡыҙыл ҡан сыҡҡан икән.

Шәғәле, тирәк башынан төшөп, бурҙайҙарына рәхмәттәр әйтеп, уларҙы эйәртеп киткән, ти. Ҡайтһа, атаһы үлгән, әсәһе, күп илауҙан күҙҙәре һуҡырайып, ауырып киткән, түшәктә ята, ти. Улының иҫән-һау әйләнеп ҡайтыуын күргәс, әсәһе терелеп китте, ти. Ҙур мәжлес үткәргәндәр, шат йәшәй башлағандар былар.

## ЗӘЙНУЛЛА МЕНӘН КРАСАТА

Борон-борон заманда бер ҙур шәһәрҙә бер етем малай йәшәгән. Исеме Зәйнулла булған. Малай өйҙән өйгә йөрөп һоранып тамаҡ туйҙырған. Бер ваҡыт ул батшаның үҙенә барып ингән. Батша уны ашатып-эсереп сығарып ебәргән. Был теремек тә, аҡыллы ла малай тураһында батша ҡатынына ла әйткән. Ә ул ярлы ҡыҙы икән. Шуға ла ярлыларға ярҙам итергә һәр ваҡыт әҙер торған. Ул батшаға Зәйнулланы табып алып, үҙҙәренең улы итергә, кейендереп, уҡытып, үҙенә алмашсы әҙерләргә кәңәш биргән.

Батша ҡатынының һүҙен кире ҡаҡмаған. Малайҙы таптырып алғандар ҙа үҙҙәренең ниәттәрен әйткәндәр. Зәйнулла, ай-һай, былар берәй ҡара уй уйламанылармы икән тип шикләнә бирһә лә, батша үҙе ҡушҡас, риза булған.

Шулай итеп, Зәйнулла батша улы булып киткән. Уҡыуға тиһәң, бик зирәк, төҫкә тиһәң, бик матур булып үҫеп еткән.

Бер ваҡыт батша бик ҙур мәжлес уҙғарған. Ҡунаҡтар хатта ике айлыҡ юлдан килгәндәр. Зәйнулла ҡунаҡтарҙы ҡәҙерләп, хөрмәт итеп йөрөй икән: ҡул йыуҙыра, аяҡ кейемдәрен, өҫ кейемдәрен алып бирә. Шулай йөрөгәндә, бер эйелгән сағында уның түш кеҫәһенән бик һылыу бер ҡыҙ рәсеме төшөп киткән. Батша быны күреп ҡалған да:

— Был кем? — тип һораған.

Зәйнулла быны үҙе лә тәү тапҡыр күреп тора икән. Рәсемдең кемдеке булыуын, нисек уның кеҫәһенә килеп ингәнен үҙе лә белмәй икән. Рәсемде ҡунаҡтар ҙа, ҡулдан ҡулға йөрөтөп, ҡыҙҙың һылыулығына хайран ҡалып ҡарайҙар. Һары сәсле, күк күҙле, ти, үҙе. Тик береһе лә уның кем икәнен әйтә алмаған, ти. Шулай ҙа арала бер зирәк ҡунаҡ бар икән. Шул ҡунаҡ:

— Был ҡыҙҙың исеме Красата[1] булыр. Ул ҡыҙ үҙ рәсемен был егет йоҡола сағында килтереп һалған, ғашиҡтыр, күрәһең. Был һылыуҙы табыуы бик, бик ауыр буласаҡ, шулай ҙа, егет, һин уны таба алаһың, — тигән.

Был сибәр ҡыҙ хәҙер Зәйнулланың да йөрәгенә инеп ултырған. Уйында шул гүзәл генә икән. Зәйнулла батшанан:

— Атай, мин уны эҙләп сығып китәм, — тигән.

Батша риза булмай тора. Өсөнсө тапҡыр бик инәлеп һорағас ҡына, ул, иптәшкә тип бер һалдат биреп, егетте сәфәргә сығарып ебәрә. Юлға күп аҡса, күп аҙыҡ ала былар.

Бик күп юл үткәс, кис булып, бер йылға буйына йоҡларға яталар. Һалдат, Зәйнулланы һаҡларға тейеш булғас, йоҡламай. Зәйнулла йоҡлап киткәс, уның күкрәгенә бер энә сәнсеп ҡуя. Бер аҙ торғас, ел-дауыл ҡуптарып, аҡбуҙ атҡа атланып, йөҙәнән нурҙар һибелеп,

---

[1] Красата *(красота)* — рус һүҙе: гүзәл, һылыу, сибәр.

тирә-яҡты ялтыратып торған бер һылыу ҡыҙ килеп төшә. Ул Зәйнулланы уятырға тырыша. Зәйнулла уянмай. Улай ҙа әйләндерә, былай ҙа әйләндерә егетте, барыбер уята алмай. Таң атҡас, ҡыҙ, иртәгә тағы килермен тип, егетте бер үбә лә ҡайтып китә.

Ҡыҙ китеп, һалдат Зәйнулланың күкрәгенән энәне алдыниһә, Зәйнулла:

— Ах, бик оҙаҡ йоҡлағанмын, төшөмдә теге Красатаны күрҙем. Ул мине улай төрттө, былай төрттө, ә мин уның ҡулынан да тота алманым, — тип төшөн һөйләй. Һалдат өндәшмәй генә ултыра.

Былар ары китәләр. Икенсе кисте лә, Зәйнулла йоҡларға ятҡас, һалдат уның күкрәгенә энәһен ҡаҙап ҡуя. Красата тағы килә, уятырға тырыша — Зәйнулла уянмай. Красата уны ҡосаҡлап та ҡарай, үбеп тә ҡарай; тор инде, йәнем, тип илап та ҡарай. Егет уянмай. Красата, таң атҡас, тағы бер килермен әле, ти ҙә көрһөнә-көрһөнә ҡайтып китә.

Өсөнсө көндө кис еткәс, Зәйнулла, теге тәмле төштө тағы ла күрмәмме тип, ашамай ҙа йоҡларға ята. Красата тағы килә. Тик Зәйнулланың күкрәгенә тағы ла теге энә ҡаҙалған була. Красата уны ҡосаҡлап үбә, күкрәгенә ятып илай:

— Бөгөн уянмаһаң, башҡа килә алмайым, — ти. — Мин башҡа килә алмайым, һине һағыныуҙан һарғайып үлермен инде, — тип, илай-илай ҡайтып китә. Уның күҙ йәштәре тамған ерҙә әскелтем һыулы күл барлыҡҡа килә. Хәҙерге Магнит тирәһендәге тоҙло күл шул Красатаның күҙ йәштәре икән ул.

Һалдат Зәйнулланың түшенән энәне тартып алғас, ул, уянып:

— Ах, оҙаҡ йоҡлағанмын, төшөмдә Красатаны тағы күрҙем. Ул мине ҡосаҡланы, үпте, иланы, мин уяна алмағас, «башҡа күрә алмам», тип илап ҡайтып китте, — тип һөйләнә.

Шул ерҙә һалдат ысынды һөйләп бирә:

— Өс көн буйы Красата һинең янына килде, уятырға тырышты, әммә уята алманы. Ни өсөн тиһәң, мин күк-

рәгеңә бынау энәне ҡаҙағайным. Был сихырлы энәне, Зәйнулла йоҡоға киткәс тә күкрәгенә ҡаҙарһың тип, батша бисәһе биреп ебәргәйне. Мин уның ҡушҡанын үтәнем, — ти.

Зәйнулла быға ныҡ асыуланып:

— Һинең менән йөрөгәнсе, яңғыҙ йөрөгәнем артыҡ. Юл йөрөгәндә, ысын дуҫ ундай эш эшләмәй ул. Һин миңә дуҫ түгел, дошманһың икән! — тип, һалдатты ҡыуып ебәрә. Яңғыҙы ғына артабан китә. Ай китә, йыл китә, арҡан буйы ер китә, бер ҙур шәһәргә барып сыға. Был күрше батшалыҡтың баш шәһәре икән. Зәйнулла батша янына инә, үҙенең кем икәнен, Красатаны эҙләп йөрөүен һөйләп бирә.

Батша, Зәйнулланы тыңлап бөткәс:

— Һин теләгән ергә минең сәмреғошом ғына алып барып еткерә ала. Башҡаса сара юҡ, — ти. — Сәмреғош һине бер тау башына төшөрөр, һин түбәнгә ҡарай кит. Күпме барырһың, уныһы билдәһеҙ. Бер һыу буйына барып сығырһың, шунда бер тирмән булыр. Унда бер ҡарт йәшәй, һин шул ҡарт ярҙамында ғына Красатаны таба алырһың. Тик бабайға үҙеңдең Красатаны эҙләп килгәнеңде әйтмә, — ти. — Хәйерле юл! — тип, батша егетте оҙатып ҡала.

Зәйнулла, сәмреғошҡа ултырып, айлыҡ юлды бер көндә үтә. Бөтәһен дә теге батша өйрәтеп ебәргәнсә эшләй. Бабайҙы таба. Бабай унан:

— Юл башың ҡайҙан? — тип һорай.

— Хоҙайҙан, — ти Зәйнулла.

— Ниндәй зат?

— Әҙәми зат. Аҙашып килеп сыҡтым, бабай, инде ни эшләйем?

— Бында килгәс, ҡайта алмаҫһың. Миндә тор.

— Ярай.

— Шарт шулай: тирмәндә көнөнә өс тоҡ он тарттыр ҙа соланға индер.

— Ризамын, бабай, тик оҙаҡҡа һуҙылырмы был эш?

— Оҙаҡ булыр.

Зәйнулла эшкә тотона. Көн дә кис өс тоҡ он әҙерләп,

соланға индереп ҡуя, иртән тороп ҡараһа, береһе генә ҡалған була. Шулай бер нисә ай дауам итә. Зәйнулла карттан:

— Иртән тороуға өс тоҡтоң икеһе ҡайҙа була ул? — тип һорай.

Бабай:

— Беҙҙең ғаиләбеҙ бик ишле, ҡарсығым, өс ҡыҙым, ике тол һеңлем бар. Күп ашай торғандарҙан булабыҙ беҙ, — ти.

Тағы байтаҡ ваҡыт үтә. Зәйнулла:

— Бабай, мин китәйем инде, — ти.

— Кит, — ти бабай.

Эй китте, ти, Зәйнулла, эй китте, ти, был. Юл өҫтөндә ике ен малайы һуғышып ятҡанын күрә.

— Ниңә һуғышаһығыҙ? — тип һорағас, тегеләр:

— Атайыбыҙҙан бер эшләпә менән бер таяҡ ҡалғайны. Шуларҙы бүлешә алмайбыҙ, — тиҙәр.

Зәйнулла:

— Бәй, ниңә уның өсөн һуғышырға, мин уларҙы ғәҙел бүләм. Барығыҙ, анау ерҙән йүгерешеп килегеҙ. Кем уҙһа, эшләпә лә, таяҡ та шуға була, — ти. Ен малайҙарына был кәңәш бик оҡшай. Шатланышып, Зәйнулла күрһәткән ергә китәләр. Ә Зәйнулла тылсымлы эшләпә менән таяҡты ала ла үҙ юлына йүнәлә.

Юлда йоҙроҡ кеүек кенә бер өйҙән ҡыл һымаҡ ҡына төтөн сығып ята. Зәйнулла шунда ҡунып китергә уйлай. Инһә, бер әбей менән бер бабай ултыра. Ҡунырға рөхсәт итәләр. Зәйнулла йоҡларға ята. Әбей менән бабай һөйләшә. Былар Красатаның өләсәһе менән олатаһы икән.

— Иртәгә Красата ҡыҙыма барам, — ти әбей. — Тик бына һомайғош йомортҡаһы тапманым, шуны ашатһаң, һауығыр, тигәйнеләр. Красата көндән-көн һарғая, кибә, бахырҡайым, шул егет тип үлә инде, — тип ҡайғыра.

Зәйнулла иртән тороп, бейек ҡая башынан өс һомайғош йомортҡаһын таяғы менән тартып ала. Шунан әйәһен кешегә күрһәтмәҫ шайтан эшләпәһен кейә лә

әбейҙең артынан эйәреп китә. Уның менән бергә Красата ауырып ятҡан йортҡа барып инә.

— Йомортҡа алып килә алманым, балам, һис таба алманым, — тип илап-илап һүҙ башлай әбей. Һүҙе бөткәс, Красатаның әсәһе янына сыға. Шул саҡ Зәйнулла өс йомортҡаның береһен Красатаның баш осона, икенсеһен аяҡ осона, өсөнсөһөн күкрәгенә һалып ҡуя. Красата ҡыбырлау менән, күкрәгенән бер йомортҡа тәгәрәп килеп төшә. Ул йомортҡаны ала ла:

— Был таныш йомортҡа түгел, бәлки, һомайғош йомортҡаһылыр, — тип эсеп ҡараһа, үҙенә хәл ингәндәй була. Тағы ҡыбырлаһа — баш осонан, йәнә бер ҡыбырлаһа, аяҡ осонан бер йомортҡа тәгәрәп төшә. Шул йомортҡаларҙы эскәс, Красатаға бөтөнләй хәл инә. Тора ла сәсен тарап, көҙгөгә ҡарап, үҙен рәткә килтерә. Үҙе:

— Мин эскән был өс йомортҡа ҡайҙан килеп сыҡты һуң әле? Өләсәйем йомортҡа таба алманым тине бит, — ти. Шул ваҡыт Зәйнулла:

— Красата, шифалы йомортҡаларҙы мин килтерҙем, — ти.

— Һин кем?

— Зәйнулла.

— Ҡайҙа һуң һин, күрмәйемсе үҙеңде?

Зәйнулла эшләпәһен һала. Улар күрешәләр. Илашып табышалар, ҡауышалар. Быға Красатаның атаһы Иван да, әсәһе Мария ла, хәл белергә килгән өләсәһе лә бик-бик шат була. Аҙаҡ Зәйнулла Красатаны үҙҙәренә алып ҡайтып китә. Зәйнулланы ул итеп алған батша һағыныуҙан һарғайып бөткән, ти. Улын күреп туйғас, батша үлә. Зәйнулла батша булып ултыра.

## ҺОНТАЙ ЕГЕТЕ

Элекке заманда Һонтай тигән ауылда бер ҡарт менән бер ҡарсыҡ булған. Улар кетмерләп, ярлы ғына көн иткәндәр. Ашайым тиһә, туя ашарлыҡ аҙығы, кейәйем тиһә, рәтле кейемдәре булмаған, ти, быларҙың. Уларҙың бар шатлығы — Янһары исемле берҙән-бер улдары булған.

— Исмаһам, ошо балабыҙ ир етһә, бәлки, беҙ ҙә әҙәм рәтле көн итер инек, — тип, әбей менән бабай күңелдәрен йыуатыр булғандар.

Әммә уларға был көткән шатлыҡтарын күрергә тура килмәгән: Янһары ун дүрт йәшенә етеп, ҡул араһына керә башлаған саҡта ғына икеһе бер төптән үлгән дә киткәндәр.

Янһары, ни эшләмәк кәрәк, үҙ юҫығына донъя көтә башлаған. Башта яңғыҙына бик ҡыйын булған егеттең: нимәгә тотонһа, шул ҡулынан төшөп бара, көн илай, төн илай. Аҙаҡ: «Туҡта, былай ярамай, булмаһа, һунарға барып ҡайтайым әле, берәй яй сыҡмаҫмы икән?» — тигән уйға килгән был. Әйткән һүҙ — атҡан уҡ, ярты эшләнгән эш. Янһары күп итеп тоҙаҡ яһай ҙа яланға сығып китә.

Төрлө йәнлектәр күберәк йөрөй торған ҡулайлы урынды самалап, өс тоҙаҡ ҡала был. Әләгер булһа, шул өс тоҙаҡ та етер әле тип уйлап, егет ауылына табан ыңғайлай. Ҡайтып килә ятһа, быға бер ҡарт тап була ла:

— Нихәл, улым, әллә тоҙаҡтар ҡорҙоңмо? — тип һорай.

— Эйе, бабай, тоҙаҡтар ҡорған булғайным шул, — ти Янһары.

— Ә һуң, улым, тоҙағың артып ҡалманымы, мин дә тоҙаҡ ҡормаҡ булғайным, — ти ҡарт.

— Ҡалды, бабай, эшләгән әҙер тоҙаҡтарым да ҡалды, — ти ҙә егет ҡалған барлыҡ тоҙаҡтарын ҡартҡа бирә лә ҡуя. Ҡарт уға рәхмәттәр әйтеп, яҡшы теләктәр теләп, үҙ юлына, егет үҙ юлына табан китеп бара. Бара торғас, егеттең башына келт итеп бер уй төшә: «Бәй-бәй, бик ипле генә ҡарт булды түгелме һуң әле был? Исемен дә һорамаными. Беҙҙең ауылда ундай ҡарт юҡ, яҡын-тирәлә лә күргән-белгән кешемә оҡшамай...»

Янһары, уны йәнә күрмәк булып, артына боролоп ҡараһа, ҡарт инде күҙ күреме ер китеп өлгөргән була.

Янһары өйөнә ҡайтып етә. Инде күптән ҡараңғы төшкән. Тамағына ашар ине, лоҡма ҡабым аҙығы юҡ. Шунан ни был, төлкө һымаҡ ҡына бөгәрләнеп ята ла, бар ҡайғыһын онотоп, йоҡлап китә.

Иртәнсәк бик иртә уяна был. Ҡараһа, тышта эре ҡар яуып үткән, көн йылы, салт аяҙ. Ул тиҙ генә кейенә лә тоҙаҡтарын ҡарап ҡайтырға йүгерә. Аяғы тейгән ергә — тейә, теймәгән ергә теймәй йүгерә ул. Кисәге урынына барып етеп ҡараһа, бер тоҙағына ҡуян эләгеп ятҡан. Булды был! Ул ҡуянды ботонан тотоп биленә бәйләй ҙә икенсеһенә йүгерә. Килһә, уныһында ап-аҡ тамаҡлы, йәнә ҡып-ҡыҙыл уттай янып торған төлкө эләккән. Бына бәхет! Шатлыҡтан егеттең түбәһе күккә тейгәндәй була. Өсөнсө тоҙаҡ янына ҡайһылай барып еткәнен дә тоймай ҡала ул. Аҙаҡҡы тоҙағына ҡараһа, ни күҙе менән күрһен, быныһына бик һылыу бер ҡыҙ эләккән. Ә ҡыҙҙан арттараҡ, моронон ҡарға тығып, күҙен бәзерәйтеп, бер эт шыңшып ята, ти. Ҡыҙ илап-һыҡтап егеткә инәлә башлай.

— Егет, ысҡындыра күрсе, тоҙаҡҡа ҡаптым бит әле мин, — тип әйтә, ти. Егет башта бик ҡурҡып, ҡаушап ҡала. Бындай хәл бер ҙә күҙ күргән, ҡолаҡ ишеткән нәмә түгел бит. Шулай ҙа ҡурҡыуын еңеп, ҡыҙҙы ысҡындырған был тоҙаҡтан. Ҡараһа, ҡыҙҙың бәләкәй генә санаһы ла бар икән.

Ҡыҙ, тоҙаҡтан ысҡынғас, өҫтөн-башын ҡаҡҡылай ҙа, йәшле күҙҙәрен һөртә-һөртә:

— Рәхмәт инде, егет, ҡотҡарҙың бит. Шуның өсөн әйҙә, үҙеңде бер рәхәтләндереп йөрөтәйем. Санама ултыр, — ти. Янһары ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына килеп саnаға ултыра. Шунан былар ҡар бураны туҙҙырып тауҙан төшөп китәләр. Сана күҙ эйәрмәҫлек шәп шыуа, ти. Теге эт, телен арҡыры тешләп, саҡ арттарынан өлгөрә, ти.

Бына былар тау аҫтына төшөп етәләр. Егет: «Төшәйем әле, сананы тау үренә һөйрәп мендерергә кәрәк», — тип уйлап бөтөрөргә лә өлгөрмәй, сана үҙенән-үҙе артҡа борола ла тау үренә табан елдерә башлай. Эт тә былар артынан бер тотам ҡалмай, ти.

Егет был эшкә шаҡ ҡатҡан. Тау үренә менеп еткәс, ул инде ни эшләргә белмәй тора икән, быға ҡыҙ ҡарап йылмая ла:

— Тоҙаҡҡа эләктерҙең бит. Хәҙер мин — һинеке, һин — минеке. Әйҙә өйөңә ҡайтайыҡ, — ти. Былар ҡабаттан санаға ултыралар ҙа, ҡар бураны туҙҙырып, ауыл яғына тоҡойоп сығып китәләр. Егет ҡыҙға:

— Ошонан, ошонан, — тип, юлды күрһәтеп кенә бара, ти.

Ауылға етә башлағас, егет эсенән генә: «Ул алама йортҡа был һылыу ҡыҙҙы нисек алып инермен дә уңайтамағын нимә менән туйҙырырмын?» — тип уңайһыҙлана башлай. Бына былар шажылдатып ишек алдына килеп керәләр. Егет үҙенсә хөрмәт итеп, ҡыҙҙы өйөнә алып ингән була. Инһәләр, өй эсе шундай ҡойто, үгеҙ мөгөҙөнә элеп сығырлыҡ сепрәк-сапраҡ заты юҡ, ти. Егет, оялышынан ҡыҙға күтәрелеп ҡарарға ла ҡыймай, ауыҙ эсенән генә мөңгөрләй:

— Туҡта әле, мин күрше-күләндең хәлен белеп киләйем әле, — тигән дә, һылтау итеп, икмәк эҙләргә сығып киткән.

Егет, ниҫкә ҡайҙандыр икмәк табып, өйөнә ҡайтып керһә, өй эсе гөлт итеп йыйыштырылып ҡуйылған, ти. Ул түшәмгә тиклем өйөп ҡуйылған урын-ер нәмәләре,

аçыл келәмдәр күҙҙең яуын алып тора, ти. Тәҙрә төптәрендә гөлдәр хуш еç бөркөп, күперреп сәскә атып ултыралар, ти. Егеттең, быны күргәс, иçе-аҡылы киткән. Уның аптырауын күргәс, ҡыҙ уға:

— Егетем, мин һинең хәлеңде белмәгәйнем, оялып әйтмәгәнһең икән. Бынан һуң беҙ арыу йәшәрбеҙ, нимә теләһәк, шул булыр, — ти.

Шунан һуң былар ултырып, бер туя тамаҡтарына ашайҙар, үпкәләрен йөҙҙөргәнсе сәй эсәләр. Ошо көндән алып улар бик татыу донъя көтөп китәләр. Егетте баҙарға ебәреп, ҡыҙ үҙенә оҡшаған нәмәләрҙе алдыра. Хәҙер инде быларҙың етешмәгән нәмәләре юҡ. Бер итеп донъя көтәләр. Күрше-күләндәрен йыйып, буйтым ҡунаҡ итә былар. Егет менән ҡыҙҙың етеш донъя көтөүҙәренә шаҡ ҡата халыҡ. Унан бигерәк уларҙың тигеҙ-татыу тороуҙарына һоҡланып, һөйләй-һөйләй ауыҙ һыуҙары ҡорой кешеләрҙең.

Һонтай егетенең һылыу ҡатын алып, бик яҡшы тороп ятыуы хаҡындағы хәбәр хатта батшаға барып етә. Батша: «Донъяла минән дә яҡшы йәшәүсе кеше булмаçҡа тейеш!» — тип, бик асыуланып, хәҙер үк Һонтай егетен үҙ ҡаршыһына килтерергә бойора. Уның ярандары шунда уҡ Янһары янына сабып килеп етәләр. Егет бик ҡаты ҡурҡыуға төшә был хәбәрҙән. Бармай ҡалырға ярамай инде батша ҡаршыһына, юҡһа ул халыҡ алдында башыңды сабасаҡ йәки тереләй утҡа һаласаҡ. Батшаның тәртәһе бик ҡыçҡа, ҡулы ҡаты.

Китә егет батшаға.

Барып етеп һарайға ингәс, батша уға күтәрелеп тә ҡарамай:

— Һонтай егете Янһары һинме? — тип һорай.

— Эйе, мин, — ти егет.

— Ҡатының да бармы?

— Бар.

— Икәүҙән-икәү генә тораһығыҙмы?

— Эйе.

Шулай итеп, батша, егеттән әнәһенән-ебенә тиклем барын төпсөп һорашып бөткәс:

— Мин һине шуға саҡырттым, — ти, — һиңә бер ус тары бирәм, шуны иртәгә ялан тултырып сәсеп ҡайт. Әгәр ошо әмеремде теүәл үтәмәһәң, башыңды ҡырҡырмын!

Ҡулдан килмәҫлек эш ҡушып, егеттең башына етмәк була бит инде был. Егет быны төшөнөп, ни тип әйтергә лә белмәй, ауыҙ эсенән генә мығырлап тора бирә. Шунан һуң батша:

— Бар, күҙемә күренмә, ҡушҡанды эшлә! — тип аяҡ тибеп екергәс, ике-өс тупһаны бер атлап, йүгереп сығып китә егет.

Ул өйөнә ҡайтҡас, бик бошоноп, ҡайғыһын кәләшенә һөйләп бирә.

— Эй, юҡ хәсрәткә ҡайғыраһың икән дә, — ти кәләше. — Бер ҡосаҡ һепертке, көрәк, сатлы-ботло ағастан һуҡа яһа ла ятып йоҡла. Иртән тороуыңа эш бөткән булыр.

Ятып йоҡлағандар былар. Иртәнсәк кәләше Янһарының билен быуып, битенә аҙ-маҙ тупраҡ һөртә лә әлеге этте эйәртеп, батшаға ебәрә.

— Барып еткәс, батшаға әйт: ҡушҡан эшең үтәлде, тиген. Әгәр ул, сәскән ереңде ҡарайым, тиһә, эт ҡайҙа илтһә, шуның артынан эйәреп бар, — ти.

Егет батшаға барып, ҡушҡан эшен еренә еткергәнлеген хәбәр итә. Батша был һүҙгә ҡапыл-ғара ышанып етмәй, ярандарын ҡарап ҡайтырға ебәрә. Егет тә былар менән бергә сыға. Эт ҡапҡанан сыҡҡас, ҡойроғон бутай ҙа бер яҡҡа ҡарай тоҡойоп сығып китә. Егет тә, батша ярандарын эйәртеп, шул яҡҡа ыңғайлай. Барып ҡараһалар, ялан тултырып тары сәселгән, тырмалған, барлыҡ эше еренә еткерелгән. Ярандар шунда уҡ ҡайтып батшаға быны хәбәр итәләр. Батша, быны ишеткәс, ни эшләһен инде, мыйығын тешләне лә ҡуйҙы, ти.

Егеттең ал да гөл булып тороуы тураһында хәбәр ауылдан ауылға, илдән илгә таралып, батшаға һаман

да йән тыныслығы бирмәй. Бер ун көндәр үткәс, егетте йәнә саҡыртып ала ла был:

— Минең ун һыйырым бар ине, барыһы ла бер төҫлө — гел күк һыйырҙар. Шулар, бына йыл тула инде, ҡураға ҡайтмай, мөстәнләнеп аҙып йөрөй. Шуларҙы эҙләп алып ҡайт. Әгәр табып ҡайтмаһаң, башыңды ҡырҡырмын! — ти.

Янһары өйөнә бик бошоноп ҡайтып, кәләшенә:

— Был батша, ахыры, минең башыма етмәк булалыр, — тип, уның нимә ҡушҡанын илай-илай һөйләп бирә. Кәләше уға:

— Улай булғас, бар, батшанан бер өс көн ваҡыт һора, берәй әмәлен табырбыҙ, — ти.

Егет барып, батшанан өс көн ваҡыт һорап ҡайта. Шунан былар, осона тимер ҡуйып, оҙон ҡыл сыбыртҡы үрә башлайҙар. Сыбыртҡы үрелеп бөткәс, кәләше:

— Эткә эйәреп урманға бар, һыйырҙарҙы шунда табырһың, — ти. — Тик һыйырҙарҙы һарай янына ҡыуып килтергәс, батша үҙе сығып ҡараһын. Ул сыҡҡас, һыйырҙарға тартам тип һелтәнеп, батшаның үҙенә лә сыбыртҡың менән ҡайыштырғансы берҙе әләктереп ал. Уның һыйыр тигәне — айыу булыр, — ти.

Бына өсөнсө көн етә, егет урман яғына китә. Ә теге эт деү итеп урманды ҡыҙырып, айыуҙарҙы ҡыуып сығара ла бер ергә тупларға тотона. Егеттең үҙенә эш тә юҡ. Айыуҙар ун башҡа тулғас, егет һай-һау һалып, сыбыртҡыһын шартлатып, быларҙы батша һарайына табан эйҙәп китте, ти. Батшаның ярандары тауышты ишетеп, йүгерешеп тупһа төбөнә сыҡҡандар.

— Бына алып ҡайттым, батша үҙ һыйырҙарын барлап ҡараһын, — ти егет.

Батша ла һарайҙан килеп сыға. Кәнт шул ваҡыт егет, сыбыртҡыһын шартлатып, айыуҙарҙы ҡураға ҡыуа башлай. Ҡура бүрәнәләренең серегенә бал ҡорттары эйәләшкән икән. Улар, айыуҙарҙың еҫен тойоп, аяуһыҙ сағырға тотоналар. Ҡайһы ереңгенә ҡысый! Айыуҙар аҡырып, күҙҙәре аларып, ҡуранан ҡасып сыға башлағас, Янһары, уларҙы тарҡатмайым тип, сыбырт-

ҡыһы менән һелтәнгән арала батшаға ла яҡшы ғына итеп берҙе тамыҙып ала. Батша һеңк итеп ергә ултыра ла:

— Ҡуй, егет, мин һынар өсөн генә әйткәйнем. Алып китә күр айыуҙарыңды, донъямды харап иттермә! — тип инәлә башланы, ти. Янһары:

— Юҡ, үҙең ҡуштың бит, ҡыуып килтерҙем, минән бурыс төштө, теләһәң ҡайҙа ҡуй уларҙы, — тип, һаман үҙенекендә тора бирә, ти. Аҙаҡ, батша бик ныҡ инәлә башлағас ҡына, ул айыуҙарҙы шарт та шорт һуғып, ҡыуып алып киткән.

Инде былай ҙа эш сыҡмағас, батша үҙенең бер яранын саҡырып алып, был егет менән нимә эшләү тураһында кәңәш ҡора башлаған. Күрәһең, яраны батшанан аҡыллыраҡ булғандыр инде. Ул әйткән:

— Эй батшам, — тигән, — һин уға бар менән юҡты алып килергә ҡуш. Ул уны барыбер таба алмаясаҡ. Шулай итеп беҙ уның башына етербеҙ, — тигән.

Был кәңәшкә батша бик ҡыуана ла Һонтай егетен йәнә үҙ янына саҡырта. Егет килә. Тыныс ҡына көтә батша әмерен.

— Егет, — ти уға батша, — миңә бар менән юҡты алып кил. Әгәр табып килтермәһәң, үҙеңде юҡ итермен!

— Барын табырмын инде, — ти егет, — ә бына юғын ҡайҙан алырға?

— Уныһында минең эшем юҡ, — ти батша, — теләһәң ни эшлә!

Янһары, йөҙө ҡара ҡойолоп, өйөнә ҡайтып керә. Кәләше шунда уҡ аңлай уның хәлен: йәнә ауырлыҡ килгән. Егет батша әмерен һөйләп биргәс, кәләше:
— Ауыр эш ҡушҡан, — ти. — Ярар, ҡайғырма, үтәрбеҙ. Тик һин, батшаға ҡабат барып, ҡырҡ көн ваҡыт биреүен һорап ҡайт.

Егет барып, батшанан ҡырҡ көн ваҡытҡа рөхсәт алып ҡайта. Шунан һуң кәләше һуған һыуы менән ҡайын туҙына бер хат яҙып биргән. Туҙ, туҙ инде — ап-аҡ. Тик уны ҡояшҡа тотһаң ғына уҡып була.

— Бына ошо хатты, — тигән ул, — атайыма бирерһең, ул һиңә кәрәк нәмәңде табыр.

— Ул мине танымаç бит, — ти егет.

— Таныр, — ти кәләше. — Һинең менән этебеҙ ҙә барыр. Уны күргәс, һинең үҙ кейәүҙәре икәнлегеңде белерҙәр.

Шунан һуң егет юлға сығып китә. Эй бара был, эй бара, эт тә унан бер тотам ҡалмай. Бара торғас, былар төптә әҙәм аяҡ баçмаған, ҡоштар ғына осоп килә торған бер ҡараңғы урманға килеп етәләр. Ул арала булмай, төн етә, ҡойоп ямғыр яуа башлай. Инде нимә эшләргә, күҙгә төртһәң күренмәçлек ҡараңғы. Аптырай егет. Эт, бер нәмәгә ҡарамай, урманға инә лә китә. Егет белә бит инде уның артынан ҡалмаçҡа икәнен, эт артынан эйәрә. Урман эсенән бара торғас, былар ҙур бер диңгеҙ ситенә килеп сығалар. Диңгеҙҙең осоҡырыйы күренмәй. Шунан һуң эт уны бер бейек тирәк төбөнә килтерә. Был тирәк шул тиклем бейек, осо күккә олғашҡан, ти, күтәрелеп ҡараһаң, баштан кәпәс төшөп китә, ти. Был тирәк төбөнә килеп туҡтағас, көслө ел-дауыл күтәрелеп китә. Ул арала булмай, тирәк, тамыры аҡтарылып, диңгеҙ өçтөнә ауа, эт ошо тирәкте буйлап ары китә башлай. Билдәле, егет тә унан ҡалмай инде. Эй баралар, эй баралар, диңгеҙҙең аръяғына сығып етә яҙалар. Тик шуныһы: тирәктең осо саҡ ҡына диңгеҙ ярына етмәй икән. Шунан уның бер ботағын һындырып алып баçма һалалар ҙа һин дә мин аръяҡҡа сығып етәләр былар.

Сығып етһәләр, диңгеҙ аръяғы йәйрәп ятҡан матур ҡыйғыл ялан, ти. Егет был яландың күркенә һоҡланып бөтә алмай. Донъяла юҡ сәскәләр бар, ти, бында. Былар, ошо ялан буйлап бара торғас, бик матур ҡырҡ ҡатлы бер йорт эргәһенә килеп етәләр. Шунда уҡ эт өйгә керә лә китә. Ул арала булмай, эткә эйәреп, йорттан алты йәшлек егермеләгән бала килеп сыға. Улар барыһы ла бер тиң, береһенән-береһе һылыу, бер төçлө үк кейенгәндәр, ти. Былар егетте күргәс:



Һыу ҡыҙы



Шәгәле

— Эй, еҙнәбеҙ килгән! Еҙнәбеҙ килгән! — тип ҡыуанышырға тотонғандар.

— Тик еҙнә, — тигәндәр улар, — өйгә инмә, атайыбыҙҙың бик асыулы сағы.

Егет риза булған быға; балалар уны икенсе ергә алып китәләр.

— Бер ҙә башҡа йорт күренмәй ҙә баһа, былар ҡайҙа алып баралар икән, — тип, егет бер аҙ ҡурҡа төшә. Эт һаман ҡойроғон болғай, балаларҙың аяҡ аҫтында уралып, уйнай бирә, ти. Шунан егет тә тыныслана. Бара торғас, былар ергә өңөп яһалған бик матур ҡапҡа төбөнә килеп етәләр. Балалар шул ҡапҡанан инеп юҡ була башлайҙар. Егет тә улар артынан төшә. Төшһә, ни күҙе менән күрһен, ер аҫтында иҫ китмәле матур йорт, ти. Был йорт эсендә зыҡ ҡубып, тегеләре һымаҡ, бәләкәй генә ҡырҡ бала уйнап йөрөй, ти. Былары ла, Янһарыны күргәс:

— Еҙнәбеҙ килгән! Еҙнәбеҙ килгән! — тип, сәпәкә итеп, ырғып төшәләр, ти.

— Тик, — тиҙәр улар, — еҙнә, һин ошонан сыҡмай тор, беҙ башта атайыбыҙға үҙебеҙ хәбәр итәйек, шунан күрештерербеҙ.

Ярар, балалар сығып китәләр ҙә аталары янына барып:

— Атай, еҙнәбеҙ килгән, апайыбыҙҙан хат бар. Еҙнәбеҙ менән этебеҙ Ҡотҡармаҫ та килгән, — тип хәбәр итәләр.

Был, йөҙ ҡырҡ йәшлек ҡарт, дейеү пәрейҙәренең атаһы икән. Хатты алып уҡығас, ҡыҙын бәләнән ҡотҡарыусы егет — үҙ кейәүе икәнен белгәс, ҡарт дейеү:

— Барығыҙ, бында килтерегеҙ, күрәйем, — ти.

Шунан балалар, ҡабат теге ер аҫты һарайына киләләр ҙә Янһарыны үҙҙәренсә кейендереп, аталары янына алып баралар. Ҡарт дейеү кейәүҙе ҡәҙерләп ҡаршы алып, үҙ эргәһенән урын бирә лә донъя хәлдәрен һораша башлай. Янһары бөтә күргән-белгәндәрен һөйләп биргәс, уға:



7 Заказ 376

— Мин кейәүегеҙ булам инде. Бына Ҡотҡармаç менән ҡунаҡҡа килдек, — ти.

— Ярар, яҡшы булған, — ти ҡарт дейеү. — Тик әйт әле, кейәү: нимә әсе, нимә йомшаҡ, нимә ҡаты? — ти. Был бит инде кейәүҙе һынамаҡ була. Янһары аҙыраҡ ҡына уйланып тора ла:

— Әсеһе уның, ҡайным — алама һүҙ; йомшағы — әсә ҡуйыны; ҡатыһы — ил асыуы, — ти.

— Ҡашҡа ир икәнһең, кейәү, мең йәшә! — ти ҡарт, кейәүенән бик риза була. Шунан былар өс көн, өс төн буйына туй итәләр, ҡунаҡ булалар.

Туй бөткәс, Янһары ҡайныһына, һүҙҙең яйын килтереп:

— Яҡты йөҙөң, һый-хөрмәтең өсөн рәхмәт, ҡайным. Минең бер йомошом бар ине бит әле: бар менән юҡты ҡалай итеп табырға икән? — ти.

— Ярар, балам, — ти ҡарт, — бәлки, ул ошонда ғыналыр, ҡарап ҡарайыҡ, — ти ҙә һике аҫтынан бер ҡумта тартып сығара. — Тик юлда уны аса күрмә, бар менән юҡты таптырған кеше эргәһенә барғас ҡына ас.

Егет тағы ла бер нисә көн ҡунаҡ булғас, ҡумтаны ҡултығына ҡыҫтырып, ҡайтып китә. Инде утыҙ туғыҙ көн тигәндә ул өйөнә ҡайтып етеп, бер кис өйөндә йоҡлай ҙа батша ҡаршыһына бара.

— Йә, — ти батша, уны күргәс, — бар менән юҡты алып килдеңме?

— Алып килдем, — ти Һонтай егете, — бына асып ҡара.

Батшаға ҡумтаны тоттора ла был, үҙе сығып китмәй, ишек төбөндә ҡарап тора башлай. Батша этләнеп, нимә барлығын күрергә ашҡынып, ҡумтаны аса. Асһа, ҡумта эсендә тағы бер ҡумта бар, ти. Батша уныһын да аса. Эстәге бәләкәй ҡумтаны ла асҡас, унан, күгәүен ҙурлығы ғына ҡош һымаҡ, бер нәмә осоп сыға ла зырлап әйләнеп, батшаның башын үтә тишеп сығып, күҙҙән юҡ була. Шул ерҙә батша, тынын да ала алмай, йығылып үлә.

Әкиәт ошо ерҙә тамам. Бар сағында — байрам, юҡ сағында — айран. Әкиәтем оҡшаһа, ярат, бүтәндәргә тарат; оҡшамаһа, юҡты таптырма, башты ҡатырма.

## БОЛАНСЫ МӘРГӘН

Борон-борон заманда бер әбей менән бабай йәшәгән, ти. Уларҙың Болансы Мәргән тигән улы, Аҡбикәс тигән ҡыҙҙары булған. Боланды мәргән атҡанға улдарын шулай Болансы Мәргән тип йөрөткәндәр, ти.

Бер саҡ әбей ҙә, бабай ҙа үлеп киткән. Аҡбикәс менән Болансы Мәргән икәүһе тороп ҡала. Болансы Мәргән һунарға йөрөп, Аҡбикәс тамаҡҡа йүнәткән.

Көндәрҙән бер көндө Болансы Мәргән, дуҫ егете менән һунарҙа йөрөгән саҡта, бер иргәйел осрата. Был иргәйел Болансы Мәргәнгә:

— Көрәшәбеҙме? — ти.

Болансы Мәргән уға:

— Көрәшһәм, көсөм әрәм, атһам, мылтығымдың яһауы әрәм, — ти ҙә китә лә бара.

Болансы Мәргән өйгә ҡайтып килһә, өйөн болот түңәрәтеп йөрөүен күрә. Иптәше:

— Юҡҡа һин теге иргәйелгә улай тип яуап ҡайтарҙың, уның менән ҡаты һөйләшергә кәрәкмәҫ ине. Бына хәҙер, күрҙеңме, өйөңдө ни эшләтә!

Өйгә инһәләр, Аҡбикәс юҡ, ти. Болансы Мәргән бик ҡайғыра, ҡарындашын эҙләп китергә була.

Ил үтә, ер үтә, бара торғас, юлда бер ҡуҫҡар[1] ятҡа-

---

[1] Ҡуҫҡар — һарыҡ.

нын күрә. Был ҡусҡар кәтәүҙән ҡалған булған. Башы ҡортлап бөткән. Болансы Мәргән ҡусҡар башындағы ҡортто сүпләй. Ҡусҡар егеткә:

— Минең өс бөртөк йөнөмдө ал, ул һинең бер эшеңә ярар, — ти.

Болансы Мәргән, өс бөртөк йөнөн алып, артабан китә. Алда бер ҡороған күл күренә. Шул күлдә һыу юҡлыҡтан бер суртан үлергә ята. Егет суртанды тотоп һыуға ебәрә. Суртан да уға өс бөртөк тәңкәһен алырға ҡушҡан.

Оҙон-оҙон юлдар үткәс, күп һыуҙар кискәс, Болансы Мәргән бер ҙур тирәк үҫеп ултырғанын күрә, шунда ултырып хәл алырға була. Хәл алып ултырған саҡта, ел-дауыл ҡуба. Ағас башында Сәмреғоштоң ояһы бар икән. Шунда уның балалары сырылдаша башлай. Болансы Мәргән бер аждаһаның ағас башына үрмәләп менеп барғанын күрә. Йәһәт кенә, ҡылысын алып, аждаһаны тураҡлап ырғыта. Сәмреғош балалары был егетте ҡанат аҫтарына йәшерәләр. Сөнки әсәләре ҡайтып килһә, белмәйенсә, ҡапыл егетте ашап ҡуйыр тип ҡурҡалар. Сәмреғош ҡайта.

— Ниндәй әҙәм еҫе сыға? — тип тирә-яғына ҡарана башлай.

— Ашамаһаң, күрһәтәбеҙ, — тип ҡысҡырыша балалары.

Сәмреғош ашамаҫҡа һүҙ бирә. Сәмреғош, эштең ниҙә икәнен төшөнгәс, бик шатлана. Теге аждаһа, йыл да килеп, уның балаларын ашап китер булған. Сәмреғош Болансы Мәргәндең был эшенә яҡшылыҡ менән яуап ҡайтарырға уйлап:

— Минең өс бөртөк ҡауырыйымды ал, кәрәге булыр, — ти.

Болансы Мәргән, Сәмреғоштоң өс бөртөк ҡауырыйын алып, артабан китә.

Бик күп ерҙәр үткәс, йыраҡта бер тау ярығынан төтөн сығып торғанын күрә. Шул тау янына барһа, тау төшегендә бер әбей ултыра. Уның башында өс бөртөк сәс, ауыҙында өс бөртөк теше бар. Үҙе йөн иләй икән.

— Әссәләмәғәләйкүм, инәй кеше, — ти егет.

— Ошо сәләмең булмаһа, уртыма алып йотор инем. Ни йомошоң бар? — ти әбей.

— Борон бик бәләкәй бер иргәйел күрҙем, ул минең менән көрәшергә теләне. Мин уның теләгән кире ҡаҡтым. Өйгә ҡайтҡас, ҡарындашым Аҡбикәстең юғалғанын белдем. Бына хәҙер шул ҡарындашымды эҙләй киттем, — ти Болансы Мәргән.

— Мин белмәйем. Белһә, минән өлкән апайым белер. Шуға бар, — ти әбей. Егеткә юл өйрәтә.

Болансы Мәргән, әбейгә рәхмәт әйтеп, сығып китә. Бара-бара бик оҙон юл үтә. Бара торғас, йыраҡтан ер ярығынан ҡара болот ҡеүек төтөн сығып тора. Барып етһә, башында ике бөртөк сәсле, ауыҙында ике бөртөк тешле бер әбей ултыра.

— Әссәләмәғәләйкүм, инәй кеше?

— Ошо сәләмең булмаһа, тыным менән һурып алып йотор инем. Ни йомошоң бар?

Болансы Мәргән булған хәлде һөйләп бирә. Бында был әбейҙең һеңлеһе ебәргәнен аңлата.

— Белмәйем. Белһә, минән өлкән апайым белер, — ти әбей. Егеткә юл өйрәтә.

Болансы Мәргән, әбейгә рәхмәттәр әйтеп, әбейҙең оло апаһына китә. Был юлы Болансы Мәргәнгә бик оҙаҡ барырға тура килә. Күп ерҙәр, һыуҙар кисә, тауҙар үтә. Бара торғас, йыраҡта тау тишегенән осҡондар сәселеп, ҡара төтөн сығып торғанын күрә. Ошо урынға килеп етһә, башында бер бөртөк сәсе, ауыҙында бер бөртөк теше ҡалған, бөкрәйеп бөткән бер әбей ултыра.

— Әссәләмәғәләйкүм, инәй кеше!

— Ошо сәләмең булмаһа, тотоп ашар инем. Ни йомош?

Болансы Мәргән ҡайҙан килеүен, ни өсөн юлға сығыуын бәйнә-бәйнә һөйләп бирә. Әбей, егеттең һүҙен тыңлап бөткәндең һуңында, уға ошо һүҙҙәрҙе әйтә:

— Һинең ҡарындашыңды алып киткән иргәйел саф әҙәм затынан түгел. Уның әсәһе әҙәм затынан, атаһы дейеү затынан. Уның сихырҙары — дейеү сихырҙары.

Уның менән көрәшһәң, барыбер еңә алмаç инең, һин уға мин һунарсымын, көрәшсе түгелмен, тип яйына ғына һыпырһаң, ҡарындашыңды алып ҡасмаç ине. Уға барып етеү өсөн ҡырҡ аҙналыҡ юл бар. Барып еткәс, тәүҙә ҡарындашыңды күр, көрәшеп, дейеүҙе еңә алмаçһың. Аҡбикәс дейеүҙән йәненең ҡайҙа икәнлеген һораһын. Асығын белгәс, шуның йәнен генә һәләк итеп, ҡарындашыңды алып китерһең, ти.

Егет әбейҙең һүҙҙәрен ихлас тыңлай. Әбей өйрәткәнсә, ҡырҡ аҙналыҡ юлға сығып китә. Бара ята, бара ята, бара торғас, дейеү йәшәгән ҡалаға килеп етә. Һәр өй тәҙрәһенән ҡарап, ҡарындашын эҙләп йөрөй. Бына ул бер өйҙә бер әбейҙең бала бәүетеп ултырғанын күрә. Был әбей үҙе көйләп, йырлап ултыра: «Әүәй-бәүәй, Болансы Мәргән ҡарындашы Аҡбикәстең ҡыҙы бәү-бәү», — ти.

Болансы Мәргән, ҡарындашым ошонда тора икән тип, шатланып ҡуя. Ҡарап торғанда, өйгә бер ир кеше артынан елән бөркәнгән бер ҡатын инеп китә. Егет аңдып тора, көтә. Теге ҡатын өйҙән тағы тышҡа сыға. Болансы Мәргән:

— Аҡбикәс! — тип өндәшә, үҙе Аҡбикәскә ҡысҡырмаçҡа ҡуша. Аҡбикәс, ағаһын күреп, бик ныҡ шатлана.

— Әйҙә, ҡайтып китәбеҙ, ҡасабыҙ, — ти. Ағаһы ҡарындашына:

— Хәҙер китеп булмай. Китер өсөн башта дейеүҙең йәнен юҡ итергә кәрәк. Шуның өсөн һин унан йәне ҡайҙа икәнен һора, — ти.

Аҡбикәс өйгә ингәс, дейеүҙән:

— Ни ғүмер бергә торабыҙ, исмаһам, йәнеңдең ҡайҙа икәнен дә белмәйем. Йәнең ҡайҙа һинең? — ти.

Дейеү уның был һорауына:

— Йәнем үҙем менән, — ти.

Аҡбикәс үпкәләгән булып:

— Һин мине шаяртаһың, — ти. Дейеү Аҡбикәскә:

— Йәнем һеперткелә, — ти.

Аҡбикәс быны ағаһына әйтә. Ағаһы ышанмай, ҡарындашына:

— Һин ул һеперткене сәскә кеүек итеп һауыҭҡа, һыуға ултыртып ҡуй. Һине һағынам, һин юҡта, мин шуға ғына ҡарап торам, тип әйт, — ти. Аҡбикәс ағаһы өйрәткәнсә эшләй. Ул дейеүгә:

— Минең ағайымдың йәне мылтығында ине, — ти. Дейеү, быны күреп, Аҡбикәсте ҡыҙғана, йәненең ҡайҙа икәнлеген әйтә.

— Анауында күл бар, күл өҫтөндә утрауҙа тирәк үҫеп ултыра. Шул тирәк башындағы ояла йомортҡа бар. Шул йомортҡа минең йәнем, — ти.

Аҡбикәс тиҙ генә был һүҙҙәрҙе ағаһына еткерә, тиҙҙән дейеүҙең ун ете айлыҡ юлға сығасағын әйтә.

Дейеүҙең юлға сығыр көнө килеп етә. Дейеү оҙон юлға сығып китә.

Болансы Мәргән күл янына бара. Күл уртаһындағы утрауҙа бер тирәк үҫеп ултырғанын күрә. Нисек ул утрауға барырға? Шул ваҡыт егет Сәмреғош биргән өс ҡауырһынды көйҙөрә, шунда уҡ Сәмреғош осоп килеп етә. Сәмреғош менән йомортҡаны алып сығып килгәндә, йомортҡаны ҡапыл күлгә төшөрөп ебәрә. Хәҙер ни эшләргә? Болансы Мәргән балыҡтың өс бөртөк тәңкәһен көйҙөрә, шунда уҡ балыҡ йөҙөп килеп етә. Егеттең һүҙен тыңлап, һыуға төшкән йомортҡаны килтереп бирә.

Егет йомортҡаны ергә бәрә. Бәреү менән күл ҡайнай башлай. Дейеү үлергә тейеш, шуның өсөн ул шулай ҡайнай икән.

Дейеү үлеү өсөн ун ете айлыҡ юлға сыҡҡан еренән кире ҡайтып китә. Күл өс көн, өс төн ҡайнай.

Аҡбикәс менән Болансы Мәргән ҡасалар. Ҡасып бара ятҡанда, бик көслө дауыл сыға. Былар, дауылда аҙашырбыҙ тип, бер оло ҡара таш аҫтына инеп ултыралар. Дейеү был ваҡытта үлә башлаған була. Шулай булһа ла, уның көсө була әле.

Бер ваҡыт, ағаһы менән һеңлеһе ошо таш аҫтында

ҡасып ултырған саҡта, дейеүҙең ҡөҙрәтенән таш әйләнеп китә лә быларҙың сыға торған юлын ҡаплай.

Болансы Мәргәндең ҡусҡар биргән өс бөртөк йөн киҫәге иҫенә төшә. Егет ошо өс бөртөк йөндө көйҙөрә. Шул саҡ ҡусҡар башы тәгәрәп килеп төшә. Болансы Мәргән ҡусҡар башы менән ташҡа өс тапҡыр килтереп бәрә, таш та ярыла, ҡусҡарҙың башы ла ярыла, Болансы Мәргән менән Аҡбикәс сығып китәләр. Сыҡһалар, дауыл баҫылған. Егет менән һеңлеһе өйҙәренә ҡайтып китә.

Болансы Мәргән менән Аҡбикәс әле булһа шул өйҙәрендә йәшәп яталар, ти. Болансы Мәргән әүәлгесә һунарға йөрөй икән, Аҡбикәс уның ҡайтыуына тамаҡҡа йүнәтеп тора, ти.

## БАТША, ЕГЕТ, АЖДАҺА

Борон-борон заманда бер батша булған. Уның бер ҡатыны булған. Бала-сағалары булмаған.

Бер ваҡыт батша үҙенең ғәскәре менән ауға сығып киткән. Бик йыраҡ киткәндәр, шул хәтле эҫе илдәргә барып еткәндәр, бик ҡаты һыуһағандар. Һыу эҙләп йөрөй торғас, бер ҡоҙоҡҡа барып сығалар. Ғәскәре, эсеп туйып, ҡоҙоҡ эргәһенән киткәс, батша үҙе һыу эсә башлай. Һыу эсеп торһа, ел-дауыл ҡуптарып бер аждаһа килеп сыға ла батшаға:

— Ниңә минең һыуымды эсәһең? Хәҙер үҙеңде лә, ғәскәреңде лә юҡ итәм! — тип ҡысҡыра.

Батша ҡурҡа башлай, ни эшләргә белмәй, аптырап тора.

— Алыш бармы, көрәш бармы? — ти Аждаһа.

Батша еңеләсәген белә:

— Алыш та юҡ, көрәш тә юҡ, — ти.

— Ярай, улай булғас, һинең артыңда бер нәмәң бар, шуны бирһәң, һау ҡайтаһың, бирмәһәң, мин һине хәҙер үк ашайым, — ти аждаһа.

Батша уйлай-уйлай осона сыға алмай.

— Минең артымда ҡатынымдан башҡа бер нәмәм дә юҡ, — ти батша.

— Артыңда бер нәмәң бар, шуны бир, — ти аждаһа.

— Улай булғас, ярай, — ти батша, — тик үҙемде ҡайтар, — ти.

Аждаһа бер яҙыу төрөп бирә, батша ҡул ҡуя.

— Был ҡағыҙҙы тағатма, юғалта күрмә, һаҡлап тот, өйөңә ҡайтҡас уҡырһың! — ти ҙә аждаһа килгән яғына осоп китә. Батша үҙенең ғәскәре янына саба. Ғәскәренә барып етә лә:

— Минең артта нимә бар, кем белә, шул сығып әйтһен, — ти.

Ғәскәре, аптырап:

— Беҙ бер нәмә лә белмәйбеҙ, — тип тик тора.

Шунан батша ғәскәрен бороп, кире ҡайтып китәләр. Ҡайтып инһәләр, батша ни күҙе менән күрһен, шул хәтле һылыу бер улы бар. Батша бик шатлана, хатта дейеү менән булған хәлде лә, ҡағыҙҙы ла онота.

Ай артынан ай үтә, йыл артынан йыл үтә, былар шулай рәхәтләнеп йәшәп яталар. Теге малай ҙурая, ун өс йәшкә етә. Малайҙы уҡырға бирәләр. Ул шул хәтле яҡшы уҡый.

Бер көндө аталары йоҡлап бөтәләр, теге малайҙың, әллә ни эшләптер, һис тә йоҡоһо килмәй. Йоҡлай алмағас, малай атаһының кеҫәләрен аҡтарырға тотонop китә. Кеҫәнән дейеү биреп ҡалдырған теге ҡағыҙ килеп сыға. Малай ҡағыҙҙы ала ла тағатып уҡый башлай. Уҡый, уҡыған һайын аптырай бара. Ҡағыҙҙа бөтәһе лә яҙылған икән: «Малайың ун һигеҙ йәшкә еткәс тә, миңә бирерһең», — тигән икән.

Малай илай башлай, эй илай, эй илай, ти. Илап-илап, теге ҡағыҙҙы тотоп ятып торһа, шул көйө

йоҡлай ҙа китә. Таң ата. Атаһы тороп, улын ҡараһа, улының бер ҡағыҙ тотоп ятҡанын күрә. Дейеү биргән ҡағыҙҙы танып, батша:

— Эй улым, үҙемдән булды шул, — ти ҙә ҡағыҙҙы икенсе урынға йыйып ҡуя.

Малай йоҡонан тора ла:

— Теге минең ҡағыҙ ҡайҙа? — тип һорай.

Батша:

— Һинең ниндәй ҡағыҙың булһын? — ти.

Малай атаһының янына килә лә илай башлай.

— Ярай, атай, һин мине аждаһаға биргәнһең икән, танма, бөтәһен дә уҡыным, — ти. Атаһы тыңлап тора ла:

— Эйе, улым, шулай тура килде шул, — тип эштең нисек булғанын улына һөйләп бирә.

Тағы ла бер нисә йыл ғүмер уҙып китә. Малайға ун һигеҙ йәш тула. Уға дейеүгә китергә ваҡыт етә.

— Ярай, атай, — ти егет, — мин китәйем. Миңә бөтмәҫ аҙыҡ менән туҙмаҫ аяҡ кейеме бирегеҙ.

Малайға бөтмәҫ аҙыҡ, туҙмаҫ аяҡ кейеме табып бирәләр. Ата-әсәһе менән хушлашып сығып китә. Ауылды сыҡҡас та, бер мәскәй әбейгә осрай. Егет әбейгә ҡайҙа юл алғанын һөйләп бирә. Мәскәй:

— Мин бер нәмә лә белмәйем, минән ары бер апайым бар, шул белһә, белер, — ти.

Егет ары китә. Китә торғас, мәскәй әбейҙең апаһына барып сыға. Теге әбейгә лә һөйләп бирә. Әбей:

— Минән ары бер апайым бар, шул һиңә юл өйрәтер, шуға бар, ти.

Егет тағы ла китә. Китә торғас, иң оло мәскәй әбейгә барып сыға.

— Әбей, мин щулай-шулай, шуны эҙләп китеп барам, белмәйһеңме? — ти.

— Эйе, улым, — ти әбей. — Мин уны бик асыҡ беләм. Тик һин барырһың, ул һине ашар шул, — ти.

— Ни эшләйһең, — ти егет, — һүҙ ҡуйышҡас, барырға кәрәк. Ашаһа, ашар, — ти.

Шул ерҙә әбей егеткә аҡыл өйрәтергә була.

— Дейеүҙең ҡырҡ ҡыҙы бар, — ти. — Һин иң элек атайың һыу эскән ҡоҙоҡҡа бар. Шул ҡоҙоҡтоң артында бер йылға булыр, шул йылғаның артына бар ҙа бер соҡор ҡаҙып, эсенә инеп ят. Ята торғас, утыҙ туғыҙ торна килеп сығыр. Улар һыу буйына килеп төшөрҙәр ҙа сисенерҙәр. Сисенгәс, улар шул хәтле һылыу ҡыҙға әйләнерҙәр, шул хәтле көлөшөрҙәр, һинең шул хәтле ҡарағың килер, тик һин ҡарама, — ти. — Улар һыу төшөп бөтөрҙәр ҙә китерҙәр. Улар киткәс тә, бер яңғыҙ торна килер, сисенеп ҡойона башлар. Һин ырғып ҡына тор, ҡултығыңа уның торна тунын ҡыҫтыр ҙа китеп барған кеше бул, — ти әбей. — Аҙағын теге торна үҙе белер.

Егет сығып китә. Атаһы һыу эскән ҡоҙоҡҡа барып етә. Был ҡоҙоҡтоң артында сылтырап ҡына йылға ағып ята икән. Егет килә лә, әбей өйрәткәнсә, соҡор ҡаҙып ята. Егет ята торғас, утыҙ туғыҙ торна килеп төшә. Сисенһәләр, һылыу ҡыҙға әйләнәләр, һыуҙа ҡойона башлайҙар. Былар шул хәтле көлөшәләр, егеттең ҡарағыһы килә башлай. Шулай ҙа ул әбей өйрәткәнсә эшләй: ҡарамай, тик ята. Утыҙ туғыҙ торна, ҡойоноп бөткәс, осоп китә.

Улар осоп киткәс, күп тә тормай, бер яңғыҙ ғына торна килеп төшә. Килеп төшөп, торна тунын сисә лә ҡыҙға әйләнә. Егет ырғып ҡына тора ла, тегенең торна тунын ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып, йәһәт кенә китә башлай. Ҡыҙ күреп ҡала.

— Туҡта, егет, ҡайҙа бараһың? Минең торна тунымды биреп кит! — тип ҡысҡыра. Егет, белмәмеш-ишетмәмеш кеше булып, тик бара икән. Ҡыҙ тағы ла ҡысҡыра. Шунан егет килә лә ҡыҙға торна тунын бирә. Ҡыҙ егеттән:

— Ҡайҙан, ни өсөн килдең? — тип һораша. Егет барыһын да түкмәй-сәсмәй һөйләп бирә.

— Эй егет, егет, барһаң, һине атайым ашай инде ул. Ярай, һин хәҙер беҙҙең торған яҡҡа бар, бер иш ҡырҡ өй булыр, шул өйҙәрҙе хисаплап бар. Ҡырҡынсы өй минеке булыр, шул өйгә ин. Яңылышмай хисапла, әгәр

яңылышһаң, икенсе өйгә инерһең, ә унда һине ашарҙар, — ти ҡыҙ.

Егет китә. Килһә, бер иш кенә ҡырҡ өй теҙелешеп ҡарап ултыра. Шул хәтле йәмлеләр, күҙҙең яуын алып торалар, ти. Егет хисаплай башлай. Хисаплап килә-килә утыҙ туғыҙ өйҙө һанай ҙа ҡырҡынсы өйгә инә. Инһә, элеге ҡыҙ ултыра.

— Йә, егет, килдеңме? — тип һорай ҡыҙ.

— Килдем, — ти егет.

— Ярай, килдең. Һин хәҙер атайымдарҙың өйөнә бар. Тәүҙә әсәйемә күреш, һуңынан атайыма күрешерһең. Әгәр ҙә тәүҙә атайыма күрешһәң, ул һине ашар, — ти.

Егет китә. Өйҙәренә барып керә лә һаулыҡ һораша.

— Йә, егет, килдеңме? — ти аждаһа.

— Килдем, — ти ҙә егет аждаһаның ҡатынына барып күрешә. Һуңынан ғына аждаһаға күрешә.

— Һи эттәгенәһе, ниңә уға тәүҙә күрештең, миңә күрешмәй, — тип, аждаһа ирешә башлай. — Ярай, — ти, — мин һиңә бер эш ҡушам, шуны эшлә. Бар, ҡомға барып, ҡомдан кәбән өй, — ти. Егет илап сығып китә. Ҡыҙ бының илағанын күрә лә:

— Ниңә илайһың? — тип һорай.

— Аждаһа миңә ҡомдан кәбән өйөргә ҡушты, шуға илайым, нисек эшләйем һуң? — ти егет.

— Ярай, ҡайғырма, егет, уның өсөн. Ят та йоҡла, — ти ҡыҙ.

Егет йоҡларға ята. Ҡыҙ тышҡа сыға ла әсе итеп һыҙғырып ебәрә. Бер ваҡыт утыҙ туғыҙ ҡыҙ килеп етте, ти.

— Барығыҙ, ҡомдан кәбән өйөгөҙ, — тип бойора ҡыҙ тегеләргә.

Ҡыҙҙар:

— Була ул, — тип йүгерешеп китеп тә баралар.

Иртәнсәк ҡыҙ егетте:

— Бар, кәбәндәр янына көрәк алып бар ҙа яҡ-яғын һылап-һыйпап йөрөгән бул, — тип уята. — Атайым

килеп ҡараһа: «Минән юкты эшләтәһең», — тип әйт тә көрәгең менән төрт тә ебәр. Ул ыуылыр ҙа китер, — ти.

Егет көрәк ала ла китә. Килһә, ҡомдан кәбән тора. Егет кәбәндең яҡ-яғын һыйпаштырырға тотона. Шул арала аждаһа килеп етә. Килеп аптырап ҡарап тора. Үҙе эстән генә: «Был нисек эшләне икән? Инде ни хәл итәйем, алдап булманы бит этте», — тип уйлай икән.

Егет аждаһаға ҡарай ҙа:

— Эй, минән юкты эшләтәһең, — тип, көрәге менән кәбәнгә төртә лә ебәрә. Кәбән ыуыла ла төшә.

— Ярай, — ти аждаһа, — инде ҡырҡ арҡан иш ҡомдан!

Дейеү ҡайтып китә, егет уйға батып аптырап тороп ҡала.

— Инде быны нисек эшләргә? — ти ҙә илап ҡайтып китә.

— Ниңә илайһың? — тип һорай ҡыҙ.

— Ҡомдан ҡырҡ арҡан ишергә ҡушты, — ти егет.

— Ҡайғырма уның өсөн, ят та йоҡла, — ти ҡыҙ.

Егет ятып йоҡлай. Ҡыҙ, тышҡа сығып, һыҙғырып ебәрһә, утыҙ туғыҙ ҡыҙ килеп етә.

— Барығыҙ, ҡомдан ҡырҡ арҡан ишегеҙ, — ти ҡыҙ.

Иртәнсәк ҡыҙ егетте уята:

— Тор, атайым барыуға арҡандарҙы ипләштереп йөрө, — ти.

Егет барһа, ҡомдан ҡырҡ арҡан ишелеп ҡуйылған. Бара ла шуларҙы ипләштереп йөрөгән була. Аждаһа килә. «Был нисек эшләне икән?» — тип аптырай. Егет:

— Эй, минән юкты эшләтәһең, — ти ҙә арҡандарҙы төртә лә ебәрә. Арҡандар ыуылып бөтә.

— Ярай, һин инде бер күпер төҙө, — ти аждаһа. — Ул минең өйҙөң мөйөшөнән башланһын, үҙе шул хәтле һәйбәт булһын: бер яғынан бал аҡһын, бер яғынан һөт аҡһын, музыка уйнап торһон, машиналар бер туҡтауһыҙ йөрөп торһон, — ти.

Егет, бик нык кайғырып, өйөнә кайтып китә. Кайткас, кыҙ егеттән:

— Иә, тағы ла нимә кушты? — тип һораша.

Егет түкмәй-сәсмәй барын да һөйләп бирә.

— Кайғырма, егет, — ти кыҙ, — ят та йокла.

Кыҙ, сығып, әсе итеп һыҙғырып ебәрһә, утыҙ туғыҙ кыҙ килеп етә. Кыҙ уларҙы эшкә куша. Иртәнсәк кыҙ егетте уята:

— Бар, күпер өҫтөндә балтаңды тотоп йөрөгән кеше бул, — ти. Егет китә. Күпер өҫтөндә балтаһын тотоп, кағыштырып-һуғыштырып йөрөп ятҡан була. Аждаһа килһә, иҫе китә: өйҙөң бер мөйөшөнән алып күпер төҙөлгән, күперҙең бер яғынан бал, икенсе яғынан һөт аға; музыка уйнап, машиналар йөрөп, кешеләр, баҙарҙағы кеүек, геүләшеп, кайнашып торалар. Карап тора торғас, аждаһаның шау-гөргә колағы тона башлай.

— Етер, бөтөр инде, — тип кыскыра икән егеткә.

Егет тәртөп ебәрһә, күпер юкка сыға. Аждаһа ла, егет тә өйҙәренә кайтып китәләр.

— Ярай, — ти кыҙ, — инде атайым һине үҙенә сакырыр. Утыҙ туғыҙ гармун булыр, мейес араһында бер иҫке туҫтак ултырыр. Атайым һиңә: «Бер гармунды алып уйна!» — тип әйтер. Һин туҫтакты алып, шуны гармун итеп уйнарһың.

Бер вакыт аждаһа егетте сакырып ала ла:

— Ана, улым, утыҙ туғыҙ гармун ултыра, теләгәнеңде алып уйна. Сит илдә йөрөп, үҙ көйҙәреңде һағынып киткәнһеңдер, — ти.

— Миңә анау туҫтак та ярай, мин гармун уйнай белмәйем, — ти ҙә егет туҫтакты барып ала.

— Эй, суска, һиңә ул иҫке туҫтак ниңә кәрәк, — тип кыскыра дейеү. Туҫтак тигәне теге кыҙ булып сыға.

— Ярай, — ти кыҙ, өйҙәренә кайткас, — быныһынан да котолдоң инде. Иртәгә атайым һине тағы ла сакырып алыр: «Утыҙ туғыҙ скрипканың береһен алып уйна!» — тиер. Һин мейес артында торған бер корсаңғы ғына бәрәсте алырһың, — ти.

Иртәгеһен иртүк аждаһа егетте саҡыртып ала. Егет барһа, күҙҙең яуын алып утыҙ туғыҙ скрипка эленеп тора, ти. Аждаһа егеткә скрипканың береһен алып уйнарға ҡуша. Егет:

— Миңә бынау ҡорсаңғы бәрәс тә ярар, — ти ҙә бәрәсте күтәреп алып сыға ла китә. Бәрәсте алып ҡайтып ебәрһә, теге ҡыҙ була ла ҡуя.

— Ярай, егет, — ти ҡыҙ, — быныһынан да ҡотолдоң. Инде иң һуңғыһы, иң ауыры ҡалды. — ти. — Уныһынан ҡотолһаң, бөтөнләйгә ҡотолаһың. Атайым һине тағы ла саҡыртып алдырыр. «Бына ҡырҡ күгәрсен ултыра, араһынан үҙең теләгәнде һайлап ал!» — тиер. Атайым ҡарамағанда ғына мин иңбашымды соҡормон. Һин мине шунан белерһең, — ти.

Аждаһа егетте саҡыртып ала. Егет килһә, бары ла бер төҫ ҡырҡ күгәрсен ултыра.

— Иә, һайлап, береһен ала һал, — тип аждаһа егеткә ҡараған арала, теге ҡыҙ иңбашын соҡой һалып ала. Егет тиҙ генә шул күгәрсенде барып тота.

— Һәй, сусҡа малай, икенсеһен алһаң ни була? — тип ҡысҡырына аждаһа.

— Һиңә барыбер түгелме ни? — тип егет күгәрсенде алып ҡайтып китә. Ҡайтҡас та, ҡыҙ:

— Ярай, бөтәһен дә эшләнең. Инде атайым һине үҙе ашай алманы, берәй мәскәйҙән ашатырға уйлар. Беҙ был өйҙән китәйек, — ти.

Былар өрләккә өсәр тапҡыр төкөрәләр ҙә ҡасып сығып китәләр. Бер ваҡыт аждаһа:

— Йоҡлағандарын көтөп тор ҙа үҙҙәрен ашап сыҡ, — тип теге өйгә мәскәйҙе ебәрә.

Мәскәй килеп тыңлаһа, сутыр-сутыр килеп һөйләшеп ултырған тауыш та сыға, ти. Төн буйы көтөп, тауыш тынмағас, мәскәй ҡайтып китә.

— Ашарһың, ашамай ни, улар төнө буйы һөйләшеп ултыра бит, — ти.

Шулай итеп, теге өс төн килә. Дүртенсе төн килһә, тауыш юҡ. Өйгә инһә, ҡыҙ ҙа, егет тә юҡ. Мәскәй, аптырап, барып аждаһаға әйтә:

— Ашарһың, ашамай ни, кейәүең дә, ҡыҙың да ҡасҡан! — ти.

— Аһ, үләт һуҡҡырҙары, — ти ҙә аждаһа бөтә ғәскәрен ҡыҙ менән егетте эҙләтергә ебәрә.

Бер ваҡыт ҡыҙ арттарынан ҡыуа килгән ғәскәрҙе күреп ҡала. Шунан был үҙен дә, егетте лә иҫкереп бөткән тирмән ташы итә лә ҡуя. Ғәскәр, тирмән ташы янына еткәс: «Аждаһа, нимә күрһәгеҙ ҙә алып ырғытығыҙ, тигәйне тиеүен, был иҫке тирмән ташын ни эшләтәһең инде?» — тип һөйләшәләр. Тотоп ҡараһалар, тирмән ташы ватылып бара, ти.

Тегеләр тирмән ташын алмай ҡайтып китәләр. Аждаһа:

— Тоттоғоҙмо? — тип һорай.

— Юҡ, юл буйында бер иҫке тирмән ташы күргәйнек, уны алманыҡ, — тиҙәр.

— Их, һеҙ, ниңә алманығыҙ, өҫтө ҡыҙым, аҫты кейәүем ине! Барығыҙ, инде нимә күренһә лә, алып ҡайтығыҙ, — тип ғәскәрен кире ебәрә.

Аждаһа ғәскәре яман яу булып килә икән. Ҡыҙ, ғәскәр килгәнен күреп, тиҙ генә егетте үҙе насар, үҙе иҫке, бысраҡ, тоторға шул хәтле сиркәнес бер ҡыу һалам итә лә ҡуя. Ғәскәр килеп туҡтай. Тик һаламды тоторға сиркәнәләр. Береһе килеп һаламдың бер ерен соҡоп ҡарай; соҡоған еренә генә бер сысҡан инә лә китә. Ғәскәр кире ҡайтып китә.

— Тапманыҡ, бер ҡыу һаламдан башҡа бер нәмә лә күрмәнек, — тип һөйләп бирәләр.

— Их, һеҙ, сусҡа балалары! Һаламы кейәүем, сысҡаны ҡыҙым ине. Әйттем бит мин һеҙгә, нимә осраһа ла алып ҡайтығыҙ, — тип. Барығыҙ, тағы ла китегеҙ, нимә булһа ла алып ҡайтығыҙ, — тип аждаһа тегеләрҙе орошоп-орошоп кире ебәрә.

Бер ваҡыт ғәскәр ҡара туҙан булып сабып килә, ти. Ҡыҙ тиҙ генә егетте иҫкереп, мөйөштәре төшөп бөткән мәсет итә, үҙе бер ҡарт ҡына бабай була ла ҡуя. Үҙе мәсеттең мөйөштәрен ҡуйып йөрөгән була. Ғәскәр килә лә бабайҙан:

— Бер егет менән бер ҡыҙҙы күрмәнеңме? — тип һорай.

— Эй-й-й, һеҙ һуңланығыҙ бит. Улар мин йәш саҡта, был мәсет яңы саҡта уҙып киткәйнеләр, — ти бабай.

Ғәскәр кире ҡайтып китә. Ҡайтҡас:

— Бер мәсет менән бабай ғына күрҙек. Бабайын алыр инек, мәсетте нисек алып ҡайтайыҡ, — тиҙәр.

— Их, һеҙ, асыҡ ауыҙҙар, бешмәгәндәр! Карты ҡыҙым ине, мәсете кейәүем ине. Һеҙҙән булманы инде, үҙем китәйем, — тип, аждаһа үҙе сығып китә.

Ел-дауыл ҡуптарып эй килә, ти, теге, эй килә, ти. Уның килгәнен күреп, ҡыҙ менән егет суртан булып һыуға төшөп китәләр. Аждаһа күреп ҡалып, ҙурыраҡ суртанға әйләнә лә былар ҙың арттарынан төшә. Аждаһа былар ҙы эй баҫтыра, эй баҫтыра, ти. Инде тотам тигәндә генә, ҡыҙ һыу буйында бер ҡыҙҙың кер сайҡап ултырғанын күреп ҡала. Тиҙ генә сыға ла ҡыҙға:

— Ҡотҡар беҙҙе! Мә, мине көмөш йөҙөк итеп кей. Аждаһа килеп таптыра башлаһа, быр ғыт та ебәр. Ул ваҡланып китер. Шул ваҡытта, зинһар, бер биш бөртөгөн йәшереп алып ҡал инде! — ти ҡыҙ.

Ҡыҙҙы күреп, аждаһа килеп сыға ла көмөш йөҙөктө һорай башлай:

— Бир йөҙөктө! — ти.

— Юҡ, йөҙөк үҙемдеке, — тип ҡыҙ бирмәй. Аждаһа:

— Бирмәһәң, талап алам, — тигәндә генә, ҡыҙ йөҙөктө быр ғыта ла ебәрә. Йөҙөк ваҡланып китә, ҡыҙ биш-алты бөртөгөн аяғы менән баҫып алып ҡала. Аждаһа, әтәс булып, йөҙөктөң ярсыҡтарын сүпләй башлай. Шул ваҡыт ҡыҙы тиҙ генә кеше була ла әтәстең йөнөн йолҡа башлай. Эй йолҡа, эй йолҡа, ти, был, йолҡа торғас, теге аждаһа инәлә башлай:

— Зинһар, ҡыҙым, түбәмдә генә булһа ла бер бөртөк йөнөмдө ҡалдыр инде, — ти.

Ҡыҙ һаман йолҡа. Шул саҡ аждаһа:

— Ашамайым, ашамайым, зинһар, ҡалдыр! — ти.

Ҡыҙ аждаһаның түбәһендә бер генә бөртөк йөнөн ҡалдыра ла ебәрә. Ә үҙе, һыуға төшөп, егетте эҙләп таба. Шунан аждаһа артынан ҡайтып китәләр.

Ҡайтҡас, атаһына барып, ярты байлығын алып, егеттең тыуған ауылына китәләр. Ҡайтһалар, егеттең атаһы улын танымай, уның иҫән булыуына ышанмай, ти. Егет башынан үткәндәрҙе түкмәй-сәсмәй һөйләп бирә. Шунан һуң ғына атаһы үҙ улының ҡайтыуына ышана. Әле булһа улар бергә-бергә татыу ғына донъя көтөп яталар, ти.

Әкиәтем таш йөкмәп китте, үҙем аш йөкмәп ҡалдым.

## АЛТЫН САБАҠ

Борон-борон заманда бер әбей менән бабай йәшәгән. Уларҙың бер генә бөртөк Ҡәләмфүр исемле ҡыҙы булған. Бабай көн һайын ҡыҙы менән балыҡ тоторға йөрөгән. Бер көндө балыҡ тота торғас, былар ҙың селәүҙәре бөткән. Бабай ҡыҙына:

— Мин селәүҙ ҡаҙып килтерәйем, һин ҡармаҡты ҡарап тор, — тигән.

Ҡарттың китеүе булған, ҡыҙға бер сабаҡ ҡапҡан. Ҡармаҡтан ысҡындырып алғас, балыҡ телгә килгән:

— Апай, һин мине ебәр, — тип ялынған сабаҡ. Ҡыҙ уға:

— Һине ебәрһәм, мин бер нәмәһеҙ ҡайтам бит, — тигән. Сабаҡ ҡыҙға былай тигән:

— Ҡайтҡан саҡта атайыңды артыңдан эйәрт, артыңа ҡарама. Шул саҡта һинең уң аяғыңдан алтын, һул аяғыңдан көмөш ҡойолор, — тигән.

Ҡыҙ менән атаһы ҡайтырға сыҡҡандар. Атаһы ҡыҙҙың аяғынан ҡойолоп килгән алтын менән көмөштө йыя бара, ти, үҙе аптырап Кәләмфүрҙән һорай, ти:

— Ҡыҙым, ни булған һинең аяҡтарыңа?

Кәләмфүр сабаҡ менән булған хәлде төкмәй-сәсмәй һөйләп биргән.

Иртәгеһен атаһы, баҙарға барып, алтын менән көмөштө һатып, байып ҡайта. Шунан һуң былар матур итеп өй һалып ебәрәләр, үҙҙәре бер ниндәй хәсрәт күрмәй йәшәй башлайҙар.

Бер ваҡыт батша, ғәскәре менән китеп барғанда, бабайҙың йортон күреп, хайран ҡала, бер һалдатын белешергә ебәрә. Кәләмфүрҙең атаһы бай кейеме кейгән көйө һалдатты ҡаршылай. Һалдат:

— Беҙ үтеп бара инек, шул саҡ батша ошо матур йортто күреп ҡалды, мине йортта кем йәшәүен белергә ебәрҙе, — ти.

Бабай һалдатҡа үҙҙәренең нисек байып китеүен һөйләп бирә.

Иртәгеһен батша үҙе бабай йортона килә, булған хәлде үҙ ҡолағы менән ишетә.

Ҡайтҡас та батша, яусы ебәреп, Кәләмфүрҙе ҡатын итеп ала. Йола буйынса, йыл тулғас, Кәләмфүрҙе мунса төшөрөргә булалар. Ялсы ҡатыны йәш ҡатынды мунсаға алып бара. Уны өйрәк ҡанаты менән йыуырға тотонһа, Кәләмфүр өйрәккә әйләнеп оса ла китә. Ялсы ҡатын үҙенең ҡыҙына ҡатындың кейемдәрен кейендерә лә ҡуя. Батша, бер ни белмәйсә, йәшәй бирә, ти.

Ҡаланың эргәһендә бер күл булған. Был күлгә теге өйрәк һәр ваҡыт осоп килер булған. Күл ситенә йомортҡа һалып, ике ир бала баҫып сығарған.

Берҙән-бер көндө батша тәҙрәнән ҡараһа, ике ир баланың күл буйында уйнап йөрөгәнен күрә. Барып, ике баланы йомортҡалары менән бергә үҙ тәрбиәһенә алып ҡайта. Кисен малайҙар йоҡоға киткәс, аш бешереүсе ҡатын ике ир баланың уртаһында ятҡан йомортҡаны һыта. Малайҙар шунда уҡ үлә. Батша бик ҡайғыра.

Батшаның ҡайғыһын ишетеп, бер күрәҙәсе әбей килә. Ҡалған йомортҡаны ала ла күл буйына алып барып һалып ҡуя. Теге өйрәк осоп килә лә йомортҡаны беркетә, малайҙар тереләләр.

Бер аҙ ваҡыт үткәс, батша тәҙрәһенән ҡарай. Ни күҙе менән күрһен, теге ике ир бала күл буйында йомортҡа менән уйнап ултыра, ти. Малайҙар батшаға:

— Беҙҙең атайыбыҙ һин, әсәйебеҙҙе теге яуыз ҡатын өйрәккә әйләндереп, уның кейемен үҙ ҡыҙына кейендергән, — тип ҡысҡырғандар.

Был хәбәрҙе ишеткәс, батша балаларҙы алып ҡайтып ҡуйған да, үҙе яңынан килеп, күл буйындағы ҡамышлыҡҡа йәшенгән, ти.

Өйрәк осоп килгән дә, шунда уҡ ҡатынға әүерелеп, малайҙарҙы саҡыра башлаған. Батша үҙенең ҡатыны Ҡәләмфүрҙе таныған. Ҡәләмфүр, балаларын тапмағас, инде осоп китәйем тигәндә генә, батша уны сәсенән тотоп алған, ти. Шунан һуң улар икәүләшеп ҡайтып киткәндәр, яуыз ҡатын менән уның ҡыҙын язалап үлтергәндәр.

Улар әле лә бик бәхетле йәшәйҙәр, ти.

## КҮК ҺЫЙЫР

Борон-борон заманда бер әбей менән бабай йәшәгән. Уларҙың икеһенең дә берәр ҡыҙҙары булған. Ҡыҙҙар икеһе лә үҫеп еткән. Бабайҙың ҡыҙы бик матур, эшлекле булған. Ә әбейҙең ҡыҙы йәмһеҙ ҙә, эшлекһеҙ ҙә икән.

Бер ваҡыт күрше ауылдан бер батыр егет ҡыҙҙар һайларға килгән. Бер урында йыйын йыйнағандар, аш бешергәндәр. Бөтә кешеләр ҙә ошо урынға ҡыҙҙарын алып барырға тейеш булған. Әбей ҙә үҙенең ҡыҙына

ебәк күлдәктәр кейҙереп, ебәк яулыҡтар ябып, иңенә ебәк елән һалып, йыйынға алып киткән. Барып еткәндәр, ултырғандар, аш ашағандар. Әбейҙең ҡыҙы ашаған бер һөйәген еңенә тығып ултырған.

Бабайҙың ҡыҙы йыйынға алып бармағандары өсөн ғәрләнеп бик ныҡ илаған. Үҙе барыр ине, кейер кейеме булмаған. Ул тышҡа сыҡҡан да әсәһенән ҡалған күк һыйырҙы күргән. Илаған-илаған да һыйырға һамаҡлап:

Әсәйемдән ҡалған күк һыйыр,
Күккә ҡарап баҡырсы! —

тигән.

Күк һыйыр күккә ҡарап баҡырған. Күктән ҡыҙға матур елән, камзулдар килеп төшкән.

Ҡыҙ тағы бер мәртәбә һамаҡлаған.

Күк һыйыр баҡырып ебәргән. Күктән ҡыҙға матур күлдәк, яулыҡ, шәлдәр килеп төшкән.

Ҡыҙ өсөнсө мәртәбә һамаҡлаған.

Күк һыйыр баҡырып ебәргән. Күктән ҡыҙға итек, галоштар килеп төшкән.

Ҡыҙ ҡыуана-ҡыуана кейемдәрҙе кейгән дә йыйынға киткән. Ул барғанда, йыйындың иң ҡыҙыу ваҡыты булған. Егет, ҡыҙҙар һайлап-һайлап, бер ҡыҙҙы ла оҡшатмаған. Ошо ваҡытта был ҡыҙ ишектән килеп ҡараған. Бөтә ҡыҙҙар араһында бик матур, бик ыҫпай кейенгәне был ҡыҙ икән. Егет ҡыҙҙы күреү менән етәкләп алған. Әбей, үҙенең ҡыҙы үтмәгәнгә асыуы килеп, кимереп ултырған һөйәге менән үҙ ҡыҙының күҙен һыта һуҡҡан да ҡайтып киткән. Ә егет, һылыу ҡыҙҙы кәләш итеп алып, ҙур байрам яһаған, шунан үҙенең ауылына алып ҡайтып киткән.

Әбей менән ҡыҙ, өйҙәренә ҡайтҡас, бабайҙың ҡыҙы өйҙә булмағанға аптырағандар. Егет алған ҡыҙҙың шул икәненә шикләнгәндәр. «Ул шундай кейемдәрҙе ҡайҙан алһын», — тип уйлағандар. Һуңынан ышанғандар.

Егет менән ҡыҙ бик яҡшы донъя көткән. Уларҙың бер улы тыуған. Бер көндө улдарын алып, өсәүләшеп,

үгәй әсәгә ҡунаҡҡа килгәндәр. Нисә кистер инде, ҡунаҡ булғас, ҡайтырға сыҡҡандар. Бер аҙ китә биргәс, ҡыҙ улының йүргәге тороп ҡалғанын белгән. Улын атаһына тотторған да ҡыҙ үгәй әсә өйөнә кире ҡайтҡан. Барып инһә, әбей:

— Ә, килдеңме әле? — тип, ҡыҙҙы тотоп алған да, туҡмап-туҡмап, кейемдәрен систереп алған. Шунан һуң: — Бар, аҡҡош булып осоп кит, — тип ҡыҙҙы осороп ебәргән.

Үгәй әсә ҡыҙҙың кейемдәрен үҙенең һуҡыр ҡыҙына кейендергән дә, йүргәкте биреп:

— Әгәр күҙең ни эшләп һуҡырайҙы тиһә, йүргәкте алайым тигәндә, сөйгә төкөнөм тип әйтерһең, — тип, ҡыҙын оҙатып ҡуйған.

Ҡыҙ кейәү янына килеп еткәс, егет:

— Ни эшләп күҙең һуҡырайҙы? — тип һорай икән.

— Йүргәкте алайым тигәндә, сөйгә төкөнөм, — тип яуап биргән ҡыҙ.

Ҡыҙ баланы алған да ҡайтып киткәндәр. Үҙенең әсәһе булмағас, бала алһыҙ-ялһыҙ илаған. Ҡайтып еткәндәр, ә бала һаман алһыҙ-ялһыҙ илауын дауам иткән. Егеттең һеңлеһе булған. Ул, бала бик илағас, уны урманға алып барған. Урманға етеп, ергә ултырғас, һауанан бер төркөм аҡҡош килгәнен күргән. Шул ваҡытта ҡыҙ:

Бынау ғына бәпкәнең
Күрмәнегеҙме әнкәһен? —

тип һораған. Аҡҡоштар бер тауыштан:

— Артта! Артта! — тип ҡысҡырғандар.

Икенсе төркөм аҡҡоштар осоп килгән. Быларҙы күргәс, ҡыҙ тағы һораған.

Аҡҡоштар:

— Хәҙер килә, — тип киткәндәр.

Күп тә үтмәгән, һауанан бер яңғыҙ аҡҡош осоп килгәне күренгән. Ҡыҙ һамаҡлап һораған:

Бынау ғына бәпкәнең
Күрмәнегеҙме әнкәһен?

Аҡкош осоп килеп төшкән дә кеше ҡиәфәтенә кергән. Быныһы — баланың әсәһе, ҡыҙҙың элекке еңгәһе булған. Ул бөтә хәлде һөйләп биргән. Улын имеҙеп:

— Өс төн, өс көн йоҡлар, унан һуң тағы ла ошонда килтерерһең, — тигән дә, аҡкош булып, баяғы аҡкоштар осҡан яҡҡа осоп киткән.

Ҡыҙ ҡустыһын алып ҡайтҡан. Бала өс көн, өс төн йоҡлаған. Унан һуң тағы илай башлаған. Апаһы ҡустыһын тағы ла урманға алып барған. Урманға етеп, ергә ултырғас, һауанан бер төркөм аҡкош килгәнен күргән. Шул ваҡытта ҡыҙ:

Бынау ғына бәпкәнең
Күрмәнегеҙме әнкәһен? —

тип һораған.

Аҡкоштар бер тауыштан:

— Артта! Артта! — тип ҡысҡырғандар.

Икенсе төркөм аҡкоштар осоп килгән. Быларҙы күргәс, ҡыҙ тағы һораған.

Аҡкоштар:

— Хәҙер килә, — тип ҡысҡырып киткәндәр.

Күп тә үтмәгән, һауанан бер яңғыҙ аҡкош осоп килгәне күренгән. Ҡыҙ һамаҡлап һораған:

Бынау ғына бәпкәнең
Күрмәнегеҙме әнкәһен?

Аҡкош килеп төшкән, балаһын имеҙгән дә осоп киткән.

Ҡыҙ ҡустыһын алып ҡайтҡан. Бала өс төн, өс көн йоҡлаған. Өйҙәгеләр:

— Был бала нисек кенә былай йоҡлай? Урманда былар ни эшләй икән? — тип аптырашҡандар, баланың атаһы аңдырға булған.

Һеңлеһе өсөнсө тапҡыр, ҡустыһын алып, урманға барған. Ағаһы артынан йәшенеп кенә күҙәтеп килгән.

Ҡыҙ, элеккесә һамаҡлап, аҡкоштарҙан һораған.

Аҡкоштар:

— Артта! Артта! Хәҙер килә! — тигәндәр.

Баланың әсәһе килеп, улын имеҙгән дә, инде китәйем тигәндә генә, ире уны тотоп алған. Ҡатыны иренең ебәреүен үтенгән, яланғас булғас, оялған. Ире ебәрмәгән. Барыһын да һорашҡан, ҡатыны әштең нисек булғанын һөйләп биргән. Ағаһы менән һеңлеһе, ҡатынға үҙҙәренең кейемдәрен кейҙереп, өйгә алып ҡайтҡандар.

Үгәй әсәгә ләғнәт уҡығандар. Егет өйҙәге һуҡыр ҡатынын шул көндә ҡыуып ҡайтарып ебәргән.

Шулай итеп, былар элеккесә матур итеп донъя көтә башлағандар.

## ҠАРА КӨСӨК

Борон-борон заманда бер бай йәшәгән. Уның дүрт ҡатыны булған. Бер саҡ бай йыраҡ сәфәргә йыйына башлаған. Юлға сығыр алдынан, иң оло бисәһен саҡырып:

— Йә, ҡатын, мин йыраҡ сәфәр китәм, мин ҡайтыуға ни эшләрһең? — тигән.

— Йөҙ ҡабырғалы турғай атып, йөҙ хеҙмәтсеңде туйҙырырмын, — тип яуап биргән бисәһе.

Бай икенсе ҡатынын саҡыртып алған да:

— Йә, ҡатын, мин йыраҡ сәфәргә сығам, мин ҡайтыуға ни әҙерләп ҡуйырһың? — тип һораған.

— Ҡомдан итек һуғып ҡуйырмын, — тип яуап биргән быныһы.

Бай өсөнсө ҡатынынан да шуны уҡ һораған.

— Бет тиреһенән бейәләй тегеп ҡуйырмын, — тигән был ҡатыны.

Бай дүртенсе, иң йәш бисәһен саҡыртып алған:

— Йә, ҡатын, мин йыраҡ сәфәргә юл тотам. Мин әйләнеп ҡайтыуға ни әҙерләрһең? — тип һораған.

— Алтын башлы, ынйы тешле, көмөш сәсле ике ул табырмын, — тип яуап биргән йәш ҡатын.

— Хуш, — тине, ти, бай.

Бай юлға сығып киткәс, көн артынан төн килеп, төн артынан көн килеп, ваҡыт үтеп кенә тора, ти. Иң оло ҡатын көн дә бер турғай атып, йөҙ хеҙмәтсене туйҙыра; икенсе ҡатын ҡомдан итек һуғырға йыйына; өсөнсөһө бет тиреһенән бейәләй тегә, ә дүртенсе ҡатын алтын башлы, ынйы тешле, көмөш сәсле ике ул таба. Бер мәл өс ҡатын бергә йыйылышып, һөйләшергә тотона. Иң олоһо:

— Көн дә йөҙ ҡабырғалы турғай атып, йөҙ хеҙмәтсене туйҙырыу, ҡомдан итек һуғыу, бет тиреһенән бейәләй тегеү эшме ни ул?! Бай ҡайтһа, беҙгә асыуланыр, әйҙәгеҙ йәш көндәштең балаларын юғалтайыҡ, — тип, тегеләрҙе ҡоторторға тотондо, ти.

Иртәгеһен былар иң йәш көндәштәрен, ҡырҡ хеҙмәтсегә ҡушып, урманға ебәрәләр. Балаларын бейәләр араһына ташлап, сәңгелдәккә бер көсөк һалып ҡуялар. Ҡатын, урмандан ҡайтҡас, уландарының юғалыуына ҡайғырып, илай-илай, ҡара көсөктө имеҙеп һалды, ти.

Иртәнсәк иртә менән тороп, бейә һауырға сыҡһа, бер бейә юҡ, ти. Эҙләп ҡараһа, бер бейә ике малайҙы имеҙеп ята икән. Ҡатын малайҙарҙы индереп, ҡара көсөктө сәңгелдәктән төшөрөп ебәргән.

Быны күреп торған ике көндәш: «Малайҙарҙы бейәләр тапап үлтермәгән. Иртәгә беҙ уны бесәнгә ебәрәйек», — тип кәңәш ҡорошҡан.

Иртәгеһенә, ҡатынды бесәнгә ебәргәс, малайҙарҙы, әйҙә, һеҙөп үлтерһендәр, тип, һыйырҙар араһына ташлайҙар. Йәш ҡатын бесәндән ҡайтһа, малайҙар юҡ, улар урынына сәңгелдәктә әлеге ҡара көсөктө күрә. Ҡатын, илай-илай, көсөктө имеҙеп, йоҡларға ята. Иртәгеһен тороп, һыйыр һауырға сыҡһа, бер һыйыр ике малайҙы имеҙеп ята, ти. Ҡатын уландарын алып кире урындарына һалып ҡуя. Былай ҙа эш сыҡмағас, өс ҡатын:

— Әйҙәгеҙ, быны беҙ урманға ебәрәйек, малайҙарын ҡаҙҙан талатып үлтертәйек, — тип һүҙ ҡуйышты, ти.

Ҡатын киткәс, малайҙарҙы ҡаҙҙар араһына сығарып ташлайҙар. Ҡатын ҡайтып килһә, малайҙар юҡ, сәңгелдәктә әлеге көсөк ята. Илап-илап көсөктө имеҙә.

Иртәнсәк ҡаҙҙарға ем һалырға сыҡһа, бер ҡаҙ ике баланы ике ҡанаты аҫтына һалып ятҡан, ти. Ҡатын уландарын һөйөп-һөйөп кире сәңгелдәккә һалып ҡуя.

Инде былай ҙа эш сыҡмағас, өс ҡатын:

— Әйҙәгеҙ, инде беҙ уларҙы һыуға ташлайыҡ, — тип һүҙ беркетә.

Иртәгеһенә ҡатынды бесәнгә ебәреп, малайҙарҙы һыуға ташлайҙар. Малайҙар бер сумып, бер ҡалҡып, тештәре, сәстәре ялтырап ағып китәләр. Ҡатын ҡайтып, көсөктө имеҙә лә, ҡараңғы төшкәс, йоҡларға ята.

Тиҙҙән бай үҙе ҡайтып төшә. Оло ҡатынын саҡыртып алып:

— Йә, мин ҡайтҡансы ни эшләнең? — тип һорай.

— Һин ҡайтҡансы, көн дә бер турғай атып, йөҙ хеҙмәтсене туйҙырҙым, — ти ҡатын.

Бай икенсе ҡатынын саҡыртып ошо уҡ һорауҙы бирә.

— Бына, ханым-солтаным, һиңә һуғып ҡуйғанмын, — тип, ҡом итектәрҙе таҡылдата ултыртып ҡуйҙы, ти, быныӊ алдына. Өсөнсө ҡатынды саҡыртһа, уныһы, бет тиреһенән тегелгән бейәләйҙәрҙе шап-шоп һуғып:

— Бына, ханым-солтаным, һиңә һалып ҡуйғанмын, — тип килтереп бирҙе, ти. Бай дүртенсе ҡатынын саҡырта:

— Йә, ҡатын, мин киткәндә биргән вәғәҙәңде нисек үтәнең? — ти. Ҡатын өндәшмәй-нитмәй баҫып тора бирә. Шул саҡ теге өс бисә:

— Бына, һин ҡайтыуға ҡара көсөк табып ҡуйҙы, — тип, сәңгелдәктән көсөктө алып күрһәтә. Бай шул ерҙә һикереп тороп, ҡатындың бер ҡулын, бер аяғын һындырып, бер күҙен соҡоп алды ла:

— Фәлән ерҙә, ҡырҡ тау аша ҡара урман эсенә ишеге, тәҙрәһе булмаған өй һалып, көсөгө менән шунда илтеп бикләгеҙ! — тип әмер бирә. Хеҙмәтселәр бай ҡушҡанды эшләйҙәр.

Көн үтә, көн артынан төн үтә, төн артынан ай үтә, ҡара көсөк эт булып етә. Бер көн ҡара көсөк нигеҙ буйын

ҡаҙый башлай. Нигеҙ аҫтынан өңөп, тышҡа сығып ултырҙы, ти.

— Әсәй, әсәй, бер кеше килә, — ти, көсөк кеше тауышы менән.

— Килһен, килһен! Йоҙроҡ һыйышлы тишек уйып биреп китер, исмаһам, — ти ҡатын.

Кеше килеп етә, еткәс, сәләм бирә.

— Байға юл эҙләйем, белмәйһегеҙме? — тип һорай.

— Беләбеҙ, беләбеҙ, тик йоҙроҡ һыйышлы тишек уйып бир, — ти ҡатын. Кеше өйҙөң төньяғынан йоҙроҡ һыйышлы тишек уйып биргәс, ҡара көсөк уны юл күрһәтеп алып китте, ти.

Тиҙҙән байға барып еталәр. Ҡара көсөк, юлсының аяғына уралып, һиҙҙермәйенсә генә өйгә инеп, ишек аҫтына боҫа.

— Йә, мосафир, ишеткән-күргәнеңде һөйләй ултыр, — ти бай.

— Ишеткәнде һөйләһәм, ялған булыр, күргәнде һөйләйем әле. Ҡырҡ тау артында, ҡара урман уртаһында бер өй бар икән. Ишеге лә, тәҙрәһе лә юҡ икән. Шуға йоҙроҡ һыйышлы тишек уйып биреп киттем. Бына шуның ҡара көсөгө алып килде әле, — ти юлсы.

— Улай икән, — тине лә бай тәһәрәт алырға сығып китте, ти. Шул саҡ байҙың оло ҡатыны килеп инде лә:

— Ауыҙың йәйеп, юҡты һөйләп ултыраһың. Бер күл буйында алтмыш ҡолас ала бейә бар, атлаған һайын ҡолонлай; һыу эсһә, күлдең һыуын бөтөргәнсе эсә; йоҡлаһа, салт төш мәлендә йоҡлай. Байға беҙ шуны ла әйтмәйбеҙ, — тип, юлсыны әрләп ташлай.

Бай инергә тип ишекте асҡайны, ҡара көсөк өйҙән сығып та ҡасты, ти. Ҡатын тик яҙа-йоҙа һуғып ҡалды, ти. Көсөк сабып килеп етә лә:

— Әсәй, әсәй! Миңә ебәктән нуҡта ишеп бир, — ти.

— Уны ни эшләтәһең? — тип һорай ҡатын.

— Фәлән күлдең буйында алтмыш ҡолас ала бейә бар, шуны алып киләм, — ти көсөк. Ҡатын нуҡта ишеп биргән. Ҡара көсөк сығып киткән.

Көсөк күл буйына барып етһә, алтмыш ҡолас ала бейә күл буйында йоҡлап ята, ти. Көсөк, һаҡ ҡына барып, йүгәнде кейҙереп, бейәнең елкәһенә менеп ултырған да уның ҡолағын тешләгән. Бейә ырғып тороп, көсөктө бер күккә, бер ергә ырғыта башлай. Ахырҙа көсөктө сөйөп төшөрә алмағас, тынып ҡала. Көсөк бейәне етәкләп алып ҡайтып китә. Бейә атлаған һайын ҡолонлай, ҡолондары эйәреп килә, ти. Өйҙәренә килеп еткәс, ҡолондары менән өй тирәһен ике-өс мәртәбә уратып ташланы, ти. Өй түңәрәге йылҡы менән тулды, ти.

Көсөк тағы ла тышҡа сығып ултыра.

— Әсәй, әсәй, бер кеше килә, — ти, алыҫта бер ҡарасҡыны күреп.

— Килһен, килһен! Тәҙрә уйҙырып алып ҡалырбыҙ, исмаһам, — ти әсәһе.

Тиҙҙән теге ҡарасҡы килеп етеп:

— Сәләм бирҙек, — тигән.

— Алдыҡ, — тигән тишектән ҡатын.

— Мине байға алып барыр кеше булмаҫмы икән?

— Булыр, булыр, минең ҡара көсөгөм алып барыр. Тик беҙгә тәҙрә уйып биреп кит, — тигән ҡатын. Юлсы тәҙрә уйған. Унан көсөк юлсыны байға алып киткән.

Тиҙҙән барып етәләр. Юлсы байҙың бүлмәһенә инә; бер кемгә лә күренмәй, юлсының аяғына ураланып, көсөк тә инә.

— Йә, мосафир, ишеткән-күргәнде һөйләй ултыр, — ти бай.

— Ишеткәнде һөйләһәм, ялған булыр, күргәнде һөйләйем. Фәлән ерҙә, ҡырҡ тау ашаһында, ҡара урман эсендә бер өй бар. Ул өйҙә бер ҡатын менән ҡара көсөк йәшәй. Уларҙың алтмыш ҡолас ала бейәһе бар, атлаған һайын ҡолонлай. Өй әйләнәһе йылҡы өйөрө менән тулған. Шуларға тәҙрә уйып биреп киттем әле. Шул ҡатындың ҡара көсөгө һеҙгә юл күрһәтеп килде, — ти.

Бай:

— Улай икән, — тип, тәһәрәт алырға сығып китте, ти. Бай сығып киткәс, байҙың икенсе бисәһе килеп инеп:

— Ауыҙың йәйеп, юҡты һөйләп ултыраһың. Фәлән

тауҙың башында гәүһәр-яҡуттар бар. Беҙ шуны ла әйтмәйбеҙ әле уға, — ти.

Бай ишекте асҡайны, көсөк сығып та тая. Теге бисә:

— Һи, хәшәрәт! — тип яҙа-йоҙа һуғып ҡала.

Көсөк, йән-фарман сабып, өйөнә килеп етә лә:

— Әсәй, әсәй! Миңә ашъяулыҡ бир, — ти.

— Ни эшләтәһең уны?

— Фәлән тауҙа гәүһәр-яҡуттар бар икән, шуны килтерәм.

Ҡара көсөк сығып китә. Тиҙҙән тауға барып етеп, гәүһәр-яҡуттар менән ашъяулыҡты тултырып ҡайтып килә. Килтереп, өйҙөң эсен дә, тышын да яҡтырта.

Көсөк өй алдына сығып ултырғайны, тағы ла бер кеше килә, ти.

— Әсәй, әсәй, бер кеше килә, — ти көсөк.

— Килһен, килһен! Ишек уйҙырып алып ҡалырбыҙ, исмаһам, — ти ҡатын.

— Сәләм бирҙек, — ти юлсы.

— Алдыҡ, — ти ҡатын.

— Мине байға алып барыр кеше булмаҫмы? — ти.

— Булыр, булыр, тик беҙгә ишек уйып ҡына биреп кит инде, — ти ҡатын.

Юлсы, ишек уйып биргәс, ҡара көсөк менән бергә байға юл тотолар, ти. Байға килеп етеп, барып инәләр. Көсөк бер кемгә лә күренмәй генә, ширлек аҫтына инеп ята.

— Йә, мосафир, ишеткән-күргәнеңде һөйләй ултыр, — ти бай.

— Ишеткәнемде һөйләһәм, ялған булыр, күргәнемде һөйләйем. Фәлән ерҙә, ҡырҡ тау артында, ҡара урман эсендә бер өй бар. Унда бер ҡатын менән көсөк йәшәй. Уларҙың атлаған һайын ҡолонлай торған алтмыш ҡолас ала бейәһе бар. Өй тирәһе йылҡы менән тулған. Өйҙөң эсе-тышы гәүһәр-яҡут таштарға күмелгән. Шул өйҙөң көсөгө юл күрһәтеп килде әле, — ти.

Бай:

— Улай икән, — тип, тәһәрәткә сығып китте, ти. Бай сығып китеү менән, уның өсөнсө ҡатыны килеп инде лә:

— Ауыҙың йәйеп, юкты һөйләп ултыраһың. Фәлән һыуҙың буйында алтын башлы, ынйы тешле, көмөш сәсле ике малай бар. Сәлт төш ваҡытында һыуҙан сығып ҡомда уйнайҙар. Уйнап арығас, ҡомда ятып йоҡлайҙар. Беҙ байға быны ла әйтмәйбеҙ әле, — тип шарланы, ти.

Бай инергә ишекте асҡайны, көсөк сығып та ҡасты, ти. Теге ҡатын ҡарғанып, яҙа-йоҙа ғына һуғып ҡалды, ти.

Көсөк йән-фарманға сабып ҡайтып:

— Әсәй, әсәй! Миңә аҡ кейеҙ, дүрт мөгөҙгә һөт һауып бир. Береһе — кәзә, икенсеһе — һыйыр, өсөнсөһө — бейә, дүртенсеһе үҙеңдең һөтөң булһын, — ти.

Көсөк аҡ кейеҙ, дүрт мөгөҙ һөт алып сығып китә. Тиҙҙән йылға буйына барып, аҡ кейеҙҙе йәйеп, дүрт мөгөҙҙө дүрт мөйөшкә ултыртып, үҙе ситтән йәшенеп кенә ҡарап ята башлай. Салт төш ваҡыты еткәс, һыуҙан ялтырап, алтын башлы, ынйы тешле, көмөш сәсле ике малай килеп сыҡты ла яр буйындағы ҡомда аунай башланылар, ти. Уйнай торғас, кейеҙ өҫтөнә килеп менәләр. Ҡапыл мөгөҙҙәрҙе күреп, бер мөгөҙҙәгеһен эсеп ҡарайҙар.

— Эм-м-м, быныһы кәзә һөтө, быныһы һыйыр һөтө, быныһы бейә һөтө, — тип, өс мөгөҙҙәгеһен эскәс, дүртенсе мөгөҙҙәгеһен эсеп ҡаранылар ҙа: — Быныһы әсәйебеҙҙең һөтө, — тип илап-илап, ҡояш йылыһында йомшаҡ кейеҙҙә йоҡлап киттеләр, ти.

Малайҙар йоҡлап киткәс, ҡара көсөк кейеҙҙең дүрт мөйөшөнән тешләп алды ла сабып ҡайтып китте, ти. Килеп, кейеҙҙе йәйеп ебәрһә, ҡатын аптырауынан ҡойолоп төшә. Кейеҙҙә уның ике улы ята.

Шулай төн үтә, көн үтә, көн артынан ай үтә, малайҙар йыл үҫәһен көн үҫеп, ҙурайып китә.

Бер көн малайҙар:

— Әсәй, беҙҙең атайыбыҙ бармы? — тип һорай.

Әсәһе:

— Бар, ул — бай, уның өс ҡатыны бар, — тип башынан үткәндәрҙе һөйләп бирә.

— Әйҙә, әсәй, беҙ уны саҡырайыҡ, — ти малайҙар.

— Килмәҫ, мине бер ҡәһәрләп ташлағас, килмәҫ, — ти әсәләре.

Шулай ҙа байҙы саҡырырға булалар. Саҡырыусы итеп ҡара көсөктө ебәрәләр. Көсөк байҙы саҡырғас, бай:

— Үҙегеҙҙән миңә еткәнсе гәүһәр-яҡуттарҙан юл һалығыҙ. Һөт, бал йылғалары ағып, ҡоштар һайрап торһон, — тигән.

Көсөк малайҙарға килеп, байҙың һүҙҙәрен әйткәс, ике малай аптырашта ҡалдылар, ти. Шул саҡ көсөк:

— Ҡайғырмағыҙ, барыһы ла эшләнер, — тип, үҙе ашъяулығын алып гәүһәр-яҡуттар ташырға тотона. Малайҙар юл һалалар. Таң атыуға барыһы ла әҙер була. Ҡара урман эсенән ҡырҡ тау аша байҙың өйөнә тиклем гәүһәр-яҡуттарҙан ҡылдай тура юл һалына. Уның ике яғынан һөт, бал йылғалары аға, һандуғастар һайрап тора, ти.

Бай йоҡоһонан торһа, барыһын күреп хайран ҡала, хатта саҡ-саҡ ҡына һушынан яҙмай ҡала. Унан үҙенең ҡатындарын алып, ҡунаҡҡа китә. Уны алтын башлы, ынйы тешле, көмөш сәсле ике егет менән уларҙың әсәһе ҡаршы алалар. Байҙың һушы китеп, йығылып барып төшә. Унан, иҫенә килгәс, һорашып, барыһын да төшөнгәс, оло ҡатынын саҡыртып ала ла:

— Һиңә туғыҙ тыу бейә кәрәкме әллә туғыҙ арба утын кәрәкме? — тип һорай.

— Туғыҙ арба утын нимәгә кәрәк, туғыҙ тыу бейә булһа, һуйып, итен ашап ятырмын, — ти оло ҡатын. Бай туғыҙ тыу бейәне тотоп, ҡатынды туғыҙының да ҡойроғона бәйләп, бейәләрҙе тулатҡан да ебәргән. Ҡатындың арҡаһы тейгән ерҙә — арҡа тауы, сәсе тейгән ерҙә — сәсле тумар, күҙе тейгән ерҙә күл барлыҡҡа килгән.

Бай икенсе ҡатынына ла шул уҡ һорауҙы биргән.

— Туғыҙ бейә ниңә кәрәк, туғыҙ сана утын булһа, ҡыш көнө яғып рәхәт ғүмер итермен, — ти ҡатын.

Бай туғыҙ арба утын ҡырҡтырып, бер ергә өйҙөргән дә, өҫтөнә ҡатынды бәйләп ултыртып, ут төрткән. Ҡатындың көлө күккә осоп, ҡара болотҡа әйләнгән, ти.

Өсөнсө ҡатынын бейәләр ҡойроғона бәйләп ебәрҙе. Үҙе уландары, зәғиф ҡатыны менән тороп ҡалды, ти.

Әкиәтем китте таш йөкмәп, үҙем ҡалдым аш йөкмәп.

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ


Төлкө менән Бүҙәнә . . . 5
Етем төлкө . . . . . . . 7
Төлкө айыу өңөндә . . . 12
Алдар төлкө . . . . . . . 15
Төлкө менән Бөркөт . . . 17
Төлкө менән Һайыҫҡан . . 20
Төлкө менән Торна . . . 21
Төлкө менән Әтәс . . . . 22
Төлкө менән Айыу . . . . 24
Ҡарт айыу менән Төлкө . . 25
Сысҡан, Айыу, Бүре, Төлкө... 27
Ас айыу, Төлкө, Егет . . . . 30
Айыу менән Бал ҡорттары . . 31
Ишәк, Дөйә, Төлкө, Бүре . . 33
Йомарт ҡуян . . . . . . 37
Ҡуян менән Арыҫлан . . . 39
Ҡуян менән Терпе . . . . 41
Ике Бурһыҡ . . . . . . . 44
Һоросай менән Ҡарасай . . 45
Шаян бесәй . . . . . . . 53
Ишәк, Эт, Бесәй, Әтәс . . . 56
Әтәс батыр . . . . . . . 58
Һарыбай . . . . . . . . 62
Бүре менән Кәзә . . . . . 63
Кәзә тәкәһе менән Талаҡ . . 70
Тауыҡ менән Төйлөгән . . . 72
Һандуғас . . . . . . . . . 74
Эт нисек хужа тапҡан . . . 76
Ҡаҙҙар ниңә ала булған? . . 77
Ҡарға ни өсөн исемен әйтеп бөтөрмәй? . . . . . . 79
Урал һыуы . . . . . . . 81
Умыс . . . . . . . . . 89
Һунарсы Байғужа . . . . 98
Сәйфелмөлөк . . . . . . 103
Ала ҡарға . . . . . . . 109
Серле йөҙөк . . . . . . 115
Быжырмәргән . . . . . . 122
Әрмәнде тун . . . . . . 125
Һыу ҡыҙы . . . . . . . 131
Үгәй ҡыҙ Гөлбикә . . . . 136
Сәфәр . . . . . . . . . 142
Еҙтырнаҡ . . . . . . . 151
Нөрхәтдин . . . . . . . 159
Өс килен . . . . . . . 166
Шәгәле . . . . . . . . 170
Зәйнулла менән Красата . . 179
Һонтай егете . . . . . . 185
Болансы Мәргән . . . . . 195
Батша, Егет, Аждаһа . . . . 200
Алтын сабаҡ . . . . . . 210
Күк һыйыр . . . . . . . 212
Ҡара көсөк . . . . . . . 216



УРТА ЙӘШТӘГЕ МӘКТӘП БАЛАЛАРЫ ӨСӨН

Художник **Алишер Дианов**

**БАШКИРСКИЕ НАРОДНЫЕ СКАЗКИ**

*(на башкирском языке)*

Редакторы *М. С. Игебаева.*
Художество редакторы *А. А. Костин*
Техник редакторы *Г. Ә. Дауытова.*
Корректоры *Ә. Н. Әсәҙуллина.*

ИБ № 2415

Наборға бирелде 23.01.84. Баҫырға ҡул ҡуйылды 31.05.84. Ҡағыҙ форматы 84×108 1/32. Мәктәп гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Тип. ҡағыҙы № 3. Шартлы баҫма таб. 11,76 + 0,84 йәбештермә. Шартлы буяу отт. 15,59. Учет.-изд. таб. 10,20 + 0,79 йәбештермә. Тиражы 30 000 экз. Заказ № 376. Хаҡы 65 тин.

Башҡортостан китап нәшриәте. Өфө-25, Совет урамы, 18. Башкирское книжное издательство. Уфа-25, ул. Советская, 18. Башҡорт АССР-ы Нәшриәттәр, полиграфия һәм китап сауҙаһы эштәре буйынса дәүләт комитетының Өфө полиграфия комбинаты. Өфө-1, Октябрь проспекты, 2.

65 тян